# Ағиҙел

Өфө,
март
2010

3(1044)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.03. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 571 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0023.10.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2010 (3, 1044)**

# БЫЛ ҺАНДА:

*Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

**Мәүлит Ямалетдин.** Һәйкәл. Новелла. ....5
**Түләк Ғирфанов.** Пулеметсы Сәхи. Хикәйә. ....24

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Әмир Әминев.** Бер кәмәлә... Повесть. ....32

ШИҒРИӘТ

**Тәнзилә Дәүләтбирҙина.** Төн. Шиғырҙар. ....70
**Рита Фәтҡуллина.** «Һағышымдың сере шул икән…» Шиғырҙар. ....77
**Гөлнара Хәлфетдинова.** Тиңһеҙлек. Шиғырҙар. ....82

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәүлиҙә Яҡупова.** Баҫма уҡыусыһы менән ҡиммәт. ....90

РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина.** Башҡорт халыҡ ижадында йога тәғлимәте сағылышы. ....96

БАШҠОРТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

**Ғариф хәҙрәт Ғабдрахманов.** Әхмәтзәки Вәлиди һәм Дәрдмәнд. ....111

*2010 – Республика йылы*

**Әнисә Таһирова.** «Тоғролоҡто еңер көстәр юҡ…»
**Анна Ахматова, Ольга Берггольц, Юлия Друнина, Вера Инбер, Николай Некрасов, Римма Казакова, Мария Петровых, Людмила Татьяничева, Александр Пушкин, Марина Цветаева.** Шиғри тәржемәләр… ....117

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Фәнил Күзбәков.** Илде имләр ил инәһе *(Фаҡиһа Туғыҙбаева ижады хаҡында).* ....128
**Әнғәм Хәбиров.** Сабырлыҡтың төбө – һары алтын *(Гөлнур Яҡупованың шиғриәте хаҡында.)* ....142
**Фәнирә Ғайсина.** Аҡмулла ижадына бер ҡараш. ....152
**Тләктәс Туҡһанбаева.** Аҡмулла һәм ҡаҙаҡ әҙәбиәте. ....156

ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов.** Тере тарих. ....158

*Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

**Рим Гәрәев.** Туймазылар – Бөйөк Ватан һуғышында. ....179

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Сабир Шәрипов.** Ҡәләме тайгала юнылған *(Камил Зиганшинға 60 йәш).* ....187

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Һәр кемдең гражданлыҡ бурысы. ....192

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


*65 лет – Великой Победе!*

**Маулит Ямалетдин.** Обелиск *(новелла)*.
**Т.Гирфанов.** Пулеметчик Сахи *(рассказ)*.

ПРОЗА

**А.Аминев.** В одной лодке *(повесть)*.

ПОЭЗИЯ

**Т.Давлетбердина, Р. Фаткуллина, Г.Хальфитдинова** *(стихи)*.

ПУБЛИЦИСТИКА

**М.Якупова.** Издание весомо читателями.

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Р.Гиззатуллина.** Элементы йоги в башкирском народном творчестве.

БАШКИРСКАЯ ЛЕТОПИСЬ

**Г.Габдрахманов.** Ахметзаки Валиди и Дардменд.

*2010 – Год Республики*

**А.Тагирова.** «Нет силы, которая бы победила верность...» **А.Ахматова, О.Берггольц, Ю.Друнина, В.Инбер, Н.Некрасов, Р.Казакова, М.Петровых, Л.Татьяничева, А.Пушкин, М.Цветаева** *(переводы)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Ф.Кузбеков.** Целитель духовности народа *(о творчестве Ф.Тугузбаевой)*.
**А.Хабиров.** Параллели: лирический герой и автор *(о поэзии Г.Якуповой)*.
**Ф.Гайсина.** Один взгляд на творчество Акмуллы.
**Т.Туксанбаева.** Акмулла и казахская литература.

ЭТО – СУДЬБА

**Р.Вахитов.** Живая история.

*65 лет – Великой Победе!*

**Р.Гареев.** Туймазинцы в Великой Отечественной...

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**С.Шарипов.** Перо, отточенное в тайге *(60 лет Камилю Зиганшину)*.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

*2010 – Год Всероссийской переписи населения*

**М.Хужин.** Гражданская обязанность каждого.


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

## *Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

*1945 – 2010... Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

*1945 йылдың 9 майында Фрунзе исемендәге Үҙәк аэродромға «Ли-2» самолеты төшә – ул Мәскәүгә фашистик Германияның капитуляцияһы хаҡындағы Актты алып килә. Дүрт йылға һуҙылған афәтле ҡан ҡойошҡа нөктә шулай ҡуйыла.*

*Бөйөк Еңеү юбилейы быйыл айырыуса ҙур ҡолас, оло ғорурлыҡ менән Рәсәйҙә генә түгел, донъяның байтаҡ илдәрендә билдәләнәсәк. Байрамға әҙерлек Башҡортостаныбыҙҙа ла дәррәү бара.*

*Мөһим саранан, әлбиттә, «Ағиҙел» журналы ла ситтә ҡалмай: редакция көн дә тиерлек фронт һәм тыл ветерандарына арналған төрлө жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәр, очерктар, иҫтәлектәр һ.б. ҡабул итә.*

*Яңы рубриканы М. Ямалетдиндың «Һәйкәл» исемле новеллаһы менән асабыҙ.*



**Мәүлит**
**ЯМАЛЕТДИН**

# ҺӘЙКӘЛ

**НОВЕЛЛА**

Барыһы ла Ташъяр ауыл Советының хакимиәт башлығы Күкбүриндең Һағынбайға килеп төшөүенән башланды. Егерме генә өйҙән торған был ауыл уның ҡулындағы биләмәләрҙең береһе ине. “Үҙ ҡарамағындағы ауыл булғас, йөрөй инде”, – тиеүҙәре бар. Уныһы дөрөҫ, халыҡ юҡҡа ғына хакимиәт башлыҡтарын “әҙәм көтөүселәре” тип атамай. Бигерәк тә бынау үҙгәртеп ҡороуҙарҙан аҙаҡ уларға бирелгән киң вәкәләттәрҙән һуң элекке силсәүиттәргә ҡарата ихтыяж бермә-бер артты. Ә ихтыяж тигәне үҙенән-үҙе уларҙың абруйҙарын арттырып ебәрҙе.

Әлбиттә, дәрәжәне бермә-бер арттырған хоҡуҡ үҙе генә бирелмәй түрәгә – уның “бурыс” тигән игеҙәге була. Улар дини тәғлимәттәге ике фәрештә һымаҡ

---

*Мәүлит Ямалетдин (1947) – билдәле шағир, яҙыусы һәм ҡурайсы. Ул оҙаҡ йылдар Учалы яҙыусылар ойошмаһына етәкселек итте, әле лә ошо ҡалала йәшәй һәм ижад итә. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Муса Мортазин исемендәге премия лауреаты.*

булырға тейеш: береһе – уң яурында, икенсеһе – һул иңбашта. Ләкин кем берәй вазифалы кешенән: “Ҡара әле, Фәлән Төгәнович, һинең бурыстарың ниҙәрҙән ғибәрәт?” – тип һорарға батырсылыҡ итер икән? Миҫалға шул уҡ Күкбүринде алайыҡ: ул Ташъяр ауыл Советында хакимиәт башлығы булып икенсе саҡырылыш эшләй, тик ундай һорау менән мөрәжәғәт иткәндәрен хәтерләмәй. Һораған хәлдә лә ул быға аныҡ ҡына яуап бирә алмаясаҡ. Икенсенән, түрәләрҙең важибәте менән ҡыҙыҡһыныу кемдең башына килһен?

Ә быҙна хоҡуҡ мәсьәләһенә килгәндә, вазифа эйәһен хатта ете төн уртаһында уятып һораһаң да, ул быға шартлатып яуап бирәсәк. Миҫал артынан әллә ҡайҙа йөрөйһө юҡ, эргәбеҙҙә – Күкбүрин. Хакимиәт башлығы хоҡуҡтарын белеү буйынса уны башҡаларға өлгө итеп ҡуйырлыҡ. Дөрөҫ, вәкәләт сиктәренән үтеп киткән саҡтары ла булғылай. Ләкин был фани донъяла кемебеҙ фәрештә?

Күкбүринде фәрештәнән айырып тороусы етешһеҙлектәрҙең береһе – уның аҙна һайын бер ауылда ҡунаҡ булыуы. Быны етешһеҙлек, етди кәмселек рәтенә индереүе лә ҡыйын, сөнки бында хакимиәт башлығының ғәйебе ана ғына тора инде. Әлеге күренеште ауыл кешеләренең үҙҙәре тарафынан булдырылған үҙенсәлекле йола тип атаһаң, ғәҙелерәк булыр. Ни генә тиһәң дә, тыуғандан үлгәнгә ҡәҙәр түрәләрҙең күҙенә ҡарап торғас, уларға күҙҙәй тултырылған рюмка аша бағыу хәйерлерәк. Бармаҡтар тигеҙ булмағандай, кешеләр ҙә төрлө. Ҡайһы берәүҙәр, мәҫәлән, вазифалы әҙәмдәр менән бер ултырыуҙы бер ғүмер итеп күрә, ҙур мәртәбәгә һанай.

Был йоланың үҙе биләгән вазифаға бәйле һәм яҡты донъя кеүек үк фани икәнен бик яҡшы аңлаған Күкбүрин уны еренә еткереп үтәү маҡсатында, ғәҙәттә, ат менән килә ине. Һүҙ ыңғайында шул да мәғлүм булһын: был – ябай халыҡты ҡот осҡос тиҙлек менән ярлыландырыу иҫәбенә төрлө кимәлдәге түрә-ҡараның ҡатлы-ҡатлы йорттар һалған, үрмәксенән күрмәксе тигәндәй, бер-бер артлы сит ил автомобилдәренә күсеп ултырған дәүере ине. Шул осорҙа ярайһы уҡ иләнгән, иҫәптән юйыуға яҡынлашҡан иҫке машиналарын район етәкселәре урындағы хакимиәт башлыҡтарына ла бүлде. Йәнәһе, заман башҡа – заң башҡа, күк бейә егеп йөрөр ваҡыттар артта ҡалды.

Күкбүрингә элек һалым инспекцияһы начальнигы йөрөгән “Москвич – 412” маркалы автомобиль эләкте. Шаҡтай туҙған булһа ла, ауыл араһында йөрөргә ярай. Урыҫ әйтмешләй: “Бүләк ителгән аттың тешенә ҡарамайҙар”. Төҫө аҡһыл-һары булғанлыҡтан, Күкбүрин уны мәрәкәләп кир айғыр тип йөрөтә.

Башта ул, үҫә барған абруйын тейешле кимәлдә тотор өсөн, әлеге кир айғырҙы йола үтәү маҡсатында файҙаланырға уйланы. Тик машина быҙндай сетерекле эшкә яраҡһыҙ булып сыҡты. Дөрөҫ, Күкбүрин бер-ике мәртәбә ҡунаҡтан ниндәйҙер мөғжизә менән имен-аман ҡайтты. Әммә өсөнсөһөндә, ошо Һағынбай ауылынан ҡайтып барышлай, юлдың кинәт боролған киҫемендә иҫерек баштан тормоз урынына газ педаленә баҫты. Күкбүрин уны-быны аңлап та өлгөрмәне, бер яғы юл ситендәге канауға төшкән автомобиль түңкәрелде лә “дыңҡ” итеп кире дүрт тәгәрмәскә ултырҙы. Әллә кир айғыр аҡыллы булып сыҡты, әллә хакимиәт башлығын һаҡлап йөрөүсе фәрештәләр уяу ине. Ҡалай булһа ла, килер ҡаза ошоноң менән бөттө: машинаның бер-ике урыны йәмшәйеп, бояуы һыҙырылды, ә хужа еңелсә ҡурҡыу менән ҡотолдо.

Ошонан һуң Күкбүрин ныҡлы ҡарарға килде: машинаны маҡта ла ҡунаҡҡа ат менән йөрө! Ысынлап та, атҡа етәме һуң?! Арбаға йәки санаға менеп ултырырлыҡ, артабан дилбегә ҡағырлыҡ хәлең булһа, шул еткән. Ҡалған яғын аҡыллы малҡай үҙе белә. Ҡырын яткан килеш, саф һауала берсә ҡалғып, берсә серемгә талып килә торғас, ҡайтып еткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Ҡыҫҡаһы, тормошо көйлө хакимиәт башлығының, кәйефе күтәренке. Ә күңел көр булғас,

донъя ла матур. Бынау лерт-лерт юртып барған ат күндәм, уға ҡарағанда халыҡ күндәм. Үҙе килеп тороп ҡунаҡсыл. Күкбүрин аҙна башындағы айыҡ саҡтарында ошо хаҡта уйлай ҙа ғәжәпһенеп ҡуя. Хоҙайҙан махсус рәүештә теләһәң дә улай булмаҫ: уның ҡарамағында дүрт ауыл. Ә бер айҙа, Күкбүриндең яратҡан һүҙҙәре менән әйткәндә, как раз дүрт аҙна. Ысынлап та, өҫтән кемдер юрамал билдәләгән һымаҡ, әлеге йола мәжлесе ай һайын бер ауылға тура килә.

“Силсәүит килгән!” тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә таралды. Шулай булмай ни, кескәй ауылда барыһы күҙ алдында, һәммәһе ҡолаҡ төбөндә. Ошоға арнап Һағынбайҙар үҙҙәренә лаҡап сығарған: “Беҙҙең ауылдың бер осонда кикерһәң йәки һауа боҙһаң, икенсе осонда ишетелә”. Ысынлап та, ауылды ҡап уртаға бүлеп көнсығышҡа аҡҡан кескәй йылғаның ике ярына теҙелгән егерме өйгә ҡараһаң, башҡа: “Булыуы бик мөмкин”, – тигән уй килә. Ләкин уныһы осҡор күҙле, һаҡ ҡолаҡлы кешеләр өсөн. Ил тигәндең кеме юҡ, тигәндәй, Һағынбайҙа, һәр ерҙәге кеүек үк, ҡолаҡтары насар ишеткән, күҙҙәре хөртөрәк күргәндәр ҙә юҡ түгел ине. Улар был ваҡытта үҙҙәре һымаҡ уҡ ҡыҙыҡһынып ҡапҡа төптәренә сыҡҡан әлеге үткер күҙле, һаҡ ҡолаҡлыларҙан: “Нимә менән килгән?” – тип һорай ине. Уларға: “Машинаһы менән!” – тигән яуаптар яңғыраны. Бынан һуң барыһы ла аңланы: тимәк, ҡунаҡ йәйы менән түгел, ә берәй эш менән йөрөй.

Ул арала ауылдың көньяҡ өлөшөндәге мәктәп эргәһенә туҡтаған Күкбүрин машинаһының бипелдәгенә өс мәртәбә баҫып алды. Бипелдәктең моңло ауазы Һағынбай халҡына: “Ыс-ход-ҡа-а!”– тип ишетелгәндәй булды. Уныһы ғәжәп түгел, сөнки ауыл халҡы өйрәнеп бөткән: башлыҡ мәктәп алдына туҡтаһа – сход була тигән һүҙ. Бынан бер аҙна элек дөйөм йыйылыш та шунда үткәйне. Уның көн тәртибендә бер генә мәсьәлә – ауыл көтөүен ойоштороу ҡаралды. Шуға күрә дәррәү рәүештә мәктәп яғына ыңғайлаған кешеләрҙең береһе булмаһа икенсеһе: “Тағы нимә булып китте икән?” – тип уйламай ҡалмағандыр.

Сход урынына иң тәүҙә мәктәпкә ҡыялаш ҡына йәшәгән Мөхтәр ҡарт килеп етте. Ул бик аҙ һүҙле ине, шуға күрә ҡушҡуллап күрешер алдынан:

– Һаумыһың! – тиеү менән сикләнде.

Әле халыҡ йыйылғылағансы ваҡыт бар, шуның өсөн, улар берәм-берәм хакимиәт башлығы менән хәл-әхүәл белешкән арала, Мөхтәр ҡарт тураһында бер-ике ауыҙ һүҙ. Ул ҡырҡ йылдан ашыу тракторҙа эшләп пенсияға сыҡҡан. Һуғышта танкист булып хеҙмәт иткән. Шуғамылыр, ҡырҡ йыл тракторҙа эшләгән осорҙа бер тапҡыр ҙа артына боролоп ҡарамаған, тип һөйләйҙәр. Бәлки, үҙен һаман танк эсендә тип хис иткәндер, сөнки уның артта тәҙрәһе юҡ бит.

Миҫал менән нығытылмаған хәбәр ғәйбәт була, тиҙәр, шуға күрә әйтелгәнде дөрөҫләп ҡуяйыҡ. Әле үҙгәртеп ҡороу тигән ғәләмәт халыҡтың төшөнә лә инмәгән саҡта совхоздың япон яуы һымаҡ мал-тыуарына Урал яғында бесән әҙерләйҙәр ине. Алыҫлығы утыҙ саҡрымлап булыр. Бер ҡышта әлеге Мөхтәр, ул ваҡытта ир уртаһы уҙаман, ике тейәүсене алып, бесәнгә бара. Ҡыштың көнө билдәле: былар көрт яра-яра барып етеп, тейәнеп, ҡайтыу яғына ҡуҙғалғансы, ҡараңғы төшә. Тейәүселәр, трактор кабинаһында тығылышып барғансы тип, йөк башында ҡайтырға була. Бесән өҫтөндә иркен, йомшаҡ, көн дә әллә ни һыуыҡ түгел. Дизель гөрөлдәүенә ҡолаҡты тондороп, газ һулап барғансы, хуш еҫле бесән өҫтөндә ҡырын ятып, күктә емелдәшкән һанһыҙ йондоҙҙарҙы күҙәтеп килеүе мең артыҡ!

Шулай көйлө генә ҡайтып барғанда, һелкенеүҙәнме, әллә икенсе сәбәптәнме, сананың дүңгәләгән ҡаптырып ҡуйған бармаҡ ысҡынып, йөк юл уртаһында ултыра ла ҡала. Өҫтәгеләр уны-быны абайлап, ул ҡысҡырып, был һыҙғырып йөк башынан төшкәнсе, Мөхтәр байтаҡ ара китеп тә өлгөрә. Бар, ҡыуып етеп ҡара һин уны! Өҫтәүенә, аяҡта быйма, өҫтә толоп.

Иң ҡыҙығы – уларҙың ярты юлдан шарпаңлап йәйәү ҡайтыуҙарында түгел, ә тракторсының ауылға еткәнсе артына боролоп ҡарамауында. Мөхтәр совхоздың бесәнлегендә тракторын туҡтатып, сананы ысҡындырайым тип кабинаһынан төшһә, унда – бушлыҡ…

Икенсе булып сход булаһы урынға елтәңләп Мөхәррәм килде. Бабай әллә ҡайҙан уҡ урам яңғыратып:

– Һа-а! Пәрүәз Лоҡманович килеп төшкән дәһә! – тип ҡысҡырҙы. Юғиһә, ул һөрәнләмәһә, кешеләр кем килгәнен белмәй. Үҙенсә хакимиәт башлығына шулай ихтирамын күрһәтә, уны ҡупырайтып, баҙарын күтәрә инде. Күкбүриндең әллә нисә тапҡыр һынағаны бар: исемен боҙоңҡорап әйтһә лә, барыбер күңелгә рәхәт, шайтан алғыры!

Ә инде ҡарттың ҡысҡырып һөйләшеүенән һынсыл уҡыусылар: “Моғайын, һаңғырауҙыр”, – тигән һығымта яһағандарҙыр. Эйе, дөрөҫ һиҙемләгәнһегеҙ: ул ҡолаҡҡа ҡаты. Ләкин бабайҙың был кәмселеге тыумыштан түгел, ә тормоштан. Мөхтәр ҡарттың йәштәше булған Мөхәррәмдең бала һәм үҫмер саҡтарҙағы ҡушаматы “буш йөрәк” була. Бындай ҡушаматтың юҡҡа бирелмәгәнен аңғаралар ҙыр: малайҙың донъяла ҡурҡмаған нәмәһе булмай. Һуғыш алдынан ғына яланда көтөү көтөп йөрөгән ун алты йәшлек үҫмерҙе йәшен ата. Уның йәнһәр тип әйтерлек кәүҙәһен ергә күмеп ҡотҡарып алып ҡалалар. Тик ошонан һуң Мөхәррәм ҡаты ҡолаҡ булып тереләэ. Уныһы ғәжәп түгел, ә был ваҡиғанан аҙаҡ үҫмерҙең күңеленән ҡурҡыу тигән тойғоноң юҡҡа сығыуы – аптырарлыҡ хәл. Кешеләр фиғелендәге һәр үҙгәрешкә һиҙгер халыҡ ошонан һуң, уның ҡушаматындағы бер генә хәрефте үҙгәртеп, “куш йөрәк” тип йөрөтә башлай.

Хәрби хеҙмәт өсөн ҙур кәмселеге булғанлыҡтан, Мөхәррәмде, әлбиттә, һуғышҡа алмайҙар. Ләкин уның күңелендә 1943 йылдағы табиби комиссияның ҡарары менән ризаһыҙлыҡ тойғоһо йәшәй. Улай ғына түгел, әлеге хис тотош рәнйеүгә әүерелеп, йылдар үткән һайын көсәйә бара. Мөхәррәм ҡарт үҙенең был ҡәнәғәтһеҙлектәрен әленән-әле белдереп, ауылдаштарының хәтеренә төшөрөп тора. Был хәтер яңыртыуҙар бигерәк тә Туғыҙынсы май алдынан матбуғатта һуғыш һәм ветерандар хаҡында һүҙ ҡуйырған осорҙа йышая. Уның үҙенсә кире ҡаҡҡыһыҙ дәлиле түбәндәге әсенеүҙән ғибәрәт: “Их, мине һуғышҡа алмай әрәм иттеләр! Әгәр алһалар, мин немецтең күрмәгәнен күрһәтер инем!” Уға һаҡ ҡына ҡыялатып: “Һуң, немес былай ҙа күрмәгәнен күреп, ҡыйратылды түгелме?” – тип төрттөрөүселәр булғылаған. Ләкин Мөхәррәм ундайҙарҙың ауыҙын: “Мин барһам, һуғыш күпкә алдараҡ бөтөр ине”, – тип яптырыр булған. Әгәр ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙҙары һаман асыҡ торғанын күрһә: “Һәм ҡорбандар әҙерәк булыр ине”, – тип тә өҫтәгән, имеш.

Был осраҡта бабайҙы ғәйепләп тә булмай, сөнки бөтә ил буйлап һүҙ азатлығы иғлан ителгән. Имамына ҡара ла мәхәлләһен күр, тигәндәй, халыҡ бит илдең иң юғары етәкселәренән фәһем ала. Ана, яңыраҡ береһе: “Халыҡтың көнкүреше насарайһа, рельсҡа ятасаҡмын!” – тип аҙарына ине. Ил ғауамының тормош хәле мөшкөлләнеүҙең сигенән үтеп китте, әммә баяғы ил етәксеһе үҙенең вәғәҙәһе тураһында – ләм-мим. Әллә үҙҙәренең ауыҙынан сыҡҡан хәбәрҙе ҡолаҡтары ишетмәй микән? Мөхәррәм ҡартты аңларға мөмкин: ул, исмаһам, һаңғырау, ә тегеләр бит ҡарамаҡҡа һап-һау.

Шулай ҙа һүҙ азатлығы мөмкинлектәрен бөтә тулылығында файҙаланыу буйынса ҡулын һыртҡа һалып, һуҙа баҫып сход урынына яҡынлашыусы Барый ҡартҡа тиңләшеүсе юҡтыр. Уның ялбыр ҡаштары артында йыҙлап торған теремек күҙҙәре, мыйығы аҫтына йәшеренгән йылмайыуы әллә ҡайҙан: “Беҙ – мут кешенеке!” – тип ҡысҡырып торғандай. Уның эргәһендә Мөхәррәм ҡарт өйрәнсек кенә, сөнки, күреүегеҙсә, һуңғыһының репертуары самалы. Ә Барый

бабайға килгәндә, ул фәстерә башлаһа, ҡолаҡ ҡынаң һау булһын! Шундай итеп һөйләй – ышанмаҫ ереңдән ышанырһың. Хәбәренең инандырыу ҡеүәһе судья тиклем судьяны арбағас, башҡалар ни һан инде?!

Алдараҡ совхоз һарыҡтарының япон яуы һымаҡ ерҙе ҡаплап йөрөүе хаҡында әйткәйнек инде. Күптәр был аҡыллы һәм йыуаш малҡайҙарҙың һыҡраһы тирә-яҡ мөхит өсөн ныҡ зарарлы икәнен белмәйҙер әле. Һарыҡ көтөүе йөрөгән ерҙә үлән тамырҙары ҡорой, еләк, сейә кеүек ҡыр ниғмәттәре юҡҡа сыға. Ҡыҫҡаһы, хөкүмәт өсөн файҙаһы күп булһа ла, халыҡҡа һәм тәбиғәткә зыяндан башҡаһы юҡ. Кешеләр быға ҡарата ризаһыҙлыҡтарын белдереп, халыҡ телендә әйткәндә, үҙ-ара бумпылдашып алалар ҙа, шуның менән – вәссәләм.

Нәҡ шул осорҙа, ябай халыҡтың уйын аңлап, уларға теләктәшлек белдергәндәй, һарыҡ көтөүҙәренә әленән-әле бүреләр һөжүм яһай ҙа ташлай торғайны. Ҡайһы саҡта бөтөнләй ояттарын юйып, әлеге ғәмәлдәрен көпә-көндөҙ башҡаралар. Ярай ҙа, бер-ике һарыҡты йығып ашау менән мөрхәтһенһәләр – ундай ҡырғын ваҡытында тиҫтәләрсә бәрәкәйҙе тамаҡлап ташлай былар. Әйтерһең, совхоз һарыҡтарының саманан ашҡанын һиҙеп, әҙ булһа ла уларҙың иҫәбен кәметеү өсөн тырышалар.

Бер ваҡыт әлеге “урман санитарҙары” үҙҙәренә йөкмәтелгән яуаплы бурысты үтәргә Барый көтөп йөрөгән һарыҡ өйөрөнә ташлана. Дөрөҫөн әйткәндә, ул көтөп йөрөргә тейеш була, ләкин көн дә бер иҫкәрмәһе сығып торған тормошта ҡағиҙә буйынса ғына йәшәү мөмкинме һуң? Ул көндө Барый, һарыҡтарын ашлығы урып алынған ҡамыл төбөнә ебәреп, үҙе яҡындағы һаҙлыҡ ситендә кәбән ҡойоп йөрөгән Мөхәррәмгә ярҙамға килә. Тикәйгә түгел, сөнки ул дәүерҙә буштың атаһы әле үлмәһә лә, хәл өҫтөндә ине. Ә ауылда иң таралған түләү хаҡы – әлеге лә баяғы әсе-сөсө инде. Барый ҡарт уны ярата һәм иркәләп “йомшаҡ аш” тип йөрөтә. Һәр хәлдә, танауға үҙенсәлекле еҫе бәрелгән ундай эсемлекте күреү түгел, хатта уйлаһа ла, тамағы ҡысытып ала ла китә.

Ҡыҫҡаһы, кәбәнде яртылағас, әлеге тамаҡ ҡымырйытыуына түҙә алмайынса, уны сылатырға ултыралар. Һүҙгә һүҙ ялғап, ваҡытты байтаҡ тауһытып ташлай улар. Бүреләр үҙҙәренең ҡара эштәрен башҡарыу өсөн ҡорҙаштарҙың тап шул кәбән төбөндә тамаҡ сылатҡан мәлен һайлай. Уларҙы юҡҡа ғына иң аҡыллы йыртҡыстарҙың береһе тип иҫәпләмәйҙәр шул.

Бүреләр тамаҡлап ташлаған иллеләгән ҡорбан өсөн совхоз етәкселеге көтөүсене судҡа бирә. Барый суд ултырышына тубыҡтары тишек салбар, һәләмәгә әйләнеп, унан-бынан мамыҡтары күренеп торған фуфайка кейеп бара. Ул йылдарҙа суд, ғәҙәттә, тәләфләнгән мал хаҡын көтөүсенең өҫтөнә һала ла ҡайтара торғайны. Ундай ҡарарҙарҙы күп сығарған хөкөм эйәһе, күрәһең, протокол өсөн, Барыйға: “Йә, бабай, нисек булды хәл?” – тигән ғәҙәти һорауҙы бирә.

Ошонда Барый үҙенең тел оҫталығын эшкә ҡуша. “Нисек булһын, – тип башлай ул. – Көтөп йөрөй инем, бер мәл ҡараһам, һаҙҙан эркелешеп ун бер бүре килеп сыҡты ла һарыҡтарға ташланды. Атым ҡамыл араһындағы ҡурпыны утлай, үҙем һалам төбөндә ултыра инем. Бүреләрҙән өркөп, ат ауыл яғына сапты, ә үҙем һалам өйөмөнә саҡ менеп өлгөрҙөм. Шулай ҙа бер нисәүһе килеп етеп, тештәре менән салбарҙы йыртa тартты, ҙурыраҡтары, өҫкәрәк ынтылып, фуфайкамды өҙгөләп бөттө. Бына, һеҙгә күрһәтер өсөн шул кейемдәрҙе кейеп килдем… Әйтәм бит, һалам өйөмө булмаһа, үҙемде тотоп ашарҙар ине. Алай ҙа Хоҙай араланы. Балаларҙың бәхетенәндер инде…”

Ошо ерҙә Барый, һөйләгәненең тәьҫир көсөн арттырыу өсөн, кеҫәһенән әбейе ҡашығаяҡ һөртөүгә тотонған, ҡоромға буялып бөткән сепрәк сығарып, күҙ-ҡаш тирәләренә тейҙереп ала. Йәнәһе, киноларҙа күрһәтелгәнсә, йәшкәҙәгән

күҙҙәрен ҡулъяулыҡ менән ҡорота. Аҙаҡтан, күңеле тулып, танауы епшегәнгә ышанһындар өсөн, ат бышҡырыуын хәтерләтеп, әлеге сепрәккә һемгереп тә ала.

Судья ҡатын уның һөйләгәндәренә, уларҙан да бигерәк ҡулъяулығының торошона ғәжәпһенеп:

– Балаларығыҙ нисәү һуң? – тип һорай.

– Туғыҙ, – тип яуап бирә үҙ ижад емешенә үҙе ышана яҙып, тауышы ҡалтыранған Барый.

Әйткәндәй, был уның хикәйәһендәге дөрөҫлөккә тап килгән берҙән-бер һүҙ була. Ләкин көтөүсе бәйән иткәндең ҡалғандарын да ялған тип ҡара! Уны инҡар итер өсөн шаһиттар кәрәк. Геүаһтар сифатында Барый ҡарттың атын, тере ҡалған һарыҡтарҙы, йә булмаһа бүреләрҙе саҡырып булмай бит инде. Шуға күрә район тарихында беренсе тапҡыр хөкүмәт малын зыянлатҡан көтөүсене аҡлап хөкөм ҡарары сығарған судьяны аңлауы ҡыйын түгел.

Әммә Барый ҡарттың күңелен уғата илһамландырған бер тема бар. Ул – һуғыш. Әгәр шулай әйтергә яраһа, ул ошо өлкәлә махсуслашҡан һәм үҙен һыуҙағы балыҡ һымаҡ тоя. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, ҡарт Шаймуратов дивизияһы менән һаташа. Тағы ла теүәлерәк итеп тасуирлаһаҡ, башҡорт атлы дивизияһы тормошонан төрлө хәл-ваҡиғалар һөйләргә ярата. Йәнәһе, ул һуғыш ваҡытында шунда хеҙмәт иткән дә үҙе шаһит булғандарҙы һүрәтләй.

Әгәр ҙә кемдер: “Был Барый тигәне һуғышта булмаған инде, моғайын”, – тип уйлаһа, төптө яңылыша. Ҡорҙашы Мөхәррәмдән айырмалы рәүештә, уны яуға яраҡлы тип табалар. Тик Барый ҡарттың ҡайһы фронтта, ниндәй дивизияла, ниндәйерәк ғәскәри төрҙә һуғышыуы хаҡында ул үҙе һәм әбейе генә белә ауылда. Ҡалғандарға булды ни ҙә, ҡалды ни – кемгә ҡыҙыҡ ул хәҙергә көндә? Белһә, тағы хәрби комиссариат беләлер, ләкин ул алыҫта – район үҙәгендә. Барый ҡарттың ниндәйерәк ғәскәрҙәр сафында һуғышыуы йәнә Аллаға мәғлүм. Әммә юғары ҡөҙрәт эйәһе эстән генә: “Яуапҡа ҡаршыма килерһең әле, шилма”, – тип уйлап, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөмһөрәй ҙә ҡуя инде ул.

“Был Барый осраған бер кешегә әкиәт һөйләп, халыҡтың башын ҡатырып йөрөйҙөр”, – тип уйлаусылар тағы ла яңылыша. Ундай хәбәрҙәр, ғәҙәттә, Барый ҡарттың ауыҙынан тамаҡты арыу ғына сылатҡандан һуң сыға. Икенсе төрлөрәк әйткәндә, баяғы “йомшаҡ аш” – уның төп илһам сығанағы. Ә әлеге шарт үтәлдеме – ҡолағыңды әҙерлә.

“Шаймуратов ерән ҡашҡа ат менде, – тип башлана ине уның жанрын билдәләп булмай торған бер хәбәре. – Башҡорт аттан айырылмаһа, еңелмәҫ, тип ҡабатларға ятты үҙе. Һөжүмдәргә барғанда атының ҡойроғо гел төйнәүле булыр ине. Беҙ ҙә шуға өйрәнеп киткәйнек: ерән ҡашҡаның ҡойроғо төйнәлгән, былай булғас, генералға йәҙрә теймәйәсәк. Ә бына рейдтан сыҡҡандағы һуңғы атакала атының ҡойроғо төйнәлмәгәйне. Әллә бушаҡ бәйләп ысҡынып киткән, әллә ординарецы онотҡан. Ана шулайтып харап булып ҡуйҙы ул…”

Жанрһыҙ ҡарһүҙҙәрҙең береһе Таһир Күсимов тураһында ине: “Күсимовты дивизияла “алпамыша” тип йөрөтә торғайнылар. Әйтмәксе лә, елле кеше ине шул – ат өҫтөндә анау балалар китабындағы Тарас Бульба һымаҡ ултыра. Тик бының төрөпкәһе юҡ. Таһир үҙе анау оҙон аяҡлы тоҡомло аттарҙы яратманы. Ниңә тиһәң, бының ауырлығына түҙмәй, билдәре тала тегеләрҙең. “Миңә ҡупшы ат түгел, башҡорт аты кәрәк”, – тип әйтә торғайны. Уның ике-өс менгеһе булды. Рубка-фәләнгә теге тоҡомлоларҙы менә, ә һөжүмгә барыр булһаҡ, әлеге шул талымһыҙ башҡорт атына атлана…”

Йәки, бына тағы: “Яҡуп Ҡолмой буш ваҡыттарында шиғыр яҙыу менән мәшғүл булыр ине. Унда һиңә өҫтәл ҡайҙа – дәфтәрен эйәргә һалып яҙа был. Ҡайһы саҡта, маршта китеп барған ерҙә, кеҫәһенән ҡағыҙ сығарып, нимәлер сыймаҡлап ҡуя. Күңеле килгән мәлдә беҙгә лә уҡый шиғырҙарын. Шул хәтле килештереп яҙа, хатта тыуған яҡты, туған-тыумасаны күҙ алдына килтереп, күңел тула. Хәҙер Өфөлә йәшәй шикелле. Ҡамасау яһаусы булмағас, рәхәтләнеп яҙалыр инде. Эйәргә һалып шиғыр яҙғандарын хәтерләй микән? Алла бирһә, бер барып сығам әле мин уға…”

Барый ҡарт һөйләгәндәрҙең жанрын билдәләп булмауҙың серен аңланым: улар ни уйҙырма, ни ысын түгел. Ысын тип әйтер инең – бер нисек тә тикшереп булмай, уйҙырма тиер инең – кире ҡағыуы мөмкин түгел. Уларҙы Барый ҡарттың ирекле ижад фантазиялары тип атайыҡ. Ана, илдең иң юғары етәкселәре телдәренә нимә килә, шуны һөйләһә лә, бер ни түгел. Шулай булғас, Барый бабайға ниңә һөйләмәҫкә? Жанрын билдәләп булмаһа ла, уның хәбәрҙәре күпкә ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс. Ә иң мөһиме, һис кемгә зыяны теймәй…

***

Уҡыусыларҙы Һағынбай ауылының ҡайһы бер кешеләре менән таныштырған арала халыҡтың йыйылыры йыйылып бөттө. Ана, төрлө йәштәге һәм ҡиәфәттәге халыҡ төркөмө, ҡорт инәһе тирәләй янғалаҡлаған бал ҡорттары һымаҡ, башлыҡты ярым ҡулса рәүешендә уратып алды. Фәрүәз Лоҡманович, ихтыяждан былайыраҡ абруйҙы иҫкәртеү өсөн, бер-ике мәртәбә тамағын ҡырып алғас:

– Ағай-эне! Йәмәғәт! – тип елле генә һүҙ башы яһаны. Был сход башланыуын аңлата ине. Әле генә айыртылған күстәй гөж килгән ғауамдың ҡапыл шымып ҡалыуынан ләззәт тойғоһо кисергән Күкбүрин, әҙ генә тын торғандан һуң, дауам итте:

– Һеҙгә һөйөнөслө хәбәр алып килдем бит әле бөгөн…

Силсәүит ауыҙынан быңдай һүҙ сығырын һис көтмәгән халыҡ, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәйенсә, албырғап ҡалды. Моғайын, хәҡәрәт менән туҡмаҡтан башҡаны татымаған етем бала үҙенә әйтелгән яғымлы, иркә һүҙҙән шулай аптырау тойғоһо кисерәлер. Йә булмаһа, сабанлығы арҡаһында һыртынан сыбыртҡы китмәгән ат наҙлап муйынын һыйпауҙан ошолай ҡойолоп төшәлер.

– Эйе, – тип дауам итте йәмәғәттең шымып ҡалыуын әлеге лә баяғы абруй ғәләмәтенә юраған Күкбүрин. – Яу ҡорбандары иҫтәлегенә һеҙҙең ауылда һәйкәл ҡуйыласаҡ. Хакимиәт башлығы иптәш Ғазап… то есть Әлимовтан фатиха бар, тиһәң дә була.

Ошо ерҙә, аптыраған халыҡ арлы-бирле иҫенә килгеләгәнсе, Фәрүәз Лоҡмановичтың телен тотлоғорға мәжбүр иткән һүҙгә аңлатма биреп китеү кәрәктер. Уның район хакимиәте башлығының фамилияһына ҡағылышлы әкәмәт икәнен бәғзе берәүҙәр аңғарғандыр. Төшөнмәйерәк ҡалғандар булһа, рәхим итегеҙ: һәр нәмәнең төбөнә тоҙ ҡойорға яратыусы берәү “әлим” һүҙенең ғәрәпсәнән “ғазап, яфа” тип тәржемә ителеүен асыҡлаған да, шунан түрәнең фамилияһы халыҡ араһында Ғазапов булып нығынған. Ана бит, хатта үҙенең юғарылағыларға ҡуштанлығы, тоғролоғо менән даны сыҡҡан Күкбүрин дә саҡ эште боҙманы. Ярай әле, ваҡытында төҙәтеп өлгөрҙө, юҡһа, “абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән” тигән һүҙҙең буштан ғына әйтелмәгәнен үҙ елкәһендә татырға тура килер ине уға.

Беренсе булып көнө-төнө телесериалдар ҡарауҙанмы, әллә икенсе сәбәптәнме телен онота башлаған Фариза ҡарсыҡ һушын йыйҙы. Уның тураһында шулай яҙыҡ уйларға хаҡыбыҙ барҙыр, сөнки ул, урынлашҡан тынлыҡты боҙоп:

– Атаҡ, атаҡ! Һәйкәле нимә була тағы! – тигән һорауҙы яңғыратты.

Ҡалғандар һорауҙың айышына төшөнгөләгәнсе, уны нәфеҙ үҙенә төбәлгән тип ҡабул иткән Мөхәррәм ҡарт телгә килде. “Һаңғырау күпте ишетмәһә, яҙыҡ була” тигәнде раҫлап, эргәһендә торған Фариза әбейҙең ҡолағына:

– Ибелиска! – тип ҡысҡырҙы.

Күкбүрин үҙенең күп йыллыҡ тәжрибәһе буйынса Һағынбай ауылында бик үҙенсәлекле, кәмит халыҡ йәшәгәнен яҡшы белә. Махсус рәүештә яһалма ҡыланыуҙан түгел был, ә үҙҙәренең тәбиғәте шулай булыуҙан. Ысынлап та, һәр береһе хаҡында тотош көләмәстән торған китап яҙырға була. Моғайын, был ауылға нигеҙҙе бик мәҙәк кеше ҡыҙыҡ өсөн генә һалғандыр. Миҫалға бөгөнгө әкәмәтте генә алайыҡ.

Ҡолағының төбөндә яңғыраған көтөлмәгән ауаздан тертләгән әбей:

– Әстәғәфирулла! – тип сәрелдәне лә, яулығының осо менән ҡолағын ҡаплап, ситкә ялтанды. Әллә тауыштың яңғырауыҡлығынан ҡото осто, әллә әйтелгән һүҙҙең дәһшәтенән өрктө – хатта ярым түңәрәктең икенсе осона барып баҫты. Ҡасып барышлай ул тағы низер һөйләнде – быны әбейҙең ирендәре ҡыбырлауынан аңғарып була ине. Ә тауышы иһә сходтағыларҙың күмәк көлөүе аҫтында күмелеп ҡалды. Ҡайһы берәүҙәрҙең аҙаҡ һөйләүенсә, Фариза әбей Мөхәррәм ҡартҡа төбәп: “Һин үҙең иблис”, – тип әйткән, ә бәғзеләренә был: “Һаңғырауға һаумы тиһәң, атаң башы тип әйтер”, – булып ишетелгән. Бик ихтимал, ләкин асыҡ ҡына ишетмәгәс, ҡырҡа-яран раҫлауы ҡыйын.

Иһаһайлау ауаздары бер аҙ баҫылғас, ғөмүмән, көлөргә яратмаған, улай ғына түгел, ауыҙ йырған кешеләргә бер аҙ сәйерһенеберәк ҡараған Мөхтәр бабай, эргәһендә торған ҡорҙашын төҙәтергә ашыҡты:

– Обелиска тип әйт!

Тирә-яҡтан был төҙәтмәне йөпләгән тауыштар ишетелде:

– Һуң, ана, Ташъярҙа тора лаһа бер кәртәле таш!

– Күмәк исемдәр яҙылған һынташ була!

– Эйе, шул инде, шул!

Фәрүәз Лоҡманович сходтың баҙарға әүерелеп китеүенән, унан да былайыраҡ, абруйына зарар килеүҙән шөбһәләнеп, дилбегәне ҡулына ала һалды:

– Йәмәғәт! Тауыш!

Һалған оранының йыйылыусыларға нисегерәк тәьҫир иткәнен һынар өсөн ул бер аҙ туҡтап торҙо. Юҡ, абруйға бер ниндәй ҡурҡыныс янамай – ығы-зығы шып туҡтаны. Әйтерһең, ауыҙҙарына йөҙөк йәшерҙеләр йәки һыу уртланылар. Бынан күңеле булып, оторо илһамланған Күкбүрин дауам итте:

– Эйе… Бына Мөхтәр ағай дөрөҫ әйтте: обелиск, йәғни һәйкәл. Тик ул, ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, ҡоро яҙыу ырылған кәртәле таш ҡына түгел, ә һуғышта ятып ҡалғандар иҫтәлегенә ҡуйылған ҡомартҡы, шәһит киткәндәрҙең рухтарына үҙенә күрә хөрмәт билдәһе. Быйыл Еңеүҙең 50 йыллығы икәнен дә онотмайыҡ. Район үҙәгенә яҡыныраҡ ятҡан ауылдарҙың күбеһендә бар улар. Беҙҙә генә ул… Ҡхе, ҡхе…

Ошо урында хакимиәт башлығы артығыраҡ ысҡындыра яҙғанын һиҙеп ҡалды һәм хәбәренең айышын йәһәт кенә икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрҙе:

– Аллаға шөкөр, төбәгебеҙҙә хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрә. Ауыл халҡының көнкүрешен яҡшыртыу буйынса берәй нәмә һорап барһаң, элекке һымаҡ кире бороп ҡайтармайҙар. Бының өсөн районыбыҙҙың башлығы иптәш Әлимовҡа, республика хөкүмәтенә яҡкан-торған һайын рәхмәт уҡырға тейешбеҙ…

Күреүегеҙсә, Күкбүриндең ике саҡырылыш рәттән халыҡты етәкләүе бушҡа булмаған: уның арыу уҡ шымарып, тел тирмәнен ярайһы оҫта тартырға өйрәнеүе күҙгә бәрелеп тора. Ана, был юлы Әлимовтың фамилияһын да тотлоҡмай

ғына үтеп китте. Бының өсөн уға зиһен көсөн бер сәпкә туплап, көсөргәнергә тура килде инде. Тик нишләтәһең, вазифаға бәйле важибәт бит.

Күкбүрин урындарҙағы хакимиәт башлыҡтарына өлгө итеп ҡуйырлыҡ был телмәрен һөйләгән арала, уны уратып алған халыҡ тамам иҫен йыйҙы. Ана, шуның дөрөҫлөгөн раҫлап, Барый ҡарт һүҙ һорай түгелме? Әйҙә, тыңлап ҡарайыҡ әле.

– Был “кәзә ҡойроғон ҡалҡыта тип, һарыҡ та ҡалҡытып ҡарай” тигән һымағыраҡ була инде, – тип башланы ул, мут йылмайыуын мыйығы аҫтына йәшерергә тырышып. – Тик беҙ һуңлап ҡалҡытабыҙ түгелме ҡойроҡто? Ниңә тиһәң, урыҫ ауылдарында ундай ғәләмәтте егерме-утыҙ йыл элек ҡуйып бөттөләр…

Ошо урында сходтағылар, алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, барыһы бер юлы баштарын бороп, Һағынбайҙан ике-өс саҡрымда ятҡан Бирнә йылғаһы аръяғындағы Силәбе өлкәһе биләмәләренә күҙ ташланы. Әлеге мәлдә уларҙың ни уйлап, ни кисергәнен бер Хоҙай ғына беләләр. Беҙгә тик фараз итергә ҡала. Уларҙың ҡайһы бер уйҙарын бергә төйнәһәң, моғайын, ошолайыраҡ килеп сығыр ине: “Ысынлап та, дөрөҫ әйтә бит ҡарт. Бер үк һуғышта ҡатнашып, бер үк яуҙа ҡорбан булған шәһиттәргә лә тигеҙһеҙ ҡараш хатта. Инде донъянан киткән йәндәрҙең ғәйебе ниҙә?..”

Ә Барый ҡарт дауам итте:

– Кәнишне, һәйкәлде кәрәкмәй тип әйтеп булмай. Вә ләкин уның ҡола яланда һерәйеп тороп ҡалыуы бар. Ниңә тиһәгеҙ, йәштәр ҡалмай бит ауылда. Ә беҙҙең ҡалған ғына ғүмерҙе кәкүк күптән һанаған. Һөкөмәттең бик аҡсаһы сығып бара икән, ниңә уны икенсе нәмәгә тотонмаҫҡа? Һыу мәсьәләһен генә алайыҡ: берҙән-бер ҡоҙоҡто ҡышын ҡар баҫа. Ҡайһы бер ҡышта уның ян-яғында көрт бот төбөнән була. Урыҫ ауылдарындағы һымаҡ колонкалы ҡоҙоҡ ҡаҙҙырыу бик ҡимматҡа төшә, тиһәләр, юлды рәтләтергә була. Йә булмаһа, эш асыу мәсьәләһен хәл итеп ҡарарға була. Ул ваҡытта йәштәр ҙә…

Барый ҡарттың хәбәре оҙонайған һайын, Фәрүәз Лоҡмановичтың түҙемлеге ҡыҫҡара барҙы. Ул тәнендәге һәр бер күҙәнәге менән тоя ине: нәфеҙ ошо мәлдә теҙгенде шаҡармаһаң, сход тигәнең баҙарға әйләнәсәк. Ә артабан – йәрминкә. Шуға күрә һуғыш ветеранын бүлдереүҙе кәрәк тип тапты:

– Барый ағай бик урынлы әйтә. – Күкбүрин йүпәләргә, сығыш яһаусының ыңғайына һуғырға мәжбүр ине, сөнки ветерандар менән шаярыу бик хәүефле – улар хәрби комиссариатҡа, ә комиссариат оборона министрлығына арҡалана. Ҡаршы барып ҡара уға? – Ысынлап та, хәл итәһе нәмәләр ифрат күп. Тик һүҙҙең дөрөҫө кәрәк: коммунистар етмеш йыл буйы эшләмәгәнде демократтар бер нисә йылда нисек эшләһен? Күңелде киң тотайыҡ, барыһы ла яйлап булыр – юлы ла, һыуы ла тигәндәй… Ә әлегә, бирәм тип торғанда, һәйкәл менән мөрхәтһенәйек, йәмәғәт. Йылы шулай бит – юбилейный.

– Ниңә, эшләһәләр, ауылға бер йәм була инде, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы быға тиклем өндәшмәй торған Мөхтәр ҡарт.

“Әһә, танк китте, – тип уйланы Күкбүрин, – бирел, кавалерия”. Ә етди әйткәндә, Мөхтәр бабай ауылда ҙур абруй менән файҙалана. Ләкин абруй мәсьәләһендә Барый ҡарт та ҡалышмай. Уларҙың дәрәжәләре яҡынса бер тигеҙ, тиһәң дә була.

“Танкы”ның һөжүмгә күсеүе сходҡа йыйылған халыҡты ҡуҙғытып ебәрҙе – ян-яҡтан хуплау, күтәрмәләү тауыштары ишетелде:

– Бик хуп!

– Ысынлап та, унан кемгә зыян?

– Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына!

– Күптән кәрәк ине!..

Әммә барыһы ла “әйе” тиһә, ул ниндәй демократия? Хәҙер заманалар үҙгәреү өҫтөндә бит. Демократияның Һағынбай ауылына ла килеп етеүен раҫлап, Хөмәйрә ҡарсыҡ, үҙ алдына һөйләнгәндәй:

– Үлгәндәргә самаһыҙ мал сарыфлауҙы Аллаһы Тәғәлә хупламай, – тигән булды. Ләкин уның ярым тауыш менән генә әйтелгән был айырым фекере күмәк ығы-зығы аҫтында күмелеп ҡалды. Әллә ишетмәнеләр, әллә ишетмәгәнгә һалыштылар. Әммә мылтыҡтың тейеүе түгел, ә шартылдауы шарт, шуға күрә, бөгөнгө сход заман рухында үтә, тип әйтергә тулы нигеҙ бар.

Үтә тип, уны тамамланды тиһәң дә була, сөнки Фәрүәз Лоҡманович, бында кемдең хужа икәнлеген тағы бер ҡат иҫкәртергә теләгәндәй, мәғрур ғына тамағын ҡырып алды ла сходтың йомғаҡлау өлөшөнә күсте:

– Ярар… Сходтың ҡарары сыҡты, тиһәң дә була. Ҡаршылар юҡ, шуның өсөн уны бер тауыштан тип иҫәпләйек. Мин бер-ике көндән тағы килеп китермен, һеҙ уға тиклем һуғыш ҡорбандарының исемлеген барлап, һәйкәлдең урынын билдәләй тороғоҙ.

***

“Барлап ҡуйығыҙ, билдәләй тороғоҙ”, – тип әйтеүе генә еңел. Тормош – әкиәт түгел, унда бер нәмә лә тылсым ярҙамында үҙенән-үҙе эшләнмәй. “Һуң, сход булды, мәсьәлә ҡаралды, барыһы ла риза булып таралды. Шулай булғас, Һағынбай ауылында яу ҡорбандары иҫтәлегенә обелиск ҡалҡып сығыр. Эш урын һайлауға ғына ҡайтып ҡалды бит”, – тип уйлауҙары мөмкин. Ундайҙарға: “Ашыҡмай тороғоҙ”, – тип әйтергә тура килә, сөнки эш урын һайлауға ҡайтып түгел, ә шуға терәлеп ҡалды. Нисек тиһегеҙме? Уны белер өсөн, Күкбүрин ҡайтып киткәндән һуң Һағынбай ауылында башланған ваҡиғаларға диҡҡәт итәйек.

Был мажаралар быға тиклем һәүетемсә генә йәшәп ятҡан ауылдың ҡапма-ҡаршы ике фирҡәгә бүленеүенән башланды. Уларҙы “һуғышсан ике төркөм” тип атаһаң да була: береһе – йылғаның көньяғында, икенсеһе – төньяҡ ярҙа.

Ҡырҡа айырымланыуҙың сәбәбе – буласаҡ һәйкәлдең урыны хаҡында ҡупҡан бәхәскә һәм уртаҡ бер фекергә килә алмауға бәйле ине. “Уның ниндәй айырмаһы бар, ауыл берәү түгелме һуң?”– тигән аптыраулы һорау тыуыуы ихтимал. Дөрөҫ, ләкин уны ҡап уртаға бүлеп аҡҡан кескәй йылғаны онотмайыҡ. Барый ҡарт ауылдың төньяҡ яртыһында, ә Мөхтәр бабай көньяғында йәшәй – бөтә ғилләүшунда. “Тимәк, улар икеһе лә бер оста маҡам тотһа, был моназара менән ғауға сыҡмаҫ ине”, – тип уйлаусыларға: “Тап өҫтөнә баҫтығыҙ”, – тиергә мөмкин.

Һиҙемләүегеҙсә, Күкбүрин ҡайтып китеү менән Һағынбайҙа сход тамамланманы. Әлбиттә, уның рәсми өлөшө бөттө, һәм был ваҡиғаға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙары ҡырҡа кәмегән ҡайһы берәүҙәр берәм-берәм өйҙәренә таралышты. Миҫалға бер каналда тамамланып өлгөрмәҫтән икенсе каналда башланған бер генә телесериалды ла ҡалдырмай ҡарап барған Фариза ҡарсыҡты, намаҙ ваҡытын үткәреп ебәреүҙән шөбһәләнгән Хөмәйрә әбейҙе, йорттарындағы ашығыс хужалыҡ эштәре иҫтәренә төшкән башҡа ҡатын-ҡыҙҙы алырға була. Уҡыусы балалар булмау сәбәпле, етемһерәп торған мәктәп янындағы сход урынында бары тик ил күләмендәге мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе үҙҙәренең бурысы тип һанаған ир-ат ҡына ҡалды.

Хакимиәт башлығы йөкмәткән бурыстың тәүгеһен үтәү әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Бармаҡ бөгөп өй беренсә һанай торғас, яуҙан ҡайта алмағандарҙың иҫәбе егерме биш кешегә етте.

– Егерме генә өйҙән шунысама ҡорбан сыҡҡас, анау хәтле дәү СССР-ҙан күпме була инде улар! – тип тел шартлатты Барый ҡарт.

– Яҡынса бер ғаиләнән бер шәһит сыға түгелме? – Мөхтәр бабай уның һорауына һорау менән яуап бирҙе.

– Килеп сыҡҡан һанға шуның дүрттән бер өлөшөн ҡушырға кәрәк була бит әле, – тигән фекер ялғаны Барый ҡарт.

Һүҙ ҡыҫтырмаһа, Мөхтәр буламы ни – ул да башҡалар ыңғайына аптырауҙан баш сайҡап торҙо ла:

– Мине алманылар бит һуғышҡа! – тип сираттағы әсенеүен белдерҙе. – Алһалар, беҙҙең яҡтан ҡорбандар әҙерәк булыр ине.

Уның был хәбәренә өйрәнеп бөткәнлектән, әллә ни иғтибар итеп тормайынса, Күкбүрин йөкләмәһенең икенсе өлөшөнә күстеләр. Ул Барый ҡарттың:

– Һәйкәл өсөн Сағыл итәгенән дә һәйбәт урын юҡ инде, – тиеүенән башланды.

Моғайын, аңлашылалыр:Барый бабайҙың күрһәткән урыны йылғаның төньяҡ ярында урынлашҡан. Уның был тәҡдимен үҙ күмәсенә көл тартыу тип ҡабул иткән Мөхтәр ҡарт:

– Оло һырт битләүе насармы ни? – тип ҡорҙашына ҡаршы төштө. Ул атаған тау итәге ауылды икегә бүлеп аҡҡан кескәй шишмәнең көньяҡ ярында икәнен яҙып тороу ҙа артыҡ хатта. Шулай уҡ көньяҡ оста донъя көткән Мөхәррәм үҙенең ҡорҙашын күтәрмәләргә ашыҡты:

– Ҡайһы яҡта өйҙәр күберәк, шунда торорға тейеш ул таш!

Ҡарттың ҡәтғи ишараһы аңлашыла, сөнки улар яғында – ун бер йорт, ә Барый ҡарт йәшәгән оста иһә туғыҙ ғына. Был йәһәттән, әҙселек күпселеккә буйһона, тигән демократик принцип тантана итергә тейеш булып сыға. Быға өҫтәп тирәяҡтан бер-ике кеше (уларҙың ҡайһы яҡ остан икәне аңлашыла) кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр яуҙырҙы.

– Ысын, мәктәп тә, мал һарайы ла беҙҙең яҡта бит!

– Ә зыярат һуң? Ул да йылғаның был яғында!

Әммә Барый ҡарт килтергән дәлил тегеләрҙекенә емергес тәьҫир итте:

– Уныһы шулай, вә ләкин һуғыш ҡорбандары беҙҙең яҡта бер кешегә күберәк…

Ҡыҫҡаһы, ауылды ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүленергә мәжбүр иткән шаулы бәхәс ошолай башланып китте. Ә һәр бер моң-зарының дауам итә торған үҙенсәлеге бар шул, ҡәһәрең. Был юлы ла ул, үҙ тәбиғәтенә тоғролоҡ һаҡлап, Һағынбай ауылы халҡының күңелдәренә инеп ояланы, уларҙа көнсөллөк һәм дәғүәселек тойғолары уятты. Әйтерһең, үҙ-ара төрткөләшеүгә, ҡыялҡыға өндәп, ҡотортоп торған күҙгә күренмәҫ шайтан.

Ә шайтан, йәғни иблис, бер эйәләһә, унан ҡотолоуҙары – ай-һай! Ул ауылды икегә бүлеп аҡҡан зыянһыҙ йылға түгел. Шишмәне аша атлап, ә яҙ көнө йәки ямғырҙар мәлендә, ташҡан саҡтарында, кисеп сығырға була. Ә иблис ҡотҡоһо бер ташһа, упҡын хасил була.

Әлеге шайтанды әйтәм: кескәй генә Һағынбай ауылы өсөн үҙенең ҡылыҡ-фиғелен үҙгәртеп тормаҫ инде. Ул кешеләрҙең күңелен солғап алды ла әлегеләрҙе үҙе генә белгән юл менән алып китте. Иблистең өнһөҙ әмерҙәренә буйһонған халыҡ ауылдың ике яғында ла тыш-быш килергә тотондо. Ҡана, ҡолаҡ һалайыҡ әле уларға.

“Бөтә нәмә улар яғында ғына булырға тигәнме ни?.. Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе түгелдәр бит… Беҙҙең оста ла ниҙер торорға тейеш…” – Был һуҡраныуҙар ауылдың төньяҡ яртыһынан ишетелде. Уларҙы көньяҡтан күтәрелгән ризаһыҙлыҡ ипкене ҡаршы алды:

“Ҡара һин уларҙы, ни һөйләгән булалар!.. Беҙҙең яҡ элек-электән ауылдың

үҙәге һаналған... Барыйса булмаясаҡ – һәйкәл йылғаның был яғында төҙөләсәк!..”

Төньяҡ бирешергә теләмәне: “Барый ҡарт ҡайһы бер саҡта бик дөрөҫ әйтә ул, ҡәһәр теймәгер. Афарин!..”

Көньяҡ үҙ туҡһанын туҡһанланы: “Мөхтәр ағай ҡалай йәтеш япты тегенең ауыҙын! Танк – танк инде...”

Төньяҡ яғы үсәне: “Барый ағаның һоғондороуынан арғы яҡтарҙың өндәре тығылды, әй. Вәт, исмаһам, әйтте!..”

Ҡибла ҡәһәтләнде: “Әйҙә, һөйләнһендәр! Барыбер беҙҙең һүҙ өҫкә сығасаҡ – яңынан сход ҡына булһын...”

***

Күкбүрин оҙаҡ көттөрмәне: көньяҡ Һағынбай ғауамының һүҙҙәрен ишетеп торғандай, ике көндән “һоп” итеп килеп тә төштө. Хакимиәт башлығы шул уҡ: күңеле лә, кәүҙәһе лә шаҡтай көр, тик хәрәкәт итеү ысулы ғына үҙгәргән – ҡулында руль түгел, ә дилбегә. “Моғайын, сираттағы йома еткәндер”, – тип уйлаусылар булһа, уларҙы: “Дөп-дөрөҫ!” – тигән йөпләү менән ҡыуандырғы килә. Хәйер, уның бөгөн ат менән килеүе икенсе сәбәптән булыуы ихтимал: бәлки, машинаһы боҙолғандыр. Шуға күрә Фәрүәз Лоҡманович тураһында нахаҡ уйлап, күңелгә гонаһ та алғы килмәй.

Ә бына Барый ҡарт яҙыҡ-маҙарҙан ҡурҡып торманы – хәлде дөрөҫ баһалап, сходҡа йыйылған ағай-эне ни ҙә булһа аңғарып өлгөргәнсе, эргәһендә торған Лотфуллаға мәғәнәле ҡарашын төбәгән килеш ике мәртәбә аҫтыртын ғына тамаҡ ҡырҙы. Уныһы, был шартлы билдәне аңлағанын белдереп, әкрен генә эйәк ҡаҡты һәм, йыйылыш алдынан булып ала торған ығы-зығынан файҙаланып, сход урынынан тайҙы.

“Улар ниңә ым аша һөйләшә һуң?” – тигән һорау тыуыуы ихтимал. Барый ҡарттың мутлығы аңлашыла: был – уның серҙе ҡаршы яҡҡа белдермәүе, йәғни конспирация ғәләмәте. Ә Лотфуллаға килгәндә, уның ымлап аңлашыуы – сараһыҙҙың көнөнән. Күпселеге ир-аттан ғибәрәт булған халыҡ үҙенең түрәһе менән иҫәнләшеп, хәл-әхүәл белешкән арала Лотфулла менән яҡынданыраҡ танышып үтәйек.

Ул сығышы буйынса күрше ауылдан, ата-әсәһе лә, туғандары ла юҡ үҙенең. Алтмышынсы йылдарҙа йәше уҙып барған Мәйсәрә Ташъяр клубына әртис ҡарарға юлланып, уны шунда осрата һәм тимерҙе ҡыҙыуында һуға – Һағынбайға эйәртеп ала ла ҡайта. Хәҙер утыҙ йылдан ашыу ғүмер итәләр, балалары ҙурайышып, ҡырға китеп бөткән.

Лотфулла үҙе былай эшкә талымһыҙ, донъя көтөүгә әүәҫ булды. Уның алты ағзаһы ла теүәл, тик һөйләшә алыуҙан мәхрүмлеге генә бар инде. Ишетелеүенсә, ул үҫмер сағынан Ташъярҙа төрлө эштәр башҡара, көтөү ҙә көтөп ала шикелле. Бер мәл ниндәйҙер төҙөлөшкә ҡыҙыл балсыҡ ташырға ҡушалар уға. Балсыҡты сығарыу өсөн өңдө кәйлә менән соҡоп торғанда, өҫтәге ер ишелеп китеп, уны баҫа. Бәхетенә ҡаршы, кемдер күреп ҡалып, башы ғына һерәйеп торған егетте ҡаҙып алалар. Ҡотҡарыуын ҡотҡаралар, ләкин шунан аҙаҡ ул телдән ҡала.

Ярай, ул Барый ағаһы ҡушҡан йәшерен йомошто үтәргә китә бирһен, ә беҙ сходҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Күкбүриндең күңеле бөгөн дә күтәренке, төҫ-сырайы ҡәнәғәт икәнен әйттек бит инде. Ул йыйылыусыларҙы тағы бер ҡат күҙҙән үткәреп сыҡҡандан һуң:

– Йә, башлайыҡмы? – тип һүҙ моронлатты. – Халыҡ бөгөн әҙерәк кеүек. Әллә күҙемә шулай күренәме?.. Шунан, урын мәсьәләһен хәл иттегеҙме?

Тынлыҡ... Быны һис көтмәгән башлыҡ тәүҙә шаяртыу яғына борорға самаланы:

– Ниңә өндәшмәйһегеҙ? Әллә асыласаҡ һәйкәл ҡыуанысынан телегеҙҙе йоттоғоҙмо? Улай тиһәң, әле генә…

Шул саҡта Барый ҡарттың тамаҡ ҡырғаны ишетелде. Тимәк, хәҙер башлана! Эйе, тотоғоҙ ҡапсығығыҙҙы – башланмай торһон әле! Ни өсөн тигәндә, уның һалған хәбәренән шаңҡып, бер килке телһеҙ ҡалдылар. Һағынбай халҡын Лотфулла яҙмышына дусар булыуҙан Хоҙай ғына аралағандыр. “Ул тиклем ниндәй һүҙ һуң?” – тиерһегеҙ. Бына ул:

– Урын тураһында төрлө һүҙҙәр булып алды инде, ырыһы ла, мырыһы ла, тигәндәй. Уныһы ла кәрәк, ниңә тиһәгеҙ, заман үҙе хуплай быны. Сит илдең ҡупшы һүҙҙәре менән атаһалар ҙа, ил етәкселәре, депутаттар көнө-төнө даулаша. Хатта бәхәс менән үстәре ҡанмай, һуғышып китәләр. Эйе… Ә һәйкәлгә килгәндә, уның урыны – Оло һырт итәгендә. Ысынлап та, йылғаның был яғы элек-электән үҙәк булды. Әйҙә, яҙыулы таш та ошонда торһон.

Бына һиңә мә! Барый бабай әйткәндәргә Күкбүрин менән Мөхәррәм ҡарттан башҡалар ышанманы, сөнки уларҙың тәүгеһе Һағынбай хәлдәрен белмәй, ә икенсеһенең әхүәле бөтәгеҙгә лә мәғлүм. Ысынлап та, ауылдың көньяғы үҙ ҡолағына нисек ышанһын: көлдө иң ныҡ саялыҡ менән үҙ күмәсенә тартҡан кеше ошо Барый түгел инеме? Хәҙер инде төньяҡ төркөмдөң хәлен күҙ алдына килтерәйек: үҙ яғы файҙаһына ике-өс көн буйы арымай-талмай өгөт-нәсихәт алып барыусы ла ул бит.

Фәрүәз Лоҡманович ниҙер әйтергә уйлап ирендәрен ҡыбырлатҡайны ғына, Мөхәррәм ҡарт һөрән һалды.

– Һин, Барый, юҡ һүҙ һөйләп торма! Беҙ – йылғаның был яғы – һинең тәҡдимеңә ҡаршы! – Ул, сығыш яһаусы кисәге кеүек үҙ яғын ҡайыра, тип уйланы, ахырыһы.

Мөхтәр ҡарт һиҙҙермәй генә ҡорҙашының еңенән тартты – йәнәһе, тик кенә тор! Хәлгә төшөнөңкөрәмәгән Күкбүрин, үҙ сиратында:

– Барый ағайҙың тәҡдиме нимәһе менән оҡшамай һуң? – тип һораны. – Минеңсә…

Ләкин уға фекерен ослап ҡуйырға ирек бирмәнеләр – йыйылған халыҡ, бигерәк тә ауылдың көньяҡ осо, бер-береһен бүлдереп, хәлде төҙәтергә ашыҡты:

– Юҡ, юҡ! Барый ағай дөрөҫ әйтә!

– Беҙ риза!

– Мөхәррәмдең һаңғыраулығы бер бөгөнмө?

Фәрүәз Лоҡманович, мәсьәләне хәл ителгәнгә һанап, йыйылыштың һығымта өлөшөнә күсте:

– Яра-ай… Былай булғас, нитәйек… Ҡайҙа әле Лотфулла – тәғәйенләнгән урынға таш ташый башлаһын. Нигеҙенә кәрәк булыр.

Ошонда ғына Лотфулланың юҡлығы ҡалғандарға ла мәғлүм булды. Барый ҡарт, сырайына аптырау ғәләмәте сығарған булып, белмәмешкә һалышты:

– Әллә-ә. Яңы ғына ошонда күренә ине ләһә. Ҡайтҡандыр. Һин, Фәрүәз Лоҡманович, уға үҙең аңлатып кит инде. Беҙҙе әллә тыңлай, әллә юҡ. Заманы шундай бит: халыҡ һүҙе – итәктә, түрәнеке – үҙәктә…

Һай, һүҙҙең ҡөҙрәте! Кеше күңелен түгел, хатта ташты ла иретер. Бигерәк тә Фәрүәз Лоҡманович кеүек шан-шәүкәткә ҡойоноп өйрәнгән затҡа бындай һүҙ үҙе бер мәрһәм* инде. Шуға күрә ул артыҡ ҡыҫтатып торманы – кырандасына йүнәлде:

---

**Мәрһәм – яраға һөртә торған дарыулы май.*

– Ысынлап та… Әйҙә, ултырып ал, Барый ағай.

Ауылдың көньяғы уларҙы һынсыл һағайыу менән оҙатып ҡалды. Барыһының да күңелендә ҡапма-ҡаршылыҡлы хистәр, баштарында: “Тикмәгә түгел был”, – тигәнерәк шөбһәле уйҙар ҡайнаша ине. Моғайын, һеҙҙең дә шулайҙыр.

Эйе, дөрөҫ шикләнгәнһегеҙ, ағай-эне: был, ысынлап та, Барый ҡарт тарафынан уйланылған “ат йөрөшө”, йәғни, урыҫ әйтмешләй, “ход конем” ине. Кавалерия менән юҡҡа ғына һаташмай бит ул. Әлеге “ат йөрөшө” ваҡиғаларҙы ҡайһы юҫыҡҡараҡ бороп ебәрер икән – әйҙәгеҙ, улар артынан беҙ ҙә Һағынбайҙың төньяҡ өлөшөнә киттек.

Ауылды уртаға бүлеп аҡҡан йылғаны кискәс, Барый бабай хакимиәт башлығының күңелен еңелсә ҡытыҡлап алған тәҡдим индерҙе:

– Беҙгә һуғылып кит, Фәрүәз ҡустым. Еңгәң ҡашығаяҡ шалтырата биреп тә ҡалғайны.

– Ә Лотфулла?

– Ул ҡасмаҫ. Кәрәк булһа, саҡыртырбыҙ. Элекке колхоз бригадирҙары һымаҡ, урамда эш ҡушып йөрөү килешмәй. Һинең дәрәжәң оло бит.

Ғәжәпкә ҡаршы, силсәүит аты: “Эйе шул!..” – тигән һымаҡ бышҡырҙы ла, бер ниндәй дилбегә ишараһы булмауға ҡарамаҫтан, Барый ҡарттарҙың өйөнә боролдо. Хужаһына төбәлгән бындай саҡырыу һүҙҙәрен күп тапҡырҙар ишетеп, мәғәнәләренә төшөнөп бөткәнгә оҡшай малҡай. Булыуы ихтимал: ат барыһын да аңлай, тик һөйләшергә теле генә юҡ, тиҙәр бит.

Өйҙә дәрәжәле ҡунаҡты ауылса яраштырылған табын ҡаршыланы. Аңлашылыуынса, өҫтәлдәге һый-хөрмәт – Барый ҡарттың баяғы тамаҡ ҡырыуына дөрөҫ төшөнгән Лотфулланың уны ым ярҙамында түкмәй-сәсмәй хужабикәгә еткереүе һөҙөмтәһе. Әлбиттә, етмешенсе тауына үрмәләгән әбей салат-малаттар әҙерләп, йәштәрсә ҡылана алмай инде, шулай ҙа ыҡсым ғына өй эсенә татлы еҫтәр бөрккән ризыҡ йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерерлек тә түгел ине. Әйтәйек, янына эре-торо итеп башлы һуған туралған ҡаҙы. Ул бүктерһә, бешкән картуф менән аралаштырып һалынған ҡаҡланған ҡаҙ өлөштәре. Етмәһә, тирәяҡҡа хуш еҫ аңҡытып, электр плиткәһендә ит ҡайнай. Бисмиллаһыҙ бешкән ресторан аҙыҡтары ары торһон!

Ә сәйгә ҡушып тәмләй торған ауҡатты* ҡайһы ресторан тәҡдим итә ала: яңы ғына айыртылған ҡаймаҡ, сейәле май, ҡыҙыл эремсек, талҡан, аҡ май. Төрлө вареньелар тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Өҫтәлдең уртаһында, “Табындың бисмиллаһы – беҙ!” тигән төҫлө, ҡабарып бешкән икмәк телемдәре. Ҡыҫҡаһы, һыйҙың ярайһы уҡ муллығы бөгөнгө сараның алдан уйланғанлығын аңғартып тора ине.

Барый ҡарт тамағын ҡыра-ҡыра тәүге йылтыр шешәне асып, рюмкаларға һалып та өлгөрмәне, ялпылдап Лотфулла килеп инде. Уны бер-бер артлы өс хәбәр ҡаршы алды. Хужабикә:

– Бисмилла, ҡоҙа килә, – тип еңелсә мәрәкәләһә, Барый бабай:

– Ҡалай һөйләмәй генә йөрөйһөң, әйҙә, ултыр, – тип ҡунаҡсыллыҡ күрһәтте. Күкбүрин иһә:

– Әйтмәксе, һиңә йомош та бар ине, – тип ваҡиғаның алҡымынан алмаҡ булды.

Әммә өй хужаһы ваҡыт ағышын ҡабаландырмау яғында ине. Икенсенән, уның ҡәтғи рәүештә тамаҡ ҡырғылауы йотҡолоғоноң тәҡәтһеҙ ҡымырйыуын аңлата ине. Шуға күрә ул, өҫтәлдәге ниғмәткә ымлап:

---

**Ауҡат* – ризыҡ.

– Әйҙә, тәүҙә тотоп ебәрәйек әле. Йомош ҡасмаç, – тип рюмкаһын сәкәштерергә Күкбүрингә һондо… Бер-бер артлы ике-өс рюмканы һелтәгәс, кәйефе ҡырҡ градусҡа күтәрелгән Фәрүәз Лоҡманович йомошон иçенә төшөрҙө:

– Һин, Лотфулла, буласаҡ һәйкәлдең нигеҙенә бер-ике йөк таш ташы әле. Үҙеңә әҙ-мәҙ аҡса ла булыр. Килешеүҙе аҙағыраҡ төҙөрбөҙ…

Лотфулла теге хәйерһеҙ көндән һуң телдән ҡалһа ла, ҡолағы һаҡ – барыһын да аңлай ине. Ул ризалығын белдереп баш ҡаҡты, ләкин һораулы ҡарашы: “Кайһы ергә? “ – тигәнде белдереп, Күкбүриндең ауыҙына төбәлде. Һорауҙы һүҙһеҙ аңлаған хакимиәт башлығы дауам итте:

– Һин сходта булмағас, белмәйһең инде. Оло һырт…

Тап ошо ерҙә иң уңайлы мәлдең еткәнен тойған Барый ҡарт, уны бүлдереп, һөжүмгә күсте:

– Фәрүәз ҡустым, һәйкәл Сағыл итәгендә булһын!

Аптырауҙан Күкбүриндең көйшәп ултырған ризығы саҡ тын юлына китмәне:

– Һуң, баяғы үҙең…

– Беләм, унда шулай кәрәк ине. Беҙ бында ни һөйләһәк тә, хәл итеү барыбер һинән тора. Тик әлеге шул, политический хата китеп бармаһын, тип кенә әйтеүем...

“Политический”, бигерәк тә “хата” тигәнде ишетеп тертләгән Күкбүрин бер мәлгә айнып киткәндәй булды хатта. Шуға күрә уның, көйшәүҙән шып туҡтап:

–- Ниндәй хата? – тип һорауы Барый ҡартта, киреһенсә, ышаныс тойғоһо уятты. “Әһә, шөрләнеңме?” – тип уйланы ул эске бер ҡыуаныс менән. Ләкин һорауға яуап бирергә ашыҡманы – бушаған рюмкаларға хәмер ҡоя-ҡоя:

– Хәҙер әйтермен, – тип һуҙҙы. – Әйҙә, ит бешкәнсе йәнә берҙе күтәреп ебәрәйек әле…

Сираттағы миҡдарҙы урын-еренә еткереп, уны тағы ҡалъя менән томалап ҡуйғас, өй хужаһы дауам итте:

– Һинең белмәүең дә ихтимал: беҙҙең ауылдан бер түгел, ике кулак һөргөнгә ебәрелгән. Икеһе лә йылға аръяғынан. Ә беҙ төрлө буржуйҙарҙы юҡҡа сығарған советтарҙы яҡлап ҡан түктек…

– Заман менән бергә ул репрессия ҡорбандарына ҡараш та үҙгәрә инде былай, – тип ҡартты бүлдерҙе тыныслана төшкән Күкбүрин. Йәнәһе, тапҡанһың ни менән ҡурҡытырға.

– Уныһы шулай, – тип дауам итте Барый ҡарт. – Ә бына ауылдағы берҙән-бер хәрби әсирҙең йылға аръяғынан булыуы – сүп өҫтөнә сүмәлә.

Әгәр хужаның тәүге дәлиле маңлайға сиртеү булһа, һуңғыһы эйәккә һуғып иçәңгерәтеүгә тиң ине. Ысынлап та, хәрби әсир егерме йылдан һуң тулыһынса аҡланған “халыҡ дошманы” түгел шул. Әйткәндәй, дәлилдең етдилеге уның Фәрүәз Лоҡмановичҡа нисегерәк тәьçир итеүендә лә күренә. Ул башта:

– Ә-ә… Хажиәхмәт ағай мәрхүмде әйтәһеңме? – тип йөпләү ҡатыш асыҡлау һүҙҙәре өçтәне лә аҙағынан: – Дә-ә-ә… – тип һуҙып ҡуйҙы.

Был халыҡ-ара киçәксә хакимиәт башлығының шиккә төшөүен, уйға ҡалыуын аңлата ине. Ә уныҡы кеүек яуаплы эштә шик-шөбһә – насар юлдаш. Етәксенең тотҡан юлы тура, әйткән һүҙе менән ҡылған эше ышаныслы булырға тейеш. Ә иң мөһиме – хаталарҙан азат булыуы мотлаҡ. Бәләнән баш-аяҡ.

***

Икенсе көндө Лотфулла буласаҡ обелиск нигеҙенә тип сығарған ташының тәүге йөгөн Сағыл итәгенә бушатҡас, Барый ҡарттың кисәге ҡылығы ат йөрөшө булғанлығына һағынбайҙарҙың барыһы ла төшөндө. Төньяҡ еңел һуланы: тимәк, һәйкәл уларҙың яғына йәм биреп торасаҡ! Көньяҡҡа килгәндә, ул

ғәрлектән ҡара янды: мәсхәрә! Һай, был Барый! Юҡҡа ғына уның ҡушаматы “төлкө” түгел шул.

Тик ҡоро ғәрлек менән ҡара яныуҙан файҙа юҡ – сара күрергә кәрәк. Ә ул берәү генә: Күкбүринде саҡырып һыйлау. Барый ҡарт уға бер литр ултыртҡан тиме? Уныһы ла өс кешегә. Ә беҙ ике литр ултыртабыҙ! Ә ниңә бысранып торорға? Әйҙә булғас булһын – ярты йәшник алайыҡ. Барый ҡарт ҡоро-һары ашатһа, беҙ хакимиәт башлығына тәкә һуябыҙ. Йәш иттән ҡуллама яраштырып, бауыр-йөрәгенән тултырма бешерһәң, йығыла ла китә инде. Ҡайһы яҡтың өҫтөн булғанын шунда ҡарарбыҙ!

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ: икеһен дә кирегә бороу мөмкин түгел. Икенсе аҙнаның йомаһын Һағынбай ауылының көньяҡ яртыһынан да зарығыбыраҡ көткән мөйөш булдымы икән? Етмәһә, уларҙың былай ҙа көйрәп янған йөрәктәренә кәрәсин һипкән төҫлө, Лотфулла көн һайын атын егә лә Сағыл башына таш сығарырға юллана. Төш етеүгәрәк арбаһына тейәлгән бер нисә яҫы, йәлпәк ташты тауҙың итәгенә алып килеп ауҙара. Уға Барый ҡарт шулай әҙләп ташырға ҡушҡан. Күрәһең, арғы яҡтарҙы оҙағыраҡ үртәүҙән үҙенә күрә кинәнес таба.

Әммә донъяның алмаш килеүе һәр кемгә мәғлүм. Был ҡанундың мәңгелек икәнлеге Күкбүриндең Һағынбайҙа икенсе тапҡыр ҡунаҡ булыуынан һуң тағы бер тапҡыр раҫланды. Ләкин ваҡиғалар сылбырының ҡапма-ҡаршы тарафҡа өйөрөлөп китеүенән алда көньяҡ халҡы мул итеп әҙерләнгән мәжлес ойоштторҙо. Ундағы һый-хөрмәт хан туйындағы һымаҡ уҡ булмаһа ла, бей туйынан ҡайтыш түгел ине. Аңлауығыҙса, был сағыштырыу шартлы, сөнки замана табындарының күрке һәм мәңге тутыҡмаҫ тел асҡысы булған ҡөҙрәтле эсемлек бейҙең түгел, хандың төшөнә инмәгәндер. Эйе, эйе, шуны әйтәм инде. Алғараҡ китеү төҫлө күренһә лә, бәйән итмәү мөмкин түгел: әлеге мәжлестә Фәрүәз Лоҡманович тәки йығылды бит. Әммә башлыҡ, көньяҡ Һағынбай халҡы уйлағанса, бишбармаҡ менән тултырманың телде йоторлоҡ татынан түгел, ә баяғы эсемлектең ҡеүәтенән ҡоланы.

Әлегә ул йығылмаған, ана, Мөхтәр ҡарт өйөндә ҡунаҡ булып ултыра. Халыҡ байтаҡ – ярты ауылдың рюмка күтәрерлек хәле булған ир-аты барыһы ла тип әйтерлек бында. Һәр кем башлыҡ менән сәкәштереп зәмзәм һыуын тәмләүҙе, бер йылы һүҙ әйтеп булһа ла йүпәләүҙе мәртәбәгә һанай. Бигерәк тә бөгөнгөләй һынылышлы мәлдә. Табындың иҫ киткес муллығы менән мәжлестең башындағы дөйөм хәбәрҙәрҙе яҙып тороуы артыҡ, сөнки улар, ғәҙәттә, бер ҡалыпҡа ҡоролоусан. Шуға күрә, беҙ уның урта тәңгәлен тасуир итәйек. Ана, һөйләшеү ҙә тап беҙ ишетергә теләгән юҫыҡҡа боролдо.

–…Һә! – тип һаман аптырауҙан арына алманы Мөхтәр бабай. – “Халыҡ дошманы” тигән мөһөр баҫыусылар үҙҙәре иң яуыз дошман булған, тип яҙалар бит әле. Һай, был Барый – күптән гүр эйәһенә әүерелгән Хажиәхмәттең һөйәген ҡуҙғатҡан икән. Һуғыш әсирһеҙ буламы ни? Моғайын, үҙе теләп бирелмәгәндер нимескә. Йә яралы, йә контужен хәлдә булыуы ихтимал.

Мәжлестәгеләр, өй хужаһын хуплап, шаулашып алды:

– Шулай, шулай!

– Донъя хәлен кем белә!

– Улайға китһә, ниместәр дивизияһы менән пленға төшкән!

– Ә беҙҙең Власов һуң?

– Эйе шул. Генералдарҙың булдыҡһыҙлығы өсөн һалдат яуап бирмәй инде!..

– Ә ул Барый үҙҙәренең яғынан бер түгел, ике “без вести пропал” тураһында өндәшмәнеме? – тип һөжүмде көсәйтте Мөхтәр ҡарт. Ауыҙы тулы ҡулламамы, тултырмамы булған Күкбүриндең “юҡ” тигәнде аңғартып баш һелккәнен күреп, танкыһының акселераторына баҫты:

– Әйтмәç тә шул! Хажиәхмәт мәрхүм, исмаһам, әллә бар, әллә юҡ ғәйебе өсөн лагерҙа булып, аҡланып ҡайтты. Ә хәбәрһеҙ юғалғандар ҡайҙа? Үлеме, тереме? Мужыт, улар полицай-маҙар булғандыр ҙа, язанан ҡасып, берәй илдә шым ғына йәшәп яталыр? Вәт быны хата тиһәң дә була!..

Өй хужаһының нимәгә төрттөргәне башлыҡтың әлегә хәмер шауҡымынан тотошлай томаланып өлгөрмәгән аңына яйлап булһа ла барып етте. Ысынлап та, донъяла ниндәй генә хәлдәр булмай. Бынау ҡарт ҡарҡылдағандар раçҡа сығып ҡуйһа? Ана бит, хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендәге хәрби енәйәтселәрҙе донъяның ул мөйөшөнән дә, был мөйөшөнән дә эҙләп таба торалар. Мөхтәр ҡарт ишараһының икенсе яғы ла бар: әгәр (Алла һаҡлаһын) хата китһә – хуш, вазифа! Ә уның менән бергә бынау татлы ниғмәттәр менән затлы эсемлектәргә лә Аллаһу әкбәр була. Һәр хәлдә, уларҙың шишмәләре һайыға…

Ҡот осҡос уйҙарынан үҙе тертләгән Күкбүрин талпына биреп ҡуйҙы ла ҡапыл:

– Ну-ка, йәһәт кенә Лотфулланы килтерегеҙ!.. – тип ҡысҡырҙы. Ул тағы ла ниҙер әйтергә самаланы, ләкин, сәсәп китеү сәбәпле, ауыҙынан йүтәл ҡатыш ғыжылдау ауазы ғына ишетелде. Күрәһең, ҡурҡыуҙан башта сәйнәмен йотоп ебәрергә онотто. Кемдер уның әмерен үтәргә йүгерҙе, ҡалғандар, ярамһаҡланып, башлыҡ тирәһендә уралды. Ҡайһыһылыр быуылып сәсәгән Күкбүриндең арҡаһына һуҡҡылаланы, бер нисә кеше, уның хәлен еңеләйтергә теләп, яһалма рәүештә тамаҡтарын ҡырғыларға тотондо.

Ҡайҙа арҡаһын төйгөләп, ҡайҙа теләктәшлек күрһәтеү ниәтенән тамаҡ ҡырып башлыҡтың сәсәүен баçып та өлгөрмәнеләр – ишектә Лотфулла пәйҙә булды. Уның бөтә ҡиәфәте “Нимә?” тигән һорауға әүерелгәндәй ине.

– Тәк, – тине тамағы һаман көйләнеп өлгөрмәгән Күкбүрин. – Һин, Лотфулла… ҡхе, ҡхе… сығарған ташыңды… ҡхе, ҡхе… Оло һырт итәгенә ташы… ҡхе, ҡхе…

Лотфулла өнһөҙ генә баш ҡаҡты. Хәйер, ул һөйләшә алған хәлдә лә бер ни әйтә алмаç ине, моғайын. Ниндәй генә булыуына ҡарамаçтан, түрә бит. Ә уларға ҡаршы һүҙ әйтеү йолаһы күптән онотолған ғөрөф-ғәҙәттәр рәтендә.

***

Һағынбай халҡын ике ҡапма-ҡаршы төркөмгә бүленергә мәжбүр иткән был ваҡиғаларҙы иң еңел кисергән кеше, моғайын, Лотфулла булғандыр. Сөнки, әлеге лә баяғы, сит ауылдыҡы. Әлбиттә, уға хәләл ефетенең төйәге булған һәм әлеге көндә үҙе йәшәп ятҡан төньяҡ ос яҡынырaҡ, әммә был тойғо хакимиәт башлығының һүҙенән өçтөн була алмай. Туҡта, әгәр Күкбүриндең сетерекле фарманын үтәү Мәйсәрәнең күңелендә илһөйәрлек хистәре уятып ебәрһә? “Күҙ күрер, – тип уйланы Лотфулла. – Алдан ғауғаламай торайыҡ әле – мужыт, ҡаңғырмаç…”

Ысынлап та, шуның өсөн ҡаңғырышырға Мәйсәрәнең башына тай типкәнме ни? Уға аҡса булһа, шул еткән. Әйткәндәй, ул әлеге мәсьәләне бик ҡаты ҡуйҙы Лотфуллаға:

– Унда-бында ташыттырған өсөн аҡсаһын ике мәртәбәгә арттырһын. Бер эште ике ҡат эшләү – уйын түгел.

Эштең, ғөмүмән, уйын түгел икәнен Лотфуллаға аңлатыу кәрәкмәй инде былай. Ә Фәрүәз Лоҡмановичтың ҡушҡаны – бигерәк тә. Шуға күрә ул, әлеге сетерекле эште көндөҙ башҡарырға ҡыймайынса, төнгә ҡалдырырға ҡарар итте.

Мөғжизә!.. Икенсе көнөнә йоҡонан уянған Һағынбай халҡын белəп алған тойғоно ошо бер һүҙ менән генә аңлатырға мөмкин. Нисек ғәжәп итмәçһең:

кисә генә Сағыл итәгендә ятҡан таштар Оло һырт битләүенә күскән. Нисек унда пәйҙә булған улар? Ен-пәрейҙәр ташығанмы, әллә үҙҙәре йәнләнеп шунда барып ятҡанмы?

Китте шау-шыу, ҡупты ғауға. Хәйер, төньяҡ өлөш таяҡ тығып болғатылған ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтһә лә, ауылдың көньяҡ осонда шым-шырыҡ хөкөм һөрә ине. Ҡалайтып тыныс ҡалһын төньяҡтар – уларҙың милкенә оронғандар бит!.. Ҡайҙа Лотфулла? Уның был ваҡытҡаса йоҡлап ятыуын белгәс, бер кемдә лә шик ҡалманы: ташты шул яуыз күсергән! Мәйсәрәне ҡыҫымға алдылар. Ә ул нимә тиһен: эйе ташыны шул. Кем ҡушҡанмы? Кем булһын – Күкбүрин.

Шунда ғына төньяҡтар үҙҙәренең һемәйгәнен аңланы. Тимәк, бөтә ғилләхакимиәт башлығында. Дөрөҫөрәге, уны нисек һыйлауҙа. Ишетеүҙәренсә, йылға аръяғы был тәңгәлдә ғәжәп дөргөнлөк һәм йомартлыҡ күрһәткән: араҡылары бик мул булған, тәкә һуйғандар. Ә йылғаның бирге яғы уларҙан кәмме ни? Улар ярты йәшник алһа, беҙ бер йәшник итеп алабыҙ хәмерҙе! Әгәр тегеләр тәкә һуйһа, беҙ тана һуябыҙ! Булғас булһын!..

Театр донъяһында шундай ҡанатлы һүҙ йөрөй: әгәр сәхнәнең беренсе шаршауында мылтыҡ эленеп торһа, һуңғы шаршауҙа ул мотлаҡ атырға тейеш. Әлеге мылтыҡ ролен кемгә йөкмәтергә булыр икән, тигән уй менән әҫәрҙең башын байҡап ҡараһаҡ, район хакимиәте башлығына барып юлыҡтыҡ. Әгәр был вазифаны биләүселәрҙе шартлы рәүештә элекке кантон начальниктарына тиңләп, “ни ҡылһа ла ирке бар” тигән дандарын хәтергә төшөрһәк, ысынлап та, мылтыҡ роленә Әлимовтан да ҡулай кешене табыуы ҡыйын.

“Мылтыҡ үҙенән-үҙе атылмай, уның тәтеһенә кем баҫыр һуң?” – тиерһегеҙ. Рәхим итегеҙ: район башлығының ҡыҙы Жанна. Тап килһә килә бит: уның аҙашы, Орлеан ҡыҙы Жанна д,Арк заманында инглиз баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышып йөрөгән. Бер һүҙ менән әйткәндә, ир-ҡыҙ!

“Ир-ҡыҙҙы тәтегә баҫырға ниндәй сәбәп мәжбүр итеүе мөмкин?” – тип һорарығыҙҙы белеп, серҙе сисергә ашығам: ул быйыл ун беренсе класты тамамлай. “Тамамлаһа һуң?” – тип уйларһығыҙ илтифатһыҙ ғына. Бөтә әтнәкә ошо бөйөк ваҡиғала шул. Дөрөҫ, ваҡиға ябайҙарҙан-ябай, хатта әһәмиәтһеҙ. Ләкин был билдәләмә Жанна өсөн түгел. Барый ҡарт әйтмешләй, ниңә тиһәгеҙ, ул ябай кешенең ҡыҙымы ни? Жанна, ғөмүмән, үҙенә ҡағылышлы бар нәмәне ғәҙәттән тыш күренеш тип ҡабул итергә өйрәнгән. Дөрөҫөрәге, өйрәткәндәр. Шуға күрә тиҫтерҙәре алдындағы өҫтөнлөк тойғоһон да, уҡытыусыларҙың айырым мөнәсәбәтен дә, бына-бына үҙенә тапшырыласаҡ алтын миҙалды ла шулай тейеш тип уйлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, үҙен Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе кеүегерәк тоя.

Бына шул ҡашҡа тәкә имтихандар барышында атаһы алдында ҡәтғи талап ҡуйҙы: район үҙәгендә уҙғарыласаҡ сығарылыш балында фейерверк булһын! Жаннаның тел төбө аңлашыла: ул мәктәп тамамлаған йыл ҡалған йылдарҙан айырылып торорға һәм әйләнә-тирәләгеләрҙең иҫендә ҡалырға тейеш. Сөнки, башта әйтеүебеҙсә, беҙгә әһәмиәтһеҙ булып күренһә лә, хакимиәт башлығының ҡыҙы өсөн сығарылыш балы иң ҙур ваҡиғаларҙың береһе булып төҫмөрләнә ине. Район үҙәгенең быйыл ун беренсе класты тамамлаусылары һуштан яҙып ҡоларлыҡ булһын был фейерверк. Кем менән замандаш булғанлыҡтарын белһендәр!

Ҡыҙының нәҙберек холҡона, көйһөҙ еңмешлегенә өйрәнеп бөткән Әлимовтың, йәки, халыҡ телендәгесә, Ғазаповтың, әлеге ҡәтғи талапты үтәмәйенсә сараһы юҡ, буғай. Үтәмәй ҡара! Шундуҡ сираттағы истериканы, йәғни, үҙебеҙсә әйтһәк, саяланыу кәмитен көт тә тор. Ә был Әлимовҡа кәрәкме?! Әйҙә, ҡыланып ҡалһын, уҡыуға китһә, бәлки, шауҡымы әллә ни һиҙелмәҫ. Әле уның бер

фейерверк менән мөрхәтһенеүенә ҡыуанырға кәрәк. Әгәр, Алла һаҡлаһын, йәш-елкенсәктең һушын китәргән Юрий Шатунов, Филипп Киркоров кеүегерәк берәй “йондоҙ”ға заказ бирһә? Тәүбә, тәүбә, әстәғәфирулла!..

Ә был фейерверктың, йәғни, яһалма ут йәйғороноң хаҡы был тирәләме? Уйлай торғас, район етәксеһе Еңеүҙең 50 йыллығына бүленгән аҡсаның кескәй генә бер өлөшөн ҡыҙының күңелен табыуға йүнәлтергә ҡарар итте. Әйтәйек, Ташъяр ауыл Советына вәғәҙә ителгән болдо. Алда юбилейҙар күп: илле биш, йәнә биш йылдан Бөйөк Еңеүҙең алтмыш йыллығы тора. Күбенә сыҙаған халыҡ әҙенә түҙер әле.

...Район хакимиәте башлығы шылтыратҡанда Күкбүрин үткән йомалағы зыяфәт* шауҡымынан көскә арынып, илгә хеҙмәт итеүҙәң алғы сафына киренән баҫҡайны. Ул башта Әлимовтың хәбәренә бер килке төшөнмәйерәк ултырҙы: ысынды һөйләйме, әллә шаяртамы? Нисек була инде ул? Ә вәғәҙә? Район бюджеты ауырлыҡ кисерә?.. Аңлашыла. Илле биш йыллыҡҡамы?.. Ярай, ярай, планға шулайтып индерербеҙ. Халыҡмы?.. Ә-ә, әлбиттә, аңлар, борсолмағыҙ, иптәш Әлимов. Эйе шул, илдәге дөйөм хәлде күреп торалар ҙа…

Мылтыҡ тауышы шул көндө үк Һағынбай ауылына барып етте. Дөрөҫөрәге, уның шаңдауы. Мылтыҡтың ике көбәгенән бер-бер артлы яңғыраған шартлау Күкбүрингә: “Аҡса юҡ! – тигән һылтау булып ишетелһә, артабан ул үҙенең тәү мәғәнәһен юғалтып: “Һәйкәл булмаясаҡ!” – тигән ҡырҡа-яран фарман булып юлыҡты һағынбайҙарға. Шулай, ҡайһы саҡта халыҡтың шартлауҙы ишетеүе мотлаҡ түгел, уға шаңдауы ла еткән.

Был хәбәр тыуҙырған шау-шыуҙы яҙып килештерерлек түгел – уны бары тик яҡынса күҙ алдына килтерергә мөмкин. Һуң, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: әлеге шарт-лауҙан хасил булған бөйлән** шундай көслө ине, хатта шул көндән һуң Лотфулла яңынан һөйләшә башланы. Кем нисектер, ә Лотфулла ҡыуанып бөтә алмай быға. Ана бит, шок терапияһының файҙаһы теймәй ҡалманы!

Йәнә Барый ҡарт үҙенең жанрын билдәләп булмай торған ҡарһүҙҙәрен һөй-ләүҙән шып туҡтаны. Бәлки, ялыҡҡандыр. Әллә башҡаларҙы ялҡытҡанын һиҙ-ҙеме икән? Мөхтәр бабайҙың холҡонда ла ҡырҡа үҙгәреш һиҙелде: ул хәҙер ар-тына ҡарамайынса йөрөй алмай. Бер-ике аҙым атлай ҙа, артына боролоп ҡарай – нәҡ Мәжит Ғафури шиғырындағыса. Ихтимал, ул илле йыл артына ҡарамауының үсен ҡайтаралыр.

Иң ғәжәбе, моғайын, Мөхәррәм ҡарттың киренән ҡурҡаҡҡа әүерелеүелер. Уны хәҙер яңынан “буш йөрәк” тип йөрөтәләр. Һуғышҡа алмауҙары өсөн әсенеүҙәрен иҫенә лә алмай. Һөйләүҙәренсә, ҡолағы ла ишетә башлаған, имеш. Әгәр был хәбәр дөрөҫ булһа, шок терапияһының халыҡ тормошондағы әһәмиәте бермә-бер арта.

Ә, ғөмүмән, Һағынбайҙа барыһы ла әүәлгесә, тормош һәүетемсә дауам итә. Ауылды икегә бүлеп аҡҡан кескәй йылға һаман үҙ йырын йырлай. Уның саф һыуҙары ике яҡ ярҙы ла тигеҙ йыуа. Моғайын, йылғалар өсөн уң яр, һул яр тигән төшөнсәләр бөтөнләй юҡ, ә үҙҙәре ынтылған ал тараф ҡына бар. Ысынмы-бушмы, ауыл халҡы йылғаларының ошо үҙенсәлегенә иғтибар итеп, йыш ҡына ул йырлай-йырлай ағып барып, күҙҙән юғалған офоҡ ситенә күҙ һала, имеш. Бына шундай хәлдәр.

---

**Зыяфәт – һый-хөрмәт.*
***Бөйлән – шок.*



Түләк
ҒИРФАНОВ

# ПУЛЕМЕТСЫ СӘХИ

**хикәйә**

Был хәлдәрҙе яҡын танышым Хәй ағай нисек һөйләһә, шул килеш ҡуйын дәфтәремә теркәп ҡуйғанмын. Ваҡытында берәй баҫмаға бирергә форсат теймәгән, күрәһең... Ағайҙың вафатына ла байтаҡ ғүмер үтте. Юлым осраҡлы ғына уның тыуған ауылы аша үтмәһә, танышым рухына белгән доғаларымды уҡып сыҡмаҡсы булып, ауыл зыяратына һуғылмаһам...

Ағайыбыҙ һуғыштан һуң яңы төҙөлөп ятҡан С. ҡалаһына барып урынлаша, ҡала төҙөүҙә ҡатнаша, үҙенә лә шунда йорт һалып инеп, ғүмерен уҙғара.

Байтаҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ҡәберен тиҙ таптым, сөнки уны ерләүҙә үҙем дә ҡатнашҡайным. Ниәт иткән ғәмәлемде үтәп ҡуҙғалыуыма, күҙем киң итеп ихаталанған ҡәбергә төштө. Ирекһеҙҙән, йәнәш торған ике мәрмәр таштағы яҙыуҙарҙы уҡыным. Таштарҙың береһенә —«Сәхиулла Ғәлиулла улы Хәйретдинов», икенсеһенә «Евдокия Степан ҡыҙы Хәйретдинова» тип яҙылғайны.

Сәхи һәм Дуся?.. Хәй ағай бәйәне ҡылт итеп иҫемә төштө. Ағайҙы ерләгәндә был ҡәбергә нисек иғтибар итмәгәнмендер, белмәйем...

***

«Сәхи ағайым минән дүрт-биш йәшкә өлкән ине — тип башлана яҙма. — Уҡытыусылар институтын бөтөп (ул саҡта ике йыллыҡ шундай курстар бар ине), балаларға һабаҡ бирҙе. Ул ваҡытта ауылда уҡытыусының абруйы ҙур ине. Балаға хәреф танытып, мәктәптә генә уралманы улар. Өй һайын йөрөп, оло кешеләргә лә хәреф танытты, аңлатыу, өгөт-нәсихәтен дә бирҙе, кистәрен клубта концерт, спектаклдәр ҡуйҙырыу, төрлө уйындар ойоштороу менән дә шөғөлләнде. Гармунда, мандолинала ла уйнаны. Йәштәр уның эргәһенә яҡтыға йыйылған күбәләк һымаҡ эркелде.

Беҙҙең дә танауға еҫ керә башлаған саҡ. Ололар менән бер рәттән көн

---

*Түләк Ғирфанов (1939) "Ағиҙел" журналы уҡыусыларына күптән таныш. Дүрт проза һәм публицистика китаптары авторы. Миәкә районының М. Аҡмулла исемендәге әҙәби премияһы лауреаты. Ҡаран-Ҡунҡас ауылында йәшәй.*

оҙоно эшләп йөрөһәк тә, арыу-талыу тигән нәмәне белмәйбеҙ, кис еттеме, уйын-көлкө, йыр-моң ағылған клуб яғына тартылабыҙ. Билдәле, ағайҙар беҙҙе уйынға ҡатнаштырмай. Ҡайһы бер уҫалыраҡтары клуб тирәһенән ҡыуып та ебәрә.

— Барығыҙ, ҡайтып йоҡлағыҙ. Һеҙгә был тирәлә уралырға иртә әле. Ауыҙ-мороноғоҙҙан һөт тә кибеп бөтмәгән,— тип үк ебәрәләр. Бындай кәмһетеү беҙҙе бик ныҡ ғәрләндерә, зитабыҙға тейә. Тиҙерәк үҫеп, ошо ағайҙар һымаҡ булғыбыҙ килә. Эй, йәшлек! Йүләрлек. Тағы ике-өс йылдан тын донъябыҙҙың аҫтын-өҫкә килтереп ҡәһәрле һуғыш башланыр ҙа, ошо ағайҙарыбыҙ менән бергә үлемесле ут эсенә барып инербеҙ, тип кем уйлаһын.

Хәрби хеҙмәткә саҡырылырға йәше етһә лә, Сәхи ағайымды бронь менән ҡалдыра килделәр. Сөнки ул саҡта ауылда уҡытыусылар етешмәй ине. Тиҫтерҙәре ыҡсым ҡыҙылармеец кейемендә ялға ҡайта йә безкозыркала фотоға төшөп, һөйгән ҡыҙҙарына һала. Ошоларҙы күреп, ағайымдың түҙемлеге бөттө, ахырыһы, район үҙәгенә барып бронен алдырып, үҙ теләге менән хеҙмәткә китте. Китте лә һыуға төшкән кеүек юҡ булды. Хаты ла, хәбәре лә булманы. Бер йылдан һуғыш башланды. Ул мәхшәрҙе күрергә, башҡа ваҡытта төшкә лә инмәгән яфаларҙы кисерергә беҙгә лә сират етте. Һуғышта артиллерия полкында төҙөүсе сифатында башынан аҙағынаса ҡатнаштым. Башымда һәр даим, бәлки, Сәхи ағайымды осратырмын, тигән уй йөрөнө. Юҡ, осраманы Сәхи ағайым. Иҫәнлеген белдереп ҡош телендәй генә хәбәре килһә лә, риза инек. Уныһы ла булманы. Өйҙәгеләр ҙә, мин дә уның был донъяла юҡлығына күнеп тә бөткәйнек инде. Биш йыл буйы бер ниндәй хәбәре булмаһын әле...

Еңеүҙе мин үҙем Австрияла ҡаршыланым. Дошмандың өңөнә үк барып етелмәне. Һуғыш тамамланыу менән, беҙҙең полкты тараттылар. Бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ, иҫән-һау тыуған ауылыма әйләнеп ҡайттым. Атай ҡарттың сәләмәтлеге насар ине. Шулай булһа ла, уны трудармияға алғандар. Ул шунан ҡайта алмаған. Әсәй, ҡалған туғандар имен-аман торғандар. Ауыл, әлбиттә, беҙ киткәндәге түгел. Өйҙәр иҫкергән, йорт-ҡура туҙған, ихата-фәлән ҡалмаған.

Беҙҙең өйҙөң дә ҡапҡа бағаналары ғына һерәйешеп ултыра. Ихаталарҙы утын итеп мейескә яҡҡандар. Бөтәһен дә яңынан башларға кәрәк: иҫкергәнде яңыртырға, ауғанды торғоҙорға. Һирәкләп фронтовиктар ҡайтһа ла, ауылда эшсе ҡулдар етешмәй. Тормош әүәлгесә ҡатын-ҡыҙ, бала-саға көсө менән бара. Йәшерәк фронтовиктар йөрөй-йөрөй ҙә ситкә сығып китә. Ғаиләһе булмағандар, ҡайтып та тормай, ҡалала төпләнеп ҡала. Минең дә иҫәп берәй ҙурыраҡ төҙөлөш барған тирәгә һыйыныу ине. Әсәй, туғандар йәл. Улар былай ҙа күпме түҙҙе, күпме ауырлыҡтарҙы еңеп, йән атып беҙҙең ҡайтыуҙы көттө. Уларҙы ташлап сығып китеү ғәфү ителмәҫлек хыянат булыр ине. Иҫ алғансы бер-ике көн йорт тирәһен ҡараштырҙым да колхоз эшенә сыҡтым. Мәктәп янынан үткәндә Сәхи ағайым иҫкә төшә лә, йөрәкте сыҙап торғоһоҙ юҡһыныу өйкәй. Һуғыш бөткәс, бәлки, берәй хәбәре булыр, тип тә өмөтләнә инек. Был өмөтөбөҙ ҙә аҡланманы. Еңеү яҙы ла, йәй ҙә үтте. Көҙ етте. Көс-хәл менән йыйып алған игенде ат арбаларына тейәп элеваторға илтәбеҙ.

Бер көн шулай ылауҙан арып-талып ҡайтып инһәм, өй эсе халыҡ менән тулған. Ҡот осто, әсәй менән бер-бер хәл булғанмы, тип шаңҡып киттем.

Күрәм: әсәй иҫән-һау, тик йөҙөнә ниндәйҙер билдәһеҙлек һыҙаттары ғына ятҡан. Шатлыҡтанмы, әллә хәсрәттәнме — аңлап булмай. Халыҡты йырып үтеп, әсәйҙе ҡосағыма алдым.

— Ҡунаҡтар бар бит әле, улым. Беҙгә тип төбәп килгәндәр. Түлке, ней, телдәрен аңлап булмай.

Тамам аптыраған әсәйем, ни ҡыуанырға, ни ҡайғырырға белмәй, һике ситендә бала ҡосаҡлап ултырған йәш кенә ҡатынға ишараланы. Ҡунаҡ ҡатын мине күреү менән һиҫкәнеп китте, ҡосағындағы ҡыҙ баланы ситкә этәреп, һикереп торҙо.

— Сәхи! — тине ул үҙәк өҙгөс тауыш менән, — Сәхи!

Ҡапыл тоҡанған ялҡын һымаҡ балҡып киткән ят ҡатын менән бер мәлгә генә бер-беребеҙгә ҡарашып ҡатып ҡалдыҡ. Шик юҡ, ул мине Сәхи ағайым менән бутаны. Тимәк, ул ағайымды белә. Минең эскә әйтеп аңлаталмаҫлыҡ йылы йүгерҙе.

— Һин Сәхи түгелме ни? — тине ҡатын, минең өнһөҙ тороуымды күреп.

— Мин... түгел. Мин уның энеһе, — тинем, ҡаушауымды һиҙҙермәҫкә тырышып.

Ике ҙур һоро матур күҙҙән ике бөртөк йәш һытылып сыҡты.

— Һеҙ кем булаһығыҙ? Сәхи ағайымды ҡайҙан беләһегеҙ?

Ҡатын яуап бирәһе урынға ашыға-ашыға ҡул сумкаһынан нимәлер эҙләргә кереште. Унан таушалып бөткән, дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ киҫәге алып миңә һуҙҙы. Ҡағыҙҙы алыу менән ағайымдың яҙыуын таныным. Ул шулай хәрефтәрен һулға йығыбыраҡ яҙа ине. Күҙемә йәш төйөлә, хәрефтәр һикерешә. Ниһайәт, улар һикерешеүҙән туҡтай... «Ҡәҙерлеләрем, атай, әсәй! Бығаса төплө генә адресым булмағанлыҡтан, хат яҙа алманым. Шулай тура килде: гел күсеп йөрөйөм, гел юлдамын. Был хатымды ла машина кузовына һалып яҙам. Хәҙер ҡуҙғалабыҙ. Фашистарҙан тиҙерәк изге еребеҙҙе таҙартырға кәрәк.

Атай, әсәй! Был хатымды һеҙгә минең ҡатыным Евдокия һәм ҡыҙым Луиза тапшырыр. Һеҙ уларҙы мине яратҡан кеүек яратығыҙ. Иҫән булһаҡ, ҡайтҡас барыһын да һөйләрмен. Әле бик ашығам. Хуш-һау булығыҙ. Декабрь, 1943 йыл».

Ошо ҡыҫҡа ғына хатты ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. Уҡыйым да, уҡығаныма ышанмай, тағы уҡыйым. Өйҙәгеләр тын да алмай минең ни әйтеремде көтә. Әсәйем, хаттың эстәлеген алдан белеп торған кеүек, килене менән ейәнсәрен ҡосағына алып, йәшкәҙәгән күҙҙәрен миңә төбәп ултыра.

— Әсәй, — тинем мин, — Сәхи ағайым иҫән. Был уның хаты. Һин ҡосаҡлаған ҡатын — киленең Дуся, ә ҡыҙы — ейәнсәрең Луиза...

Халыҡ ҡапыл мыш-мыш иларға тотондо. Минең дә, ниңәлер, күҙҙәрем томаланды. Тәмәке тартып кереү хәйләһе менән ишеккә йүнәлдем. Бер-ике ир ҙә миңә эйәреп ишек алдына сыҡты. Көҙгө көн ҡыҫҡа ауышҡан. Ҡояш, ялҡыны бөткән ағас ҡуҙы кеүек тамам һүрелеп, тау артына төшөп бара. Ирҙәр гәзит киҫәгенә махорка төрөп, тәмәке тоҡандырҙы. Минең тәмәке тартыу теләгем һүрелде. Башымда уйҙар сыуалды. Хатын уҡып, ағайым иҫән, тип хәбәр һалдым-һалыуын, хат бит бынан ике йыл элек яҙылған. Ә һуғышта кеше ғүмерен йылдар түгел, секундтар хәл итә. Дуся еңгәмдең мине Сәхи ағайым менән бутауы ла тиккә түгелдер. Мин өйгә ингәндә халыҡ таралып, өй бушап ҡалғайны. Әсәйем өтәләнеп өҫтәл әҙерләй, Дуся еңгә ҡыҙына нимәлер аңлата-аңлата уның сәсен үрә.

Әллә ни һөйләшмәй генә сәйгә ултырыштыҡ. Ҡайнар сәйебеҙҙе өрә-өрә эсеп тәүге сынаяҡтарҙы ла бушаттыҡ. Луиза ғына, бер нәмәгә лә ҡағылмай, муйылдай ҡара күҙҙәрен тултырып бер әсәйемә, бер миңә ҡарап ултыра. Әсәйем ейәнсәре алдына майҙа ҡыҙҙырылған йомортҡа, бөтәүләй бешерелгән бәрәңге ҡуя.

— Әйҙә аша, ҡыҙым, тартынып ултырма. Бына ҡоротона үрел, төйөлгән муйылдан ауыҙ ит. Бөтәһе лә сеүәжәй, үҙебеҙҙеке, — ти.

— Ейәнсәрең һине аңламай шул, әсәй, — тим.

— Ә улар ниндәй телдә һөйләшә һуң? — ти әсәйем.

Шул саҡ быуылып торған йырын асылып киттеме ни — Дуся еңгәм ҡыҙын ҡосаҡлап һығылып иларға кереште. Луиза ла әсәһенә ҡушылды. Сәй яһап торған әсәйем, ҡулы бештеме, сынаяғын төшөрөп ебәрҙе. Эҫе һыу һике таҡтаһы буйлап ағып әсәйемдең аяғына тама, ихтимал бешерәлер, тик ул быға иғтибар итмәй, яулыҡ сите менән йөҙөн ҡаплап һығылып төшкән. Мин өйҙә берҙән-бер ир кеше, етмәһә фронтовик, был хәлгә тыныс ҡарай алманым, асыуланған төҫ алып, урыҫсалап тороп: «Это что за привычка плакать!» — тип ҡысҡырып ебәргән булдым. Һуғышта беҙҙең расчет командиры ҡалын шырт мыйыҡлы Михайлов асыуы килгәндә беҙгә шулай ҡысҡыра торғайны. Дөрөҫ, ул: «Что за привычка ныть?» — тип әйтә ине. Һуғыш барғанда ҡырҡ ата балаһына шулай өндәшеү, бәлки, урынлы ла булғандыр. Мин үҙемдең ҡылығыма үҙем оялып киттем. Әммә әйтеләһе һүҙ әйтелде. Һуңлап үкенеүҙән файҙа юҡ. Ялауай итек менән иҙәнгә шаҡ иттереп тибеп тә ҡуйҙым. Иң башта Луиза иҫенә килде. Илауынан туҡтап, ҡара күҙҙәрен миңә төбәне. Уның оло итеп асылған күҙ ҡарашында ҡурҡыу, ялбарыу түгел, ялтлап зәһәр нәфрәт уты ҡабынды. Шунда ғына ошо сабыйҙың фашистар биләгән ауылда тыуып үҫеүе аңыма килеп етте. Дуся еңгәм ең осона ҡыҫтырылған ҡулъяулығын алып күҙҙәрен һөрттө.

—Беҙгә улай ҡысҡырмағыҙ, зинһар. Ҡурҡыу, кәмһетелеүҙәрҙән йөрәгебеҙ өшөп бөткән. Сығарып атыуҙарын көтөп арыған йәнебеҙ — филтәһе бөткән шәм кеүек һүнергә генә тора. Ә илауға иғтибар бирмәгеҙ. Ҡатын-ҡыҙ заты күҙ-йәш түкмәй тора алмай. Илауҙы беҙгә шундай яҙмыш инселәгән, күрәһең.

Күҙ-йәш аралаш эселгән сәйҙән һуң Дуся еңгәм һөйләүенән шул мәғлүм булды: һуғышты пулеметсы Сәхи ағайым Белоруссияла ҡаршылай... Ҡаты алыштарҙың береһендә уларҙың уҡсылар полкы ҡамауҙа ҡала. Бер нисә рәт дошман ҡулсаһын өҙөргә тырышып ҡараһалар ҙа, көстәр тигеҙ булмағанлыҡтан, урманға сигенәләр. Арттарынан бер туҡтауһыҙ фашистар эҙәрләкләй. Беҙҙекеләр бик аҙ ҡала. Атырға патрондары, ашарға ризыҡтары бөтә. Тәғәм ризыҡһыҙ бер нисә тәүлек урманда йөрөгәндән һуң, Сәхи ағайым яҡындағы ауылға барып ҡарарға хәл итә. Немецтар барын-юғын да белмәгән таныш түгел ауылға төнөн барыу хәүефле. Ағайым таң алдынан китә. Ауыл урмандан шаҡтай алыҫ, кескенә йылға буйында, үҙәндә. Ваҡ ҡыуаҡлыҡтарға ышыҡланып, шунда яҡынлай. Бер йәш ҡыҙҙың баҡсала соҡонғанын күргәс, уны бер аҙ күҙәтеп тора, шунан эргәһенә килә. Өҫ-башы бысранып бөткән хәрбиҙе күреп ҡыҙ, бер ни тиклем ҡаушаһа ла, ҡурҡып ҡалмай. Үҙен Дуся тип таныштыра. Немецтар хаҡында белешкәс, ағайым ҡамауҙа ҡалыуын, иптәштәре менән урманда йөрөүен һөйләй, яҡын-тирәлә партизандар барлығы-юҡлығын һораша. Бер нисә көн ашамауҙарын да

йәшермәй. Дуся ауылда немецтар барлығын, һаҡ булырға кәрәклеген әйтә. Өйҙәренән бер аҙ сало, бәрәңге килтерә. Иртәгә лә ошо урынға килергә ҡуша. Ағайым иртәгәһен килеп байтаҡ аҙыҡ, яралылар өсөн бер ни тиклем медикамент алып китә. Икенсе килеүендә лә партизандар хаҡында һорағас, Дуся төндә өйҙәренә килергә ҡуша. Юлды яҡшы белгән ағайым төндә ул күрһәткән өйгә бара. Ҡыҙ ҡушҡанса ишек шаҡый. Оҙаҡ ҡына асмайҙар. Ниһайәт, келә ысҡындырылып, ишек яртылаш асыла. Ағайыма соланда өйөлгән бесән башына менеп йәшеренеп ятырға ҡушыла. Күңеленә, дошманға һатманылармы, тигән шик төшә. Бына хәҙер овчаркалар менән килерҙәр ҙә бесән башынан һөйрәп алып, ҡулдарын шаҡарып, төрткөләп алып китерҙәр, тип көтә. Ундай саҡта ваҡыт оҙаҡ үтә, минуты ла сәғәттәй тойола. Әллә һуң булмаҫ элек сығайым да китәйемме икән, тип тә уйлап ҡуя. Ни булһа ла, көтөргә хәл итә. Ярты төн уҙғас, тышта аяҡ тауышы ишетелә. Ағайым һағая, ҙур көсөргәнеш менән үҙен ҡулға алып, ни булырын көтә. Солан ишеген һаҡ ҡына асып берәү инә, өй ишеген шаҡый. Сәхи ағайыма өйрәткәнсә, ишек тиҙ үк асыла. Бер аҙҙан ағайымды ла өйгә саҡыралар. Һүрән генә янған шәм яҡтыһында ике ир һөйләшеп ултыра. Өлкән йәштәгеһе үҙен Степан тип таныштыра. Ерән һаҡаллы мыҡты ир үҙен «Һаҡалтай» тип кенә атай. Аҙаҡ асыҡланыуынса, Степан — Дусяның атаһы, ошо йорт хужаһы «Һаҡалтай» — подпольела ҡалдырылған большевик Бойко икән. Һаҡалтай ағайымдың кем булыуын, урманда нисә кеше барлығын, ни өсөн партизандар менән ҡыҙыҡһыныуын төпсөнөп һораша. Ағайым үҙҙәренең аҙ ҡалыуын, боеприпастары бөтөүен, фронт һыҙығын үтеп сығырлыҡ көстәре булмауын, шунлыҡтан партизандарға ҡушылып фашистарға ҡаршы көрәште дауам итергә теләүҙәрен әйтә. Һаҡалтай ағайымды иғтибар менән тыңлай. Шулай ҙа һөйләгәндәренә ышанып бөтмәй, ахыры. Иртәгәһенә ике иптәшен алып килергә ҡуша. Йәнә кисәге хәл ҡабатлана. Ағайым бесәнлектә ике иптәше менән Һаҡалтай килгәнен көтә. Ә ул төн ауышҡас ҡына килә. Тағы һорашалар. Был юлы күберәк ағайымдың иптәштәре яуап тота. Һынап ҡарамаҡҡа төрлө йомоштар ҙа ҡушалар.

Йәнә ике көн үтә. Шунан һуң ғына Һаҡалтай асыла төшә. Ул әлегә был яҡтарҙа партизан отрядтарының булмауын, әммә уны булдырырға кәрәклеге хаҡында һөйләй. Күп тә үтмәй, партияның подпольела ҡалған комитеты ҡамауҙа ҡалған совет һалдаттары нигеҙендә партизан отряды ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итә. Буласаҡ отрядтың командиры итеп Һаҡалтай тәғәйенләнә. Сәхи ағайымдар бөтә көстәрен биреп партизан отряды ойоштороу эшенә тотона. Фашистар үтеп инә алмаҫлыҡ төпкөл урындарҙа йәшәү, ҡышлау өсөн землянкалар төҙөлә. Дусяға яҡын-тирә ауылдарҙа халыҡҡа аңлатыу эше алып барыу, отряд менән даими бәйләнеш булдырыу бурысы йөкмәтелә. Ағайым да төрлө йомош менән ауылдарға йыш йөрөй. Ошо мәл Дуся менән ағайым бик ныҡ дуҫлаша. Тора-бара дуҫлыҡ ысын мөхәббәткә әүерелә. Ҡыҙҙың ата-әсәһе лә йәштәрҙең хисен аңлай. Фашист илбаҫарҙарының ауыл йәштәрен Германияға ҡыуыу өсөн исемлек төҙөй башлауы билгеле булғас, Степан менән Анна ҡыҙҙарын тиҙерәк күҙле-башлы итеү сараһын күрә: Сәхи ағайым менән Дуся өйләнешәләр. Окупанттарҙың үҙҙәрен вәхшиҙәрсә тотоуы халыҡты, бигерәк тә йәштәрҙе, урманға китергә мәжбүр итә. Отряд айлап түгел, көнләп үҫә. Оло ер менән бәйләнеш

булдырыла. Ниһайәт, ул үҙ аллы хәрәкәт итерлек хәрби берәмеккә әүерелә. Һаҡалтай етәкселегендәге партизан отряды ике йыл йәшәү дәүерендә фашистарҙың тиҫтәләгән коммуникацияларын, ҡорал складтарын, тимер юлдарын, күперҙәрҙе сафтан сығара, халыҡты Германияға ҡыуыу пландарын өҙә, дошмандың байтаҡ көсөн үҙҙәренә йәлеп итеп тота. Отряд 1943 йыл аҙағында, совет ғәскәрҙәре был төбәкте немец баҫып алыусыларынан азат иткәс, регуляр армияға ҡушыла. Сәхи ағайым да ике йәше менән барған ҡыҙын, ҡатынын күкрәгенә ҡыҫып үбә лә дошманды ҡыуып ары китә. Еңгәмдән ҡыҙы менән Башҡортостанға, үҙенең тыуған ауылына ҡайтыуҙарын үтенә. Хат, адресын яҙып бирә. Ул мәхшәрҙә йәш бала менән юлға сығырға еңгәм баҙнат итмәй. Ағайымдың ҡайтыуын көтөп, Еңеү көнөнә тиклем ата-әсәһе янында йәшәй. Мең ғазаптар сигеп көткән Еңеү көнө лә етә. Сәхи ағайымдан бер ниндәй хәбәр булмай. Иҫәнме, иҫән түгелме икәнлеге лә билгеһеҙ... Бәлки, яраланып тылға оҙатылғандыр ҙа өйҙәренә ҡайтҡандыр. Ошо уйы уға тынғылыҡ бирмәй. Берҙән-бер көндө йыйына ла дүрт йәшлек ҡыҙы менән юлға сыға.

***

Беҙҙең яҡтар еңгәмә бик оҡшаны. Әлбиттә, ул ваҡытта йәшәү шарттары беҙҙә лә үтә насар ине әле. Колхоз эш хаҡын игенләтә бирә. Уңыш булған йылды арыу ғына иген эләгә, уңыш насар йылды бер хеҙмәт көнөнә ике йөҙ грамм йәки унан да аҙыраҡ алаһың. Күмәк балалы ғаиләгә был иген ярты ҡышҡа ла етмәй. Эшләй алмағандарға айырыуса ауыр. Ашау етмәгәнлектән миктәп үлеп ҡалыусылар ҙа булды. Беҙҙең ғаиләне һыйыр һәм бәрәңге ҡотҡарҙы. Һыйырыбыҙ һөтлө булды. Бәрәңгене лә күп кенә ултырта инек. Дуся еңгәм бындағы хәлдәрҙе аңланы. Ике-өс көн торҙо ла колхоз идараһына эш һорап барҙы. Уны ашнаҡсы итеп алдылар. Еңгәм аш-һыуға бик оҫта ине. Иртә яҙҙан көҙгә тиклем колхоз яланда эшләүселәр өсөн аш бешертә. Дөрөҫ, ашнаҡсы эше лә тынғыһыҙ. Колхозсылар ҡайҙа эшләй — ул шунда күсенеп йөрөй. Ел-ямғырҙан һаҡланыу урыны ла — малай-шалай әтмәләп биргән бер ҡыуыш. Уның ҡарауы, ҡыҙының да, үҙенең дә тамағы туҡ. Колхоз, билдәле, хеҙмәт көнөнән ашау өлөшөн тотоп алып ҡала. Яҙғы, йәйге өҙөктә тамағың туҡ булғас, хеҙмәт көнөн киҫһәләр ҙә күнәһең. Сәхи ағайым бер йылдан һуң ҡайтты. Уның иҫән булыуына өмөтөбөҙҙө өҙөп үк бөткәйнек. Ә ул ип-иҫән, өр-яңы кителенең түше тулы орден, миҙалдарын ялтлатып, йәшендән һуң ҡалҡҡан йәйғорҙай балҡып ишектән килде лә инде. Барыбыҙ ҙа өйҙә, киске аш ашап ултырған саҡ. Иҫ тә, аҡыл да китте. Иң ғәжәбе шул: атаһын беренсе булып ҡыҙы Луиза танып, атай, тип ҡысҡырып ебәрҙе. Осрашыу минуттарында типһә тимер өҙәр таҙа, дәрте ташып торған ир-уҙаман кеүек күренһә лә, ағайым олоғайып, кәүҙәгә лә тартылып киткәйне. Йылдар буйы еүеш землянка ла, һалҡын окоптарҙа ятыу, әллә күпме яралары уның сәләмәтлеген ныҡ ҡаҡшатҡан. Һуғыш бөткәс тә ҡайтарып ебәрмәй, комендатурала ҡалдыралар. Берлинда, бер йыл унда нимә эшләүен ағайым беҙгә һөйләмәне. Вафатынан һуң хәрби комиссариат кешеһе уның ҡайҙалыр оҙаҡ аҙашып йөрөгән Ҡыҙыл Йондоҙ орденын тапшырырға килгәс кенә, ағайымдың Берлин коменданты Берзариндың ярҙамсыһы булғанын белдек. Беҙҙең өсөн уның алты йылға һуҙылған хеҙмәттән иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуы оло шатлыҡ булды. Йорт-ҡура тирәһен ул элек тә тулы тәртиптә тотто. Был юлы ла ҡайтып инеү менән эшкә бирелде. Мәктәпкә эшкә саҡырып килһәләр ҙә, ул,

ниңәлер, балалар уҡытыуҙан ҡырҡа баш тартты. «Хәҙер инде минән ниндәй тәрбиәсе сыҡһын»,— тине. Уның был ҡылығы, «хәҙер инде» һүҙенә ниндәй мәғәнә һалыуы беҙгә аңлашылмай ҡалды.

Колхозда иҫәпсе, келәт мөдире кеүек эштәрҙә йөрөнө лә урман ҡарауылсыһы булып китте. Ул ваҡытта урманға иғтибар бар ине әле. Емерек донъяны тергеҙергә ағас кәрәк. Күп кәрәк. Йорттар ҙа ағастан бурала ине ул саҡта. Хәҙер генә ул таштан да кирбестән һала башланылар. Ағайым урман эшенә мөкиббән китеп тотондо. Бер генә ағасты ла әрәм-шәрәм иттермәне. Ҡулы ҡаты, күңеле йомшаҡ булды. Сәскә өҙөлгәнен күрһә лә, илар сиккә етеп борсола ине. Ситтән тороп техникумында ла уҡып алды. Ғүмер буйы урман ҡараған тиерһең. Таң менән тороп сығып китә, өйҙәгеләр йоҡларға ятҡас ҡына ҡайта. Ҡайһы саҡта үҙе төҙөп алған урмандағы өйөндә ҡунып та ҡалғылай. Дуся еңгәм ағайымдың был ҡылығын үҙенсә аңлатты. «Ике йыл буйы урманда партизан тормошо менән йәшәү ҡанына һеңгән».

Ысын әле, ситтән иғтибар менән ҡарап торһаң, ағайымдың үҙен тотошонда сәйер нәмәләр шәйләргә мөмкин ине. Китеп барған еренән кинәт туҡталып нимәлер тыңлай, иғтибарлап тирә-йүнен күҙәтеп ала. Атлап йөрөүе лә икенсе, келәмгә баҫҡандай йомшаҡ баҫып, һаҡ йөрөй. Дуся еңгәм ирен аңлай белде. Эштән ҡайтмай ҡалған сағында ла тауыш сығарманы, тыныс ҡына ағайым ҡайтҡандың икенсе йылында донъяға килгән улына, ҡыҙы Луизаға наҙын тигеҙ бүлеп, тулы тормош менән йәшәне.

Сәхи ағайым ҡайтҡас, мин күптәнге хыялымды тормошҡа ашырҙым. Беҙҙән йыраҡ түгел төҙөлөп ятҡан ҡалаға барып эшкә керҙем. Ҡала кешеһе булып китһәм дә, ауылым юлын һыуытманым, ҡайтып йөрөнөм. Ағайым үҙе лә төрлө йомош менән ҡалаға йыш килеп торҙо.

... Бер ваҡыт шулай ауылға ҡайтҡан сағымда ағайым, атына ултыртып, миңә үҙенең биләмәләрен күрһәтеп йөрөнө. Мин, әлбиттә, урман күрмәгән кеше түгел. Ауылыбыҙ ҙа урман эсендә ултыра, тиһәм дә, алдашыу булмаҫ. Ләкин ағайым күҙлегенән күргән урман бөтөнләй икенсе ине. Ат әкрен генә урман юлынан атлай, саҡ ҡалҡып килгән ҡояш нурҙары, оялсан ҡыҙҙар кеүек, һомғол ҡарағайҙар араһынан ҡаса-боҫа беҙҙе күҙләй. Ағайым һәр төбәктең тарихына, атамаһына, үҫемлектәренә, кейек-ҡоштарына аңлатма бирә. Мин моңло йыр тыңлағандай кинәнеп, эргәмдәге хозурлыҡҡа йәнем иреп киләм. Уҡтай төҙ ҡарағайҙар, баҙыҡ имәндәр, һөйкөмлө ҡайындар, әсә күңелеләй йомшаҡ йүкәләр, сая сағандар бер-бер артлы күҙ алдымдан үтә. Барыһы ла шундай таныш, яҡындар. БыҒаса мин нишләп ошо матурлыҡты күрмәнем, яҡынлыҡты тойманым икән, ғәжәп. Ағайым һөйләй, ә миңә ағастар шауына, ҡоштар тауышына ҡушылып бар тәбиғәт йырлай кеүек. Әйткәйнем инде, һуғышҡа тиклем ағайым балалар уҡытты. Һөйләргә оҫта. Мәлен тура килтереп: «Ағай, һин ниңә уҡытыусы-тәрбиәсе эшенән баш тарттың?» — тип һорайһы иттем. Ағайым оҙаҡ ҡына уйланып килде. Аҙаҡ атын туҡтатып, утлауға ҡушты, миңә боролоп ултырып, һорауыма ҡаршы һорау бирҙе.

— Ә һин нисек уйлайһың?

— Һин балаларға ҡарағанда тәбиғәтте ныҒыраҡ яратаһың, буғай? — Башыма килгән тәүге уйҙы әйттем.

— Мин балаларҙы ла, тыуған яҡ тәбиғәтен дә берҙәй яратам. Эш унда түгел,— тине ағайым.— Үҙеңә мәғлүм, һуғыш бала-саға уйыны булманы.

Миллион ҡорбандар бирҙек. Үҙенең аяуһыҙлығы менән ул кеше психологияһын ныҡ үҙгәртте. Романтик рухлы, йомшаҡ күңелле кешеләр ҙә унан ҡаты бәғерлегә әйләнеп ҡайтты. Ә бәғере ҡатҡан кеше сәскә үҫтерә алмай. Ундай кешегә был эште көсләп ҡушыу ҙа яҙыҡ булыр ине.

— Һинеңсә, һуғышта ҡатнашҡан кеше тәрбиәсе була алмаймы инде?

— Мин улай тип әйтмәнем. Фронттың да төрлө урындары булды. Унда ла төрлө кеше үҙен төрлөсә тотто. Ә кем һуғыштың уртаһында булып, ысын мәғәнәһендә «ит турағыс» аша үткән, унан һәйбәт тәрбиәсе сығыуы икеле. Уның уҡыусылары йә үтә ҡаты бәғерле, йә аумаҡай, ҡушҡанды ғына үтәп йөрөүсе кеше буласаҡ.

Ағайымдың был ҡәтғи һығымтаһы менән ул ваҡытта мин килешә алмағайным. Әммә тормош һәр нәмәгә үҙенең төҙәтмәһен индерә. Ағайымдың артабанғы яҙмышында бер-бер артлы ҡабатланған ваҡиғалар сылбыры мине лә уйланырға мәжбүр итте. Урман техникумын тамамлағас, ағайымды эше буйынса үрләттеләр. Хәҙер уның тирәһендә оло түрәләр өйөрөлдө. Кемгә ағас, кемгә бура кәрәк. Һуңғы йылдарҙа урман йәнлектәре менән ҡыҙыҡһыныуҙар ҙа бермә-бер артты. Уларҙы өйрәнеү, ишәйтеү йүнәлешендә түгел, ә уларға һунар итеү, атыу, үлтереү йүнәлешендә. Бигерәк тә һуғыштан һуң үҫеп еткән йәш етәкселәр әүәҫ булып сыҡты «урман ите»нә. Урман йәнлектәрен ҡырағайҙарса ҡыра башланылар. Ағайым уларға ҡаршы тороп ҡараны.

Бер көн шулай ҡаланан килгән түрә, ағайымдың ҡаршы тороуына ҡарамаҫтан, балалы мышыны ата. Сабыйы инәһе эргәһенән китмәй, хәсрәт һунарсыларҙы ла яҡын ебәрмәй. Шул саҡ йәнә мылтыҡ шартлай. Мышы быҙауы ла инәһе өҫтөнә ауа. Ошо вәхшилекте күреп торған ағайымда партизан ҡаны уяна: ҡушкөбәген алып, браконьерға сәпәй... Уны яралай... Ағайымды өс йылға хөкөм иттеләр, өс йыл урынына биш йыл йөрөп ҡайтты. Унда ла урман һаҡлаған икән дә «чиновничий произвол»ға ҡаршы сығып, тағы йылдар өҫтәткән икән. Ҡартайып, һаулығын тамам юғалтып ҡайтты ул. Шулай ҙа өйҙә сыҙап ята алмай, колхоз яландарын ҡараусы булып эшкә сыҡты. Бер уйлаһаң, пәләүәт (полевод) эшенән дә тыныс эш юҡ һымаҡ. Атыңа ултыр ҙа ялан ҡара. Баҫыуҙа мал йөрөһә, ҡыу. Улай түгел икән шул. Һәр нәмәлә үҙенең ҡатнашлығы барлығын тойған, һәр нәмәне үҙенекеләй күңеленә яҡын алған кеше башына бәләне лә тиҙ таба.

Бер мәл беҙҙең хужаларға ла ер етмәй башланы бит. Тал-ҡыуаҡтарҙы ышыртып, йылға, күл буйҙарын, туғайҙарҙы һөрә башланылар. Тәбиғәткә ҡарата эшләнгән был ғәҙелһеҙлекте күреп, Сәхи ағайымда йәнә партизан ҡаны уяна. Туғай һөрөргә ебәрелгән тракторҙарға ҡаршы төшә. Шунда бер тракторсы, эскән сағы булғандырмы, ағайымды бәрҙереп үтә... Түше тулы орден, миҙаллы кителен кейҙереп ерләнек ағайымды. Партизан Сәхи, пулеметсы Сәхи йәшәп өлгөрҙөмө, юҡмы — күрәһен күреп китте. Иренең вафатынан оҙаҡ та ҡалмай Дуся еңгәм дә фани донъя менән хушлашып, ағайым эргәһенә гүргә ятты».

... Хәй ағай миңә ошоларҙы һөйләгәйне. Ағай иҫән сағында уның хәтирәләрен донъяға сығара алмауым бик йәл, әлбиттә.



Әмир
ӘМИНЕВ

# БЕР КӘМӘЛӘ...

ПОВЕСТЬ

Аллаһ Тәғәлә Нух пәйғәмбәрҙе саҡырып алды ла былай тине: «Ҡаты ағастан өс ҡатлы итеп шундай кәмә эшлә: оҙонлоғо – йөҙ илле, киңлеге – егерме биш, бейеклеге ун биш метр булһын, эсен-тышын ыҫмалалап сыҡ – һыу үтмәҫлек итеп. Башына ҡыйыҡ ҡуй, ҡабырғаларына тәҙрәләр уй. Кәмәң әҙер булыу менән, мин туфан һыуҙары ҡалҡытасаҡмын, шуғаса ҡатының, бала-сағаң менән кәмәгә инеп ҡал. Йәнә тағы: үҙең ғәҙел, намыҫлы, эшсән тип иҫәпләгән парлы кешеләр ал – ҡоро ергә барып төртөлгәс, хөр тормош башлар өсөн тәғәйен Аллаһ бәндәләре булһын. Бынан тыш бөтә төр йән эйәләренән аталы-инәле мәхлүк тә ал. Бәндәләр гонаһҡа батты, инде лә аңдарына килмәҫме, хаталарын аңламаҫмы, тигән өмөттәмен – ер йөҙөнә туфан һыуы ҡалҡытыуымдың сәбәп-маҡсаты ла ошо. Тағы. Үҙең менән ризыҡ-тәғәм, эсәр һыу ал – үҙеңә лә, ғаиләңә лә, кәмәңдәге бар тере йәнгә етерлек булһын, сәфәрегеҙ оҙаҡ буласаҡ. Ергә ҡырҡ көн, ҡырҡ төн буйына ямғыр яуҙырасаҡмын. Үҙем бар иткән һәммә нәмәне ер йөҙөнән юҡ итәсәкмен. Мин быны, ҡабатлап әйтәм, ерҙә ғәҙел, хөр, тигеҙ яңы тормош башлар өсөн эшләйем, эшләргә мәжбүрмен».

Бер ауыҙ һүҙ әйтмәй тыңланы Нух пәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләне. Тыңлаған һайын күңелендә шом артты, күҙ алдына һыу даръяһы, кешеләрҙең, мал-тыуарҙың һөрән-ҡысҡырышы килде. Әммә Раббының ихтыярына һүҙһеҙ буйһондо, сөнки уның ҡарарының хаҡлығына тамсы ла шикләнмәне.

Нух пәйғәмбәрҙең, үҙенең тоғро Рәсүленең, уйҙарын үтә күреп торған Аллаһ Тәғәлә уға яуап биреүҙе кәрәк тапты: «Әҙәм балаһы бер ҡасан да үткәндән фәһем алмай, хаталарынан һығымта эшләмәй, шуға ла һин кәмәңдә алып китеп ҡотҡарған кешеләр ҙә, ҡабаттан үрсегәс, насар ҡылыҡтарын тағы ҡыла башлаясаҡ. Әммә әлеге мәлдә был сарам, был һынауым кәрәк һәм ваҡытлы. Ә, бәлки, төҙәлерҙәр. Уларға мин ошо иректе биргәнмен дәһә».

---

*Әмир Әминев (1953) — башҡорт һәм рус телдәрендә сыҡҡан бер нисә китап авторы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире.*

Ете көн үткәс, ергә туфан ҡалкты, йырылды сикһеҙ даръя һыуы, асылды күҙ ҡабағы – ҡырҡ көн, ҡырҡ төн ҡойолдо ергә туфан һыуы. Ташҡын артҡандан-арта, көсәйгәндән-көсәйә барҙы, ерҙе тотош ҡаплап алды һәм ҡоро ерҙә ултырған кәмә һыуҙа йөҙөп йөрөй башланы. Даръя күтәрелгәндән-күтәрелде, урмандарҙы, унан тауҙарҙы ҡаплап китте, ер өҫтөндә көн иткән бөтә тере йән: ҡош-ҡорт, мал-тыуар, кейек-хайуандар, кешеләр батып-тонсоғоп һәләк булды, Нух пәйғәмбәр менән уның кәмәһендә ултырғандар ғына әлегә иҫән ҡалды. Ә туфан йөҙ илле көн дауам итте лә ҡуйҙы...

Бер көн Аллаһ Тәғәлә илтифат итте: ел ебәрҙе, һыу күтәрелеүен туҡтатты. Ташҡын әкренләп ҡайта башланы. Ҡырҡ көн үткәс, Нух пәйғәмбәр, кәмә ҡабырғаһында үҙе уйҙырҡан кескәй тәҙрәне асып, тышҡа ҡоҙғондо осороп ебәрҙе. Ерҙең һаман да һыу аҫтында икәнлеген белдереп, ҡоҙғон бер китеп, бер килеп йөрөнө. Артабан Нух пәйғәмбәр күгәрсенде осороп сығарҙы. Әммә күгәрсен дә, ҡуныр урын тапмайынса, кәмәгә кире әйләнеп ҡайтты. Йәнә бер нисә көн үтте. Күгәрсенде яңынан сығарҙы пәйғәмбәр. Был юлы ҡош суҡышына зәйтүн ағасының ботағын эләктереп осоп ҡайтты. Тимәк, һыу ҡайта башлаған, тимәк, ҡайҙалыр ҡоро ер бар! Нух пәйғәмбәр кәмәнең тәҙрәһен асып, күҙе менән донъяны байҡаны, алыҫта, һыу өҫтөндә, ҡалҡып торған осло тау түбәһен күрҙе һәм ишкәкселәргә кәмәне шул тарафҡа йүнәлтергә ҡушты.

Әммә бына бәлә – көтмәгәндә кәмәгә һыу тула башланы! Тикшерә-ҡарай торғас, шул асыҡланды: сысҡан, хаслыҡ ҡылып, кәмәнең төбөн кимергән икән. Нишләргә, ни ҡылырға белмәй йүгерешкән арала иң беренсе булып сәңке башлы йылан, аңына килеп, әлеге тишекте үҙенең ҡойроғо менән ҡаплай һалды – һыу инеүе туҡталды. Бына бит нисек, Нух пәйғәмбәр шәхсән үҙе һайлап алған йән эйәләре араһында ла хәсис табылды…

Барыһы ла кәмәнең өҫкө ҡатына сыҡты, ҡыуанышып һикерергә кереште, төрлө ауаздар сығарҙы, ҡайһыһылыр: «Тау, Торатау», – тип һөрәнләне, башҡалар: «Тере ҡалдыҡ, ҡотолдоҡ!»– тип уға ҡушылды.

Өс көн тигәндә, ниһайәт, барып еттеләр әлеге әллә ҡайҙан һерәйеп күренгән тауға, уны Торатау тип атанылар, йәғни Тере тау – үҙҙәрен үлемдән ҡотҡарған тау. Аллаһ Тәғәлә әмере буйынса, Нух пәйғәмбәр ҡатыны, улдары, килендәре, ҡыҙҙары-кейәүҙәре, һайлап алған кешеләре, хайуандары менән кәмәнән сыҡты. Раббы фатиха бирҙе: «Үрсегеҙ, ишәйегеҙ, һеҙҙе ҡотҡарған тауҙан бөтә ер йөҙөнә таралығыҙ. Торатауҙан тереклек бар булып китһен, хөр, татыу йәшәгеҙ, бер-берегеҙгә сысҡан эше хаслыҡ ҡылмағыҙ, бер кәмәлә икәнегеҙҙе аңығыҙға һеңдерегеҙ. Ер йөҙөндәге башҡа мәхлүктәрҙе ҡыйырһытмағыҙ, яуызлыҡ ҡыла ҡалһағыҙ, ул бер саҡ барыбер үҙегеҙгә әйләнеп ҡайтыр. Шунан ҡурҡығыҙ…»

…Ғәбит кипкән һөйәк ише ап-аҡ итеп йыуылған, тик әле иртәнге яҡҡа томан һипкененән әҙерәк еүешләнгән бейек болдорға ялан аяҡ сығып баҫты ла күкрәген тултырып һалҡын һауаны һуланы, быуындарын шыртлатҡансы керелде, муйынын борғоланы, ихатаһын, аҙбар-лапаҫын күҙенән үткәрҙе (Фәрзәнәһе малдарын көтөүгә ҡыуған…) һәм ҡарашын, ғәҙәт иткәнсә, өйөнән уҙа барһа ике саҡрымда үрә баҫҡан Торатауға күсерҙе. Күсерҙе лә ҡабаланмай ғына уның Ваҡыт ғәли йәнәптәре тишкеләгән-ярғылаған урындарын, өңөрәйеп эскә ингән йә иһә бүлтәйеп сығып торған ерҙәрен байҡарға тотондо. Ниндәй мөһабәт, ғәйрәтле, олпат уларҙың Торатауы! Һоҡланып туймаҫлыҡ мөғжизә инде бер. Көн дә иртән ошоно күрә, уның үҙҙәренең ауылы янында ғына ултырыуына ғорурлана, һәм ошо тойғолар малай сағынан бирле бер ҙә бүҫкәрмәй, иҫкермәй, киреһенсә, йылдар үткән һайын арта бара. Гүйә, тип-тигеҙ ерҙә ҡалҡып сыҡҡан йәки

ҡайҙандыр килеп ултырған да ошо тау, мәңгелеккә бында тороп ҡалған һәм Ғәбиттең генә түгел, бөтә ауылдың күркенә әүерелгән. Улай ғына тиһең, хәҙер ул районның йөҙөк ҡашы: Торатау ҡайһы районда – шул районда! Был тау тураһында байтаҡ уҡығаны ла бар Ғәбиттең. Уны ғалимдар Шихан тип атай, Көньяҡ Уралдағы геологик процестарҙың ҡабатланмаҫ һәм ғәжәйеп бер күренеше, улар теле менән әйткәндә, феноменаль ҡомартҡыһы икән. Ысын булһа, борон заманда Ғәбиттәр йәшәгән ауыл тирәһендә диңгеҙ шаулаған һәм баяғы геологик үҙгәрештәр, тәбиғәттәге ғәрәсәттәр, ер тетрәүҙәр, вулкандар урғылыу арҡаһында ул бынан сигенгән, ә был тау, әүәл диңгеҙ төбөндә булып, ахырҙа ҡалҡып сыҡҡан икән.

Тауҙың нигеҙе һөҙәк, өҫкө яҡҡа күтәрелгән һайын текәләнә бара, текәләнә бара, ә өҫтө футбол майҙаны ҡаҙәре тип-тигеҙ майҙан. Тауҙың көнбайыш яғы был яғына ҡарағанда күпкә текәрәк, ул яғында ҡасандыр диңгеҙ төбөндә үҫкән лилиәләрҙе, ылымыҡтарҙы, тигеҙ ерҙә осрамаған башҡа әллә күпме диңгеҙ үҫемлектәрен осратырға була. Шул уҡ көнбайыш яғында ҙур булмаған бер нисә мәмерйә лә бар. Легенда буйынса, икенсе ҡәбилә башлығы улына ғашиҡ булған һәм уның янына ҡасып китергә теләгән һылыу ҡыҙын хан шул мәмерйәләрҙең береһенә бикләп ҡуйған икән. Мәмерйәнең ауыҙын иләмһеҙ ҙур йылан һаҡлаған. Быларҙы хәҙер күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, хатта ышанғы ла килмәй. Бөгөн килеп Торатауға оло ҡаза янай: Стәрлетамаҡтың «Сода» йәмғиәте уны «ашарға» йыйына. Баҡһаң, сода етештереү өсөн иң сифатлы сеймал икән Торатау! Улай ғына тиң, сит илдәр ҙә яҫҡына был тауға. Яңыраҡ ҡына япондарҙың килеп ҡайтҡаны ишетелде, унан алда немецтар, голландтар булғайны. Капиталистар бик актив, ныҡыш, табыш өсөн әллә ниндәй хәйлә-алдауҙарға барыуҙары ихтимал һәм баралар ҙа. Бер нисә йыл әүәл, ана, Торатауға яҡын ғына ятҡан Шәкетауҙы шартлатып-емереп, тейәп алып китеп бөтмәнеләрме ни?! Торатауға ла шул яҙмыш янай, әлегә ижтимағи, милли ойошмаларҙың, «йәшелдәр»ҙең ҡаршы төшөүе генә туҡтатып тора. Ошо хәрәкәт саҡ ҡына йомшарһа, ата-бабаларыбыҙ оло йыйындар үткәргән, изге урыныбыҙға әйләнгән тауҙан бер нисә йылдан саң ғына тороп ҡаласаҡ. Ана, «йәшелдәр»ҙең бер актив ағзаһын, ҡала гәзитендә эшләгән билдәле журналисты, үҙенең баҫмаһында әлеге йәмғиәт эшмәкәрләгенә ҡаршы сығыш яһағаны өсөн һыу эскеһеҙ итеп туҡмап киткәндәр, ти ҙаһә…

Ғалимдар, эйе, күп йөрөй бында, сит илдәрҙән дә киләләр, һәр ҡайһыһы үҙенсә тикшерә, фараз итә, тауҙың йәшен самалай, таш-тоҡом өлгөләрен алып китә, фекерҙәрен матбуғатҡа яҙып сыға. Өләсәһе һөйләй бит, ана, һуғышҡа тиклем дә ошонда донъяның төрлө илдәренән килеп тикшереп йөрөгәндәр, тип. 1984 йылда йәнә лә килделәр. Ғәбит уныһын белә инде, үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Малай сағы ине, аптырашып, ғәжәп итеп, аҡ, һары, ҡара битле, төрлө-төрлө сәйер кейемдәге өлкән-өлкән ағайҙарҙың, апайҙарҙың артынан тиҫтерҙәре менән бер көтөү булып эйәреп йөрөгәйнеләр. Ҡулдарындағы ғәләмәт приборҙарына, бигерәк тә төрлө телдә һөйләшеүҙәренә иҫтәре киткәйне.

Ҡайҙалыр уҡығайны… 1770 йылдың май айында Лепехин тигән бер урыҫ сәйәхәтсеһе Торатау түбәһенә күтәрелә. Менерҙән алда ғалим үҙенә юл күрһәтеү өсөн урындағы халыҡ араһынан, – бәлки, тап Ғәбиттәрҙең ауылынан эҙләгәндер ҙә әле – кеше таба алмай йонсой һәм ошондайыраҡ мәғәнәле һүҙҙәр яҙып ҡалдыра: йәнәһе, башҡорттар был тауға оло ихтирам менән ҡарай, хатта изге урын тип иҫәпләй. Борон бында Ноғай ханы йәшәгән, башҡорттар уны ҡыуып ебәргән һәм үҙҙәре хужа булып ҡалған. Әммә тау яйлап диндән ҡурҡҡан, диндән ҡасҡан кешеләрҙең, йәмғиәттән ситләтелгән, байҙарҙан, түрә-каранан ҡасҡан

башҡорттар өсөн көн итеү урынына әйләнгән. «Быларҙы миңә башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәрен, легенда, ҡобайырҙарын яҡшы белгән һәм яттан һөйләгән Исмаҡ әйтте»,– тип дәлилләй Лепехин. Тағы бер фараз булған: имеш, башҡорттар Торатауға нимәлер вәғәҙә иткән, әммә уны һаман үтәй алмағандар икән, шуға ла тау эйәһенән ҡурҡалар. Ә биргән вәғәҙәне үтәмәй тороп тауға күтәрелһәң, ҡаза килеүе ихтимал…

Лепехин бик оҙаҡ өгөтләгәндән һуң ғына таба юл күрһәтергә ризалашыусыны. Ул кешегә, бәлки, мул һый, шарап менән күңелен күреү тәьҫир иткәндер, ғалимдың аҡса биреүе лә бар, бәлки, уның ҡурҡмағыҙ, бер нәмә лә булмаясаҡ, миңә, ғалим кешегә, ышанығыҙ, тигәне роль уйнағандыр? Һәр хәлдә сәйәхәтсе маҡсатына ирешә – тауға менә.

Ә юрматы ҡәбиләһе менән ноғайҙар араһында байтаҡ йылдарға һуҙылған ҡан ҡойошло һуғыштар мәғлүм. Һәм ул көрәш башҡорт ырыуының еңеүе менән тамамлана. Шунан бирле ил йөҙөндә тыуып торған һуғыш-алышҡа юлланған башҡорт егеттәре Торатауға күтәрелә һәм һуңғы тамсы ҡанына тиклем Ватанды һаҡларға ант итә. Был – изге йола. Немецтар менән булған һуңғы һуғышҡа киткән ауылдаштары ла Торатауға күтәрелеп, анттар биреп хушлашҡан. Ғөмүмән, Торатау юрматы ырыуы өсөн борон-борондан изге урын иҫәпләнгән. Бөгөн, әлбиттә, күп нәмә онотолған, шулай ҙа тирә-яҡ ауылдарҙағы мәктәп балалары килә, кешеләр тауҙы күрер, тирә-яҡ мөхит менән һоҡланыр өсөн менә, күптәр өсөн ул геологик объект булараҡ ҡыҙыҡ. Бөркөттәр оя ҡора, планеристар осоу-күнекмә менән шөғөлләнә…

Көҙгә тартҡан йәйге иртә барыбер ҙә һалҡынса икән. Аяҡтары өшөп, Ғәбиттең тәненән һалҡын бер тулҡын йүгереп үтте. Уйға батып, хәтирәләргә төшөп онотолоп киткән. Ана бит, бер нисә минут эсендә Торатауға бәйле әллә күпме хәтирәләр яңырҙы, тарих күҙалланды, иҫтәлектәр ҡалҡып сыҡты. Көн дә ашаған ризыҡ ялҡытҡан һымаҡ, көн дә күргән нәмә ғәҙәтигә әйләнә, баһаһы төшә, тиһәләр ҙә, Ғәбит өсөн Торатау – көн дә ниндәйҙер яңы битен асыусы, бер ҙә ялҡытмаусы, мөғжизәһен, серен юғалтмаусы тере һын ул. Унан ялҡа, арый алмай Ғәбит.

Бөгөн – ял. Барайым, яҡындан күрәйем әле тауҙы, тип уйланы ул. Календарҙа был көн ҡыҙыл менән яҙылған өсөн генә түгел, күңелен елләтер, ҡәнәғәтлек кисерер, күпмелер ваҡытҡа етерлек рухи көс, ләззәт йыйыр. Байтаҡ көн барғаны юҡ, үҙенә оят та хәҙер, эшенә һалҡын ҡараған һымаҡ. Унһыҙ мәғрур тау нишләп кенә ята икән? Ғәбитте көтәләр, ошо арала күренмәй ҙәһә, тип борсолалыр. Унан килеп, үҙеңдең биләмәңде ҡарарға, тикшерергә лә кәрәк. Эше шундай, егерь бит ул. Профессиональ һунарсы йәғни. Хәйер, уның төп бурысы – урман, кейекте браконьерҙарҙан һаҡлау. Кеше йөрөр, бигерәк тә ҡаланан килеүсе булыр. Улар ауыл халҡына ҡарағанда оятһыҙыраҡ, әрһеҙерәк, шуға ла һөйләшеүе-аңлашыуы ҡыйын. Ҡатыны, Фәрзәнәһе, ғәҙәтенсә ҡаршы төшөр, һирәгерәк йөрөһәң дә була инде шул таш өйөмөнә, бер кем дә алып китмәгән, ана күр, тип асыуланыр, елкәһенә әллә күпме эш өйөр, ләкин Ғәбиттең күңеле тулышҡан, тауға бармай һис булдыра алмай.

Уның Торатауға барыуы кәйефен тәүҙә өләсәһе һиҙә. Фәрзәнәһе һымаҡ сырпаңлап ҡаршы төшмәй ул, бер ҡасан да, буш менән йөрөйһөң, тип әйтмәй, кирәһенсә, бәй, эшең шул бит, йөрөргә, ҡарарға кәрәк инде, тип хуплай. Уҡытыусы булһа – мәктәптә, тракторсы булһа – тракторҙа, малсы булһа – фермала эшләр ине, егерь булғас, ҡош-ҡортто, кейек-хайуанды ҡарай инде, тип тә ебәрә килененең ҡәнәғәтһеҙлегенә ҡай саҡ. Унан ейәненең сафланып, кәйеф алмаштырып ҡайтыуына, мылтыҡ аҫып китһә лә, ҡош-кейектең йәнен ҡыймауына

ышана – күпме эшләп шул ҡоштоң, был хайуандың ите тип ҡаҙан аҫҡандары юҡ әле. Бәғзе ауылдаштарының, бигерәк тә ситтән, ҡаланан килгәндәрҙең тәбиғәтте тәләфләүенә Ғәбиттең ҡаршы төшөүенә шатланһа, шул арҡала байтаҡ кеше менән тәмһеҙләшеүенә борсола. Йыш ҡына, алдынды-артынды ҡарап йөрө, туҡмап йә ағас ышығынан атып-фәлән китмәһендәр, кеше насар хәҙер, һин дәүләттекен һаҡларға тырышаһың, улар үҙҙәренекен алған кеүек ҡылана, тип иҫкәртә лә. Ирҙәр ваҡыт-ваҡыт яңғыҙ ҡалырға, донъя иңләп йөрөп килергә, уйланырға, күңелдәрен яңыртырға тейеш, тип иҫәпләй өләсәһе. Юҡҡа ғына ауыл халҡы уны ағинәй тип ололоҡламай шул. Элегерәк, ейәне-килене йәшерәк саҡта, йыш тылҡый торғайны шул фекерҙәрен ағинәй, хәҙер һирәгерәк әйтер булды, инде үҙҙәре атай-әсәй, өйрәтеп ултырыуҙан уҙғандар, тип ҡуйҙымы, белмәҫһең. Ә ҡатыны бына, һигеҙ йылға яҡын бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәһәләр ҙә, иренең ғәҙәттәренә барыбер күнегә алмай, унаң тауға йыш барыуын өнәмәй, вазифанды һин ике йөҙ процентҡа арттырып үтәйһең, артығы кемгә кәрәк, һиңә унаң өсөн бер кем дә рәхмәт әйтмәй, артығын түләмәй, тип игәй. Бер уйлаһаң, дөрөҫ тә һымаҡ, әммә Ғәбит илке-һалҡы эшләй белмәй шул. Бөтә бәлә шунда.

Иртәнге һалҡынса еләҫ ел күңеленә ниндәйҙер моң килтереп ҡундырҙы Ғәбиттең. Ул талпынған күбәләк, ағасынан айырылған көҙгө япраҡ һымаҡ янында өйөрөлдө, эргә-тирәһе йәйғор һымаҡ төрлө төҫтәрҙә балҡып китте, ҡолағын иркәләне. Тотоп-йыйып булмай, унаң нимә икәнен дә аңлап булмай, әммә күңел ҡылдары менән генә һиҙә-тоя торған ошо моң Ғәбиттең йөрәген, аң-зиһенен тултырҙы ла ҡуйҙы һәм ул йыр булып тышҡа ағылды:

*Йәнкәй-йәнәш китте, ай, һунарьа,*
*Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.*
*Шәшкеләргә китеп вафат булды,*
*Башҡынайым ҡалды ла йәш кенә…*

– Әллә йырлап торған була инде?– Фәрзәнәһенең көтөүгә мал ҡыуып ҡайтып ихатаға ингәнен һиҙмәй ҙә ҡалған, имеш. Өҫтөнә һалҡын һыу ҡойҙоларmы ни Ғәбиттең – тертләп китте лә шып туҡтаны, ярамаған эш ҡылып, мәктәп директорынан ҡасҡан уҡыусы бала һымаҡ, ялп итеп соланға инеп китте. Оятынан бигерәк үҙемдеке генә тип хисаплаған «Ашҡаҙар»ҙы Фәрзәнәнең ишетеүе ҡыйын ине уға.

Йыуынды, сәй ҡуйҙы. Сәй ҡайнап сыҡты. Малайы йоҡоһонан уянды, өләсәһе Ҡөрьәнен ҡуйып торҙо, һәм ғаилә иртәнге сәйгә ултырҙы. Ул, әлеге лә баяғы, ипләп йөрө, тракторың менән ҡош-ҡортто, йылан-кеҫәрткене тапатып, ағасҡыуаҡты имгәтеп ҡуйма, барыһы ла тере йән, ҡарғыштары төшөр, тип ейәненә ҡарамай ғына һүҙ башланы. Гәрсә, быndай хәбәргә өйрәнеп-күнегеп бөткән инде Ғәбит, шулай ҙа өләсәһененең күңелен һаҡлап, тәүгегә тыңлағандай иғтибар биреп, ярай, өләсәй, шулайтырмын, тип яуаплай. Үҙе төрлө ырымға ышанып бөтмәһә лә, юғары көстәң ауыр саҡтарҙа ярҙамға килеренә, араларына инана.

– Ҡырмыҫҡа ғәҙел яратылған, уға ла яҡты донъябыҙ алдында оло бурыстар ҡуйылған. Шуға күсенә һис ҡағылма.

– Әү, өләсәй?

– Сылтырап аҡҡан көмөш һыуҙарыбыҙ бысранһа, ҡаныбыҙ бысрар. Сәскәләргә күмелеп ятҡан хәтфә ерҙәребеҙҙә кейектәр, хатта ки бөжәк тә бөтһә, үҙебеҙҙе ҡара көстәр баҫыр, һауаларҙа осҡан ыласын-бөркөттәребеҙ ташлап китер, күҙҙәребеҙҙең нуры һүнер.

– Ә ҡырмыҫҡалар бөтһә нимә булыр?

– Ҡырмыҫҡалар бөтһәме – әҙәм балаһының теше ҡойолор. Аяҡ аҫтындағы сеәүҙәр бөтһә, елек майы кибер. Йылғаларҙа балыҡ бөтһә, яҡты донъяға балалар

тыумаҫ. Еңгәсәйҙәр* бөтһә, ҡатын-ҡыҙҙың түше ауыртыр. Йылан, кеҫәртке бөтһә, әҙәми зат үҙе шул рәүешкә инер. Тимәк, был яҡты донъябыҙ алдында күҙгә күренмәгән ҡылдар менән бөтәбеҙ ҙә бергә бәйләнәбеҙ, ҡайһы ҡылды өҙһәң дә, ерҙәге тереклеккә хилафлыҡ килә.

– Хәлде үтә ҡатмарлаштыраһың түгелме, өләсәй? – Оло кешенең күңелен күрмәк, Ғәбит ара-тирә шулай һорау биргеләп тә ҡуя. – Бала-саға күпме ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙыра, кеше ул мурҙа, ул йылым менән балыҡты ҡыра, юлында осраған бар йыланды, кеҫәрткене үлтерә.

– Бала-саға ғына тиң, ололары күберәк тота балыҡты! Өй беренсә – ау, йәтмә-йылым, йәй буйы һыу буйынан кеше өҙөлмәй,– тип һүҙ ҡыҫтыра Фәрзәнә. – Унса ҡырыуға балыҡ нишләп һаман бөтмәй, аптырарһың.

– Дөрөҫ әйтәһең, килен, тәләфләү ныҡ бара. Шул арҡала йылғаларыбыҙ һайыға, күл-шишмәләребеҙ ҡорой, һаҙлыҡтарыбыҙ кибә. Ана, Торатау аръяғындағы һаҙлыкты һөрөп, иген сәсәбеҙ тип күпме ҡыландылар теге йылдарҙы. Һөҙөмтәлә һаҙлыҡ та ҡороно, игене лә үҫмәне, унан бигерәк, тау битләүендәге әллә күпме үлән, емеш-еләк, сәскә бөттө. Уларҙы хәҙер кире ҡайтарып булмай. Ҡасан ғына Иҙелдән эсә инек, хәҙер һыуы эсерлек түгел, бысранды, ағыуланды, ул ҡаланан ҡайтҡан йәштәрҙең күңел асыу, машина йыуыу урынына әйләнде. Кеше үҙе барлыҡҡа килгәндән ошо вәхшилек менән шөғөлләнә. Ярай ҙа тәбиғәт, тирә-яҡ мөхит үҙен-үҙе һаҡлау, тулыландырыу, кеше һалған яраларын уңалтып-ялап тороу һәләтенә эйә. Бер нәмә лә мәңгелек түгел – ошо һәләте лә бөтһә, нишләрбеҙ?

– Бында һәммә кешенең тырышлығы, аңы, мин йәшәгән ер ҙәһә был, тигән мөнәсәбәте кәрәк, өләсәй. Балаларыма, ейәндәремә нимә ҡалдырам, тигән уй кәрәк. Ә уны аңлауға, ай-һай, алыҫ әле, Айға етерлек ара, тигәндәй.

– Үҙе ултырған ботаҡҡа балта саба әҙәм балаһы. Ул ҡасан да булһа язаһын аласаҡ, ахырызаман киләсәк. Ә ахырызаман – яуап тотор көн ул. Был донъяла бер нәмә лә яуапһыҙ ҡалмай. Шуға аслан алдыңды-артыңды ҡарап йөрө, мәхлүктең ғүмерен ҡыйма!

– Беләм инде, өләсәй...

– Белһәң дә әйтәм. Бисмилланы ҡабатлауҙан иман иҫкермәй.

Сәй артында шул юҫыҡта байтаҡ нәмәләр һөйләп өлгөрә өләсәһе. Уның хәтеренә, әллә ҡасан, Ноҡ* заманында, булған ваҡиғаларҙы, әллә кемдәрҙең исемдәрен, уларҙың ҡылған-башҡарған эштәрен белгәненә һоҡлана Ғәбит. Айырым кешеләр, ауыл, колхоз өсөн йән атҡандарҙы маҡтай, өлгө итә, ҡырын эштәрен ҡәһәрләй, яманлай. Күпселек ҡарт-ҡоро һымаҡ, әйләнгән һайын бер үк хәбәрҙе тылҡып ултырмай, яңынан-яңыны теҙә, ҡабатлаған хәлдә лә бөтөнләй икенсе кинәйә сығара, икенсе мәғәнәһен юллай. Хәтере – һыуы ҡоромаҫ ҡойо, аҙағы булмаған китап. Шуға ла өләсәһе Ғәбиткә ҡарт та, йәш тә һымаҡ, әйтерһең дә, ул ике ваҡыт яҫылығында йәшәй. Ғәбит уның осҡор зиһененә, тормош күренештәрен, ваҡиғаларҙы дөйөмләштерә, теүәл һығымталар сығара алыуына ғәжәпләнә. Ул фаразлағандарҙың күбеһе дөрөҫлөккә сыға ла ҡуя бит. Фәрзәнәнең был фәлсәфәгә әллә ни иҫе китмәй, йыш ҡына хәбәр юҫығына төшөнөп тә бөтмәй шикелле, шуға ла әллә ни ҡыҫылмай, ҡыҫыла алмай. Ул битараф ҡына сәй эсһәй, әммә ҡыланыш-хәрәкәтенән оло ҡәйнәһенең бер һүҙен дә ҡабул итмәгәнен төҫмөрләү ҡыйын түгел. Ә бына улы, Искәндәре, тыңлай, ҡолағына һала, йыш ҡына ҡыҙыҡһынып һорап та ҡуя, йылан, кеҫәрткене үлтергән, ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырған малайҙарҙы «ошаҡлай».

---

* *Ҡамҡа, Аллаһ һыйыры (божья коровка)* — **авт.**
* *Ноҡ заманы — Нух заманы.*

Сәй эсеп бөттөләр, амин тоттолар. Фәрзәнә ҡашығаяҡ йыйыштырҙы, өләсәһе ҡулын сайҡап килде лә, Ҡөрьәнен аҡ яулыҡҡа төрөп ҡуйып, бәйләменә тотонդо. Ғәбит келәтенә инеп мылтығын, яһауҙарын алды, башҡа кәрәк-ярағын барланы, тракторын ҡабыҙҙы, бер ыңғай ҡоро-һары, кипкән, ҡышын өшөгән ваҡ имәндәрҙе алып ҡайтырға иҫәбе. Мин дә барам, мине лә ал, атай, тип эргәһендә йүгергеләгән алты йәшлек малайын кабинаға күтәреп мендереп ултыртты, ҡапҡаны асты, «Беларусь»ын ихатанан сығарып ҡапҡаһын япты һәм, ауыл осона сығып, Торатауға илтә торған юлға төштө. Хәйер, тауға юл берәү генә түгел, ул ауыл осонан тауға барып еткәнсе үрмәксе ауы ише йырмысланып бөткән. Көн торошона, йыл миҙгеленә ҡарап төрлө юлдан йөрөйҙәр: йәй, ҡоро саҡта, кем нисек теләй шулай, ямғыр яуһа, ҡайҙан үтеп була, шунан икенсе юл һалалар.

Ауыл осонан саҡрым тирәһе үткәс тә, тау яғына һөҙәк үр башлана. Йыраҡтан йәм-йәшел булып күренһә лә, тау битләүе бигүк йәшел түгел, йәмғе үҫенте ҡыҫҡа, һарғылт шырт үләндән ғибәрәт. Бында дегәнәк, сәнскәк, атҡолаҡ кеүек башҡа төр үлән-үҫемлек осрай, юғарыға күтәрелә килә әлморон, селек һымаҡ ваҡ ҡыуаҡлыҡтарға юлығаһың. Юлдың һул яғында эрерәк ағастар һерәйә, уң яҡлап урман тиһәң хәтере ҡалыр, әүәл ул ысын урман да булғандыр, хәҙер – һирәк ағаслыҡ. Ағаслыҡ аралары шулай уҡ һуҡмаҡтар менән сыбарланып бөткән. Тегендә-бында усаҡ яҡҡан урындар ялтасланып ята, ҡара торонбаштар, буш шешәләр, консерва банкылары, ҡағыҙ, полиэтилен пакет-тоҡсайҙар – ҡайҙа ла кеше хәшәрәтлеге. Торатауҙың оло юл яғы, йәғни Ағиҙел йылғаһы яғы, яп-ялан-ғас, үҫемлек юҡ фиғылында, ауылға яҡынырaҡ ерек, ҡайын, муйыл ағастары үҫә, улар араһында эре мал йөрөй. Ауылға газ керһә лә, йәйҙәрен кеше барыбер ҙә аласығына, йәйге йортона ҡоро-һары яға. Тимәк, ағас ҡырҡыла (ә бит берҙе ҡырҡһаң, урынына өс төп ултыртыу фарыз!), өләсәһе әйтмешләй, кеше үҙе ултырған ботаҡты сабыуын белә…

– Атай, атай, ҡара әле, бер дәү ҡош ултыра!

«Беларусь» кабинаһында ныҡ ҡына һелкетһә лә, Искәндәре тирә-яҡты байҡап килә икән. Уға бында ҡыҙыҡ, гүйә, мөғжизә донъяһы, күҙенә салынған һәр нәмәне иғтибарға алып, атаһына әйтеп-күрһәтеп бара. Улының был ғәҙәтенә Ғәбит эстән генә, маладис, вайымһыҙ түгел, ҡыҙыҡһыныусанлығы бар, тип ҡыуана, ҡай саҡ хәбәренән ялҡып та китә, ҡай саҡ үҙенең уй-хыялдарына батып килгәнендә ишетмәй ҙә ҡуя. Был юлы ла икенсегә һөрәнләгәс кенә улының һонолған ҡулы йүнәлешенә ҡараны.

– Атай, атай, бер дәү ҡош ултыра, тим дә!

Ысынлап та, тауҙың һөҙәк битләүендәге ваҡ ағастар араһында оҙон ҡанаттарын бер йәйеп, бер ҡаушырып, ауа-түнә ҙур бер ҡош әллә осорға, әллә уларҙан ҡасырға маташа ине. Үҙенең төҫөн ерҙәге ҡояшҡа янған-кипкән ҡыҫҡа, шырт үләндән айырырлыҡ та түгел, нисектер йәшкелт-һоро, ә суҡыш төптәре һап-һары. Тимәк, бала ҡош. Ғәбит уның ниндәй ҡош икәнен тәүҙә шәйләй ҙә алманы, ҡанаттарының оҙонлоғона, суҡышының кәкрелегенә ҡарағанда, бөркөт йәки ыласындыр, тип уйланы. Тракторын туҡтатып ергә һикереп төштө, өтәләнгән улын ҡултыҡ аҫтарынан тотоп ергә баҫтырҙы.

– Атай, ниндәй ҡош ул? Ҙур үҙе…

– Белмәйем, айырмайым әле, яҡынырaҡ барайыҡ. Бөркөт балаһына ла оҡшаған.

Эйе, бөркөт балаһы ине был. Ҡоштар батшаһының дәү себеше нишләп бында йөрөй һуң? Ояһынан йығылып төшкән дә ҡайҙа барырға белмәй ҡаңғыра, тимәк. Осорға маташа, ҡанаттарын йәйә, йүгереклэй, ауыҙының сит-ситендә һарыһы ла бөтмәгән суҡышын хәлһеҙ генә асып сыйылдауға оҡшаш тауыш та

сығарып ҡуя. Инәһенә үҙенең бындалығын белдереүе, ярҙам һорауылыр. Йүгереп-атлап, оҙон ҡанаттарын яҙып осорға ниәтләнә лә, булдыра алмай, елпенеүгә ҡыуаҡлыҡтар, ваҡ ағастар ҡамасаулай, моғайын, осорға әле өйрәнеп тә бөтмәгәндер. Юғиһә, бында ултырмаҫ, осоп китер ине ләһә.

– Бөркөтмө, атай?

– Эйе, бөркөт. Бөркөт балаһы. Моғайын да, ояһынан йығылып төшкәндер. Инәһе ҡайҙа икән һуң? Килеп йәбешмәһен тағы. Табып, ояһына һалғанда яҡшы булыр ине лә…

– Инә бөркөт кемгә йәбешә, атай? Беҙгәме?

– Беҙгә шул.

– Нишләп?

– Балаһын ҡыҙғана.

– Ә ояһы ҡайҙа?

– Ошо тауҙа инде. Ҡая башында йә берәй ярыҡ-йорођ эсендә.

– Эҙләйекме?

– Бынау оло тауҙа уны нисек табаһың?

Артынан атланылар. Ә ҡош балаһы быларҙан ҡаса, һаман осорға маташа, ҡыуаҡлыҡтар араһына сума. Оса алмаһа, төлкө ауыҙына эләгәсәк йәки астан үләсәк тәһә меҫкен. Нишләргә? Алып ҡайтһаң?

Ғәбит өҫтөндәге спецовкаһын систе лә шәп-шәп атлап ҡош балаһын ҡыуып етте һәм уның өҫтөнә ырғытты. Ауыр, беше брезент кейемдән мәхлүк ҡалҡына алмаҫлыҡ булып ергә һылашты. Әммә бер аҙҙан ҡанаттары менән һелкеп төшөрөргә маташты, башын борғоланы, тик көсө генә етмәне. Ғәбит уны тотайым тип яҡынайған арала, ҡош балаһы ни мөғжизә менәндер теге кейемдән әрселеп, аяҡтарын сығарҙы ла, арҡаһына ятып, осло тырнаҡтарын Ғәбиткә ҡарай тырпайтты. Һаҡланыу инстинкты. Бына һиңә мә, йыртҡыс йыртҡыс инде, ниндәй хәлдә лә бирелергә теләмәй, тип уйланы аптырап Ғәбит.

– Искәндәр, ҡана, курткаңды сисеп бир әле,– тине Ғәбит, артынан бер тотам да ҡалмай эйәреп килгән улына боролмай ғына. –Тәпәйҙәренә ташлайыҡ, былай ғына тотоп булмаҫ. Йә берәй ерҙе тырнап алыр.

Ғәбит ҡош балаһының саҡ ҡына тынысланыуын, беҙ кеүек осло тырнаҡлы тәпәйҙәрен аҫҡа төшөрөүен көттө лә, яй ғына яҡынайып, куртканы ике ҡулы менән йәйеп тотоп тегенең өҫтөнә ырғытты һәм был сәбәләнә башлағансы ҡуша тоторға өлгөрҙө. Спецовка менән башын, куртка менән аяҡтарын урап, тибенеүенә, суҡырға маташыуына ҡарамай, ҡоштоң ҡанаттарын тәненә һылаштырып айманы ла үҙенең түшенә ҡыҫты.

– Атай, нишләтәбеҙ, алып ҡайтабыҙмы?– Искәндәр атаһының бер алдына, бер артына сыҡты. – Ҡайҙа ҡуябыҙ, өйгәме, лапаҫҡамы?

Ҡайҙа ҡуйырға икәнен Ғәбит үҙе белһә икән.

– Хәҙер инәһе килеп сыҡһа, ҡуйҙырыр әле бына. Әйҙә, йәһәтерәк атла – тракторға. Нисек тә үҙең мен кабинаға, мин һине күтәрә алмайым.

Алып ҡайтырға кәрәктер, тип хәл итһә лә, артабан нишләтерен белмәй әлегә Ғәбит. Тотоуын тотто, өйөнә алып ҡайтыу ҡыйын да булмаҫ, ә ҡайҙа ҡуйыр һуң? Урыны ла табылыр, нимә ашатыр?

Тракторына барып еткәнсе мең уй ҡайнашты башында. Тракторы янына килеп еткәс тә бер мәл аптырап, икеләнеп баҫып торҙо әле, унан, ярай, ни булһа ла булыр, бер-бер хәл килеп сыҡһа, кире килтереп китеүе оҙаҡ булмаҫ, тип, еп табып, ҡош балаһының тәпәйҙәрен куртка өҫтөнән сырманы. Әсир хәлендәге ҡошто улына тотторҙо. Сабый ҡошсоҡто күрәләтә хәүефкә дусар итеп булмай,

Аллаға тапшырҙыҡ. Ашатып, ҙурайтып ебәрер, ул сағында төлкө, бүре тамағына эләкмәҫ, осорға ла өйрәнеп алһа, инәһен дә табыр, бәлки…

Ғәбит күккә ҡараны: бейектә-бейектә ике ҙур бөркөт нәҡ үҙҙәре тәңгәлендә әйләнә ине.

Бөркөт балаһын лапаҫта ҡаҙҙар өсөн ҡулайлаштырылған, тимер менән үреп бүленгән мөйөшкә ебәрҙеләр. Тәпәйҙәрен бәйҙән ысҡындырғас, башын ҡоршаған куртканы алғас, ул ҡапыл ситкә һикерҙе, ҡастым, ҡотолдом быларҙан, тип уйланы, ахыры, ҡанаттарын йәйеп осорға маташты, ә ҡанаттары киң, икеһе бергә метрҙан ашыу ғына барҙыр, тик ҡорос сымға килеп ҡаҡлыҡҡас, артына ҡолап китте лә ҡанаттарын йыйҙы. Ятһынып, тирә-яғына ҡаранды, сымды суҡыны, һүрән генә сыйылдап ҡуйҙы – яңы урынды килештермәне. Алдына икмәк киҫәге, тары ярмаһы, эремсек һалдылар, әммә әсир ҡош балаһы уларҙың береһенә лә ҡағылманы.

Был ҡылығы өләсәһе күңелендә яҡлау табыр, тип өмөтләнһә лә – үлемдән ҡотҡарыу ниәтенән алып ҡайтты бит – улай булмай сыҡты. Юҡҡа урынынан ҡуҙғатҡанһың, ул ҡошто үҙ мөхитенән айырырға ярамаҫ ине, тине. Ә ҡатынына оло ҡәйнәһенең был һүҙҙәре етә ҡалды. Сурытты ғына, йәнәһе, һаман малайлығынан сыға алмай, юҡ менән була, тракторына арба тағып китте, утын тейәп ҡайтыу урынына ҡырағай ҡош балаһы тейәп ҡайтҡан, фәлән дә фәсмәтән.

– Алып ҡайтмаһаҡ, уны айыу ашар ине,– тине атаһын яҡлашып улы.

– Торатауҙа айыу юҡ,– тине Фәрзәнә ҡәтғи генә.

– Бар! Атайым бар тине,– тип ныҡышты Искәндәр. – Урманда һәр саҡ айыу була.

– Атайың әйтер ул. Уның бар хәбәренә лә ышанһаң. Ярар, булһын да, ти. Бер ҡош юғалғандан урманда ҡоштар бөтәме әллә? Донъя тулы ҡош. Уларҙың һәр береһен өйгә ташый башлаһаң…

Алдындағы ризыҡҡа ҡош балаһы икенсе көнөнә лә ҡағылманы. Ваҡыт-ваҡыт тауыш биреп ҡуя ла йәнә тораташтай ҡата. Эт йәбешеп ҡуймаһын тип, төнгөләккә һарайҙың ҡышын һыйыр ҡуна торған бүлмәһенә индереп яптылар, көндөҙҙәрен тимер сым менән уратылған асыҡ лапаҫҡа сығарҙылар. Һаман да ашамағас, йә үлеп ҡуйыр, тип өсөнсө көнөнә бер тауығын салып, йөрәк-бауырын биреп ҡарарға булды Ғәбит. Үҙе болдорҙан күҙәтеп торҙо алдына һалғас. Ҡош тәүҙә ризыҡҡа бөтөнләй иғтибар итмәне, башын ғорур сөйөп Торатау яғына текәлде, унан әллә күреп, әллә еҫен һиҙеп тастағы йөрәк-бауыр янына килде лә тәүҙә суҡып ҡараны, унан ҡабаланмай ғына тамаҡлап ҡуйҙы. Тамаҡлағас, йәнә Торатау яғына баҡты, әйтерһең дә, унан инәһе ҡарап тора һәм балаһының ашауын хуплай. Ғәбиткә йән керҙе, тимәк, уға ит кәрәк, итте ашаясаҡ, ә ул тауыҡҡа, ҡаҙға һалған ризыҡ биргән була.

Өсөнсө көнөнә иртәнсәк Ғәбит ауыл ир-аты йыйылып гәпләшеп торған клуб алдына китте. Ниәте – берәйһе һуғым һуймағанмы икәнен белешеү. Китеп барғанында Юламан тигән оло ғына йәштәрҙәге йөрөмтәл генә бабайға осрап, үҙенең Торатау битенән бөркөт балаһы табып алып ҡайтыуын, ике көн бер нәмә лә ашата алмағанын, кисә кис кенә тауыҡ салып, шуның йөрәк-бауырын ашатыуын һөйләне лә, берәйһе һуғым һуйманымы икән, белмәйһегеҙме, тип һораны. Һин ул ҡошто аҫырай, ҡулға өйрәтә алмаҫһың ул, тип шик белдерҙе ҡарт. Сөнки ул инәһе тотоп килтергән ваҡ ҡош-корттоң, ҡуян, төлкө, сысҡан, ирлән һымаҡтарҙың эс-ҡаранын ашай. Ә һин уларҙы ҡайҙан алаһың, үҙең тотмаҡсыһыңмы ни, тип көлдө. Ояһынан йығылып төшкән икән, инәһе эҙләп кире ояһына мендереп йөрөмәй, ерҙә ятып астан үлергә дусар була йәки төлкө тамағына эләгә. Юламан ҡарт арыу хәбәр ҙә әйтте: бөгөн иртәнсәк берәүҙәр кисә

зыянлаған бейә салғандар икән. Ғәбит шуларға барып малдың эсәген, бер нисә килограмм итен алып ҡайтып, тураҡлап, ваҡ киҫәген ҡош балаһы алдына һалды. Сәмсенеп кенә булһа ла ашаны – тере йәндең үлгеһе килмәй шул.

Бөркөт балаһы ныҡлап ашай башлағандан алып аҙна-ун көн ваҡыт үткәс, Ғәбит уны тапҡан урынына илтергә ниәтләне: ҡулға өйрәтә алмаҫына, дөрөҫөрәге, ҡулынан килмәҫенә, уның хәсиәте – ирек, күк икәнен аңлағайны. Унан килеп, уны ашатыу ҙа тора-бара ҙур бер мәсьәләгә әйләнәсәк. Шулай икән, ул йән эйәһен ниңә тотҡонлоҡта яфаларға? Бәлки, инәһе килеп табыр, бәлки, үҙе уларға барып ҡушылыр.

«Жигули» машинаһының артҡы ултырғысына улын ултыртты ла ҡулына аяҡтарын сырмаған, башына тоҡ кейҙергән ҡошто тотторҙо. Ҡулы самаланы: бөркөт балаһы кәүҙәгә лә бер аҙ үҫкәйне, ауырлығының тосайғаны ла һиҙелә. Яйлап ҡына Торатауға йүнәлделәр. Килеп еткәс, аяғындағы епте систеләр, башынан тоҡто алдылар. Ыҫҡынғас, ҡапыл ҡанаттарын йәйеп тауыш сығарҙы бөркөт тоҡомо, Ғәбиттең ҡулын суҡыны. Үсен алды булдымы иркенән мәхрүм иткәне өсөн? Шулай ҙа яндарынан китмәне. Көш, көш, тип ҡыуып та ҡаранылар, ҡуҙғалманы. Ғәбит уға яҡын килә башлағайны, йәнә арҡаһына ятты ла тырнаҡтарын тырпайтты. Артҡа сигенергә мәжбүр булды Ғәбит. Тик ҡош китмәне лә, осорға ла маташманы. Ҡалдырһаҡ, был меҫкен үләсәк йә берәй йыртҡыс тырнағына эләгәсәк, тип кире өйҙәренә алып ҡайттылар.

Иртәгәһенә ҡабат алып барҙылар, иртәнән һуңына ла. Ҡыуып йүгертеп, ҡурҡытып ҡаранылар – ҡурҡты, йүгерҙе, ҡасты, ҡанаттарын елпене, әммә османы, оса алманы. Күрәһең, инәһенең өйрәтеүе-күрһәтеүе кәрәктер, бәләкәйерәктер ҙә әле, тигән һығымтаға килде Ғәбит. Оса алмаһа ла, үҙгәрештәр бар ине: тауышын нығыраҡ, көрөрәк сығара башланы, зәңгәр күккә йышыраҡ ҡараны. Уның тауышына бер саҡ бейектә-бейектә ике бөркөт пәйҙә булды. Ергә төшмәнеләр, талғын ғына әйләнеүҙәрен белделәр…

Ғәбиттең Торатауҙан бөркөт балаһы алып ҡайтып, һунар ҡошо итеү теләге менән көн дә битләүҙәге шырлыҡҡа алып барып өйрәтеп йөрөүе оҙаҡламай бөтә ауылға мәғлүм булды. Кемдер күргән, ишеткән, кемгәлер үҙе һөйләгән – был хәлде кеше күҙ-ҡолағынан нисек йәшерәһең? Ғәбит үҙе лә сер яһаманы: һорағандарға, ҡыҙыҡһынғандарға ихласлап һөйләне, ҡай саҡ кәңәш биреүҙәрен, ит һатыуҙарын һораны һәм быны, бөркөт менән булашыуҙы, эш араһында ғына башҡарылған бер мәрәкә итеп ҡабул итте. Шунан да артыҡ түгел. Бәләгә тарыған йән эйәһен ашатыуҙың, осорға өйрәтеүҙең ниндәй хилафлығы бар? Ул бит уны һуйыр өсөн тотмай, үҫһен, осһон, тере ҡалһын тип тырыша. Берәүҙәр бынан ҡыҙыҡ тапты, көлдө, икенселәр, нимәгә ул һиңә, ҡырағай ҡошҡа ирек кәрәк, һәр йән эйәһенең үҙ мөхите, өйҙә тотоп үлтерәһең бит, тип асыуланғандай итте, өсөнсөләре, ҡалаға алып барып зоопаркка тапшыр, тип тә кәңәш бирҙе. Ә Ғәбиттең бар уйы – уны осорға өйрәтеү. Шунан тапһын, әйҙә, атаәсәһен һәм башҡа бөркөттәр менән үҙенең тәбиғи стихияһында йөрөһөн.

Эйе, хәбәр тарала шул. Бер көн райондан оло ғына йәштәрҙәге берәү килеп бала бөркөттө күрһәтеүен һораны. Йәнәһе, ул – һунарсылар йәмғиәте рәйесе, етмәһә, ҡырағай тәбиғәтте һаҡлау фонды ағзаһы, ундай һирәк осрай торған ҡоштар уларҙың күҙәтеүендә булырға тейеш. Бәләкәй кәүҙәле, бөрсәләй теремек, ҡолаҡтары дегәнәк япрағы кеүек тырпайып тора, ә күҙҙәре – хәс тә сысҡандыҡы. Йүгерек ҡараштары менән ашап бара. Ғәбиткә ул бәндә ниңәлер бик шикле күренде. Район һунарсылар йәмғиәтенә күпме барғаны бар – үҙе шул йәмғиәт ағзаһы – ниңәлер күргәне юҡ. Шуға ла, мин һеҙгә нишләп ышанырға

тейеш, танытмағыҙҙы күрһәтегеҙ, тине. Сыҫкан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ аптыраны, сөнки бындай һорауға күнекмәгәндер, ахыры, шунан ирен ситтәре менән генә мыҫҡыллы йылмайҙы ла түш кеҫәһен ҡапшаған булды, таба алмағас, яһалма ғәжәпләнгән ҡиәфәттә усы менән ҡаҡ маңлайына һуҡты, ай, ҡәһәрең, икенсе пинжәк кеҫәһендә ҡалған бит, йәғни. Шунан ҡапыл ғына йөҙө етдиләнде, түрә ҡиәфәтенә керҙе.

– Был ниндәй ҡылыҡ ул, минән берәү ҙә ошоға тиклем танытма һорағаны юҡ ине әле, ышанмайһыңмы әллә?

– Ышанмайым, тирә-яҡта күпме ҡош, ҡуян, төлкө, бүтән хайуан ҡырыла, ҡурсалаусы юҡ, ә һеҙ бер ҡош балаһы артынан килеп йөрөйһөгөҙ. Бында килгәнсе, ана, Торатау тирәһенә барығыҙ, был балағош һеҙгә нимәгә кәрәк һуң?

– Тимәк, кәрәк, тимәк, интерес бар,– тине сыҫкан күҙ, борғоланып.

– Ана шул-шул, үҙегеҙҙең интерес өсөн генә…

– Ярар, ярар, төпкә төшмә. Йә, күрһәт тә китәм, үҙең әйтмешләй, Торатау битләүенә бараһым бар,– сыйылдығын сығып йәмһеҙ итеп көлдө әлеге әҙәм.

Искәндәр быларҙың хәбәрен иғтибарлап тыңлай ине. Ғәбит теге шәйләмәгәндә улына күҙ ҡыҫып, лапаҫ яғына ымланы. Отҡор малай уны аңлап йәһәт кенә өйҙән сыҡты. Ғәбит быны һүҙгә албырғатып ваҡытты һуҙҙы – тапҡан урынына алып барып ебәрҙем мин уны, тип ҡабатлап тик торҙо. Әммә яман ныҡыш бәндә булып сыҡты тегеһе, һис сығып китергә теләмәне, күрһәт, ҡайҙа аҫырайһың икән, мин белергә тейеш, тип ҡаҡшатты. Һәм Ғәбиткә уны лапаҫҡа сығарыуҙан башҡа сара ҡалманы. Ваҡытты һуҙҙы инде былай, Искәндәре берәй ергә йәшереп өлгөрһә ярай ҙа. Улы артынан өләсәһе лә сыҡҡайны, икәүләп, моғайын да, берәй сараһын тапҡандарҙыр. Лапаҫтың һәр бүлемен, мөйөшөн тигәндәй ҡараны-тикшерҙе сыҫкан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ, бәхеткә ҡаршы, эҙләгәнен таба алманы. Кәйефе төшөп, ярар, тағы килермен әле, күреүселәр бар, тип бармаҡ янап ҡайтып китте. Ғәбит бөркөт балаһын урманға йөрөтөү өсөн тимерсыбыҡтан умарта дәүмәле итеп ситлек үргәйне, улы менән өләсәһе ҡошто шуға индереп, мунсаға йәшергән булып сыҡты. Шулай итеп, ҡошҡа булған беренсе һөжүм уңышлы кире ҡағылды. Әммә ул һөжүмдәрҙең алдағы көндәрҙә ҡабатланасағы көн кеүек асыҡ ине.

Һат тип килеүселәр ҙә табылды. Эштәр былайға боролғас, Ғәбит инде ныҡлап борсола башланы ҡош яҙмышы өсөн. Сөнки аҡса, һатыу, һатып алыу булған ерҙә хәтәр сығыуы бик ихтимал. Һәм алдағы ваҡиғалар уның борсолоуы урынлы икәнен раҫланы.

Бер мәл төн уртаһында нимәгәлер һиҫкәнеп уянды бит. Әллә алама төш күрҙе, әллә баҫлыҡты – үҙе лә аңламаны. Тәҙрәгә күҙ һалды – ҡараңғы. Таң атырға иртәрәктер. Кире йоҡлап китә алмай эт булды. Әйләнде-тулғанды, шунан, хәжәте булмаһа ла, сығып килергә ниәтләне. Ғәҙәтенсә фонарын алды, солан ишеген асыу менән тоҡандырып ебәрҙе, уның үткер уттары эләктергән урындарға күҙ һалды. Ихата уртаһына баҫып саф һауа һулап, аҙбарҙа мышнаған һыйыр, башмаҡтарының көйшәгәнен тыңланы ла фонарь утын лапаҫына йүнәлтте: ҡапҡаһының ярым асыҡ тороуын күрҙе. Бәй, кистән ябып кергәйне бит! Башына һуҡҡандай булып ашығып шунда йүнәлде һәм эстә бөркөт балаһының ҡанат елпеүен, кемдеңдер ыңғырашыуын ишетте. Елпенгәс, тимәк, кемдер бар, ҡош бушҡа борсолмаҫ, берәйһе урларға йәки үлтерергә кергән. Ғәбит йәһәт кенә утынлығына йүгереп барып, ҡалын ғына имән ярҡаһы тапты, кире килеп ҡапҡаны шар асты, ыңғырашыусының ысынлап та кеше икәненә ышанғас, ишек төбөнән ҡысҡырып ебәрҙе:

– Эй, кем унда? Сыҡ, юҡһа башыңа тондорам!

Үҙе фонарь яҡтыһының үткер утын эскә йүнәлтте, ҡулындағы имән ярҡаһын, һуғырға тура килһә тип, уңайлыраҡ итеп тотто.

Ыңғырашыу тынды, ҡош балаһының ҡанат ҡағыуы ла ишетелмәҫ булды. Ғәбит фонарь яҡтыһы менән бүлемде һәрмәргә кереште һәм ҡапыл ғәжәп күренеште шәйләне: мөйөштә ҡарышлауыҡтай бөгәрләнеп, ике аяғын да эскә тартып бер кеше иҙәндә ята, һуҙылған уң ҡулының һыртында ҡанаттарын иҙәнгә йәйеп бөркөт ултыра.

– Кем һин?– тине Ғәбит йәнә һөрәнләп. Ярҡа менән башына тондорорға ла уйлағайны, бөркөткә эләгер, эләкмәһә лә, өркөтөрмөн тип, һуңғы мәл уйынан төңөлдө.

– Ғәбит, туҡта, һуға күрмә, хәҙер аңлатам бөтәһен дә,– тип ыңғырашты ятҡан кеше, уның утын ағасын башы осона күтәреүен шәйләп.– Мин был, Әбүбәкер, хәйерһеҙ, ҡотҡо арҡаһында ятам бына ҡош тырнағына эләгеп.

– Аңлатыуың кәрәкмәй, күреп торам былай ҙа. – Ғәбит фонарь нурҙарын Әбүбәкерҙең йөҙөнә ҡаҙаны. – Бурҙың ҡулынан эләктергән, тимәк. Нимә тип бында индең? Кем ҡотҡоһо менән? Әйт, тондорам әтеү. Шыңшып ятаһың, етмәһә.– Шулай ҙа түҙмәне, бар көсөнә тегенең осаһына типте. – Урларға индеңме?

– Ғәбит, тәүҙә ҡулды ысҡындыр, шунан һөйләрмен. – Әбүбәкер әллә ауыртыуҙан, әллә йәлләтергә теләп ыңғырашты.

Ғәбит яҡыныраҡ килде, фонарь яҡтыһында бөркөт балаһының өс тырнағы ла Әбүбәкерҙең ҡул һыртына матҡылғанын, ә урта тырнағының һырт аша үтеп ус яғына килеп сыҡҡанын күрҙе. Тәне зымбырҙап китте хатта, сөнки быға тиклем бындай күренешкә тап булғаны юҡ ине әле.

– Да-а,– тине ул һуҙып. Эскесе, йүнләп бер ҡайҙа ла эшләмәүсе, кешегә ялланып көн итеүсе ауылдашы бер мәлгә уға йәл булып китте. – Ҡалай йәтеш иткән – тимәк, кәрәкмәгән ергә һонолғанһың, ағай.

– Аңланым инде, аҡланыр хәл юҡ. Йәһәтерәк ысҡындыр, байтаҡтан ятам, ауырта яман… Әллә күпме ҡан аҡты, заражение булмаһа ғына ярар ине.

Бурҙың ҡулынан ысынлап та ҡан һарҡый, терһәгенә тиклем буялып бөткән, өҫтө лә ҡанға туҙған. Үҙе һул ҡулы менән битен-күҙен ҡапларға тырыша, бөркөт йә күҙен соҡоп алыр тип ҡурҡа, ахыры. Ысҡындырырға кәрәк, ҡоштоң да тегеләй-былай тартылып тырнаҡтарын имгәтеүе бар.

– Ҡуҙғалмай ғына ят, мин ҡыпһыуыр һымаҡ берәй нәмә алып киләйем, былай ғына сығарып булмаҫтыр…

Ғәбит гаражына китте. Уның асҡысы кейеп сыҡҡан курткаһы кеҫәһендә түгел, икенсе курткаһы кеҫәһендә булып сыҡты. Өйөнә ингәйне – ҡатыны уянды, нишләп йөрөйһөң ул, тип төпсөндө. Асҡысын табып, өндәшмәй-нитмәй генә гаражына йүнәлгәйне, нимәләр һиҙеп артынан сыҡты. Ғәбит ҡыпһыуыр тотоп, ҡатыны уға эйәреп, икәүләп килеп инделәр лапаҫҡа. Фәрзәнә Әбүбәкерҙе күреп ярһып ҡысҡырып ебәрҙе:

– Ҡәһәр һуҡҡыры, кем һуң ул бур, ә? Әбүбәкер, һинме? Үтеңде һытам бит хәҙер, алкаш, – тип тегене типкесләргә тотондосо. Әбүбәкерҙең борғоланыуы тырнаҡты ысҡындырырға ҡамасаулай, шуға ла Ғәбит Фәрзәнәһенә ҡаты ғына итеп екерҙе лә фонарҙы уға бирҙе, бөркөт балаһының ҡанаттарын тәненә ҡуша тотоп үҙенең ҡултыҡ аҫтына ҡыҫты, тәпәйен бер ҡулы менән тотоп, ҡыпһыуыр менән тырнағынан эләктереп яй ғына әйләндерергә тотондо.

– Ҡулыңды тырнаҡ борололошо ыңғайына әйләндер,– тине ул Әбүбәкергә.– Бер тырнағы үтәнән-үтә сыҡҡан бит. Бор, бор...

Кәүҙәһе ҡыҫылған көйө лә йәш бөркөт ҡанаттарын ысҡындырырға маташты, муйынын һуҙып әле Ғәбиттең, әле Әбүбәкерҙең ҡулын суҡыны, сыйылданы, тырнаҡтары ҡаҙалған тәпәйен тартҡыланы. Әбүбәкер уның һайын ыңғырашты, тартылды, бөгөлдө.

– Ғәбит, был алкашты милицияға бирер кәрәк, былай ғына ҡалдырма! Һинең ҡошоң  хәжәт тиһеңме ни уға, һарыҡты, быҙауҙы олаҡтырырға килгән. – Фәрзәнә бурҙы йәнә типкесләргә тотондо.– Үҙем барып әйтәм, биллаһи. Бур,  үтеңде һытам бит хәҙер, у-у-уй!

– Барырһың, барырһың, килен, тәүҙә ысҡындырығыҙ. Түҙемлек ҡалманы.

– Барам, бармайса. Түҙемлек, имеш. Һине ошо килеш, ҡулың ысҡынмаған көйө алып барып тапшырырға кәрәк. Ғәбит…

– Туҡта әле, Фәрзәнә! – Ғәбит ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.– Ҡуҙғалғас, ысҡындырып булмай бит.

Байтаҡ аҙапланды Ғәбит, тирләп бөттө, тубыҡ, терһәктәрен бысратты. Ниһайәт, алды ҡошто Әбүбәкер ҡулынан.

– Бар, йод сығар,– тине Ғәбит ҡатынына.– Марля, мамыҡ. Бәйләйек, заражение китмәһен.

– Китмәгәйе, китһен, дөмөкһөн әйҙә, кеше лапаҫына икенсе инмәҫкә арыу булыр. Уға ишшу йод, марля, мамыҡ. Өйгә индереп ашатып-эсереп тә ебәрергәлер, бәлки, ә?

– Фәрзәнә!

Ҡатыны өйгә йомолдо, әммә кире сыҡманы. Ғәбиттең үҙенә керергә тура килде. СолАндағы шкафтан кәрәк әйберҙәрҙе табып сыҡҡансы Әбүбәкерҙән елдәр иҫкәйне. Ғәбиткә бөркөт балаһына йәлләп ҡарап тороуҙан, шунан ҡапҡаларҙы бикләп, өйөнә кереп ятыуҙан башҡа сара ҡалманы. Оҙаҡ йоҡлай алмай ятты, серемгә киткәйне, һаташып бер булды. Имеш, бөтә донъяны һыу баҫҡан, туфан ҡалҡҡан,  бар тереклек үлеп-ҡырылып бөткән, яңғыҙ кәмәгә тейәлеп өлгөргән кешеләр, кейектәр, ҡош-ҡорт, мал-тыуар тере ҡалған, һәм улар, әллә күпме көндәр буйы океанда йөҙөп йөрөй торғас, Торатауға килеп төртөлгән. Һыу ҡайта, ялан-болондар асыла, ағастар үҫә – ерҙә яңы тормош башлана. Әммә хайуандар араһында төрлөһө бар, хөр тормошта йәшәй башлағас та уларҙың ҡайһы берҙәре береһен-бере тамаҡлай башлай, ҙур кәмәлә эсәр һыуға сарсап, ашарҙарына ризыҡ ҡалмай, ҡырҡылып килгән сәғәттәрен тиҙ онота. Кешеләр араһында ла табыла ҡыҫҡа хәтерлеләр, шундайҙар араһында ауылдашы Әбүбәкер, үҙен район һунарсылар йәмғиәте рәйесе тип килеп йөрөгән сыҫҡан күҙле,  ҡарпыш ҡолаҡлы шикле бәндә лә бар, имеш. Улар күктәге бөркөттәргә яҫҡына, үҙҙәре оса алмағас, ағастарға, тауға, унан болоттарға оҙон баҫҡыстар терәп, ҡоштарҙы тоторға самалай…

Йоҡоһо бөтмәй, башы ауыртып уянды Ғәбит. Тиҙ генә кейенде лә лапаҫҡа инде. Әбүбәкер ҡабат килмәгәнме? Ишеген асып инеүе менән бөркөт балаһы Ғәбиттең ботонан суҡып алды, ҡанаттары менән һелтәнеп уны бәргесләй ҙә башланы. Туҡта, ай,  нишләйһең, иҫәр, ярар, ғәйеплемен, тип көлдө Ғәбит. Үсен ала, үпкәләгән, тимәк. Шунан, аңһыҙ, уйлай белмәй, тип ҡара быны. Ғәфү ит, бынан ары һағыраҡ булырмын, тине Ғәбит. Ашарына һалды, һыуын яңыртты, шунан ҡошто лапаҫтан ситлеккә күсерҙе. Эйе, артабан бында тотоп булмаҫ, тау яғына алып барып иреккә ебәреү фарыз. Урларға ниәт иткәстәре, быныӊ менән генә туҡтамаҫтар, ҡара эштәрен аҙағынаса еткерергә тырышырҙар. Урлай алмаһалар, ағыулауҙары бар.

Иртәнге сәйҙә ҡатыны йәнә туҙынды. Ғәбит өндәшмәне –  беренсе ярһыу һөжүмде үткәреп ебәрергә күнеккән. Өләсәһенә ҡарағайны, уныһы һүҙ ҡатмай ғына бер нисә тапҡыр башын ҡаҡты, тимәк, ул да хуплай, ул да ҡоштан ҡотолоу яғында. Хәйер, Ғәбит үҙе лә шул фекергә килгән инде. Уны ла йонсота, үҙе лә йонсой, табылдыҡ бер ҡош балаһы арҡаһында кеше менән тәмһеҙләшеүе генә етмәгәйне…

Ата-әсәһе ошо ауылдыҡылар булһа ла, Ғәбит Стәрлетамаҡта тыуҙы. Әсәһе һигеҙ класты, атаһы ун класты бөткәс, Стәрлетамаҡтағы һөнәрселек училищеһына уҡырға ингәндәр, артабан ҡалалағы бер төҙөлөшкә эшкә тәғәйенләнгәндәр. Шунда күпмелер эшләгәс, өйләнешкәндәр, дөйөм ятаҡтан бүлмә алып бергә йәшәй башлағандар. Бер нисә йылдан бер бүлмәле айырым фатир биргәндәр. Шунда күскәндәрен Ғәбит хәтерләй: ҡойоп ямғыр яуған көн ине.

Балалар баҡсаһына йөрөнө, унан мәктәпкә барҙы, ата-әсәһе көнө буйы эштә, арып-талып һуң ғына ҡайталар. Тормоштары ярайһы уҡ күңелһеҙ, бер төрлө булды. Атаһы йәйлап эсә башланы, йыш ҡына иптәштәрен алып ҡайтып төн уртаһына тиклем ултыра, әсәһенә ҡулын күтәргеләне. Һөҙөмтәлә Ғәбиткә иғтибар булманы, йүнләп дәрес тә әҙерләй алманы, күпселектә урам ҡыҙырҙы. Ул бишенсе класта уҡығанда, эшендә өсөнсө ҡаттан ҡолап төшөп үлеп ҡуйҙы атаһы. Иҫерек булған, тигәндәре иҫендә ҡалған күмгәндәрендә. Әсәһе төҙөлөштәге эшен ташлап, ашханала ашнаҡсы булып йөрөнө. Шунан, аҡсаһы аҙ тип, икенсе ергә күсте, унда ла оҙаҡ торламаны, төҙөлөшкә кире ҡайтты. Эш ауыр булһа ла, аҡсаһы булғандыр. Оҙаҡламай унан да китте. Үҙҙәренә килгеләп йөрөгән бер ағайға иргә сыҡты, бер бүлмәле фатирҙарын тегенеке менән берләштерҙе лә Ғәбитте ауылға, ҡәйнәһенә (үҙенең ата-әсәһе йәшләй вафат булғайны), алып ҡайтып ташланы. Ул йәй Ғәбит ҡалала һигеҙенсене бөткәйне. Унды ауылда тамамлап, армияға алынды. Армиянан тура өләсәһенә ҡайтты. Өфөләге урман техникумына ситтән тороп уҡырға керҙе лә егерь булып эшкә урынлашты һәм бына байтаҡ йыл инде шул вазифала. Әсәһе онотҡанда бер килеп әйләнә, унда ла яңғыҙы ғына. Ике ҡыҙҙары бар, әммә Ғәбит һеңлекәштәрен бәләкәй саҡтарында бер-ике генә күргәйне, башҡа күргәне юҡ. Әсәһе ҡартайҙы инде – ауыр эш, хәмер уны иртә бөктө. Ағинәй, ҡәйнәһе, шуғалыр ҙа бигүк үҙ итмәй киленен…

Иртәгәһенә Ғәбит Әбүбәкергә барҙы. Тик тура килтерә алманы – иртүк районға киткән. Ғәбиттән ҡасҡан да ҡулын күрһәтергә больницаға ыҫҡынған, тимәк. Хәйер, больницаға ғына түгелдер. Теге ваҡыт бөркөттө һорап килгән бәндә менән бергә килгәйне бит, моғайын да, шуға ла керергә ниәтләйҙер. Алып сығып булманы, тотто, ә бөркөтө ҡулды бына нишләтте, тип ошаҡлайҙыр.

Ике көндән тәбиғәтте һаҡлаусылар йәмғиәте рәйесе йәнә килеп, тағы бөркөттө таптырып йөрөнө. Тимәк, Әбүбәкер уға барған, төнгө хәлде һөйләп биргән. Ғәбиттең, мин уны күптән Торатау битләүенә алып ебәрҙем дәһә, тигәненә рәйес ышанманы, анау ваҡыт йәшереп алып ҡалдың, давай, күрһәт, тип ныҡышты. Уны тағы лапаҫҡа индереп тентетергә тура килде. Барыбер ышанмай, һаман янап китеп барҙы. Бының шулай уҡ ваҡытлыса еңеү икәнен яҡшы аңлай ине Ғәбит. Йәнә киләсәк, Әбүбәкер йәнә барып йәки шылтыратып ошаҡлаясаҡ, йәнә бала бөркөттө урларға тырышасаҡ. Шуға ла, оҙаҡҡа һуҙмай, ҡоштоң бер тәпәйенә алюмин пластинка беркетте лә әүәлгесә улын «Жигули»ҙың артҡы ултырғысына ултыртып, ситлекте ҡулына тотторҙо ла китте Торатау битләүенә. Ергә төшөрөү менән ҡош күккә ҡарап-ҡарап торҙо ла муйынын һуҙып саңҡ итеп тауыш бирҙе, унан йүгереп китте һәм һауаға күтәрелде! Ғәбит шаҡ ҡатты, ышанмай торҙо, хатта күҙҙәренә йәштәр килде. Оса алмаһа, тағы кире алып ҡайтам инде, тип ҡурҡып ҡына килгәйне бит. Ошонда килтереп өйрәтеп йөрөүе бушҡа булманы, тимәк, өйрәнде, үҫте, осорлоҡ кәргә етте. Күндән тегеп алған бейәләйен ташламаны шулай ҙа, алып ҡайтып гаражындағы бер ҡаҙаҡҡа элеп ҡуйҙы. Кем белә, бәлки, кәрәге тейер. Бәлки, ҡасан да бер уға күн бейәләй кейеп, ҡулына ултыртып бөркөт сөйөргә, боронғо ата-бабалар яҙмышын кисерергә яҙыр? Икенсе бер ғүмерҙә. Ошондай сәйер уйға юлығыуына үҙе ғәжәп итеп ҡуйҙы Ғәбит…

Төнөн йәнә төш күрҙе – теге көндө күргән төшөнөң дауамы ине был. Ҙур кәмәлә томһа һыу өҫтөнән йөҙөп киләләр, имеш. Эсәр һыуҙары, ашар ризыҡтары бөткән, ләкин туҡтап булмай, туҡтарға ярамай, күктәге йондоҙҙарға ҡарап ишәләр ҙә ишәләр. Кейек-хайуандар тынысһыҙлана, кәмә ситенә килеп баҡырыша, эсергә, ашарға һорай, ә бер сысҡан кәмә төбөн тишкән! Кәмәгә һыу тула, тип хәбәр осорҙо аҫтағылар. Ай, ниңә улайттың, барыбыҙҙы ла һәләк итәһең бит, тип һорағастары, барыбер батабыҙ йә аслыҡтан ҡырылабыҙ, тип яуапланы хаслыҡ ҡылған сысҡан, күҙ ҙә йоммай. Шунан үҙе һыуға һикерҙе һәм… теге ваҡыт райондың тәбиғәтте һаҡлаусылар йәмғиәте рәйесе тип килгән бәндә ҡиәфәтенә инеп, шәп-шәп йөҙөп китте лә барҙы. Үҙе көлә, үҙе йөҙә. Оҙаҡламай, ысынлап та, кәмә һыуға бата башланы, йөрәшө әкренәйҙе. Ҡыҙыу ҡанлылар һыуға һикерҙе, кәмә моронона йыйылды. Ғәбит тынысланырға өндәне, йыйылған һыуҙы түгергә, тишекте берәй нисек ямарға ҡушты. Сәңке башлы йылан тишекте үҙенең ҡойроғо менән ҡаплағас ҡына, һыуҙы күпмелер дәрәжәлә туҡтата алдылар. Әммә офоҡта осло түбәле тау күренгәндә, кәмә барыбер ҙә батты, шулай ҙа бер-береһенә ярҙам итешеп, бер-береһенә тотоношоп имен-аман ҡоро ергә аяҡ баҫа алдылар. Хаслыҡ ҡылған сысҡан иһә кеше ҡиәфәтенә инеп, район һунарсылар йәмғиәте рәйесе рәүешендә шарҡылдап көлә-көлә әлеге тау башында аяҡ киреп баҫып тора ине…

Көҙ башҡа йылдарҙағыға ҡарағанда иртә килмәксе. Икешәр, өсәр көн аша ямғыр һибәләһә лә, сентябрь сағыштырмаса йылы торҙо, шунан аҙна тирәһе йәйге ише ҡояш ҡыҙҙырҙы ла оҙайлап яуырға тотондо. Йәйге ямғыр түгел ине инде был, көҙгө быҫҡаҡ ямғыр ине. Кинәнеп, рәхәтләнеп яуҙы, көнөн дә, төнөн дә туҡтамай ҡойҙо. Йылға ташып ярҙарынан сыҡты, урамдарҙа күләүектәр күпсене, хатта йәшелсә, картуф баҡсалары өҫтөнә һыу ҡалҡты. Ҡоштар тауышы тынды, кәртә, рәшәткәләр бүртеп, ҡара-һоро төҫкә инде, ағастар йәшеллеген юғалтып, моңһоуға әйләнде, тирә-йүнгә шомло тынлыҡ урынлашты. Ә октябрь урталарының бер иртәһендә өй ишектәрен асып ихаталарына сыҡҡан кешеләрҙең аяҡтары тубыҡтан ап-аҡ ҡарға сумды.

Башҡа ауылдаштары кеүек, Ғәбит тә был ғәжәп иртәнең хозурлығына һоҡланды, тәбиғәттең ҡөҙрәте алдында ғажиз ҡалды. Күктең, әйтерһең дә, төбө тишелгән: күнәгенән аҙна буйы туҡтауһыҙ ҡойолған һыу уны ла тамам биҙҙергәйне, шуға ла салт аяҙ, ап-аҡ донъя уның кәйефен күтәрҙе. Ниһайәт! Был көндө мотлаҡ Торатауға барырға кәрәк, уның түбәһендәге ҡарҙы күрергә, өҫтөнән аяҡ эҙҙәренде мисәтләп атларға, саф һауаһын һуларға, матурлығына хайран итергә тейеш ул. Юҡһа, күпме бикләнеп ятты ямғыр арҡаһында, ихатаһынан ары бер ҡайҙа сыға алмай.

Ғәбит, күңелендәге һиллекте нисек тә оҙаҡҡараҡ һаҡларға тырышып, ҡабаланмай ғына йөрөп малын ялан аҙбарға сығарҙы, аҫтарын таҙартып, утлыҡсаға бесән төшөрҙө, ҡойонан һыу индерҙе, башҡа ваҡ-төйәк мәшәҡәттәрен башҡарып, иртәнге сәйгә керҙе. Һүҙ араһында Торатауға барасағы тураһында белдерҙе. Фәрзәнәһе был юлы ни мөғжизә менәндер өндәшмәне, өләсәһе һәр ваҡыттағыса үҙенең нотоҡтарын теҙҙе. Ғәбит һәр ваҡыттағыса уны бүлдермәй тыңланы. Ғәҙәтенсә, күңелен күрер өсөн бер нисә һорау бирҙе, ярай, өләсәй, шулай итермен, тип йүпләп яуапланы ла, ахырҙа, рәхәтләнеп көлөргә тотондо: Торатауға барған һайын өләсәһенең бер үк хәбәрҙе теҙеүе ҡапыл уға мәрәкә тойолдо.

– Бәй, ниңә бушалағайымға көләһең ул, әллә берәй яҙыҡ һүҙ әйттемме?

– Юҡ та, барыһы ла ҡәҙимгесә раҫ, тик нисек онотмайһың ул епкә теҙгәндәй нәсихәттәреңде, мин тауға барған һайын өҙмәй иҫкә алаһың,– тип яуапланы Ғәбит, һаман көлөүенән туҡтамай.

– Улар һиңә юл доғалары рәүешендә әйтелә, улым. Яҙа аҙымдан, сит-яттың хаслығынан һаҡлай. Ошоға тиклем һинең менән бер ҡаза ла булмаған икән, тимәк, мин әйткән ана шул доғалар аралаған, шулар ҡурсалаған.

– Ярай, улайһа,– тине Ғәбит.

Өләсәһе уның был һүҙҙәренән ҡәнәғәт ҡалып башын ҡаҡты, унан көттөрөп кенә:

– Хызыр Ильяс гел һинең янында йөрөһөн, улым, – тине.

– Юҡ, өләсәй, мин уның янында йөрөрмөн, – тине Ғәбит.

Тауҙың түбәһен йыш ҡына томан һырый һәм ул торт өҫтөндәнге ҡаймаҡ һымаҡ ҡатлам-ҡатлам булып ята. Нилектән шулай – Ғәбит тәбиғәттең был мөғжизәһен һис аңлай алмай. Памир, Эльбрус йәки башҡа текә тау түбәләре һымаҡ бейек тә түгел бит әле, диңгеҙ кимәленән биш йөҙ метрҙан саҡ ҡына артығыраҡ бейеклектә, ә үҙе йыш ҡына шулай томанға сорнала. Йәнә шуныһы ғәжәп: ауылдарына томан төшкәндә, Торатау иһә итәгенән түбәһенә тиклем апасыҡ булып ялтырап ята, ауылдарында ямғыр яуһа, унда яумай, ауылдары өҫтөндә болот ҡуйырһа, Торатауҙа салт аяҙ була. Бына шундай хикмәткә эйә уларҙың Торатауы. Ошо томан эсендә аҙашып, күтәрелгән һуҡмағын таба алмай, бөтөнләй икенсе тарафтан төшкәне лә бар тауҙан Ғәбиттең. Аҙашмау мөмкин дә түгел ул томанда, ярты метрҙан ары бер нәмә лә күренмәй ҙә ҡуя, түбәндә ул шыйығыраҡ булһа, өҫкә күтәрелгән һайын ҡуйылана, тығыҙлана бара, уны йыртып атлауы ҡыйынлаша.

Бына әле лә тауҙың биленә тиклем үрләгәйне, һөт эсенә төшкәндәй булды. Бер нәмә лә күренмәй, киләһе аҙымыңды бушлыҡҡа баҫырһың йәки башыңды ташҡа килтереп бәрерһең төҫлө. Шул юҫыкта күпмелер барыуға, ғәжәп, томан ҡапыл бөттө лә ҡуйҙы, әйтерһең, тигеҙ генә итеп ҡырҡып алдылар.

Килә-килә йәнә лә «Ашҡаҙар» иҫенә төшөп, танау эсенән генә мөңгөрҙәй башлағайны, ҡолағына ниндәйҙер тауыш салынды шул саҡ ҡапыл. Уйланып, дөрөҫөрәге, матурлыҡҡа ләззәтләнеп, томандың был серле йомағына әҫәрләнеп килгәнлектән, ниндәй тауыш икәнен шундуҡ абайлай ҙа алманы Ғәбит. Бында, тау битләүендә, ауаздар ҡайҙа яңғыраһа ла эргәлә һымаҡ. Тимәк, тауҙа ул яңғыҙы түгел, тағы кемдер йөрөй, тәүге ҡарҙа һунар итергә сыҡҡан. Ҡысҡырышалар ҙа шикелле, һөрәнләйҙәр – болан, төлкө йәки ҡуянды ҡамап алырға ниәтләнеүҙәреме?

Ғәбит ашығып аҫҡа төшә башланы. Томан йәнә солғап-уратып алды уны. Һөт ҡатламынан ысҡынғайны ғына, ҡаршыһына, хатта алдына уҡ тигәндәй, йәш кенә болан килеп баҫты. Тамам хәле бөткән, ҡурҡҡан, ҡолаҡтары ҡайсыланып, күҙҙәре ялтырап тора. Тимәк, баҫтыралар, тауышланып-һөрәнләп тап ошо меҫкенде ҡамарға самалайҙар. Кемдәр булыуы ихтимал? Ауылдыҡылар түгелдер, эҙ-маҙар шәйләнмәне, тимәк, ситтән килгәндәр, ҡаланан, тауҙың теге яғынан күтәрелгәндәр.

Шул саҡ боланды ҡыуған ирҙәр үҙҙәре лә күренде. Өсәүҙәр. Битләүҙе хужаларса иңләп киләләр. Үҙҙәре болан кеүек ахмалға төшкән. Икәүһендә – мылтыҡ, өсөнсөһө ҡулына оҙон таяҡ тотҡан. Мылтыҡлы икәүһенең алпан-толпан, иркен атлауына, өҫтәрендәге арыу кейемдәренә ҡарағанда, ысынлап та ситтән, ҡаланан, түрә-ҡара ҡәүеменән икәнлеге күренеп тора, өтәләнеп алдан юрғалағаны – үҙҙәренең крәҫтиән араһынан, моғайын. Юл күрһәтеп, ярҙам итешеп, араҡыларын эсешеп, күҙенә нимә күренә, ҡулына нимә эләгә шуны һатып биреп ебәрергә әҙер ҡол…

Болан тегеләргә оҙон һомғол муйынын һоноп ялт итеп ҡараны ла, Ғәбитте уратып үтеп, үргә сабып китте. Сапты-сапты ла ҡапыл туҡтаны бер килке. Һәм

шулай килеп сыҡты: Ғәбит әлеге өс ир менән болан араһында торҙо ҡалды. Тегеләр эре-эре аҙымдар менән йығыла-һөрлөгә өҫкә, тап Ғәбит баҫып торған ергә, үрмәләй, үҙҙәре нимәлер ҡысҡыра, һөрәнләй, ҡулдары менән ишаралар яһай, һелтәнә, йоҙроҡ күрһәтә. Әлегә ярайһы уҡ йыраҡ булғанлыҡтан, Ғәбит уларҙың һүҙҙәрен аңғармай, ишараларын аңламай. Хәйер, бик яҡшы аңлай, төшөнә: кит, тайшан, тиҙәр, ҡыуалар, пуля юлында тораһың бит, тиҙәр. Ана, мылтыҡтарын боланға тоҫҡап-тоҫҡап алалар, әммә атмайҙар, ата алмайҙар, сөнки Ғәбит ҡамасаулай, уға тейҙереп ҡуйыуҙан ҡурҡалар. Ә меҫкен йәш болан үҙенә ҡурҡыныс янағанын аңлай һәм, Ғәбиттән ярҙам һорағандай, оҙон муйынын текә тотоп бер уға, бер үҙен баҫтырып йөрөткәндәр яғына ҡурҡып ҡарап уның ышығында тороуын белә. Улай ғына тиһең, өс ир Ғәбит ышығынан ысҡынырға тырышып бер яҡҡа ҡайырылһа, болан да бер нисә аҙым атлап уға ышыҡлана, быны күргән-аңлаған Ғәбит үҙе лә тегеләй-былай шыуып баҫа. Тау битләүенән аҫҡараҡ төшһә,– асыҡлыҡ, әйтәгүр, унда һәләкәт көтә боланды. Урман йыраҡ, барып етә алмаясаҡ, ике мылтыҡтан атылған ике пуля шундуҡ ҡыуып етәсәк.

Яҡыная төшкәс, Ғәбит әлеге өсәүҙең береһендә теге ваҡыт үҙенә килеп бөркөт балаһын таптырып йөрөгән «тәбиғәт һаҡсыһы»н таныны. Уның артынан атлағаны уҡлау кеүек төҙ кәүҙәле, төҫ-башҡа ыҫпай, хатта сибәр, мыйыҡлы йәш кеше ине. Ғәбит уны беренсегә күрә. Өҫтөндә йылы хәрби бушлат, башында ҡалын спорт башлығы, аяғында ҡалын табанлы ботинка. Ҡыланыш-хәрәкәтенә, һауалы ҡарашына ҡарағанда, ярайһы уҡ ҙур түрә икәнлеген самалауы ҡыйын түгел. Өсөнсөһө урта йәштәрҙәге кеше. Кәүҙәгә лә уртаса буйлы, кейеме лә урта ҡул. Әммә хәрәкәттәре ныҡлы, ышаныслы, йөҙө иһә битараф был «уртаса»ның.

Была һиңә мә, кейек-хайуанды һаҡлар, ҡурсалар урынға үҙе баҫтырып йөрөй анау бәндә, ташҡа үлсәйем йәмғиәттең рәйесе! Тимәк, тәүге ҡарҙа болан йығыр өсөн махсус сыҡҡандар, моғайын, рәйес үҙенең әшнәһен алып килгән.

Тегеләр Ғәбит янына менеп етте. Хәлдәре бөткән, быхылдашалар, асыулылар. Ә болан башын һелкеп бер ҡараны ла һөттәй аҡ томан араһына инеп күҙҙән юғалды. Һунарсылар мылтыҡтарын күтәреп тә өлгөрә алманылар.

– Ә һин икән,– тине йәмғиәт рәйесе, йөҙөн салышайтып. Көрһөндө, шунан тәрән итеп тын алды.– Нимәһенә ҡаплап торҙоң боланды? Үҙеңде атһаҡ? Пуля – дура, кәйелә торған холҡо бар,– артығыраҡ ысҡындырғанын самалаптыр, ахыры, йәһәт кенә тауышын үҙгәртте, яһалма йылмайҙы. – Иртүк нимә эшләп йөрөйһөң бында?– Бүреген систе, кесерткән төҫөндәге ала-сола фуфайкаһының төймәләрен ысҡындырҙы.

– Бәй, мин эш урынында, ҡарап-тикшереп йөрөйөм. Ә бына һеҙ нишләп йөрөйһөгөҙ? Һунарға сезон асылмағанын белмәйһегеҙме ни?

– Ә кем әйтә беҙҙе һунарға сыҡҡан тип? Маңлайға яҙылмағандыр бит? Мин дә эштә, мин дә тикшереп йөрөйөм.

– Өсәүләпме?

– Өсәүләп. Рейдҡа сыҡтыҡ.

– Ай-һай, бер ҙә тикшереп йөрөүгә оҡшамаған. Болан ҡыуа инегеҙ бит. Етмәһә, һауала вертолет тауышы ла ишетелде. Һеҙҙә ундай техника юҡ шикелле?

– Бар, нишләп булмаһын. Һин белмәгән әйберҙәр күп инде ул донъяла. Ә һин бөркөттө ҡайҙа ҡуйҙың?

– Ошонда килтереп ебәреүгә биш былтыр. Теге килгәнегеҙҙә үк әйттем бит.

– Уны ояһынан тотоп алып ҡайтҡаның, өйрәтеп, табыш өсөн һунар итергә ниәтләгәнең өсөн яуап бирергә тура килмәгәйе…

– Һаман бер балыҡ башы. Ул бит осорға ла белмәгән себеш. Ояһынан ҡолап

төшкән дә ята ине юл өҫтөндә. Мин күреп алып ҡайтмаһам, шунда үлә, йә төлкө, йә бүре тамағына эләгә ине. Ә былай осорға өйрәтеп ебәрҙем.

– Белмәйем, белмәйем, нисек тапҡанһыңдыр, уныһы миңә ҡараңғы, ә бына өйөңә алып ҡайтҡаның факт. Һин уға теймәҫкә тейеш инең. Тәбиғәттең үҙенең закондары. Үлһә, донъяла бөркөт бөтәр тип уйлайһыңмы ни?

– Күпте һаҡлау берәүҙе һаҡлауҙан башлана…

Сысҡан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ башҡаса өндәшмәне. Ғәбит менән һөйләшеп тороуын, етмәһә, ҡуҡыр ҡунаҡ алдында, түбәнселек һананы шикелле. Бүреген кейҙе, фуфайкаһының төймәләрен ҡаптырҙы, түҙемһеҙләнә башлаған ҡунағына баш ҡаҡты ла, мылтығын асыу менән яурынына алып, тарбан-торбан кире аҫҡа атланы. Бер аҙ барғас боролдо:

– Ҡара уны, уға тәғәйен яһау,– рәйес болан балаһы юғалған яҡҡа ҡараны,– яңылыштан үҙеңә ҡаҡлыҡмаһын, һағыраҡ йөрө,– тине. Йөҙөнә мыҫҡыллы йылмайыу ғәләмәте сыҡты, һирәк тештәре ыржайҙы.

Эйе, һунарҙары килеп сыҡманы, боланды эләктерә алманылар – Ғәбит ҡамасауланы. Хәйер, ул хәйләһеҙ хайуанды икенсе юлы атырҙар барыбер ҙә. Күрҙеләр, ҡайһы тирәнән эҙләргә икәнен самаланылар. Пуля яңылыштан үҙеңә ҡаҡлыҡмаһын, тиме? Булыр, ҡаҡлыҡтырыр ҙа. Иманһыҙ бәндә икәне күренеп тора. Нисек уны был вазифаға тәғәйенләгәндәр, аптырарһың. Һаҡларға ҡушҡандар, ә ҡырып йөрөй.

Ғәбит бер килке уйланып торҙо. Тегеләр бына-бына яңынан күтәрелерҙәр ҙә томан ҡатламы араһынан үҙенә мылтыҡ тоҫҡарҙар һымаҡ тойолдо. Мәғәнәһеҙ үлеү, ғәҙелһеҙлек янаймы уға? Улар уңлы-һуллы кейек ҡыра, Ғәбит уларға ҡаршы сыға, тыйырға, ҡара эштәренә ҡамасауларға тырыша, улар уға «яңылыштан» яһау ҡаҡлыҡтырмаҡ.

Ғәбит, томан араһынан бына-бына пәйҙә булыр мылтыҡ көбәгенән өркәндәй, нисектер артына сигенгәйне, үксәһе селек ҡыуағына төртөлдө лә, тигеҙлеген юғалтып ҡыуаҡ өҫтөнә ултыра төштө. Тәненә селектең энәле ботаҡтары ҡаҙалды, күбеһе уның ауырлығын күтәрә алмай шарт-шорт һынды. Артына дөм йығылып китмәҫ өсөн ҡулдарын ике яҡҡа тарбайтып йәйеп ебәргәйне, ҡулынан мылтығы ысҡынып китеп ергә барып төштө лә ни ғәләмәттәндер шарт атылды – тәтеһе осло ташҡа йәки ҡыуаҡтың кипкән төпһәһенә бәрелде, ахыры. Көтөлмәгән хәлдән албырғап ҡалған Ғәбит йәһәт кенә ҡалҡынды ла йәнфарманға ҡоралы артынан ташланды. Йәш ҡар өҫтөнән шамбы һымаҡ шылып барған шыма нәмәне һис ҡыуып етә алмаҫ ине, әгәр ҡарт артыш ҡыуағы уны тотҡарлап ҡалмаһа. Тарбаҡ-тарбаҡ йәйелгән артыш ботаҡтары араһынан мылтығын алам тип эйелгәйне, ҡарашы йыуан ғына бер ботаҡтың төбөнә бәйләнгән сепрәк ишаратына төштө, уңа төшһә лә, ҡасандыр ҡыҙыл төҫтә булыуы асыҡ беленә әле уның. Һынын турайта алмай, эйелгән еренән ҡатты ла ҡалды, башында хәтирәләр өйөрөлә башланы. Күҙ алдына йәйҙең, дөрөҫөрәге, яҙ ахырының илерткес бер көнө килде. Был бит уның галстугы, уның ҡыҙыл галстугы! Нисә йыл үтте, ул һаман ошонда бәйләнгән көйө тора! Теткеләнеп селтәргә әйләнгән, торғаны бер иҫке сепрәк киҫәге, ә уныҡы. Таный Ғәбит үҙенекен, таный, хаталаныуы, яңылышыуы мөмкин түгел. Тамағына төйөр, күҙҙәренә йәш тығылды…

Сепрәкте, әйтерһең, тере нәмә, өркөтөп, күҙ яҙҙырып ҡуймайым тигәндәй, ул яй ғына эйелде, ҡалтыранған ҡулының бармаҡ остары менән генә ҡағылды. Эйе, был – уның галстук киҫәге, бына ошо ботаҡҡа уны эләктергес менән беркетеп бәйләп ҡуйғайны. Әгәр шул эләктергес булмаһа, моғайын, күптән ысҡынып осҡан булыр ине. Былай ҙа өҫтөнә күпме ҡар, ямғыр яуған, ел-буран

иҫкән, көн тыуған, төн ятҡан, кеше аяғы аҫтында ҡалған. Нисә йыл үтте һуң ул ваҡиғаларға? Ун биш йыл. Ә ниңә ошоға тиклем юлыҡҡаны булманы һуң? Ошонан күпме йөрөнө, һис тап итмәне. Торатауға күтәрелгән һайын ул ҡыҙ менән осрашыу, уның йыры, моңло тауышы, һомғол буй-һыны, теремек хәрәкәте, ер еләге ише тәмле ирендәренең таты иҫенә төшә торғайны бит... Ҡатыны менән әйтешкәндән һуң йәки кәйефе булмаған саҡтарҙа, уны хәтерләп, күҙ алдына килтереп, уй-хыялында, исмаһам, уның менән булыр өсөн тауға күтәрелер ине. Тәүге мәлдәрҙә икәүләп артыш төбөнә бәйләгән ошо ҡыҙыл галстукты күрер өсөн генә килгеләне, таба алмаһа ла, тынысланып, яҙғы ләйсәндә ҡойонғандай, оло бер рәхәтлек кисереп ҡайта торғайны. Хәйер, әле лә шулай, әле лә Торатауға ошо уйҙар менән килә, ошо уйын үҙ-үҙенән йәшерергә тырышһа ла, тойғолары аҡылына буйһонмай, аяҡтарын ошонда атларға мәжбүр итә. Һәм ул күпмелер ваҡытҡа шул донъяла, шул мөхиттә йәшәп ала.

Хәйер, Сәлимә менән осрашыуҙың ысынбарлыҡта булғанына һуңғы мәлдәрҙә шикләнә лә башлағайны, сөнки йылдар үткән һайын ул хәтирә Торатауҙағы томан ҡатламында ирегәндәй тоноҡлана, ваҡиғалар барышы бутала, ҡыҙҙың иҫ киткес һағышлы йыры, үҙәгендә өҙөр аһәңле тауышы, шишмә ағышына оҡшатып сылтыратып көлөүе йыраҡлаша, фәрештәләй йөҙө алыҫлаша бара. Ләкин ул һаман Сәлимәне алып киткән егеттең асыулы ҡиәфәтен, ҡалын ҡаштарын, ҡымтыулы йоҡа ирендәрен, сәсе ҡырып алынған таҡыр башын, ҡыҫҡа зәңгәр салбарын йыртып сығырҙай булып тулышҡан йыуан боттарын, үгеҙҙекеләй һимеҙ елкәһен һис онота алмай. Сәлимәнән айырмалы рәүештә, ул кеше йылдар үткән һайын тағы ла асығыраҡ, хәрәкәт-ҡыланыштары шул көйөнсә күҙ алдына килә.

Эйе, Сәлимә менән тауҙағы осрашыу булдымы, юҡмы, әллә төшөндә генә күрҙеме, тип тә икеләнә ине һуңғы мәлдәрҙә, бына хәҙер үҙенең галстугын тапҡас, ҡабаттан ышанды һәм ниндәйҙер тәмле-татлы тойғолар тулҡынына сумды Ғәбит. Иң ҡәҙерле нәмәһен тапҡандай, теткеләнгән туҡыманы тотҡолап-тотҡолап алды. Ә бит ул ҡыҙҙы барыбер ҙә онота алманы, өйләнеүенә һигеҙ йыл, уңарсыға тиклем ете йыл, йәғни ун биш йыл буйы йөрәгендә йөрөтә булып сыға уны.

...Әсәһе эшләгән төҙөлөшкә дәрестән һуң йыш бара торғайны Ғәбит. Өйөм-өйөм кирбес, таҡта, оло ялғашта иҙелмә, торна һымаҡ бейек кран, туҡтауһыҙ килгән-киткән ҡеүәтле машиналар, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек кеше – былар барыһы ла үҫмер малай өсөн ифрат ҡыҙыҡ. Әсәһе, киреһенсә, улының үҙ янына килеүен бик өнәмәй, йөрөмә бында, ҡайт, аша ла дәресеңде ҡара, магазинға барып кил, тип йомош ҡуша, шуға ла Ғәбит йыш ҡына уның күҙенә салынмаҫҡа тырыша – ситтән күҙәтә-күҙәтә лә ҡайтып китә. Әсәһенең ҡырыҫлыҡ сәбәбен бөгөн дә аңлай алмай. Әллә үҙенең ауыр эштә эшләүен күрмәһен тинеме, әллә өҫтөнә берәй нәмә төшөп йә эләгеп йығылып имгәнеп ҡуймаһын тинеме? Сәбәбе булғандыр, һәр хәлдә төҙөлөш бала-саға йөрөр урын түгел. Бөгөн ул шулай уйлай, ә малай сағында барырға, күрергә ынтылып тора торғайны. Шулай бер килгәнендә әсәһе уны нишләптер ҡыуманы, вагондың асыҡ ишеге аша яҡынлашҡанын алыҫтан уҡ шәйләне лә, тупһаға баҫып, әйҙә, әйҙә, тип ҡулын болғаны. Тимәк, «төшөрөп» алған, шулай сағында алсаҡ, ихлас булып китә торған. Бәләкәй генә өҫтәлдә икмәк, колбаса, ҡатыҡ, башҡа тәғәмдәр менән йәнәш, абау, бер нисә һыра шешәһе лә ҡунаҡлаған. Төшкө ашҡа туҡтағандар, күрәһең. Көлөшә-шаярыша, бер нисә әхирәте менән әсәһе, ысынлап та, тамаҡ ялғай, ситтәрәк өс ағай ҙа бар. Улары, ҡәнәғәт йөҙҙәренә ҡарағанда, ашағанға оҡшаған. Кереп иҫәнләшкәс тә, мәктәптән килеүеңдер, асыҡҡанһыңдыр, әйҙә,

ҡапҡылап ал, тип әсәһе көсләп тигәндәй өҫтәл артына ултыртты ла үҙенең көрөшкәһенә сәй яһаны, икмәккә май яғып, өҫтөнә колбаса телеме һалды. Ағайҙар тартырға сыҡты. Ғәбит уларҙың, ашарға килгән был малай, тип уйлауҙарынан ҡурҡа ине, шуға ла тартынып ҡына эсте сәйен, эсеп бөтөү менән ашығып вагондан сыҡты. Ләкин йыраҡ китергә лә өлгөрмәне, әсәһе һөрәнләп кире саҡырып алды.

– Ғәбит, хәҙер һин егет инде, ҡыҙҙар менән таныша башлаһаң да ярай,– тине өҫтөнә комбинезон кейгән, башына яулыҡ ябынған, көнбағыш башылай йомро битле бер апай, мут ҡына йылмайып,– бына бер туған һеңлекәшем килде, әйҙә, таныштырайым, ә?

Баяғы апайҙар, таныштыр, таныштыр, тип ҡушылды димсегә, көлөшә-көлөшә. Уларға мәрәкә ине.

Ғәбит тартынып-уңайһыҙланып, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер бер ҡыҙыҡһыныу менән тирә-яғына ҡаранды ла, ҡыҙыҡай артымдан инеп киләме икән әллә тип, ишек яғына боролдо. Юҡ, ул бында, ҡаршыңда ултырҙы бит, тип йәнә шырҡ-шырҡ көлөштөләр. Ысынлап та, ҡыҙҙың ҡаршыһында ултырып сәй эскән, ә күрмәгән, иғтибар итмәгән, имеш. Ҡабалан-ҡарһалан, ауыҙын бешерә-бешерә эскәйне шул, ә ул, тимәк, бөтәһен дә күҙәткән булып сыға. Ниндәй оят!

– Был минең улым, Ғәбит,– тине әсәһе, ниндәйҙер яһалма күтәренкелек һәм ихласлыҡ менән, – күргәйнегеҙ инде.

– Ә был минең бер туған һеңлем, исеме Сәлимә,– тине ҡыҙ эргәһендә ултырған мөләйем йөҙлө теге апай. Шунан һеңлеһенә боролдо ла юрамал һорап ҡуйҙы:– Һин быйыл нисәнсене бөтәһең әле?

– Һигеҙҙе, – тине уныһы ҡыйыу ғына.

– Ғәбит тә, – тип йөпләне әсәһе.

– Бына йәтеш, – тине Сәлимәнең апаһы. – Бөгөндән дуҫ булығыҙ, осрашығыҙ.

– Ҡоҙағый булырға күп ҡалмаҫ,– тип шаяртты бер ҡатын. Икенсеһе:

– Бригаданы туйығыҙға саҡырырға онотмағыҙ,– тип өҫтәне. Көлөштөләр.

– Эйе шул,– тине әсәһе, – мин риза, Сәлимәнән бына тигән килен сығыр. Апаһына оҡшаһа…

– Оҡшар, оҡшар, – тиештеләр.

Кәүҙәгә бәләкәй, ҡаҡса, бәрәңге танаулы, быжыр йөҙлө, нәҙек тауышлы бер ағай кереп: «Ниңә ихахайлашаһығыҙ, обед ваҡыты бөттө, давай эшкә!» – тип вагондан ҡыуып тигәндәй сығармаһа, бисә-сәсә тел сарлап, Сәлимә менән Ғәбитте үсектереп һаман ултырыр ине әле. Тындылар ҙа, ай ғына урындарынан ҡалҡынып, ҡашығаяҡтарын, ашаған ризыҡтарын арлы-бирле йыйыштырып, өйөм өҫтөнә гәзит ҡапланылар һәм эш урындарына таралыштылар. Ғәбиттең әсәһе уға, ярай, ҡайт, урам буйында һәлпәнләп йөрөмә, дәрестәреңде ҡара, тип ҡабалан ғына хушлашты ла ватыҡ кирбестәр, таш-ком өйөмдәре, ярыҡ-йороҡ таҡталар араһынан төҙөлә башлаған йорттоң ишек ауыҙынан инеп китте. Ә Ғәбит төҙөлөштөң киң майҙаны уртаһында Сәлимә менән торҙо ла ҡалды. Ҡыҙ, уның тиҫтере булһа ла, ҡыйыу ғына булып сыҡты. Артабан ни ҡылырға белмәй аптыраған Ғәбиттең – әсәһен тыңлап ҡайтып китһә, ташлап ҡасҡан һымаҡ, һерәйеп торһа ла, килешмәй – ҡулынан тотоп алды ла ситкә әйҙәне.

– Дуҫлашайыҡмы?– тине ул, туп-тура ҡарап. Күҙҙәре ҙур, йоп-йомро, керпектәре оҙон ине ҡыҙҙың.

Ғәбит яурындарын һелкетте, ситкә ҡараны – ул әлегә ҡыҙҙар менән дуҫлашыуҙың нимә икәнен белмәй ине.

– Һиңә әйтәм, дуҫлашайыҡмы?

Ғәбит ауыҙынан көскә-көскә бер һүҙ һығып сығарҙы:

– Дуҫлашайыҡ һуң.

– Килештек! – Сәлимә сәпәкәйләп үк алды.

Дуҫлашыуҙы башларға, мәктәптән һуң көн дә ошонда осрашырға килешһәләр ҙә – Сәлимә шулай тине, ә Ғәбит баш ҡағып ризалашып ҡына торҙо – йыш ҡына әле береһе, әле икенсеһе килә алманы. Сәбәбе – дәрестәр, түңәрәктәр, кластан тыш уҡыуҙар, мәктәптә булған башҡа саралар. Әлбиттә, гелән үк улай булманы, осрашҡыланылар ҙа. Шулай бер, был төҙөлөш тирәһендә нишләйбеҙ, әйҙә, икенсе берәй ерҙә осрашайыҡ әле, тип һөйләшеүҙәрен әсәһе ишетеп торған икән: «Бәй, Ғәбит, Торатауға алып бар Сәлимәне, моғайын да, күргәне юҡтыр",– тип һүҙ ҡыҫтырҙы. «Ярар», – тигәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды Ғәбит. Сәлимә ҡыуанып ризалашты.

Ял көнө тартылдылар Торатауға. Май урталарында тау бите бәрхәт йәшеллеккә күмелә. Ниндәй генә төҫ юҡ бында: йәшеле, ҡыҙылы, һарыһы, күрәне, ағы. Битләүҙән юғарыға менә килә, үҫемлек донъяһы һирәгәйә, ваҡлана, йәшкелт мүк, ылымыҡ селтәре рәүешен ала бара. Тауҙың ҡаялыраҡ яланғас урындары бар, ектәренән, эскә өңшәйеберәк торған урындарынан төрлө үҫемлектәр һонолоп ҡарай.

Туҡтай-туҡтай, арттарына боролоп ҡарай-ҡарай атланылар. Ғәбиткә был серле донъя таныш булһа, Сәлимә өсөн – яңы, быға тиклем күрмәгән мөхит. Ул аптырай, һоҡлана, хайран итә, һирәк үлән, ят сәскә күрһә, ҡара, ҡара әле, Ғәбит, ниндәй матур, тип күрһәтә, исемдәрен һорай, уларҙы әйелеп һыйпай һәм үҙе лә шул мөғжизә араһында осоп йөрөгән күбәләкте хәтерләтә. Сәлимәне ҡыуандыра алғаны өсөн Ғәбит үҙе лә шат. Ул анау төҙөлөш майҙансығында бер нисә тапҡыр осрашҡан ҡыҙға әле бөтөнләй оҡшамаған, әйтерһең дә, уның урынына бүтән берәү килгән. Бында ул һөйкөмлө, алсаҡ, матурлыҡты күрә һәм һоҡлана белгән илаһи тәбиғәт балаһы. Һәм Ғәбиттең, ябай бер үҫмер егеттең, күңелендә әлегә үҙе лә аңлап-төшөнөп етмәгән серле моң тыуа, етеҙ ҡоралайҙай бер аҫҡа, бер өҫкә йүгергеләгән ҡыҙға ҡарата йөрәгендә хис уяна. Әлегә ул был шауҡымдың нимә икәнен дә белмәй, сөнки быға кисергәне юҡ. Ул – телһеҙ ҡалды, гүйә, Сәлимәнең бер-бер артлы биргән һорауҙарына йүнләп яуап та ҡайтара алмай..

Өҫтөнә ҡыҫҡа еңле, аҡ ерлеккә ҡыҙыл борсаҡ һибелгән күлдәк, аяҡтарына аҡ сандали кейгән ҡыҙ, уның тау уратып гиҙгән йомшаҡ елдә елберҙәгән һары сәстәре, һомғол ҡаҡса кәүҙәһе, көләс йөҙө тауышһыҙ кино кадрҙары һымаҡ күҙ алдында сихри тамаша ҡора, гүйә. Һәм ошо кино бер ҡасан да бөтмәҫ, Ғәбит уны мәңге ҡарар һымаҡ…

Бына бер мәл ҡыҙ күбәләктәй осоп йөрөүенән туҡтаны ла йырлай башланы. Ғәбит тәүҙә аптырап ҡалды. Мәктәптә ҡыҙҙарҙың берәй байрамда хор йырынан башҡа былай яңғыҙ йырлағанын күргәне лә юҡ ине. Ә Сәлимә тотто ла йырланы, бер кем дә ҡушманы ла, үтенмәне лә. Йырҙың мәжлес-ҡунаҡтарҙа ололар йырлаған, ҡай саҡ радионан яңғыраған боронғо йыр икәнен самаланы. Халыҡ йырҙарын ишетмәй-тыңламай түгел Ғәбит, әммә береһенең дә бындай ҙа тетрәндергес тәьҫир иткәне, күңелен яулағаны юҡ. Иҫ киткес һағыш был моңда, зар, үкенес! Шул уҡ ваҡытта Торатауҙы уратып елеп йөрөгән әлеге йомшаҡ елдәй йомшаҡ, күңелгә, хатта тәнгә, һәр күҙәнәккә майҙай һеңә, наҙлай – үҫмер был моңдоң үҙенә ҡағылыуын, йөрәгенә үтеп инеүен дә тоя…

*Йәнкәй-йәнәш китте, ай, һунарға,*
*Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә…*

Сәлимә йырлап бөттө, артына әйләнеп тау итәгендә ятҡан ауылға, таҫмалай бормаланып аҡҡан Ағиҙелгә, уның ярҙарында үҫкән бейек тирәктәргә күҙ йүгертте, йөҙөнә һағыш ятты, шунан уға ишетелерлек кенә итеп өндәште:

– Оҡшанымы?

– Эйе,– тине Ғәбит, телен саҡ әйләндереп, сөнки ул һаман да йыр тәьҫиренән сыға алмай ине.– Шундай моң… Һин иҫ киткес матур йырлайһың.

– Юҡ, бына өләсәйем йырлай торғайны, исмаһам. Быны ла ул өйрәтте. «Ашҡаҙар» тип атала. Иҫкә төштө лә…– тине Сәлимә нисектер ғәйепле ҡиәфәт менән, әйтерһең дә, яҙыҡ эш эшләне. Шунан әкрен генә тауға күтәрелә башланы.

Менеп еткәс, тауҙың тигеҙ түбәһендә йөрөнөләр, әле бер яғына, әле икенсе яғына килеп тирә-яҡты ҡаранылар, ҡоластарын йәйеп, күҙҙәрен йомоп, йөҙҙәрен йомшаҡ елдән һөйҙөрҙөләр. Йөрөй торғас, селек ҡыуаҡтарына, артышҡа бәйләнгән таҫмаларҙы, ҡулъяулыҡтарҙы, төрлө сепрәк киҫәктәрен күреп туҡтанылар.

– Кем бәйләгән икән быларҙы?– тип ғәжәпләнде Сәлимә.– Ҡалай ҡыҙыҡ.

– Йәштәр, апай-ағайҙар,– тигән булды Ғәбит, ҡыйырлатып. Әлбиттә, белә кемдәр һәм ни өсөн бәйләгәнен, тик асығын әйтергә ҡыйыулығы етмәй.

– Яратышып йөрөгән егеттәр менән ҡыҙҙар бәйләгәндер. Күргәнем юҡ, ә ҡайҙалыр уҡығаным бар,– тине Сәлимә, моңайып ҡына. – Бергә булырға вәғәҙә бирешкәндә йәки айырылышыр алдынан осрашырға һүҙ ҡуйышҡанда…

– Моғайын, шулайҙыр.

– Әйҙә, беҙ ҙә билдә бәйләйек?– тине Сәлимә. Күҙҙәре янып китте, йөҙө яҡтырҙы.

– Әйҙә һуң.

– Тик бында түгел, ә түбәндәрәк, йәме. Бында ел тартҡылап, ҡар, ямғыр ашап, йыртҡылап бөтәсәк. Мин уның оҙаҡ тороуын теләйем, килеп ҡарап йөрөрбөҙ. Эйеме?

– Эйе.

Етәкләшеп аҫҡа төштөләр. Тауҙың биленә еткәс, Сәлимә туҡтаны, тегендәбында һибелеп ултырған селек, артыш ҡыуаҡтарын һайларға тотондо. Күрәһең, көслөрәк, йыуанырaҡ ботаҡлыһын табырға тырышты. Оҙаҡламай тапты таш ҡыразында өйкөм генә үҫкән артышты ла.

– Ә нимәне бәйләйбеҙ һуң?– тип Ғәбиткә ҡараны.

Аптырашып ҡалдылар. Ғәбит кеҫәһен ҡапшаны – ҡулъяулығы ла юҡ, исмаһам. Ысынлап та, нимә бәйләргә һуң?

– Галстугыңды! – тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Сәлимә, бер-береһенә ҡарашып байтаҡ баш ватып торғандан һуң. – Беҙҙең бәйләрлек башҡа бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Кеше ҡалдырғанды алып бәйләй алмайбыҙ ҙа инде.

Ғәбит ҡышҡы каникулдан һуң мәктәпкә ололар галстугы тағып йөрөй башлағайны. Дөрөҫөн әйткәндә, әсәһе мәжбүр итә. Матур, йыйнаҡ бул, кешенән кәм булып йөрөмә, түрә-кара балалары кеүек галстук таҡ, тип әйтә-иҫкәртә. Таҡты, тәүге көндәрҙә оялып бер булды, малайҙар ҙа көлдө, әммә тора-бара үҙе лә өйрәнде, класташтары ла күнекте һәм бына, ғәҙәт иткәс, бөгөн дә таҡҡан. Ял көнө булһа ла. Галстугы ниндәй бит әле – әсәһе ун биш йәшенә бүләк иткәйне – салт ҡыҙыл! Ә Сәлимә шуны артышҡа бәйләргә ҡуша. Ай, йәл. Тик Сәлимә алдында нисек мах биреп торһон ти ул? Унан үҙе лә дуҫлыҡтарының, Торатау түбәһенә менеүҙәренең бер иҫтәлеге ҡалыуын теләй.

Ғәбит галстугын систе лә Сәлимәгә тотторҙо.

– Бәй, үҙең бәйлә,– тине уныһы.

– Юҡ, үҙең,– тип мөгөрҙәне Ғәбит, шәхси мөлкәтен үҙ ҡулдары менән ҡалдырғыһы килмәй ине. Сәлимә Ғәбит ҡулынан галстукты йәһәт кенә алғайны ла, бәйләй алмай аҙапланды: урай, әммә бушау бәйләй, саҡ ҡына тартһа, һүтелә, тағатыла ла сыға. Ғәбит бының тәжрибәһеҙ ҡулдарының ҡыланышына ҡарап

түҙемле генә көтөп торҙо ла, ҡайҙа, бир, үҙем, тип галстукты кире алды, нәҙек осон артыш олононоң төбөнә үк уратып бер нисә ҡат бәйләне, киң яғына күлдәккә беркетеп ҡуя торған эләктергесте ҡаптырып ҡуйҙы.

– Бына булды, Торатауға күтәрелеүебеҙҙән бер иҫтәлек ҡала,– тине Сәлимә ҡәнәғәт төҫ менән һәм күрһөнөп ҡуйҙы.– Янына килгеләп йөрөрбөҙ. Ярармы?

– Ярар.

Ғәбит шулай тип яуаплауы булды, Сәлимә ҡапыл уға яҡынайҙы ла муйынынан ҡосаҡлап, ирендәренән үпте. Үҫмер өсөн был көтөлмәгән хәл ине. Сәлимә уны тәүҙә йыры менән аптыратһа, хәҙер – үбеүе менән. Бөтә тәне буйлап йылылыҡ, ҡалтыраныу үтте, ҡыҙҙың дымлы, ҡайнар ирендәре аңын томаланы, ә үҙенең ҡыҙҙы ҡосаҡларға һис ҡыйыулығы етмәне.

Ошо ҡапыл һәм күҙ асып йомған арауыҡта булған халәт тәьҫирен, ҡыҙҙың һутлы ирендәренең тәмен, муйынына уралған төйөрөм беләктәренең йылылығын ғүмер буйы онота алмаҫын ун биш йәшлек Ғәбит әлегә белмәй ине. Йылдар үткән һайын был хәтирә һағыш-ғазапҡа әйләнә барасаҡ, үҫмер ҡыҙҙың ҡыйыулығына, хистәренең ихласлығына һәм шул хис-тойғоларын белдерә-күрһәтә алыуына аптыраясаҡ, һоҡланасаҡ, кейәүенән (тормошҡа сыҡмай йөрөмәйҙер инде, моғайын да) көнләшәсәк…

Тығыҙ эҫе һауаны йыртып, ҡапыл яҡында ғына ниндәйҙер гөрөлдәү ишетелде. Ғәбит ул тауышты тәүҙә вертолет тауышына оҡшатты. Тауға һунарға киләләр, ти, шулай ҡай берәүҙәр, иғтибарлабыраҡ тыңлаһа, вертолеттыҡы булмай сыҡты тауыш. Ҡайҙан килә был гөрөлдәү? Шул саҡ тау битләүенән юғары тиҙлектә мотоцикл менеп килеүен күреп ҡалды. Рулдә – өҫтөнә тельняшка-майка, башына шлем кейгән мыҡты кәүҙәле егет. Нисек текәнән менә ала, ташҡа бәрелмәй-һуғылмай йәки артҡа түңкәрелеп китмәй, ғәжәп! Менеп етте лә былар тәңгәлендә мотоциклын шып туҡтатты, ҡырҡыу тауыш менән Сәлимәгә: «Ултыр!» – тип бойорҙо.

Сәлимә бер мәлгә генә аптырап-албырғап ҡалды, йөҙөндәге шатлыҡ-ҡыуанысы һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты, мотоцикллы егеттең бында килеп менеүен һис көтмәгәне күренеп тора. Унан Ғәбиткә ялбарыулы бер ҡараш һирпелдерҙе лә теге егеткә боролдо һәм: «Ултырмайым!»– тине шулай уҡ ҡырҡыу тауыш менән.

– Нисек ултырмайһың? Ултыраһың, ҡайтырға, китергә кәрәк!– егет бәхәсләшмәҫлек итеп әйтте.

– Мин бер ҡайҙа ла бармайым!

– Һинең теләүең-теләмәүеңде һорамайҙар. Давай, ултыр!– Егет ҡыҙҙың беләгенән маҡтып тотоп, көслөк менән мотоциклы янына өҫтөрәне, йәһәт кенә икенсе шлемды уның башына кейҙереп тә ҡуйҙы. Әммә Сәлимә шлемды шулай уҡ бер ынтылышта систе һәм аҫҡа атып бәрҙе. Уныһы таштан-ташҡа туп ише һикергеләп түбәнгә тәгәрәп төшөп китте.

– Ҡайтмайым, бармайым, ти ҙәһә, ниңә бәйләнәһең?– тине, ниһайәт, Ғәбит, телен саҡ әйләндереп.

– Ә һин, малай, тик тор, аҫҡа мәтәлләп барып төшкөң килмәһә.

«Моряк» уға уҫал итеп ҡараны. Унан, елтерәтеп тигәндәй, Сәлимәне мотоциклдың артҡы ултырғысына ултыртты, үҙе лә йәһәт кенә ултырып алды. Мотоциклын шундуҡ бороп, шыуышҡан йылан шикелле таштар, ҡыуаҡтар араһынан тегеләй-былай борғоланып-янтайып, түбәнгә төшөп тә китте. Ҡолайҙар, хәҙер ҡолайҙар, бәреләләр, тип ҡото алынып торҙо Ғәбиттең, әммә егет таҫыллы идара итә ине мотоциклы менән: бына һөрлөгә, бына ауа тигән һуңғы сиктә бороп ебәреп йә аяғы менән этәнеп йығылтмай алып барыуын белә.

Хәлдең айышына төшөнөргә тырышып оҙаҡ баҫып торҙо Ғәбит. Әммә күпме шаңҡып торһа ла, төшөнә алманы. Ҡайҙан килеп сыҡты һуң был «моряк», уларҙың бындалығын ҡайҙан белгән? Кем булды? Ағаһымы, йөрөгән егетеме? Әйтмәне лә бит әле Сәлимә уның кем икәнен. Ҡалай тиҙ һәм көтөлмәгәндә булды барыһы ла.

Салт аяҙ көндө булған әлеге ваҡиға һымаҡ, тиҙ һәм көтмәгәндә тау битләүен һөттәй аҡ томан һырый башланы. Тәүҙә ул, һауалағы ярпы-йорпо болоттар һымаҡ, этешеп-төртөшөп өҫтән йөҙөп килде, унан тиҙ арала ойошто, бер бөтөн, тығыҙ ҡатнашмаға әйләнде. Йәнә аптыраашта ҡалды Ғәбит, тәбиғәттең был мөғжизәһе уны шаңҡытты. Ят егеттең көтмәгәндә пәйҙә булып Сәлимәне урлауы менән ҡапыл төшкән томан араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ, әммә был ваҡиғаларҙың бер-бер артлы килеүенең серенә һис төшөнә алманы. Әгәр Сәлимә янында булһа, томан, моғайын да, ябырылмаҫ ине һәм улар һаман тау гиҙеп йөрөрҙәр йәки галстук бәйләгән артыш янында һөйләшеп ултырырҙар ине. Әммә… Сәлимәне, әкиәттәге ише, ҡара көстәр урланы, Ғәбит батыр уны эҙләргә-юлларға сыҡмаһын өсөн, томан сүрәтендә үҙенең беренсе ҡаршылығын ебәрҙе. Эйе, урланылар матур ҡыҙҙы, ҡулынан тартып алып киттеләр!

Тора торғас, галстугы иҫенә төшөп, ярай, сисеп алайым да ҡуяйым, тип тирәяғын һәрмәй башлағайны, баяғы артышты таба алманы ла ҡуйҙы. Ана, өйкөм-өйкөм булып «еҫле үлән» сәскә атҡан, алһыу сәскәләре баҡсала үҫкән пиондыҡына ла оҡшап ҡуя. Ботаника уҡытыусыһы бер әйткәйне, ундай гөл һирәк, тамырынан йолҡмағыҙ, тип. Иплән кенә һабағынан өс сәскә һындырып алды Ғәбит. Ә теге артыш ҡайҙа һуң? Бер аҙым да ситкә атламаған һымаҡ ине, ә галстук бәйләгән артыш юҡ! Ғәжәп, ни ғиллә был? Ҡапыл нисектер һалҡын булып китте. Аяҡтарын һаҡ ҡына шыуҙыра-шыуҙыра, урыны-урыны менән һерәйешеп сығып торған таштарға таяна-таяна яй ғына түбәнгә төшә башланы. Оҙаҡ төштө. Ниһайәт, битләүгә төшөп етте, ә унда томандың әҫәре лә юҡ! Әүәлгесә йылы ел иҫә, тирә-йүнде май ҡояшы иркәләй. Ғәбит Сәлимә атып бәргән ҡыҙыл шлемды эҙләп ҡарағайны ла, таба алманы. Күрәһең, төшөп еткәс теге егет алғандыр. Шундай яҡшы нәмәне ташлап китә буламы?..

Әсәһенә һөйләмәне ниҙәр булғанын, күтәрелдегеҙме тауға, тигәненә, эйе, тип кенә яуапланы. Төҙөлөшкә һиҙҙермәй генә барып, күренмәҫме тип ситтән генә күҙәтеп тә йөрөнө бер килке, әммә Сәлимәне осрата алманы. Торараҡ, әсәһенең һөйләүенән, ҡыҙҙың апаһының улар бригадаһынан икенсе бер төҙөлөш ойошмаһына китеүен белде. Шулай итеп ҡыҙ юғалды. Уҡыу йылы бөтөүгә әсәһе икенсегә иргә сығып, Ғәбитте өләсәһенә ҡайтарып ебәрҙе. Башҡа тормош башланды Ғәбит өсөн, ә Сәлимә уның мәңге юйылмаҫ йөрәк сиренә әйләнде – «урланған» ҡыҙҙы табырына өмөтө яйлап һүрелә барҙы, һүнә барҙы…

…Район һунарсылар йәмғиәте рәйесенең янауы оҙаҡ көттөрмәне, киләһе аҙна башына шауҡымы килеп тә етте: шул көндә, шунса сәғәттә идаралыҡта булһын, тип ауыл Советына телефонограмма ебәргән. Нишләһен, китте инде Ғәбит районға документтарын тотоп. Һауалы, танау буйынан ғына ҡарап ҡаршы алды етәксе. Ултырырға урын да тәҡдим итмәй кем менәндер оҙаҡ итеп телефондан һөйләште, шарҡылдап көлдө, булыр, булыр, эшләрбеҙ, тип нимәлер вәғәҙәләне, әммә бының еңел генә башҡарылаһы эш түгеллеген дә әйтергә онотманы, ыңғай яуап алғастыр, йәнә артҡа ҡайҡайып көлдө, ә Ғәбит, тәртип боҙоп директор алдында баҫып торған мәктәп уҡыусыһы һымаҡ, ишек төбөндә тапанып торҙо.

– Йә, кем, документтарыңды килтерҙеңме?– тине теге, телефонын һалғас иҫәнләшеп тә тормай.

Ғәбит өндәшмәй генә танытмаһын эшем эйәһе алдына һалды.

– Иптәш, кем, срогы сыҡҡан бит ҡатырғаңдың. Был – бер. Икенсенән, бында икенсе председателдең ҡултамғаһы, хәҙер минеке булырға тейеш, тимәк, алыштырырға кәрәк. Шуға ла мин быны алып ҡалам. Яңыһын тултырғансы,– тине кабинет хужаһы һуҙып ҡына, шунан ауыҙынан йәнә бер нисә һүҙ һығып сығарҙы. – Хәйер, яңыһын тултырырғамы, юҡмы икәнен мин уйлармын әле.

Һөйләшеү шуның менән осланды. Ғәбиткә кабинеттан сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Был бәндә, ысынлап та, йәмғиәттең яңыраҡ тәғәйенләнгән етәксеһе булып сыҡты һәм Ғәбиттән йәш боланды атыуға ҡамасаулағаны өсөн үҙенсә үсен алды. Документы булмағас, вазифаһында артабан эшләй алмай, эшләргә хоҡуғы юҡ. Нишләйһең, хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында шул түрәләрҙең. Ә бит арыу ғына эшләп йөрөй ине, элекке етәкселәренән дә, әле киткәненән дә ризаһыҙлыҡ ишеткәне булманы, киреһенсә, маҡтай инеләр, бер нисә тапҡыр грамота менән дә бүләкләнеләр. Ә болан ваҡиғаһында… болан уның ышығына бөтөнләй осраҡлы рәүештә килеп баҫты бит. Бында Ғәбиттең ни ғәйебе?

Райондан ҡайтҡас, хәлде Фәрзәнәһенә һөйләгәйне – һөйләмәй ҙә булдыра алмай, сөнки ҡайҙа һәм ни йомош менән киткәнен әйтеп китте – уныһы тынысландырыу, хәленә кереү урынына ҡыҙҙы ла китте:

– Һиңә шул кәрәк, сәбәбе ул ғына түгелдер, миңә һөйләмәһәң дә, арағыҙҙа нимәлер булғандыр, әрләшкәнһеңдер, һин мәңге шулай кеше менән тәмһеҙләштең дә йөрөнөң инде, болан бөткәнме, атһындар, ҡураңа килеп һинең малыңды атмайҙар бит!

– Бүтән кеше шулайтып йөрөһә, аптырамаҫ инең, үҙе һаҡларға тәғәйенләнгән кеше мылтыҡ тотоп һунарға сыҡҡайны бит. Мин уға бер нәмә лә әйтмәнем, теге ваҡытта ла, нишләп йөрөүегеҙ, әле бит сезон асылмаған, тинем. Бар әйткәнем шул ғына. Ул һүҙҙәрҙең ни насарлығы?

– Һинән башҡа ул сезон асылмағанын белмәйме ни?

– Белгәс, сәпсим йөрөмәҫкә тейеш, бүтәндәргә пример күрһәтеп.

– Хәбәреңә ҡарағанда, яңы етәксең ҡурҡыныс бәндәгә оҡшаған,– тине өләсәһе, һүҙгә ҡыҫылып. – Кәмәбеҙҙең төбөн тишкән сысҡан тоҡомонандыр. Ғәбит, уйлап һөйләш уның менән, һаҡ йөрө. Ундайҙар көтмәгәндә һеңгеҙәтә һуғыусан була.

– Танытманы алып ҡалды инде, артабан ни ҡылыр.

– Ни ҡылыр, тисе,– тағы сәбәләнде Фәрзәнәһе.– Кире бирмәй ҙә ҡуя. Танытмаң булмағас, һине эштән ҡыуҙы тигән һүҙ.

– Ярар, аты булһа, ҡамыты табылыр. Ҡазалап китмәһә ярар ине, тип ҡурҡам мин,– тине өләсәһе.

– Ҡуйсәле, өләсәй, уныһына бармаҫ инде.

– Белеп булмай.

Бер нисә көн ихатанан сыҡманы Ғәбит. Өй тирәһендә булашты: ярылмай ҡалған утынын ярып өйҙө, картуф баҡсаһы кәртәһе бер нисә урындан һынып төшкәйне, шуны рәтләне, Фәрзәнәһенең ваҡ-төйәк йомоштарын үтәне. Күңеле бер аҙ һилләнде, ҡарпыш ҡолаҡ, сысҡан күҙ менән йән әсеткес һөйләшеү онотола төштө. Хәйер, ҙурҙан уйлап ҡарағанда, бер нәмә лә булмаған кеүек. Танытмаһын алып ҡалыу ғына уны Торатауға барыуҙан, ундағы кейек-януарҙы һаҡлауҙан тыя алмай. Быға тиклем нисек йөрөгән, артабан да шулай йөрөй ала. Кем белә уның танытмаһы юҡ икәнен? Белһә тағы. Кемдең ни эше бар унда? Уның ҡарауы, күңеле тантана итә: Сәлимә тураһында иркенләп уйлай ала һәм был уй бар булмышына шундай еңеллек, рәхәтлек бирә, гүйә, күптән ниәтләгән оло бер эшен атҡарған. Уйлап ҡараһаң, һағышы һайыҡты, әммә, ғәжәп, ул

һағыш нисектер яҡты, нурлы, иҫләгән һайын иҫләгеһе килә. Осраша, күрешә алмауын белә, был фекергә күнеккән, әммә шул илаһи даръяла йөҙөү барыбер ҙә бәхет…

Бер көн иртәнсәк болдорона сығып баҫҡайны, ҡапыл Сәлимәнең тауышы ҡолағына салынғандай булды:

*…Ишеккәйем алды керелсәгә*
*Сығайым да тиһәм, таянам.*
*Төштәремдә күреп, ай, ҡыуанам,*
*Һүҙ әйтәйем тиһәм, уянам.*

Сайҡалып китте моң ыңғайына: бына лаһа ул, Ғәбит, иҫән-һау, болдор-керелсәлә баҫып тора – шәшкегә китеп һәләк булмаған даһа!..

Ә үҙәкте өҙгән моң тынын шул мәл кемдер быуҙы, гүйә, тупаҫ ғырылдауға әйләндерҙе. Ғәбиттең айырылғыһы килмәй ине йәдкәр йырҙан, әммә ысынбарлыҡ уны үҙенә иғтибар бирергә мәжбүр итте. Нимә шулай геүләй? Ҡайҙан сыға һуң был тауыш, тип башын тегеләй-былай борғолағансы, геүләү ҡапыл яҡынайҙы ла ауылдың теге башында аҫтан ғына осҡан вертолет пәйҙә булды. Ул Торатау яғына уҙып та китте. Вәт, нахал, ә, электр бағаналарына тейә яҙып оса, берәйһенә эләгеп ҡуйһа, ауылды яҡтыһыҙ ҡалдыра бит, тип хәүефләнеп уйланды Ғәбит. Ҡурҡмайҙар ҙа, оялмайҙар ҙа. Тимәк, тегеләрҙең йәнә һунарға килеүҙәре, ҡар яуып әҙерәк туңдырғайны, нәҡ уңай шул болана сығыуы… Нишләргә? Барырға, аттырмаҫҡа! Һәм Ғәбит йүгереп йөрөп тигәндәй һыуыҡ сәйҙе күтәреп эсте лә, мылтығын, яһауын, ҡалтағайын, башҡа кәрәк-ярағын алып, баҡса артлап Торатауға ҡарай атланы. Хәйер, әллә ни ашыҡманы ла, сөнки белә: вертолеттарын тау артына алып барып төшөргәнсе, әйберҙәрен алып сыҡ-ҡылағансы, бер ярты һуҡҡансы, тау битенә үрмәләгәнсе байтаҡ ваҡыт үтәсәк. Һуңғы ике көндә яуған ҡырпаҡ ҡарҙың өҫтө емелдәп ята. Өҫтөнә баҫыу менән ул шығырҙап батып китә, аяҡты һурып алғанда быйма башы туң ситенә эләгеп йонсота. Ҡар әллә ни ҡалын түгел улай ҙа, тубыҡ тиңелтен булһа, атлауы ҡыйыныраҡҡа төшөр ине.

Оҙаҡ барҙы Ғәбит, яй барҙы – вазифаһынан рәсми бойороҡ менән бушатылмаһа ла, кеҫәһендә документы булмағас, элекке эше бында күҙғараҡланып йөрөргә хаҡы ла юҡ һымаҡ. Һаман шул кейек, ҡош-ҡортто йәлләүҙән, ҡурсалауҙан, берәүһен-икәүһен булһа ла ҡотҡарып ҡалырға тырышыуҙан бит килеүенең сәбәбе лә. Мылтыҡлы бәндәләрҙе өркөтөп йәки өгөтләп ебәрһә лә файҙаға, күрһә, шаһитлыҡ итһә, бәлки, уйланырҙар, яуыз теләктәренән баш тартырҙар. Теге әҙәм, осрашһалар, һин нишләп йөрөйһөң, эштән ситләтелгән башыңа, тип әйтәсәк. Шуның менән һүҙ ҙә бөттө, дәғүәләшеп, ниңә атаһығыҙ, тип йөрөй алмай Ғәбит хәҙер.

Тау битләүе тегендә-бында ҡош тәпәйе менән сыбарланған. Улар, ҡоштар, елпенеп килеп төшкән дә бата-сума атлаған, һикергән, ҡар соҡоп ашарына эҙләгән, унан осоп киткән. Бара-бара Ғәбит ҡуян, төлкө эҙҙәрен дә шәйләне – юл яҙҙырып һикергеләгәндәр, туҡтағандар, бер-береһен ҡыуғандар, ҡыуаҡ, ағас төптәрендә, ҙурыраҡ таш тирәһендә өйөрөлөшкәндәр.

Тирә-йүнде шулай текләп ҡарап-күҙәтеп атлаһа ла, Ғәбиттең бар уйы һунарға килеүселәр тирәһендә урала. Халыҡ ауылда осон-осҡа ялғап көн күрә, ә ҡайһы берәүҙәр… вертолетта ғына ауға йөрөй. Кем бирә икән һуң уларға вертолет һынлы вертолетты? Ул бит велосипед, мотоцикл, хатта машина ла түгел дәһә шулай еңел генә ултырып сығып китергә. Һәр сәғәте, яғыулығы иҫәптә булған техниканы кем шулай һунарға йөрөтә ала? Йә ҙур вазифалы түрә, кәм тигәндә

министр йәки уның урынбаçары, юғары милиция чины йә ялларлыҡ аҡсаға бай эшҡыуарҙыр. Һәр хәлдә ябай кеше быны булдыра алмай. Ә бит беренсе тапҡыр килмәйҙәр. Ҡурҡмайҙар ҙа, оялмайҙар ҙа. Ғәжәп. Һәм ҡурҡыныс…

Вертолет тауышы ишетелмәй, тимәк, төшкәндәр. Торатау түбәһенә ултыра алмаçтар, ел сығыуҙан шөрләрҙәр. Тауҙың теге яғындағы бәләкәй туғайға ултырырҙар, моғайын да. Унда ел юҡ – бер яҡтан тау үҙе, икенсе яҡтан бейек ағастар ышыҡлай, кеше күҙенән дә алыç.

Ғәбит, тауҙың урта тирәһенә етеп, апаруҡ алға һерәйеп сығып торған таш ҡатламын урап үтеп асыҡлыҡҡа сығыуы булды, ҡолаҡ төбөндә генә пуля һыҙғырҙы, шунан шартлау ишетелде. Хәүеф тураһында бөтөнләй уйламай килгәнлектән, ул саҡ ҡолап китмәне, янтайып, бер ҡулы менән ташҡа таянып өлгөрҙө. Вәт, вәхшиҙәр, ҡай арала менеп өлгөргәндәр? Тимәк, уның килгәнен күреп-ҡарап торалар. Һынын саҡ ҡына турайтыуға, икенсе пуля әле генә урап үткән таштың сикәһенә сәпәлде лә ҡаҡлығып ситкә осто, артынан тирә-яҡҡа ваҡ таштар сәсрәне. Эйе, былар шаярмай, ҡамасаулап йөрөһәң, башыңды ошо таш һымаҡ сәсрәтәсәкбеҙ, тип иçкәртеүҙәре бит.

Ғәбит имгәкләп, таяна-мүкәйләй, яҡындағы селек ҡыуаҡлығы артына боçоп сүкәйгән булды. Ҡыуаҡлыҡ ҡына ҡотҡара алмаç, ул таш стена түгел, әммә һерәйеп баçып тороу ҙа түгел инде барыбер ҙә. Ҡалҡынып өçкә ҡарай, тик бер нәмә лә күрә алмай – хәрәкәт иткән, һелкенгән бер нәмә лә юҡ.

Бына өçтә нимәлер тубырланы, һикерҙе, ҡаҡлыҡты. Ғәбит һонолоп өçкә ҡарағайны, төшөндө: тегеләр уның өçтөнә таш тәгәрәтә. Вәт сволочтар, мылтыҡ ала алмағас, таштан бәрҙертмәкселәр. Күп тә үтмәне, йәш ҡарҙы борҡотоп, һауала ҡойон уйнатып эреле-ваҡлы таштар дәррәү дөмбөрҙәй башланы. Ғәбит әле генә үҙе уҙып киткән ҙур таштың ышығына саҡ барып етеп өлгөрҙө. Хәҙер таштар һикереп-ҡаҡлығып уның баш осонан оса. Былай булмай, тиҙерәк һыпыртырға кәрәк… Ғәбит ҡасыр йүнәлешен тоçмаллай башланы. Баш ороп йүгерергә ярамаç, таш һә тигәнсе ҡыуып етәсәк, атыуҙары ла ихтимал. Асыҡлыҡҡа сыҡһа, көтөргә кәрәк, моғайын да, көнө буйы таш этеп йөрөй алмаçтар. Ғәбит йәнә муйынын һоноп өçкә ҡараны, әммә был юлы ла бер нәмә лә күрә алманы – тегеләр бик яҡшы йәшеренгәйне. Таш тәгәрәүе һирәкләнде, бер аҙҙан тамам туҡтаны. Малай-шалай һымаҡ юҡ менән булабыҙ, тип уйланылар, ахыры. Ошонан файҙаланып Ғәбит ҡуҙғалды. Артына боролоп ҡарай-ҡарай барҙы, абынып, һөрлөгөп тә китте, ҡалҡынды ла йәнә атланы. Үҙенә өçтәгеләр уның һарҡыуға ҡабалан төшөп, дөрөçөрәге, ҡурҡышынан ҡасып барғанын мыçҡыллап көлөп ҡарап торалар һымаҡ тойолдо. Бесәйгә көлкө, сысҡанға үлем инде...

Тирләп-бешеп төшөп етте Ғәбит, ниһайәт, һөҙәк битләүгә. Бында ҡурҡыныс түгел, таш төшөрә ҡалһалар ҙа, ул күреп тора, янтая, ҡаса ала. Тау башына оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо, яңынан менәйемме әллә, тип тә уйланы, вертолеттарының ҡайҙа төшкәнлеген дә күрергә теләне, әммә, нимә улайтып йөрөйөм әле фәтүәһеҙгә, тип уйланы ла ҡайтыуға боролдо. Хәйерһеҙ юлға сыҡты бөгөн, бөтөнләй килергә кәрәкмәгән…

Төнө буйы уйланып ятты Ғәбит, үҙенең ҡурҡып ҡайтып китеүенә ғәрләнде. Күпме йылдар эшләп, былай ҡыланғаны юҡ ине. Аçау-ажар ирҙәр менән, ҡаланан килгән ҡупырымдар менән сәкәләшкәне, хатта һуғышҡаны, мылтыҡтарын тартып алғаны булды, бәғзеләрен баçтырып-эҙәрләкләп тә йөрөнө, атҡан малдарын тартып алып хөкүмәткә тапшырған осраҡтары ла байтаҡ, ә бөгөнгөләй ваз кисеп ҡайтып китеүен һис иçләмәйсе. Ниңәлер ике атыу, өçтән ебәрелгән таш өйөмө йөрәген ҡырағай ҡурҡыу тойғоһо менән ялманы ла ҡуйҙы бит. Һәм шул тойғоно үҙенән йолҡоп ташлай алманы, шуның ҡоллоғонда

меҫкен генә булып ҡайтып китеүҙән башҡа сара күрмәне. Өҙгөләнеп ята, серемгә китһә, баҫлығып уяна, һаташа торғас, саҡ еткерҙе таңды. Ҡараңғынан уҡ Торатауға юлланды. Күҙаллағаны алдаманы: ике болан атҡандар. Меҫкендәрҙе йыҡҡан ерендә үк салып, тунап, түшкәләрен сапҡылап бәләкәй санаға тейәп – шуныһын да онотмай алыуҙарын әйт әле һин уның – алып киткәндәр. Вертолетҡа тиклем ҡан һарҡҡаны, аяҡ һәм сана эҙҙәре ярылып ята. Боландарҙың башы-тояғы, тиреһе лә шунда, кеше күҙенән йәшермәгәндәр ҙә, исмаһам.

Был вәхшилекте күреп саҡ иламаны Ғәбит. Көсһөҙлөгөнән йәне әсене. Эйе, ҡайтып китмәҫкә кәрәк булған уға, шунда йөрөһөн, шаһитлыҡ ҡылһын, ҡамасаулаһын, боландар килеп сыҡһа, үткәндәге ише ҡыуһын ине. Уның күҙ алдында быйндай уҡ ҡәбәхәтлеккә бара алмаҫтар ине, бәлки. Ғәфү итә алмай Ғәбит үҙенең ҡурҡып ҡайтып китеүен…

Аҙна сағыштырмаса тыныс үтте. Вертолет күренмәне, Ғәбит тә башҡаса тауға менмәне, район һунарсылар йәмғиәтенән дә саҡыртманылар. Әммә ошо тынлыҡ эсендә бер нисә ғәжәп хәлдәр булып алды. Уның ҡайһылары эшенә ҡағылды, ҡайһыларының бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булманы, шулай ҙа һәр ҡайһыһы, Ғәбиттең фекеренсә, иртәме, һуңмы булырға тейешле ваҡиғалар ине.

Бер көн кис Искәндәре урам буйынан туҡмалып ҡайтты.

– Нимә булды, һуғыштыңмы? – тип ныҡыны Ғәбит, улы ҡапҡанан ихатаға инеү менән.

– Малайҙар ауыл осонда ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырҙы. Мин, аҡтармағыҙ, улар бит ҡышҡа йоҡларға ята, уларҙың өйө бит, юҡһа өшөйҙәр, туңалар, үләләр, тигәйнем, көлөштөләр ҙә битемде иләүгә тыҡтылар, унан туҡманылар, – тип иламһыраны малай, бысраҡ йөҙөн еңдәре менән һөртөп.

– Имгәтмәнеләрме һуң?

– Юҡ, танау ҡананы, бер тешем һынды, бына,– малай кеҫәһенән тешен сығарып күрһәтте. – Ҡартәсәйем ҡырмыҫҡаға ҡағылырға ярамай, улар ҙа йән эйәһе, ҡырмыҫҡалар бөтһә, кешеләрҙең теше ҡойолор, ти ҙәһә.

– Теймәһәң дә ҡойғандар бит, ана, тешеңде.

– Ә мин улар менән һуғыштым.

– Ярай, һәйбәт булған. Һуғыш, тик бүтән туҡмалып йөрөмә.

Улы өндәшмәне. Атаһы шулай тиеүенә һәм әрләмәүенә шат ине.

Малайы менән ғорурлана ла, йәлләй ҙә Ғәбит. Ошо юлдан барһа, тормошта йәшәүе уға ҡыйын буласаҡ – холҡонда бөгөндән үк ғәҙеллек тойғоһо бар.

– Илдар тигәнең кем малайы һуң?– тип һораны өйгә килеп хәлде ҡыҫҡаса ғына һөйләгәс Фәрзәнә.

– Әбүбәкерҙең,– тип яуапланы Искәндәр, мышҡылдап.

– Һаман шул Әбүбәкер! Беҙ уларҙан гел шулай хаслыҡ күрербеҙме инде хәҙер? Аталы-уллы бандиттар. Үҙе беҙгә килеп урлашып йөрөүе етмәгән, хәҙер малайы этлек ҡыла. Был ниндәй эш ул, ә? Милицияға әйтергә кәрәк. Барам, үтен һытам мин ул алкаштың!

Фәрзәнә кейенә лә башланы.

– Бәләкәйҙән бик иркә үҫтерҙеләр шул,– тине өләсәһе, көрһөнөп.– Үҙ һүҙле, тыңлауһыҙ күрәм дә шул. Һуғыш суҡмары ла икән.

– Йөрөмә, Фәрзәнә, бала менән бала булма. Бөгөн һуғышырҙар, иртәгә ярашырҙар. Үҙем һөйләшермен Әбүбәкер менән.

– Һөйләштең бит инде, тыңланымы?– Фәрзәнә елләнеп сығып та китте.

Ҡартәсәһе Искәндәрҙе сисендерҙе, йыуындырҙы, йыуатты, ашатты, әммә әрләмәне, гәрсә үҙенең тәрбиәһе һөҙөмтәһендә туҡмалғанын бик яҡшы аңлай ине.

– Шунан,– тине Ғәбит, Фәрзәнәһе ҡайтҡас,– һуғышып китмәнегеҙме?

– Һуғышып ҡараһын! Әйттем барыһын да. Үҙенә лә, бисәһенә лә. Күркә һымаҡ ҡабарып йөрөмәһендәр.

Ғәбит өндәшмәне, өләсәһе ирен сите менән генә йылмайҙы.

Иртәгәһенә иртән ихатаһына сыҡҡайны, трактор арбаһының артҡы кузовына аҡбур менән ниндәйҙер һүрәт төшөрөлгәнлегенә иғтибар итте. Таяҡҡа ла, ҡыярға ла оҡшаған әкәмәт. Кистән юҡ ине, теүәл хәтерләй. Искәндәрҙең эшелер, тип уйланы, әлеге һүрәт болдоронда баҫып торған көйө күҙенә салынғас. Ҡапҡаһына күҙ һалғайны, унда ла шундай уҡ һүрәт төшөрөлгән булып сыҡты. Яҡыныраҡ килеп ҡараны. Ҡарағайны, пуля һүрәтен аңғарҙы: бер яғы – осло, икенсе яғы тупаҡ һәм гильза өлөшө ағартылған. Ул белмәй буламы инде пуляны – ғүмер буйы ҡорал менән эш итә. Башына һуҡтылармы ни: был бит «метка»! Тегеләрҙең генә эше: беҙгә тағы ҡамасаулап йөрөһәң, маңлайыңа ошондай пуля аласаҡһың, тип тамға һалып иҫкәртеүҙәре, янауҙары. Ҡайһы арала яһап киткәндәр, тиң. Теге сыҫҡан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ килеп йөрөмәҫ, Әбүбәкерҙең генә этлегелер, моғайын да. Бүтән кем булһын? Бер шешәгә әсәһен һатып ебәрер бәндә бит. Кисә Фәрзәнә әрләп киткәне өсөн үс алды булды инде.

«Метка» тураһында Ғәбит өйҙәгеләргә өндәшеп торманы – йәнә оло ғауға ҡуптарасаҡ Фәрзәнәһе. Әммә ни ғәләмәт, иртәнге сәй артында өләсәһе үҙенең бөгәсә күргән төшөн һөйләп һушын алды. Ошонан һуң беҙҙең аңдан ҡеүәтлерәк, беҙгә буйһонмаған, киреһенсә, беҙҙең менән идара иткән, бар нәмәне тәғәйен бер тәртиптә тотҡан ниндәйҙер юғары көс, юғары аң юҡ тип әйтеп ҡара! Баҡһаң, бөтә нәмә бер-береһе менән бәйләнештә, дөйөм идаралыҡта, әүткәнебеҙ менән бөгөнгөбөҙ айырылғыһыҙ икән!

Оло бер һыуҙа йөҙәбеҙ, имеш. Аҙналар, айҙар буйы йөҙәбеҙ. Килә торғас, ашарға ризыҡ, эсергә һыу бөттө, кешеләр тамам хәлһеҙләнеп кәмә төбөнә йығыла башланы. Ә ҡоро ер күренмәй ҙә күренмәй. Йәнә байтаҡ йөҙгәс, йыраҡтайыраҡта бер тау түбәһе шәйләнде. Шатлыҡ-ҡыуаныстың сиге юҡ, хәлһеҙләнеп йығылғандар аяҡҡа баҫып ишкәккә ултырҙы – барыһының дә тиҙерәк ҡоро ергә еткеһе килә. Тик бәлә: сыҫҡан кәмә төбөн кимереп тишкән дә ҡуйған! Кәмәгә һыу тулып, яйлап бата башланы. Нишләргә белмәй аптырашып, ҡурҡышып йүгерешкән арала сәңке йылан ҡойроғон тығып әлеге тишекте ҡапланы, беҙ күмәкләп кәмә төбөнә йыйылған һыуҙы түгергә тотондоҡ. Кәмә батыуҙан ҡотолдо, ә яуыз сыҫҡан шарҡылдап көлә-көлә һыуға һикерҙе лә, ҙур балыҡҡа әүерелеп, теге тауға ҡарай йөҙөп китте. Килә торғас, кәмә батты, йылан ғына ҡотҡара алманы, бәлки, сыҫҡан-балыҡ, йәнә хаслыҡ ҡылып, икенсе ерҙән тишеп киткәндер. Һинең менән мин, Ғәбит улым, бер ишкәккә йәбешеп Торатауға йөҙөп етә алдыҡ. Ә байтаҡ халыҡ, мал-тыуар, ҡош-ҡорт, кейек-януар һыу төбөнә китте…

– Өләсәй, шул уҡ төштө мин дә күргәйнем бит!– тип ҡысҡырып ебәрҙе Ғәбит.– Ғәжәп, тап шундай төш ине, билләһи.

– Бер ҙә ғәжәп түгел,– тине өләсәһе ейәненең һүҙҙәренә аптырамай ғына.– Ҡан хәтере бар, балам, аң хәтере. Бар нәмә Аллаһ Тәғәлә ихтыярында. Ә сыҫҡандан һаҡ бул, ул һинең яныңда ғына йөрөй, кәмәңде тишеп ҡуймаһын.

Бер көн ихатаһында тракторы менән булашып йөрөй ине, өй тапҡырына еңел машина килеп туҡтаны ла ҡапҡанан бер кеше керҙе. Тәбәнәк буйлы, мыҡты кәүҙәле был ир уртаһының атлауы ышаныслы, ҡарашы тәкәббер.

– Һаумы, Ғәбит,– тине ул, тишерҙәй итеп ҡарап. Күрешергә ҡулын һуҙманы, башын ғына ҡаҡты. Ихатаны байҡаны, утынлыҡтан бүкән табып, трактор

янына тәгәрәтеп килтерҙе лә шуға ултырҙы, тәмәке тоҡандырҙы, тәрән итеп һурҙы, оҙаҡ итеп ауыҙ-танауынан борхотоп төтөн сығарҙы.

– Аптыраттыммы? Шамил мин. Танымайһыңмы? Танымаһаң да ғәжәп түгел, байтаҡ ғүмер үтте бит. Ә һин үҙгәрмәгәнһең, шундуҡ таныным.

– Ә мин ысынлап та танымайым.

– Ярай, әйтәйем улайһа. Йәшенмәк уйнамайыҡ. Ваҡыт яғы ла наҡыҫ,– ир ҡабаланып тартты, ҡапҡанан хәтәр ышаныслы килеп керһә лә, тулҡынлана башлағаны һиҙелә ине. – Бынан ун биш йыл элек Торатауҙа йөрөгәнегеҙҙә Сәлимәне ҡулыңдан тартып алып киткәйнем бит.

Ғәбиттең башына килтереп һуҡтылармы ни, көтөлмәгән хәбәрҙән тертләп китте, тамағына төйөр килеп тығылды, ҡулынан гайка асҡысы төшөп китте хатта. «Моряк», тельняшкалы егет! Ун биш йылдан һуң нимә тип килде икән һуң? Сәлимә менән бер-бер хәл булғанмы?

– Ҡайҙа һуң Сәлимә, иҫән-һаумы, тип ниңә һорамайһың? – Шамил үҙе өрөп сығарған төтөн араһынан күҙҙәрен ҡыҫып Ғәбиткә текәлде. – Нисә йыл йәшәнек, һине онота алманы: миңә Ғәбит тип өндәште, төшөндә һинең менән һөйләште, ә мин, дүрәк, яйлап төҙөлөр, яҙмышы менән ризалашыр, тип өмөтләндем. Булманы, – Шамил түмәрҙән торҙо ла уны уратып йөрөргә тотондо, үҙе ҡабаланып тәмәкеһен һурҙы, бөткәйне, икенсеһен тоҡандырҙы.– Кем икән, ниндәй икән ул шулай онота алмаҫлыҡ супермен, тип махсус күрергә килдем бына.

– Хәҙер һуң?..– Ғәбит тамаҡ төбөнән ике һүҙ һығып сығарҙы. Һорауының урынһыҙ икәнен торараҡ ҡына аңланы.

– Хәҙер нимә? Ун ике йәшлек ҡыҙ менән икеһен ҡалдырҙым да ҡайттым да киттем.

– Ҡайҙа ҡалдырҙың?

– Бәй, ҡайҙа йәшәгәнде лә белмәй инеңме ни? – Шамил ғәжәпләнгәндәй итте. – Үҫә төшкәс, юллап килерһең, тип көткәйнем әле мин. Ҡаҙағстанға алып киткәйнем бит. Аҙна булды инде минең ҡайтыуға.

– Ҡайҙа ҡайтыуға?

– Ауылға,– Шамил ауылының исемен атаны – ул район үҙәге булып сыҡты. – Тағы сығып китергә ниәт, хәҙер – Себергә. Китер алдынан һине күрәйем тинем. Так что Сәлимәкәй янына бара алаһың. Уйлашһаң, адресын да бирермен. – Шамил ирен сите менән генә мыҫҡыллы көлөп ҡуйҙы. – Һин ысынлап та беҙҙең ҡайҙа киткәнде белмәнеңме?

– Юҡ.

– Белһәң, эҙләп барыр инеңме?

– Юҡтыр. Үҫмер генә инем бит.

– Ә егет булғас?

– Талпынған саҡтар булды, бигерәк тә армиянан ҡайтҡас. Адресты белмәгәс, нисек бараһың? Етмәһә, тормошҡа сыҡҡан ҡыҙға. Һеҙ бында уҡ өйләнешеп киткәйнегеҙме ни?

– Юҡ. Ун биш йәшлек балаға нисек өйләнәһең? Мин Ҡаҙағстанда эшләгәндә танышҡан яҡташ ҡатынға, Сәлимәнең ике туған апаһына, төбәп юлландыҡ. Уға, ҡунаҡҡа алып барам, тип хәйләләнем. Хәйер, апаһы саҡырып хат та яҙғайны уға, кил, русса уҡырһың, кеше булырһың, тип әүрәтеп. Отпускыға ҡайтҡанында шул хатты минең аша ебәрҙе. Күҙ төштө ҡыҙға… Шул ҡалала Сәлимә мәктәпте бөттө, медучилищены, шунан эшкә урынлашты. Мин төҙөлөштә эшләнем. Йәше еткәс яҙылыштыҡ инде. Яңылышҡанымды бер нисә йыл үткәс кенә аңланым. Көсләп яраттырып булмай икән,– Шамил тәмәкеһен

ергә ташлап, асыу менән иҙгеләне. – Ярар, хәҙер ул турала һөйләүҙең мәғәнәһе юҡ инде. Күрҙем. Ғәфү ит, Шварценеггер ҙа, Ален Делон да түгелһең, нимәнде оҡшатҡандыр, аптыраҡ.

Ҡапыл ҡапҡа асылып китте лә, хәле бөтөп Искәндәр килеп инде. Йүгереп Ғәбит янына килде, һарылып уның биленән ҡосаҡланы, ят кешегә һағайып-оялып ҡына ҡараны ла шулай уҡ йүгереп өйгә инеп китте.

– Улыңмы?

– Эйе.

– Тимәк, өйләнгәнһең, ғаиләң бар, улың. Донъяң да бөтөнгә оҡшаған. Тимәк, Сәлимәкәйҙе эҙләп бараһың юҡ. Ғәфү ит, теге саҡ өсөн. Хотя, ниңә ғәфү үтенергә? Яҙмыш… – Шамил берауыҡ өндәшмәй ҡайҙалыр ситкә текләп торҙо ла, нимәнелер ҡапыл хәтеренә төшөргәндәй, бар кәүҙәһе менән Ғәбит яғына боролдо. – Тағы бер нәмә: атайым менән борсағығыҙ бешмәй икән…

– Атайығыҙ менән? Кем ул? – Ғәбит, бер нәмә лә аңламайым тигәндәй, яурындарын йыйырҙы, ҡулдарын йәйҙе.

– Минең атай ғүмер буйы тигәндәй тәүҙә райкомда, унан администрацияла эшләне. Ниндәйҙер мутлыҡтарын табып сығарғандар ҙа район һунарсылар йәмғиәтенә председатель итеп ҡуйғандар. Почетная должность. Элекке ғәҙәт буйынса онотҡанда бер һунарға сыҡҡылайым, сыҡҡан һайын Ғәбит осрай, аяҡ сала, ти.

– Да, урыҫ әйтмешләй, донъя тар икән шул. Зарлана, болан, мышы йығырға ҡамасаулай, тиме? Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, ул үҙе ата браконьер, һунар сезоны ҡағиҙәләрен боҙа, етмәһә, райондан, ҡаланан эшнәләрен эйәртеп килә. – Ғәбиттең ғәҙелһеҙлекте ишетеүҙән тамағы ҡарлыҡты, тын алыуы ауырлашты. – Вертолет менән йөрөп аталар.

– Мин аңлайым, беләм шулай икәнен, уны яҡламайым, тик шуны ғына әйтергә уйлайым: һаҡ бул атайҙан. Ул алдына алғанын эшләмәйенсә туҡтамай торған кеше. Һәләк итеп ҡуймаһын.

Шамил кергәндәге һымаҡ ашыҡманы, тәмәкеһен туҡтауһыҙ һура-һура яй ғына атлап барҙы ҡапҡаға. Уны һаҡ ҡына асты, шаҡылдатмай ғына япты, машинаһын тоҡандырҙы ла зыр боролоп китеп тә барҙы.

Оҙаҡ баҫып торҙо Ғәбит аңына килә алмай. Нисек баһаларға, нисек ҡабул итергә белмәне ишеткәндәрен. Сәлимәнең иҫән-һау икәненә ҡыуанһа, йыраҡта, хәҙер инде икенсе илдә көн итеүенә көйөндө, Шамилдың уны сит яҡта ташлап китеүе хыянат – яңғыҙына йәшәүе еңел булмаясаҡ был ауыр заманда…

Бына бит нисек ҡоролған донъя. Шамил Ғәбит ҡулынан Сәлимәне алып китте, уны бәхетһеҙ итте, хәҙер атаһы уға, Ғәбиткә, теш ҡайрай. Етмәһә, улына зарлана икән – йәнәһе, һунар итеүенә ҡамасаулай. Ниндәй оятһыҙлыҡ! Ә быныһы, Шамилы, уға Сәлимә тураһында һөйләүҙән бигерәк атаһының ошағы буйынса килмәнеме икән? Ҡамасаулама, юлында йөрөмә, маңлайыңа пуля алыуың бар, тип әйтмәксе.

Ғәбит район һунарсылар йәмғиәтенә барып килергә ниәтләне. Танытмаһын ҡасан ҡайтарып биргәндәрен йәки бирмәгәндәрен ниңә көтөп ятырға? Бәлки, айҙар буйы саҡырмаҫ сысҡан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ, айҙар буйы ул шулай эшһеҙ, тимәк, эш хаҡһыҙ ултырырға тейешме? Бирмәһә, икенсе берәй эш табыр, бүтән юлдар эҙләр.

Ғәбит арыуыраҡ кейемдәрен кейҙе, Фәрзәнәһенең, свиданиеға бараһыңмы әллә, тип төрттөрөүенә, районға, тип кенә яуапланы ла ихатаһына сыҡты, трактор арбаһының кузовына төшөрөлгән «метка»ға йәнә күҙ һалды. Эйе, бер ҙә

малай-шалай шыҡлығына оҡшамаған, оло кеше ҡулы менән тегеләрҙең ҡушыуы буйынса яһалған. Ысынлап та, үҙе әйтмешләй, пуляһын яңылыштан ҡаҡлыҡтырырға ниәтләнәлер сысҡан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ. Хәйер, яңылыштан булмай инде хәҙер, ысынтылап була. Тәүҙә психологик һөжүм, ҡурҡытыу, янау, унан – маңлайыңа шап! Әгәр юлдан китмәһәң, артабан да аяҡ аҫтында буталып йөрөһәң…

Ғәбит ауыл осондағы автобус туҡталышына атланы. Туҡталыш будкаһына еткәйне генә, ҡала яғындағы ағастар өҫтөндә вертолеттың акулаҡы һымаҡ аҡ томшоғо, бер туҡтауһыҙ һауа йыртҡан винты күренде. Оҙаҡламай геүләп тауышы ла килеп етте. Бөгөн шәмбе шул, киләләр, үткән аҙналағы һунарҙары уңышлы үткәс, дәртләнешеп киләләр, тағы ла мулыраҡ табышҡа өмөтләнеп киләләр. Бүтәндәрҙә, тәбиғәттә, кейек-хайуандар донъяһында уларҙың эше юҡ, үҙҙәренең тамаҡтарын туйҙырһалар, ҡорһаҡтарын тултырһалар – шул еткән. Ниндәй ваҡ йәндәр, тик үҙегеҙҙе генә ҡайғыртҡан ниндәй аскернәләр һеҙ, әфәнделәр, ә?! Кеше түгел һеҙ, ә йыртҡыстар. Йыртҡыстар ҙа һеҙҙән рәхимлерәк.

Районға барыуҙан фәтүә юҡ – эшем эйәһе етәксе, моғайын да, ошолар менәндер. Уларҙан тороп ҡалмаҫ, өлөш сыға бит, араҡыһын да эсә, көслөләр араһында йөрөүҙән ләззәт таба, үҙен шулар менән тиңгә ҡуя. Ғәбит йүгерә-атлай ҡайтып кейемен алыштырҙы, итек кейҙе, Фәрзәнәһенең, бәй, нишләп улай кире боролдоң, свидание булманымы ни, тип төрттөрөүен ишетмәмешкә һалышып, эре-эре аҙымдар менән Торатауға ҡарай атланы.

Аяҡ аҫты лысҡылдап ята. Ҡар, апаруҡ яуғас-икәс, кире ирегәйне шул, урыны-урыны менән үлән араһын йөҙлөктән һыу баҫҡан, соҡор-саҡыр күренмәй ҙә. Битләүҙә ҡорораҡ, ер һарҡыу, ғәҙәттәгесә, битләүҙе, тау битләүен билғаулап аҡ томан һырыған. Өҫкәрәк күтәрелгән һайын ул ҡуйылана бара, аҡ, һөткә тыҡҡан ҡалаҡ кеүек, Ғәбит шуның араһына инеп китә лә бер нәмә күрмәй, бара торғас, ҡапыл асыҡлыҡҡа килеп сыға, бер аҙҙан йәнә инеп китә.

Моғайын да, әүәле йөрөгән тирәгә килерҙәр, тип уйланы ул, сөнки тау битләүенең әлеге урынын ярайһы уҡ ҡуйы ваҡ ағас ҡаплаған, болан, мышы, төлкө, башҡа кейек-януар йышыраҡ тап шул мөхиттә йөрөй. Былай ҙур ғына майҙан ул, әммә ике-өс кешегә теҙелеп һөҙөп сығыуы бер нәмә лә түгел. Ҡасып сыға меҫкендәр асыҡлыҡҡа, ә унда уларҙы атып алыуы бер ни тормай. Үҙенә күрә ҡапҡан инде был ағаслыҡ.

Ҡабаланып ташҡа эләгеп йығылып та китә, соҡорға ла барып янтая, әммә бара, тауға күтәрелеүен дауам итә Ғәбит. Үҙенең күренеүе, енәйәттәренә шаһитлығы ҡамасау итер, тип өмөтләнә.

Томан араһына кергәйне, ҡанаттарын Ғәбиттең башына һуға яҙып ҙур ҡош осоп уҙҙы. Тығыҙ һауа тулҡыны битенә бәрелде хатта. Шуның артынса уҡ һөйләшкән, һөрәнләгән тауыштар ишетелде. Теге ағаслыҡты ҡамайҙар йә ҡамапбаҫтырып януарҙы асыҡлыҡҡа сығарғандар ҙа хәҙер атырға самалайҙар, ахыры. Ҡайһы арала вертолеттан төшкәндәр, ҡайһы арала тауға күтәрелеп өлгөргәндәр, тиң. Хөкүмәт эшендә берәһе лә былдай етеҙлек күрһәтмәйҙер әле.

Асыҡлыҡҡа сыҡҡайны, әлеге алаңғырт өҫтән дә, аҫтан да ҡыҫып-уратып торған томан арауығында йәш бер боландың үҙенә табан сабыуын шәйләне Ғәбит. Башын сөйгән, ҡолаҡтары, мөгөҙҙәре тырпайған. Артынан атып та ебәрҙеләр. Һаҡланыу инстиктына буйһоноп, Ғәбит йәһәт кенә сүкәйҙе, әйтерһең дә, эйелеп кенә пулянан тайшанып ҡалып була. Ә үгеҙ-болан, хәс тә теге ваҡыттағы һымаҡ, уға табан килеүен белә. Был юлы ла уға ышыҡланып ҡотолоп ҡалырға ниәтләнәме?

Оҙаҡламай асыҡлыҡта теге рәйес шәйләнде. Ул бер аяғын тубығынан бөгөп,

икенсеһен тура тотоп, башын уң яҡҡа ҡыйшайтты ла тоҫҡап йәнә атып ebәрҙе – пуля был юлы Ғәбиттең баш осонан ғына зыйлап уҙҙы.

– Эй, туҡтат атыуыңды! – тип һөрәнләне Ғәбит, йоҙроғон баш осонда болғап. Теге әллә ишетте, әллә ишетмәне, һәр хәлдә бүтән атманы.

Район һунарсылар йәмғиәте рәйесе артынан бер-бер артлы ике иптәше лә пәйҙә булды. Алданыраҡ килгәне ҡауын һымаҡ йомро башлы, һалынҡы күҙ ҡабаҡлы, шуғалыр ҙа күҙҙәре йомоҡ төҫлө, сабаталай ише ҡалын ҡашлы, тыржыҡ танаулы, икенсеһе – уҡлау ише төҙ кәүҙәле, төҫ-башҡа ыҫпай, хатта сибәр, килешле генә мыйыҡлы йәш кеше ине. Икеһенең дә кейемдәре бәҫле, бөгөнгө сараға махсус тегелгән тиерһең, аяҡтарында резина итектәр, ҡулдарында мылтыҡ. Алданыраҡ атлағанын Ғәбиттең күргәне юҡ, нәҙеген күргәне бар: Торатауға унықы тәүгегә килмәй. Йыуаны килбәтһеҙ атлап томан араһынан килеп сыҡты ла тәбиғәттең был мөғжизәһенә әллә аптырап, әллә һоҡланып тирә-яғын байҡаны, ҡулдарын йәйеп нимәлер һөйләне, бер тирәлә өйөрөлә-сөйөрөлә торғас, үксәһе менән бер ташҡа эләгеп ултыра төштө. Ауыр итеп ҡалҡынды ла әсе итеп һүгенде.

Шул арала йәш болан әллә ҡурҡыныс барлығын һиҙеп, инстинкт буйынсалыр, ахыры, өҫкәрәк тартылды ла томан араһына инеп юғалды ҡуйҙы. Ғәбит аҫҡа төштө һәм шулай уҡ томан солғанышында ҡалды. Эргәһенән генә тигәндәй һаҡ ҡына атлап төлкө үткәне, ҡуян һикергәне шәйләнде – уларҙы ла теге урман-утрау эсенән ҡурҡытып сығарғандар, тимәк. Йәнә аттылар. Ләкин теүәл тоҫҡап атылманы шикелле был юлы, кейек-хайуанды ҡурҡытыу, өркөтөү, уларҙы томан эсенән сығарыу өсөн генә. Оҙаҡламай һунарсыларҙың һөйләшкәне, аяҡ аҫтарынан аҫҡа ваҡ таш тәгәрәгәне ишетелде. Улар ике томан ҡатламы араһындағы коридор буйлап киләләр ине. Яҡынайған һайын һөйләшеүҙәре асығыраҡ, хәбәрҙәре аңлайышлыраҡ ишетелә.

– Ошо яҡҡа ҡасты ул, күрҙем,– ти береһе.

– Мин дә шәйләнем дә ул, бынау томанда уны хәҙер нисек табаһың?– тип яуаплай икенсеһе һәм ҡаты итеп һүгенә.

– Һинең теге егетең тағы темеҫкенеп йөрөй. Сәпәйек тә ҡуяйыҡ, кем белә лә кем күрә.

Был һүҙҙәргә оҙаҡ яуап булманы. Байтаҡ ҡына килгәс, ниндәйҙер мөгөрҙәү ишетелде-ишетелеүен, тик Ғәбит һүҙҙәрен аңғара алманы. Эләгә-йығыла эргәһенән үк тигәндәй үтеп киттеләр, әммә бер нисә аҙымдан нимәлер һиҙенеп туҡтанылар.

– Юҡ, бында түгел, тегендәрәк шәйләнде бит,– тине береһе,– һин бөгөн бөтөнләй һаҡ ҡыланаһың, Сәғитов, әллә шул маңҡанан да ҡурҡаһың инде? Беҙҙе күреү менән үткәнендәге һымаҡ табанын ялтыратты бит.

Былары йыуандың хәбәрелер. Әйтерең бармы, усал зат, торғаны бер йыртҡыс.

– Ысынлап та, тегендәрәк күренде шул,– тип йөпләне өсөнсөһө.

Ғәбит уларҙың йөҙөн күрә алманы, шәүләләрен генә шәйләне – томан ҡуйы һәм йәбешкәк. Өҫтән тағы бер нисә ваҡ таш тәгәрәне. Әллә болан төшөрҙө, әллә икенсе бер кейек үтте. Һунарсылар йәнә шып туҡтаны, бер аҙҙан юлдарын йәнә дауам иттеләр, һәм, бара биргәс, береһе мылтығынан атып ебәрҙе.

– Яһауыңды әрәм итмә,– тине рәйес ҡәнәғәтһеҙ генә.– Беҙҙең былай шаулашып йөрөүгә ҡасты инде.

– Ҡайҙа ҡасһын, ошо тауҙан бүтән ергә китмәй ҙә ул. Бынау томаны булмаһа, күрер инек тә. Юрамал кеүек ҡуйы томан төштө бит, – йәнә һүгенде йыуан.

Рәйес өндәшмәне. Ҡупырыҡ ҡунаҡ менән бәхәсләшеү файҙаһыҙ икәнен аңлағандыр.

Атыуға өҫтәге томан араһына йәшенгән йәш болан ҡурҡып асыҡлыҡҡа килеп сыҡты. Сыҡты ла, ҡайҙа олағырға белмәй, таш һын булып ҡатып ҡалды. Тегеләр күрҙе, һунарсыларҙың ҡайһыһылыр, ана, беҙҙең артта, тип һөрәнләне һәм шундуҡ тигәндәй ҡушкөбәк тәтеһен тартты. Әммә тейҙерә алманы, пуляһын яҙа осорҙо. Ә болан аҫҡа, Ғәбит йәшенгән томан ҡатламына, төштө. Томан шыйыҡлана йәки күсә башлаһа, икебеҙҙе лә күрәләр инде, тип хафаланды ул, һәм ошо хафа Ғәбитте бер хәйлә уйлап сығарырға этәрҙе: таш бәреп иғтибарҙарын ситкә йүнәлтергә! Ул аяғы аҫтынан һәрмәп тауыҡ йоморткаһы самаһындағы таш алды ла өҫкә, тегеләр яғына, бәрҙе.

– Өҫтә кемдер йөрөй,– тине береһе.– Таш тәгәрәй. Теге боландыр, ахыры.

– Болан аҫҡа төштө,– тип яуапланы рәйес.

– Улайһа, бүтән боландыр.

– Һин бында ул боландар кәзә бәрәсе ише күп тип уйлайһыңмы ни?

Һунарсылар тирә-яҡтарын йәнә лә бер байҡаны ла ике томан араһындағы коридор буйлап ары китте. Бер аҙҙан томан шыйыҡлана төштө, урыны-урыны менән йыртылды, әле өҫкә, әле аҫҡа күсте. Тубыҡтан саҡ ҡына бейегерәк артыш ҡыуағы артында сүкәйеп ултырыу ҡурҡыныс була башланы. Тегеләр күренмәгәс, Ғәбит һаҡ ҡына аҫҡа йүнәлде. Тик аяғы аҫтындағы бер нисә таш хыянатсыл рәүештә урынынан ҡупты ла үҙенең артынан йәнә бер нисәне эйәртеп түбәнгә тәгәрәне.

– Аҫта кемдер йөрөй,– тине йыуан ҡырҡа ғына. – Һинең теге «артисың» или баяғы болан. Әйҙә әле, барайыҡ.

Ғәбит аҙымдарын тиҙләтте. Ҡабаланғас ни, аяғы тайып та китә, һерәйеп сығып торған таштарға бәрелә, ҡыуаҡ өҫтөнә лә килеп менә. Иң ҙур бәлә – аҫҡа төшкән һайын томан шыйыҡлана бара. Бер мәл эргәһендә генә сөскөрөү-бышҡырыуға оҡшаш ауаз ишетеп, Ғәбит тертләп китте. Ҡараһа – теге йәш болан! Эргәһендә үк тора. Уны танып, йәнә ышыҡланырға килгәнме? Был юлы ҡотола алмаҫтыр мәхлүк: тегеләр яҡын, етмәһә, өсәүҙәр, томан да күсә тора, оҙаҡламай тирә-йүн ус төбөндәге кеүек күренеп ятасаҡ.

– Эй, кем, бында күтәрел!– Рәйес өҫтән ҡысҡырҙы. – Юҡһа, һине расходҡа ебәрергә ҡырсынған кешеләр бар.

– Бьем на поражение,– быныһын йыуан өҫтәне.

Ғәбит атлауынан туҡтаны, яй ғына боролоп, йөҙө менән тегеләргә ҡарап баҫты. Эйе, күренергә, һөйләшергә кәрәк, бәлки, аңларҙар, ниәттәренән баш тартырҙар. Эргәһендә томан таралған, болан юҡ, ә бына баяғы ҡош йәнә кәйелеп эргәһенән генә үтеп китте. Һауа ағымы Ғәбиттең бит-йөҙөн һыйпаны.

Һунарсылар Ғәбиттең өҫкә күтәрелеүен көтөп торманы, янына үҙҙәре төштө.

– Һин, кем, эшләмәйһең хәҙер, танытмаң – миндә, йонсоп бында бүтәнсә менеп йөрөмә,– рәйес уның эргәһенә үк килеп, ашарҙай булып күҙҙәренә текәлде.– Мин теге саҡ иҫкәрттем бит, пуля яңылыштан һинең яҡҡа кәйелеүе бар, тип. Аңламаныңмы ни?

– Бьем на поражение,– тип ҡабатлап, һүҙгә ҡыҫылды йыуан һәм мыҫҡыллы итеп көлдө.

– Ҡурҡытмағыҙ, мин инде һеҙҙең һымаҡтарҙы күп күрҙем.

– Беҙ башҡалар түгел, беҙ… үҙебеҙ,– тип яуапланы йыуан.

– Браконьерҙар бөтәһе лә бер иш. Улар бында бер генә маҡсат менән килә – атырға и атырға. Тауға бүтән маҡсат менән менгән кеше бик һирәк.

– Һин, давай, аҡыл һатма. Аҡыл үҙебеҙҙә лә етерлек. Иҫән сағыңда һыпырт бынан. Һин беҙҙе күрмәнең, беҙ – һине,– тине район һунарсылар йәмғиәте рәйесе, усал ҡарап.

– Һеҙ китмәйенсә мин тауҙан төшмәйем. Берәй йәнлекте атһағыҙ, ауыл

Советына барам, йә районға, администрацияға. Үткән аҙнала ике болан атҡанығыҙҙы ла яҙып бирәм.

– Дүрәк, ниндәй ике болан тағы? – Рәйес аптыраған кеше булды.

– Һеҙ осоп киткәс, мин килеп ҡараным, бәләкәй санаға тейәп алып барғанһығыҙ вертолетҡа. Исмаһам, тиреһен, баш-тояҡтарын да йәшермәгәнһегеҙ…

Рәйес өндәшмәне, ҡыҙарҙы-бүртенде, Ғәбиттән былдай һүҙҙе, күрәһең, һис көтмәгәйне. Ә йыуан һаман үҙенекен тылҡыны:

– Сәғитов, был бомж менән килешеп булмаҫҡа оҡшай. Арҡыры нәмә. Әйттем бит, сәпәйек тә ҡуяйыҡ, тип. Тыңламаның. Хәҙер һаҫығы сығасаҡ.

– Былай ҙа сыҡты инде,– тине рәйес теш араһынан ғына. Шунан Ғәбиткә боролдо.– Кем, ысынлап та, тауҙағы Хоҙай малын һаҡларға әйтәһеңме? Һиңә кәрәкме ул? Шулай ныҡ патриот булып йөрөүеңдә мин һис аңлай алмайым.

– Аңлай ҙа алмаҫһың, һеҙ бит икенсе сословиенан.

– Нисек икенсе сословие?

– Ҡулланыусылар, ашаусылар, талап итеүселәр, бойороҡ биреүселәр…

– Да, һин бер ҡатлы ғына түгелдер, ахыры, кем. Шулай ҙа ҡамасаулама беҙгә, йәме? Бына ҡаланан оло-оло ағайҙар килгән, уларға позарез бер оҙон бот кәрәк. Шуны биреп ебәрергә ине бөгөн.

– Ағай-эне, түрә-ҡара, начальник… Тауҙағы бөтөн кейек башы ла етмәҫ уларға.

– Сәғитов, был бомжың тамам шашты бит, давай, сәпәйем дә ҡуяйым, ә?

– Кем, беҙ генә түгел, беҙҙән башҡа ла аталар, һин үҙең дә буш йөрөмәйһеңдер әле. Кейек һиңә лә етә, миңә лә,– тип маймылланды рәйес. – Сөнки тәбиғәттеке бер ҡасан да бөтмәй, үҫеп тора, үрсеп тора.

– Һеҙҙең һымаҡ браконьерҙар йөрөгәндә ҡайҙан үрсеһен? Күпме эшләйем, бер ҙә үрсегәнен күргәнем юҡ әле, киреһенсә, бөтә генә бара. Мин һеҙгә ошо тауҙа күпме болан, мышы, айыу, бүре, хатта нисә төлкө йөрөгәнен әйтеп бирә алам. Һеҙҙең һымаҡтар һәләк итмәһә, киләһе йылға күпме үрсем бирәсәген тә тоҫмаллайым. Әгәр ҡыҙыҡ булһа…

– Ҡыҙыҡ түгел,– тине йыуан, түҙемһеҙләнеп.

– Вәт шулай шул. Бына һеҙ, һунарсылар йәмғиәте етәксеһе, шуларҙы һаҡлау өсөн ҡуйылғанһығыҙ, ә атырға киләһегеҙ. Етмәһә, бер көтөү кеше менән.

– Ярай, кем, ул тиклем дә суфый һымаҡ ҡыланма. Беҙҙең килеүҙә һинең ни эшең бар? Мин тикшереп йөрөйөмдөр, бәлки?

– Тикшереп йөрөгәнгә бик оҡшаған шул!

– Ваҡыт үтә, Сәғитов, ҡуҙғалайыҡ. Томан да ҡуйыра башланы. Сәпәйем дә… – Йыуан мылтығын күтәрҙе. – Надоел…

– Ҡыҙмағыҙ, һаҫығы сығыр, тинегеҙ бит.

– Сығармабыҙ… Этем дә таба алмаҫлыҡ итеп берәй таш ярығына тығып китербеҙ. Мин аңламайым, бер бомж беҙгә һунар итергә ҡамасаулап йөрөй, ә беҙ, өс ир, шуға хужа була алмайбыҙ. Етмәһә, аҡыл өйрәтә, мыҫҡыл итә, юғары материялар хаҡында ләпелдәй, ә, Сәғитов?

– Эште ҙурға ебәрмәйек. Хәҙер ҡуҙғалырбыҙ,– бының түҙемһеҙләнеүе рәйестең дә зитына тейә башланы шикелле.

– Сәғитов, вәғәҙә иткән болан ҡайҙа? Беҙ улай килешмәнек…

– Аҫта көтөп тора, хәҙер барып тотабыҙ.

Йыуан Ғәбиткә яҡын килде лә бер мәлгә генә күҙҙәренә текәлеп ҡарап торҙо, унан яңағына килтереп һуҡты. Ғәбит ярай ҙа артына йығылманы, юҡһа тау

киртләсенән таш һымаҡ тәгәрәп китә лә башын яра йә умыртҡа һөйәген һындыра ине. һуңғы мәл алға ынтылыш яһап өлгөрҙө, әммә йоҙроҡтан тайшана алманы. Сайҡалды ла ултыра төштө.

– Нокаут тип атала был! – Йыуан, рингтағы ише, ҡулдарын күкрәге тирәһендә уйнатҡан килеш һикергеләп алған булды.

Ғәбит яңағын тотто – һуғыу арыу булды, сатнамаһа ярай ҙа, шунан эйелеп таш алды ла яй ғына ҡалҡынып Йыуандың башына күҙәмәләп бәреп ебәрҙе. Ләкин таш һунарсының башына түгел, күкрәге тирәһендә уйнаған ҡулына тейҙе. Был ҡысҡырып ебәрҙе лә шаңҡыған ҡулын тотоп, бөгөлә-һығыла өҙләй башланы.

– Ну, сволочь, ҡулды...– Һәм арҡаһына аҫҡан мылтығын алып, ҡабалан-ҡарһалан тоҫҡаны ла атып та ебәрҙе. – Мин һине!..

Пуля Ғәбиттең һул яурынын өтөп алды, ул сайҡалып китте, уң ҡулы менән яраһын аймап ергә сүгәләне. Сүгәләгән ыңғайы йәнә теге ҙур ҡоштоң ҡанаты тейгәндәй булды, һәм шул мәлдә атҡан кеше шай итеп ҡысҡырып та ебәрҙе:

– Сәғитов, һин ҡайҙа? Ҡотҡар, битемә ҡош йәбеште,– ул сәбәләнә, тауышы ҡалтырап, өҙөк-өҙөк сыға ине. – Күҙҙе соҡой, тырнай бит. Ай-й-й...

– Һеҙ аттығыҙмы? Кем йәбеште? – Аҫҡараҡ төшкән район һунарсылар йәмғиәте рәйесенең ҡырҡыу тауышы ишетелде. – Черт возьми, һеҙҙе алып килһәң, бәләгә ҡалып ҡына йөрөйһөң инде. Һеҙ аттығыҙмы? Кемгә? Әйттем бит атмаҫҡа тип. Сәпәйем дә, сәпәйем, имеш...

– Күҙҙе һытты, ай-ай! Бер нәмә лә күрмәйем. Сәғитов, тиҙерәк бул, ал йыртҡыс ҡошто...

Рәйестең өҫкә күтәрелгәне, уның аяҡ аҫтынан түбәнгә таш тәгәрәгәне, ниндәйҙер ҙур ҡоштоң ҡанаттарын елпегәнен ишетә ине Ғәбит. Әммә, томан булғанлыҡтан, бер нәмә лә күрмәй. Күрмәй ҙә, аңламай ҙа эргәһендә нимә барғанын. Ниндәй ҡош, ҡайҙан килеп сыҡҡан ул? Үҙенең хәле хөрт әле бында, яраһы үлтереп һыҙлай, туктауһыҙ ҡан аға. Бер аҙҙан ҡуйы томан пәрҙәһе ҡайһылыр еренән йыртылды ла шәп итеп өҫкә ағып китте, һәм шул уҡ ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Ғәбит үҙенә башта һуҡҡан, унан атҡан бәндәнең тубыҡланған көйө ҡулдарын баш өҫтөндә болғай-болғай, бөркөттөң көслө тырнаҡтарынан битен-башын һаҡларға тырышып сәбәләнеүен, ҡошто аяҡтарынан, ҡанаттарынан тоторға маташыуын шәйләне. Ҡош тегенең башынмы, ҡайһы ерендер инде, суҡый, йәйенке, киң ҡанаттары менән ике яҡлап та кәүҙәһенә һуҡҡылай. Ҡош аяғына бәйләнгән нимәлер ҡапыл Ғәбиттең күҙен сағылтып ебәрҙе. Үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы, бәй, уның бөркөтө түгелме һуң?! Ул бит урмандан тапҡан бөркөт балаһының аяғына алюмин пластинка кейҙереп ебәргәйне, шул бит. Тимәк, бөркөт баянан бирле уны һаҡлап йөрөгән, бер нисә мәртәбә уның баш осонан ғына осоп үҙенең быҙалығын белгерткән. Һәм хәҙер килеп, уға ҡурҡыныс янағанда, дошмандарына ташланған. Һай, маладис, ниндәй аҡыллы ҡош булып сыҡтың! Әйҙә, бәргелә, суҡы, иҫән-имен ебәрмәҫкә кәрәк уларҙы, һиңә лә күпме яҫҡындылар, мине лә ҡаҡшаттылар.

Рәйес ахырҙа Йыуан янына менеп етте, мылтығын йәһәт кенә күтәреп, тоҫҡарға маташты.

– Сәғитов, нишләйһең, ата күрмә, миңә тейгеҙәһең бит?– Йыуан ярылырҙай булып һөрәнләне. – Берәй таяҡ менән һуҡ йә ҡулың менән ал.

– Тейҙермәм, мине үҙегеҙ һымаҡ ҡыйыш ҡул тип уйлайһығыҙмы әллә?

– Сәғитов, аҡылыңа кил...

Ғәбит аяҡ аҫтынан һәрмәп таш алды ла рәйескә бәреп ебәрҙе – бөркөттө

үлтергеһе килмәй ине – аралары күп булһа ун-ун ике метр самаһылыр. Таш сак ҡына барып етмәне, ниндәйҙер мөғжизә менәндер көбәккә тейҙе һәм шул ыңғайы мылтыҡ атылып та китте. Ярай, пуляһы бөркөткә лә, теге ҡап ҡорһаҡҡа ла эләкмәне, әлеге таш уны ситкә тайпылдырып өлгөрҙө. Шуны ғына көткән һымаҡ, ҡош Йыуанды ысҡындырҙы ла, ә-ә, һин атаһыңмы ни әле, тигән һымаҡ, рәйестең елкәһенә барып ҡунды. Ҡунды ла ҡанаттары менән шап-шоп һуҡҡыс-ларға тотондо. Рәйестең мылтығы төшөп китте, ике ҡулы менән көслө ҡанаттарҙан һаҡланырға, бит-йөҙөн ҡапларға тырышты.

– Эй, кем, ал бөркөтөңдө!– тип һөрәнләне ул йән асыуына, йыландай һығыла-бөгөлә, – күҙҙе соҡой бит!

Ә Ғәбиттең үҙ ҡайғыһы, уларҙы яҡлап бер ни эшләгеһе килмәй, йәлләмәй ҙә, хәле бөтә бара, бөтә бара. Курткаһын систе, унан – йоҡа свитерын, күлдәгенең бер итәген бүҫеп, яралы яурынына ҡапланы. Бөтә түше, хатта эсенә тиклем һығып алынмалы ҡан. Вәт бәдбәхет, нисек шулай кешегә атырға баҙнаты етә? Хайуан урынына ла күрмәй бит. Берәй ҙур түрә-каралыр. Һөйләшеүенә, ҡыланыштарына ҡарағанда, шулай күренә. Ҡурҡмайҙар ҙа, оялмайҙар ҙа, ҡара эштәрен эшләй бирәләр.

Ә рәйес һөрәнләй, ҡысҡыра, ялбара, нисек тә бөркөт тырнаҡтарынан ысҡынырға тырыша. Бер ниндәй ҙә ярҙам булмағас, өйөрөлә-сайҡала, абынаһөрөнә аҫҡа мәтәлләп төшөп китте.

Яйлап томан таралды, дөрөҫөрәге, Ғәбит ултырған ерҙән өҫкәрәк һәм аҫҡараҡ тартылды, тиҙҙән ул ике аҡ билбау араһындағы асыҡлыҡта ҡалды. Күңеленә ниндәйҙер ҡәнәғәтлек килде: боланды ала алманылар, бөркөт үҙенең үсен дә, Ғәбиттең үсен дә ҡайтарҙы. Тик бына хәле генә бөтә бара. Өйҙә ҡайҙа барғанын әйтмәй китте, исмаһам, малайына булһа ла өндәшеп китмәгән. Хәйер, Искәндәр мәктәптә булып ҡалды. Ҡайҙан эҙләрҙәр икән һуң? Ярай, самаларҙар, уның Торатауҙан башҡа йөрөр-барыр ере юҡ.

Көсһөҙлөгөнән ыңғырашып эйелгәйне, ҡарашы артыш араһындағы ҡыҙыл сепрәккә төштө. Тәүҙә әллә ни иғтибар итмәне, шунан башына килтереп һуҡкан кеүек булды: бәй, уның галстугы лаһа! Һаман бар, һаман ҡыуаҡҡа бәйләнгән килеш тора! Теткеләнеп бөткән, әммә ысҡынырға уйламай ҙа, әйтерһең дә…

Әйтерһең дә, Сәлимәнең мөхәббәте, әлегә аңды биләмәгән, тик йөрәкте генә болоҡһотҡан иләҫ-миләҫ тәүге хистәр һымаҡ мәңге туҙмаҫ бер иҫтәлек! Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа, тиһәләр ҙә, һис уңмаған, юйылмаҫ хәтирә кеүек, ул да төҫөн ташламаған. Сәлимәнең төҫө, ике йәш үҫмерҙең бөрөләнеп тә сәскә ата алмаған беренсе мөхәббәте билдәһе. Урланылар ул мөхәббәтте! Бына был артыш муйынындағы ҡыҙыл галстук – шул енәйәттең берҙән-бер шаһиты.

Бәхетле итә алмаған икән Сәлимәне «моряк», хәҙер ташлап ҡайтып, сит-ят халыҡ араһында яңғыҙ ҡалдырған. Нисек кенә йәшәп ята икән бөгөнгө көндә, һирәкләп булһа ла уйлаған буламы икән Ғәбит хаҡында ул моңло ҡыҙ? Ә Ғәбит үлергә ята…

Тубыҡланды ла селтәргә әйләнгән галстукты ҡулына алды, ауырлыҡ менән систе, һаҡ ҡына тотоп яраһына ҡапланы. Һалғайны, күңеленә шул тиклем һиллек, рәхәтлек килде, әйтерһең дә, йәш сағына, Сәлимә менән бергә иҫтәлек бәйләгән мәленә әйләнеп ҡайтты. Күҙҙәренә йәштәр тығылды, ирендәре дерелдәне, ҡулдары ҡалтыранды, күлдәге аша һарҡып сыҡҡан ҡандың галстугын лысма итеүен дә шәйләмәне. Гүйә, уны даръяла йөҙгән ҙур кәмәгә ултыртып алып киттеләр…

Күпмелер ваҡыттан вертолет тауышы ишетелде. Ул бер өҫкә, бер аҫка

шыҡыйҙы, әле уңдан, әле һулдан геүелдәне, акуланыҡы һымаҡ аҡ томшоғо әле бер урындан ҡалҡып сыҡты, әле икенсе урындан. Бүлкәс-бүлкәс томан араһынан Ғәбит уны күреп тә ҡала, юғалта ла. Байтаҡ шулай аҙашып, томан араһынан сыға алмай йөрөнө вертолет. Бер аҙға юғалып та торҙо, унан йәнә пәйҙә булды, тағы томанға сорналды…

Ҡапыл тауҙың теге яғында ҡаты шартлау ишетелде. Шул хәтле ҡеүәтле булды шартлау – тотош тау һелкенде, таштар эркелешеп аҫҡа тәгәрәне. Оҙаҡламай низер шарт та шорт янырға кереште – танауына бензин еҫе, көйөк, резина, тире еҫтәре килеп бәрелде.

Торатау – изге тау, уға яҡшы уй, саф ниәт менән генә килергә кәрәк. Өләсәһе гел шулай тине. Ә былар үлтерергә килде, һөҙөмтәлә тау асыуланды һәм үҙенең ҡарғышын ебәрҙе.

Ғәбит көс-хәл менән генә ҡалҡынды, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй, аяҡтарын саҡ алмаштырып, тауҙан төшә башланы. Һаман томан, түбәнгә төшкән һайын ул тығыҙлана, ҡуйылана бара. Барыуы ауыр, аяҡ аҫты тулы таш, ҙурҙарын урап үтергә, ваҡтарын ашатлап сығырға тура килә. Хәле бөтөп, шуларҙың бер яҫмағына ултырҙы, ултырыуы булды, бөркөт баш осонан ғына елпенеп бер үтеп китте, ике үтте, өс үтте. Рәхмәт белдереүе булдымы, бирешмә, ҡайтып етергә тырыш, тип дәртләндереүеме, тегеләрҙең үсен ҡайтарҙыҡ бит, тип тантана итеүеме, белмәҫһең. Хәйер, бөтәһен дә бер юлы әйтергә теләгәндер. Теле генә юҡ, булһа, моғайын да, тап шулай тип әйтер ине.

Яҫы ташта ултырған арала әйләнә-тирәһен байҡаны Ғәбит. Артыш үҫә әле улар төбәгендә, кәрлә буйлы ылыҫлы ағасҡа ла тартым ул, йәйен-ҡышын йәшел көйөнә ултыра. Бер ҡараһаң, бәләкәс кипарисҡа ла оҡшаған кеүек ул… Кипаристың һүрәтен генә күргәне бар, үҙен осратыр өсөн диңгеҙ буйына барырға кәрәк, ә Ғәбиттең диңгеҙе боронғола – Торатау төбөндә… «Үҫ, артыш, үҫ! Һинең тирәңдә, ана, еҫле гөл дә һыйынған, һабаҡтарынан таныйым, ул «Торатау еҫле гөлө» тип аталып «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән – тик ошонда, ошо изге тупраҡта ғына һаҡланып ҡалған. Мин уға һәләк булырға бирмәм, ҡурсалармын!»–Ғәбит ошо уйҙан көс алды һәм тағы аяҡҡа баҫты, алға ынтылды.

Килә-килә тамам хәле бөттө Ғәбиттең. Ҡулы, ҡулбашы өҙөлөп төшөп килә, ә ҡан һаман аға ла аға, хәҙер хатта итеге эсендә лысҡылдай. Күҙе алдында берсә Сәлимә пәйҙә була, берсә өләсәһенең хәсрәтле йөҙө күренеп ҡала, Искәндәренең «Атай!» тигәне лә ҡолағына салынғандай. Шунан ниндәйҙер илаһи, ҡөҙрәтле тауыш кемгәлер өндәште һымаҡ: «Әйттем мин һиңә, Рәсүлем Нух, кәмәгә кешеләрҙе ныҡ һайлап ал, тинем. Күрҙеңме, бәндәләр беҙ биргән мөмкинлекте файҙаланманы, бер кәмәлә икәндәрен онотто, нәфселәрен тыя алманы. Бынан һуң мин уларға ундай мөмкинлек бирәһем юҡ. Ҡәҙерҙе белмәгәс, яңынан туфан һыуы ҡалҡытам, Торатауҙы ла һыуға күмдерәм – бәндәләр эләгер, ҡотолор, үрсер урын булмаясаҡ. Сур* тауышын көтһөндәр, аҡылға ултырмаҫ булһалар! Ә был егет маладис, көрәште, ерҙе һаҡлауҙы намыҫ эше итеп ҡараны. Бына шундайҙарҙы кәмәңә күберәк алырға кәрәк булған, Нух. Хәйер, һуң инде…»

Ғәбит икһеҙ-сикһеҙ томан диңгеҙендә, Нух кәмәһенә ултырып, утрау эҙләп йөҙөп бара һымаҡ. Ә томан унын һайын ҡуйыра ла ҡуйыра…

**Сур – ахырызаман еткәнен белгертер «борғо».*

# *Шиғриәт*



**Тәнзилә**
**ДӘҮЛӘТБИРҘИНА**

## *Төн*

*Күктәге йондоҙҙарҙы мин*
*Сүмескә һоҫоп алам.*
*Урлашыуҙы күрмәһен тип,*
*Айҙан гел боҫоп ҡалам.*

*Етегән сүместең һабын*
*Үҙем сак тотоп торам.*
*Ауырлыҡҡа көсөм етмәй,*
*Сүместе ергә борам.*

*Ундағы йондоҙҙар ергә*
*Нурҙар сәсеп атыла.*
*Ҡая-тауҙарға бәрелеп,*
*Ваҡ ярсыҡҡа ватыла.*

*Ағиҙел өҫтөнә яуа*
*Уларҙың ҡай берәһе.*
*Балыҡ, ҡарпып, тотоп ала*
*Йондоҙҙарҙың эреһен.*

*Ваҡ-төйәге ағып китә*
*Тулҡындар менән уйнап.*
*Ай йылғаға көлөп ҡарай,*
*Көҙгөләр, тиеп уйлап.*

---

*Тәнзилә Дәүләтбирҙина (1964) — Бөрйән ҡыҙы. БДУ-ны тамамлағас, матбуғат баҫмаларында, «Китап» нәшриәтендә эшләй. Әле — Башҡортостан дәүләт китап палатаһында директор урынбаҫары.*
*Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## *Шағир*

*Донъяға шағир һис ҡасан*
*Алмаған яраҡлаша.*
*Алмаған ул кешегә хас*
*Гонаһтан йыраҡлаша.*
*Һылыу ҡатындарҙы һөйгән,*
*Илаһиға тиңләгән.*
*Бәхет эҙләп микән, илде*
*Уңға-һулға иңләгән...*
*Баш тартмаған эсемлектән,*
*Харам, тиеп тормаған.*
*Асыҡ күңеленә бер ҙә*
*Шик пәрҙәһен ҡормаған.*
*Үтә күренмәле йәнен*
*Аша атлап сыҡҡандар,*
*Йөрәген тотоп ҡарағандар,*
*Тамырынан ҡан һыҡҡандар...*
*Үтә күренмәле был йән*
*Мәҙәк кеҫек тойолған.*
*Башын ташҡа бәргән һайын*
*Шалтырап аҡыл ҡойолған.*
*Мәҙәк күреп, ғәйбәт киткән*
*Ҡолаҡтарҙан ҡолаҡҡа.*
*Ғәрлегенән шунан шағир*
*Йыһандарға олаҡҡан.*
*Ҡайҙан килгән — шунда киткән,*
*Кешеләрҙе ҡалдырып.*
*Уны көтөп, ҡарамағыҙ*
*Күктәргә күҙ талдырып.*
*Шағир ергә һирәк төшә,*
*Уның урыны күктәрҙә.*
*Ожмахҡа әйләнер ине Ер —*
*Шағир йәне, шағир күңеле*
*Булһа әгәр күптәрҙә.*

***

*Әсәйемдең күҙҙәрендә*
*Күрәм үҙемде.*
*Шуға ла мин киң күңелле,*
*Йомарт, түҙемдер.*

*Әсәйем дә балаларын*
*Тиң күреп һөйгән,*
*Атайым ҡыуанып ҡайтҡан*
*Йылы түр-өйгә.*

*Уларҙан яҡшы сифаттар*
*Ҡыҙына күскән.*
*Ул да ғәҙел, уңған булып*
*Ҡанатлы үҫкән.*

*...Маҡтамайым бит үҙемде —*
*Әсәйгә ҡара!*
*Олоғайған һайын уға*
*Мин оҡшай барам.*

*Ул бит миндә үҙен эҙләй,*
*Эҙләй дауамын.*
*Шуға ла әсәм йәненә*
*Дарыу, дауамын.*

***

*Ләззәтле һағыныу, йәнем.*
*Үҙебеҙ шуны теләнек.*
*Яттарҙан ятһырап,*
*йәнгә*
*Һалып ҡуйҙыҡ келәне.*

*Ваҡытлыса был айырылыу,*
*Танһыҡ ҡына юҡһыныу.*
*Мин бит беләм һине арбар,*
*Күңелең яулар юҡ һылыу.*

*Мин үҙем дә ҡәлғә кеүек,*
*Буй етмәҫлек бейекмен.*
*Һинең яндарыңда ғына*
*Башын эйгән кейекмен.*

*Ваҡытлыса һағыштан да*
*Йөрәк семетеп тибә.*
*Хистәремде һайрар ҡошҡа*
*Тиҙерәк ем итеп һибәм.*

*Хистәремдән ауыҙ иткән*
*Ҡоштарҙың йыры тынмаҫ.*
*Йөрәк типһен һағыныуҙан,*
*Күкрәктәрем тарһынмаҫ!*

## Ағайыма

*«Барыһы балыҡҡа йөрөй*
*Ҡустыһы менән», — тинең.*
*Буш һауыт тотторол ҡулға*
*Алдың һин гелән мине.*
*Көн оҙоно һыу буйында*
*Һине көтөп ултырҙым.*
*Ырғытҡан балыҡтарыңды*
*Һауытыңа тултырҙым.*
*Ҡустың иҫәбендә йөрөп,*
*Шаҡ-шоҡ ҡылыс алыштым.*
*Ағас автоматты йөкләп,*
*Ҡарҙан ҡәлғә һалыштым.*

*Ҡарағай башына менеп*
*Өй төҙөргә теләнек.*
*Сиратлап йоҡларға булдыҡ,*
*Төнгә элеп келәне.*
*Тик төҙөлмәй ҡалды был өй —*
*Ҡыҙҙар кұҙләй башланың.*
*Гармун уйнауҙы оноттоң,*
*Уйындарҙы ташланың...*
*Барыһы ла ҡапыл булды.*
*Ҡапыл беҙ олоғайҙыҡ.*
*Бала саҡ хәтирәләре*
*Мейелә тоноғайҙы.*
*Ҡарағай башынан ҡарай*
*Беҙгә бойоҡ бала саҡ.*
*Был замандың балалары*
*Өйҙө ерҙә һаласаҡ.*
*Был замана балаһының*
*Хыялдары сикләнгән.*
*Уларҙың уй-тойғолары*
*Компьютерға бикләнгән.*
*...Мин бар саҡта һис бошонма —*
*Эргәңдә яңғыҙ ҡустың.*
*Ҡыҙ исемен әсәйемдәр*
*Миңә бит яңылыш ҡушты!*

***

*Мин — һауа гимнасы.*
*Үлемесле номерымды күреп*
*Барыһы ла ҡасты.*
*Минең сығыш өсөн*
*Кем*
*Купол аҫтына*
*Серек бауҙы аҫты?*

*Бар әҙәмдең ҡото осто,*
*Ә мин*
*Аренаға остом.*
*Ерҙе ҡостом.*
*Ә кемдәрҙер*
*Ошо мәлдә*
*Ҡыуаныстан*
*Күтәрҙеләр тосты.*

***

*Ҡыш яумаған ҡарҙар*
*яҙын яуҙы.*
*Апрель үтте*
*хатта буранлап!*
*Йырғанаҡтар гөрләп ағыр мәлдә*
*Боҙ ялтырап ятты урамда.*

*Мөҙҙәттәре үтһә,*
*һәр нәмә лә*
*Юғалта шул үҙе ҡәҙерен.*
*Ҡышын туҙан эсеп йөрөгәндә*
*Ҡар яуҙырыр өсөн ҡара ергә*
*Алтын бирергә лә әҙерһең.*

*Йылы һүҙҙе көтөп тилмергәндә*
*Әсе һүҙҙән йәнем көйрәне...*
*...Булмай икән ҡышҡы туҙандарға,*
*Яҙғы ҡарға һис тә өйрәнеп.*

***

*Хоҙай биргән яза ғына*
*Мине аяҡтан йығыр:*
*Мейемде ярып ярала*
*Баламдай татлы шиғыр.*

*Шиғыр яҙыуҙан өҙлөкһәм,*
*Ҡағыҙға һөрлөгөрмөн.*
*Рухым фәҡирләнгән мәлдә*
*Хөр донъяла йөрөрмөн.*

*Донъя хөрлөгө кәрәкмәй,*
*Күңел көрлөгө кәрәк.*
*Тормош мине һынар өсөн*
*Өҫкә төрлөһөн бәрә:*
*Бысрағын да, шаҡтаһын да...*
*Осрай Изге йә Бапаҡ.*
*...Ҡан булып яғылыр шиғыр*
*Яҙылыр ҡағыҙ ап-аҡ.*

***

*Бөтәһе лә алда кеүек ине,*
*Көтә кеүек ине яҡтылыҡ.*
*Мин ҡыуанып инер саҡта ғына*
*Ишегемде кемдер япты ныҡ.*

*Тартып-тартып*
*тотҡалары һынды*
*Инәлмаған имән ишектең.*
*Асҡыс яраталмай,*
*кешеләрҙән*
*Әллә нәмәләрҙе ишеттем.*

*Сәстәремде*
*йылдар йығып һалды,*
*Керпегемде көндәр утаны.*
*Дауылдарҙан ҡасыр ишегемдең*
*Асҡыстарын кемдәр бутаны?!*

***

*Һығылып илар сактарымда*
*Теш ялтыратып көлдөм.*
*Ең һыҙғанған мәлдәремдә*
*Эш калды ятып — бөлдөм...*
*Яу кайтарыр дәртем бар ҙа —*
*Кылыс йәнсек, уҡ һыныҡ.*
*Күкрәкте йөрәгем йырта*
*Еңеүҙәрҙе юкһынып.*
*Хыялдарым толпар булып*
*Мәмерйәлә кешәннәй,*
*Сәсемде йолкоп илайым,*
*Йәберләнгән кешеләй.*
*Ғүмерем бушка үткәненә*
*Ал таңдарҙа үкһейем,*
*Үҙем төндә яңы кылыс*
*Һандалдарҙа сүкейем.*

***

*Төрткөләшеп, кемуҙарҙан*
*Япрактар ергә яуа.*
*Сыңлап тора һалкын тындан*
*Гәлсәрҙәй таҙа һауа.*
*Йомшак ергә ятайым тип,*
*Береһе этә береһен.*
*Уйлай, ахыры, минән кәм бит,*
*Ситтә ятып сереһен.*
*Аяк аҫтында тапалһын —*
*Шунда уның урыны.*
*Мәсхәрәләнеп тетелһен,*
*Юлда һулып, курылып...*
*...Нәфсе, көнсөллөк япракты*
*Һуңғы юлға оҙата:*
*Барыһын ел бергә өйөрә,*
*Барыһына ла боҙ ята.*

***

*Мин ләйсән бит —*
*Бөтә булмышыңды*
*Ялмап, ялғап, ямап куямын.*
*Йәйғор буяуҙарын кейемеңә*
*Үҙем яғып, үҙем юямын.*

*Мин ләйсән бит —*
*Тәндәреңә һеңәм,*
*Йәндәреңә барып каҙалам.*
*Мин яуғанда*
*Сәсрәр бысрактарҙы*
*Алырһың бит аҙак таҙалап?*

*Мине алыштырған һаран ысык*
*Аяғыңды ғына сылатыр.*
*Ә Йыһандан ябырылған ләйсән*
*Үҙе менән бергә илатыр!*

***

*Ғашиҡ ҡына*
*ғүмер ҡәҙерен белмәй —*
*Ашыҡтыра ҡауышыу минутын.*
*Заманында, йәшлек йылдарында*
*Һин туҙ булдың,*
*булдым мин утын.*

*Ғашиҡ ҡына,*
*осрашыуҙы көтөп,*
*Көн үткәрә алмай зарыға.*
*Сәғәте йыл булып күренгәндә*
*Һабышҡандай була һарыға.*

*Эх... шул мәлдәр...*
*Янып һөйгән мәлдәр.*
*Ғашиҡ хәлдәр. Ғәмһеҙ йәшлегем.*
*Хәҙер генә йылым сәғәт кеүек —*
*Еңеләйгәс ғүмер йәшнигем.*

*Ғашиҡ саҡтар үткәс, хәҙер бына*
*Ғүмер үтеүҙәре аптыраҡ!*
*Әллә йәшәү татлы була бара,*
*Ер тиҙлеген әллә арттыра...*

***

*Сер тоталмай хәҙер кеше —*
*Эсендәге — тышында.*
*Бөтә донъяға яр һала,*
*Әйтә белмәй бышылдап.*

*Һәр кемдең серен һурырға*
*Телефон артыҡ оҫта.*
*Быға шаһит булырһың һин,*
*Йөрөһәң автобуста.*

*Көтмәгәндә, аңғармаҫтан*
*Телефондар шылтырай.*
*Кемдәрҙер ҡалтырап төшә,*
*Кемдең күҙе йылтырай...*

*Кемделер кемдер ҡурҡыта,*
*Кемделер кемдер һөйә.*
*Кемделер кемдер саҡыра,*
*Кемделер кемдер төйә...*

*Кемдер кемгәлер ялбара —*
*Әллә филде күндерә?*
*Кеше серҙәренән биҙрәп,*
*Үҙ серемде һаҡлар өсөн*
*Телефонымды һүндерәм...*



**Рита**
**ФӘТҠУЛЛИНА**

# «ҺАҒЫШЫМДЫҢ СЕРЕ ШУЛ ИКӘН...»

## *Шәжәрә*

*Тарих картаһына яҙмыштарҙың*
*Тамғаларын уйған шәжәрә.*
*Нескә ептәр аша быуындарға*
*Ваҡыт һала серле йәрәбә.*

*Отоу-отолоуҙар артыҡ бында,*
*Мөмкин бары таныу — юғалтыу.*
*Асылыңда аманатты һаҡлау*
*Йәки киләсәккә уҡ атыу.*

*Тархан — хәҙрәт — мулла — зыялылар...*
*Ейәндәре — бахыр эскесе.*
*Замандарҙың сират күперендә*
*Бәндәләрҙе һаҡлар кем көсө!?*

*Шәжәрәнең сылбыр ҡанундары —*
*Хоҙай талабына ишара.*
*Бер быуында ҡылған яуызлыҡтан*
*Киләһеләр ала мең яза.*

*Һәр бер тамсы ҡаным нәҫелемдең*
*Сауап, гонаһтарын күтәрә.*
*Йән ғазабын һеҙгә ауырайтһаҡ,*
*Кисерегеҙ беҙҙе, бүләләр.*

*Рита Фәтҡуллина (1980) — Ишембай районының Маҡар ауылы ҡыҙы. Стәрлетамаҡ педагогия академияһында уҡыта. Филология фәндәре кандидаты, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Донъяныҡы донъялыҡта ҡала...*
*Рәхмәтлеме түлдең мираҫы?!*
*Шәжәрәлә ҡандан ҡайылған рух —*
*Нәҫел намыҫы ул.*
*Ул — аҫыл.*

## Урман кешеләре

Оҙаҡ йылдар утарҙа
йәшәгән Миңнифа инәй менән
Фәхретдин бабайға

*Был һеҙҙең уртаҡ теләкме?*
*Яҙмыштың яҙыуымы?*
*Боронғолоҡ ауаздарын*
*Йәндәрҙең таныуымы?*

*Тәбиғәттән саҡырылыу,*
*Тәбиғәткә тоташыу:*
*Йәнбикә һәм Йәнбирҙеләй*
*Бер бөтөнгә уҡмашыу.*

*Ете урман, ете ҡая —*
*Донъя менән араусыҡ.*
*Һүнмәй генә баҙланымы*
*«Бәхет» тигән баҙлауыҡ?*

*Бер-берегеҙ яҡтыһынан*
*Ҡараңғы сигендеме?*
*(Мин тойҙом ҙур ҡалала ла*
*Яңғыҙлыҡ мөмкинлеген.)*

*Бүреләрҙәй олономо,*
*Йоҡоғоҙ бүлеп, төндәр?!*
*Ҡыйыулығың көс, инәйем,*
*Улар бында ла — меңдәр.*

*Мылтыҡ менән ойоп китеү,*
*Мылтыҡ менән уяныу.*
*(Тормошта йәшәткән ҡеүәт —*
*Һаҡланыусан уяулыҡ.)*

*Ҡипкән сәскә гөлләмәһе...*
*Йүкә балдың хуш еҫе...*
*Йәнбикә һәм Йәнбирҙе лә —*
*Тәбиғәттең өлөшө...*

*Был — һеҙҙең уртаҡ теләкме?*
*Яҙмыштың яҙыуымы?*
*Бәхет аша ғазаптарҙы,*
*Ғазап аша бәхеттәрҙе*
*Йәндәрҙең таныуымы?*

***

*Ер үҙе ҡыуыҡ шар хәлендә...*
*Һинеке, минеке был бушлыҡ.*
*Ҡотоптар һалҡынын күңелгә*
*Күсерә нур юҡлыҡ,*
*Ғәм юҡлыҡ.*

*Аҙымдар — бик һаҡһыҙ. Беҙ үксә*
*Аямай ҡыуыҡтың тышлығын.*
*Ер шары бәүелгән мәлдәрҙә*
*Беленә ғүмерҙәр йышлығы.*

*Бушлыҡтың батшаһы булыуын*
*Бөйөклөк тип танып аҙашҡан*
*Буш боғаҙ,*
*Буш күңел,*
*Буп-буш баш*
*Маһайыр һәм...*
*Шартлар аҙаҡтан.*

*Әлегә ауырыу ғәм менән,*
*Донъяны ҡармарға ҡосаҡҡа,*
*Ҡыуыҡ Ер өҫтөндә ҡайнашып,*
*Баҫҡанбыҙ*
*Йәшәүгә сиратҡа.*

## Тыуамағандар зыяраты

Чечен һуғышында ҡатнашҡан
быуындаштарға бағышлана

*Ут эсенән һине йолоп алып,*
*Яндарыма уятып килтерҙем.*
*Һин — үткәндәр түгел, ә бөгөнгө,*
*Быуындашым, тиҫтер егетем.*

*Һин — бөгөнгө һағыш,*
*Һин — бөгөнгө күҙ-йәш,*
*Һин — бөгөнгө яра*
*Һәм бушлыҡ.*
*Үткән менән түгел,*
*Килер менән*
*Туләнәсәк тиҙҙән*
*Һин юҡлыҡ.*

*Тыуамағандар зыяраты буйлап*
*Эҙләп сыҡһаң хыял һыныңды,*
*Танырһыңмы тыуып өлгөрмәйсә*
*Унда киткән ҡыҙың-улыңды?!*

*Хыял яралғыһы хәтерендә*
*Уйылғандыр һуңғы мәлгенәң:*
*Йәнең — шәһит. Тәнең киҫәктәрен*
*Ҡара табут йыйған бер ергә.*

*Һының булып ауыр кирбес хатта*
*Гүргә кергән.*
*Ҡайҙа ҡалғанһың?*
*Тыумағандар янына, быуындашым,*
*Күмелмәгәндәр ҙә барғандыр.*

*Нисәүһегеҙ унда?*
*Тауыш бирсе.*
*Тарих, бәлки, белмәҫ,*
*Белер Хоҙай.*
*Тыумағандар төштәренә керһә,*
*Ҡыҙҙар илай бөгөн.*
*Хыял илай...*

## Үҙ-үҙем менән дуэль

*Көн һайын,*
*Минут һайын,*
*Секунд һайын*
*Үҙ-үҙемде саҡырам дуэлгә.*
*Үҙ-үҙемә ҡаршы сығып баҫам,*
*Арабыҙҙа ҡала ... миҙгелдәр.*

*Револьверҙар әҙер.*
*Тик бер әмер*
*Тәтеһенә баҫа ҡоралдың...*
*Уҙғандарым булып йәнһеҙ ауҙым,*
*Киләсәгем булып уяндым.*

*Ниндәй ҡорбан биреп, килер көндө*
*Күпме һаҡланым мин был ерҙә?!*
*Ә бит иртәгәһем бөгөнөмдө*
*Саҡырасаҡ тағы дуэлгә!?*

*Еңелеүсеме мин, еңеүсеме?*
*Яҙмыш бизмәнендә намыҫ ята.*
*Ваҡыт тәтеһенә баҫам.*
*Йәнә...*
*Күҙгә ҡарап,*
*Үҙ-үҙемә атам.*

## Хараба

*Бизмәндең ике яғына*
*Үҙ ваҡытымды һалам:*
*Унда — хәтер харабаһы,*
*Һулда — хыялым,*
*Янған...*
*Ерҙе тырнап үкер, үкер!*

*Көл туҙаны буранлар.*
*Шәүлә булып ябырылыр*
*Күңелеңдә ҡупҡан зар.*

*Уҙғаныңдан үҙе ярһып*
*Яуап алыр, бисара.*
*Көл-күмерҙәр баҙлап ята*
*Һин табынған ҡиблала.*

*Ах, хараба!*
*Харап булып*
*Бизмәндә бейей йәнем.*
*Үрт һалыусы*
*Ваҡытыммы?*
*Бәлки, үҙем?*
*Белмәйем...*

## Тыуған тел

*Ер аҫтынан Мәскәү буйлап еләм,*
*Күҙ буяусы — тыныс халәтем.*
*Шашҡан тиҙлек менән елгән поезд*
*Уйҙарыма етеп ҡараһын!*

*Тыуған яҡҡа әллә нисә ҡайтып,*
*Ҡабат урай уйҙар поезы,*
*Рельстарҙан килгән шаңдауы —*
*Иң ҡәҙерле, иң-иң яҡыны.*

*Был ауаздың теле шундай серле:*
*Моңға һала уны — ишетәм.*
*Уҙған мәлдәр этешә-төртөшә*
*Килеп инә хәтер-ишектән...*

*Сәфәрҙәшем, иңгә ҡулын һалып,*
*Әйтте шул саҡ: «Уян, туҡталыш!»*
*Шашҡан тиҙлек менән елгән поезд*
*Мәскәү уртаһында туҡтаны!*

*Киләсәктең ишегенә табан*
*Ағып барған саҡта ташҡында,*
*Бер бәндәкәй саф башҡортса итеп:*
*«Һыйыр аяҡ!» — тиеп ҡысҡырҙы.*

*Рәхмәт, яҡташ, әйткәнеңдән һөйөн,*
*Һағышымдың сере шул икән:*
*Ят ерҙәрҙә тыуған телкәйемдең*
*Әр һүҙе лә хатта моң икән.*



**Гөлнара
ХӘЛФЕТДИНОВА**

## Тиңһеҙлек

*Юҡ биҙәктең үҙе генә юҡтыр
Ҡар бөртөктәренең күҙендә.
Уҫҡа төшөү менән ирей һала,
Был матурлыҡ тормай һүҙендә.*

*Яумай күпме көттөрҙөләр ҡарҙар,
Эй,  инәлеп күккә ҡараным
Ҡаплап ҡына китсе, тиеп, бынау
Ерҙе ҡамап алған ҡараны.*

*Аҡлап ҡына китсе күңелемде,
Хөкөм итмә һаман аҡламай.
Мин оноттом, һин дә онот инде —
Минең йөрәк кенә һаҡламай.*

*Нур итергә әҙер мин ерҙәрҙе,
Ерҙе генә түгел — асманды...
Күрмәйһеңме ниндәй өмөт менән
Ҡушлап устарымды асҡанды.*

*Уҫҡа төшһә — иреп юҡҡа сыға,
Аҫҡа төшһә — тапап үҙелә.
Аҡланмайса ғына ағарырға
Теләй микән ҡарҙың күҙе лә.*

*Гөлнара Хәлфетдинова (1978) Әбйәлил районының Хәмит ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Әлеге көндә «Башҡортостан» телерадиокомпанияһында эшләй. «Ҡыңғыраулы ғына яланда» исемле шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Ымһындырып төшкән һымаҡ була,*
*Ятҡан һымаҡ була ҡулыма.*
*Мин бар, тик ул бүтән донъя, тиеп*
*Сиртеп үтә күңел ҡылына.*

## Өләс балаҫы

*Өләс өләсәһе — һуҡҡан балаҫ:*
*Шундай сағыу, шундай саҡырғыс.*
*Нисек тертләмәйһең, бөҙрә һарыҡ*
*Урал һырттарында баҡырғас.*

*Бәрәскәйен үре алған микән,*
*Йә аҙашты микән үҙекәй...*
*Сикһеҙ наҙы менән ымһындыра*
*Бынау балаҫ — эре күҙлекәй.*

*Ниндәй сәскәләргә мансылғандыр,*
*Буяуҙары бер ҙә китмәгән.*
*Затым күрмәгәнде күргән инде,*
*Күҙ йәштәре һаман кипмәгән.*

*Ыҫыҡ булып кейеҙҙәргә һеңгән,*
*Бер уңмаған, уңмай йонсота.*
*Йәнгә һеңгән биҙәк һиллек бирә,*
*Йөрәк һыҙланыуын онота.*

*Йүнен күргән затым кәсеп булғас,*
*Йәндәр әсетһә лә, йәнселмәй.*
*Балам уйнай әле насип булғас,*
*Үҙе һуҡҡан булып йүнселәй.*

## Әсәйҙең ҡояштары

*Бәпәйҙең ҡояшы берәү,*
*Ул да булһа — әсәһе.*
*Ә әсәйҙең ҡояштары*
*Нисәү әле, нисәү һуң?*

*Беләһегеҙҙер үҙегеҙ,*
*Нисә танау, нисә күҙ.*
*Хәстәрләй әсәй һәммәһен*
*Типә-тиң, типә-тигеҙ.*

*Ғәзиз һәр бер бөртөккәйе,*
*Нисәү генә булһа ла.*
*Әсәйҙең күҙе сағылмай,*
*Ҡояш унға тулһа ла.*

*Һомайғоштоң ҡурсауында*
*Әсәй һәм сабый бала.*
*Үҙ өлөшө, бәхете бар*
*Һәр кемдең был донъяла.*

*Һөйкөмлө һөйәккенәм, ти*
*Һәр бер ҡояшын инәй.*
*Йәне утта булғанда ла,*
*Ул бер ҙә янам тимәй.*

*Донъяһын зыр әйләндерә*
*Ҡанатлы ҡояшсыҡтар:*
*Сыр-сыу килгән ҡошсоҡтары,*
*Орсоҡ малай-ҡыҙсыҡтар.*

*Нур ала ла ҙураялар*
*Әсәй яҡҡан усаҡтан.*
*Шунан, ҡанат нығытҡас та,*
*Таралалар йән-яҡҡа.*

*Бәпәй — әсәйгә йыуаныс,*
*Сабыйға — әсәй кәрәк.*
*Һәр кем өсөн үҙ ҡояшы*
*Сағыуыраҡ, өҫтәрәк.*

## *Кәйеф*

*Салғы сыңына иҫереп*
*Йығылды ялан сәскә.*
*Аллы-гөллө генә болон*
*Әйләнде яланғасҡа.*

*Ҡояш уға оят иткәс,*
*Ҡара янды буйға-буй.*
*Тамағына төйөр булып*
*Өйөп ҡуйылды бакуй.*

*Кәбән торҙо, кәртәләнде,*
*Уҡ булып ҡатты ҡамыл.*
*Шартлап һынғас тарамышы,*
*Күккә атылды ҡапыл.*

*Эй, һыҙырҙы ҡойма ямғыр*
*Ҡара янған ер битен.*
*Тамырҙары аҡтарылды,*
*Ҡан һауҙы йөрәк ите.*

*Дауыл бөттө, ҡойон үтте,*
*Кем — ҡайҙа, ярым-ярпы.*
*Ни булһа ла булыр, тиеп*
*Башын ҡалҡытты ҡурпы.*

*Ҡурпыланғас, ҡупырайып*
*Ҡояшҡа ҡарай болон.*
*Йәш үләнгә өлгөрәм, тип*
*Утлауға төштө ҡолон.*

*Болондоң ҡытығы килде,*
*Эй, көлдө һене ҡатып.*
*Уйынмы — үлеп терелеү,*
*Уйынмы — бәхет татыу.*

*Күҙ етһә лә йәшелмен, тип*
*Иллә ҡыуанды үҙе.*
*Белһә лә белмәмеш булып*
*Төшөрөн бер ҡар күҙе.*

## Иҫке доға ебәр әле, Хоҙай...

*Бер ҙә генә берҙәм булмағанда*
*Нимә тиеп былай ишелдек, ә?*
*Аяҡтарҙы ҡара: лысма һыубыҙ,*
*Кәмәбеҙҙең төбө тишелдеме...*

*Бер урында тик торабыҙ ҙаһа,*
*Һин — һул яҡҡа, ә мин уңға тартып.*
*Беҙ тартышҡан ара, ана, ҡара,*
*Карабыбыҙ бара инде батып.*

*Мине ҡотҡар, үҙеңде лә ҡотҡар,*
*Беребеҙ өсөн беребеҙ тотҡар.*
*Ҡыбырларлыҡ ҡына хәл булһасы,*
*Әйтерһең, беҙ — ҡомло, дымлы тоҡтар.*

*Бер ҙә генә берҙәм булмағанда*
*Ҡалдырайыҡ уртаҡ был кәмәне...*
*Ел таратһын уртаҡ хыялдарҙы,*
*Ел таратһын йыйған бар нәмәне.*

*Ел таратһын, әйҙә, йән-яҡтарға,*
*Юлыҡтырһын төрлө усаҡтарға...*
*Үреләмен мин, кисәге һымаҡ,*
*Һуңғы тапҡыр һине ҡосаҡларға.*

*... Рәхәт икән һинең ҡосаҡтарҙа,*
*Юҡ, бирмәйем һине сит-яттарға.*
*Иҫке доға ебәр әле, Хоҙай,*
*Йәнем менән бергә кис ятларға.*

## Ышанысты ҡайҙа һаталар ул...

*Ышанысты ҡайҙа һаталар ул?*
*Тыныслыҡ та барҙыр әле унда.*
*Юлын өйрәтһәгеҙ шул баҙарҙың,*
*Бер ҙә тормаҫ инем мин хаҡында.*

*Икеләнеү ҡортон бөтөрөүсе*
*Иҙмәләр ҙә барҙыр әле унда.*

*Алып ҡайтыр инем күмәртәләп,*
*Йөрьәт итеп бирҙе барыуымда.*

*Ауыр һүҙҙе ҡаҡлыҡтырыр өсөн —*
*Йәберҙәрҙе үткәрмәҫтәй ҡалҡан.*
*Алып ҡайтыр инем барыһына,*
*Шул баҙарға юлым төшә ҡалһа.*

*Йыйып ҡуйған сабырлығым менән*
*Иҫәпләшер инем «ыһ» та итмәй.*
*Тик яҙмышым шул кибетте белгән*
*Кешеләргә бер ҙә бит тап итмәй.*

*Ышанысты ҡайҙа һаталар ул?*
*Әйтмәгәс, тим, алып ҡайтырһығыҙ.*
*Кемгә йомошларға шул йомошто,*
*Ышаныслы икән ҡайһынығыҙ?*

*Белһәм, бер ҙә мин йәшермәҫ инем,*
*Ҡыҙғанмағыҙ әле, үтләйем мин.*
*Ышанысһыҙ йәшәп булмай ҙа һуң,*
*Ҡалайтайым, ятып үләйемме?*

*Бер көн асылыр, тип, һиңә ул сер,*
*Өмөт иттереүе ҡулай булғас,*
*Шик-шөбһәне ҡайҙа таратайым,*
*Шуны аңғартығыҙ, улай булғас?*

*Әйттем дә һуң, йыйынтығым етәр,*
*Тотонманым, «һары алтын» йыйҙым.*
*Түҙер инем дә ул түҙгәнемсә,*
*Ышанысһыҙ ҡалыу йәнде ҡыйҙы.*

## *Әйләндер йылмайыуға*

*Һин яйыма торма минең...*
*Тор әле һин яйыма.*
*Аптырама! Үҙгәрә ер*
*Һәр әйләнгән һайына.*

*Үҙгәрә ер, үҙгәрә күк,*
*Ҡара анау айына.*
*Бер әйләнә — урағына,*
*Бер — йомарлам майына.*

*Ҡара әле һарайыңа,*
*Ҡоп-ҡорсаңғы тайыңа:*
*Аҡбуҙатҡа әйләнә ул*
*Шалтырау ыңғайына.*

*Кит, яйыңа тормам инде...*
*Торам әле яйыңа.*
*Үҙгәреүсән һан яҙылған*
*Ҡатын-ҡыҙ маңлайына.*

*Тараҡ ташлаһа — урмандар,*
*Көҙгөһөнән — күл хасил.*
*Үҙе көслө, үҙе көсһөҙ —*
*Шыр йомаҡ уның асыл.*

*Яратамы, яратмаймы,—*
*Ҡыйып әйтеүе ҡыйын.*
*Мин кем әле, тип аптырай,*
*Яңы таң атҡан һайын.*

*Яраштырып булалыр ҙа,*
*Тик ярап булмай уға.*
*Башыңды әйләндергәнсе,*
*Әйләндер йылмайыуға.*

## Ҡалҡаныбыҙ

*Алтын ҡалҡан ҡалҡҡан, алтын ҡалҡан,*
*Ана, тағы ҡалҡҡан, ҡарағыҙ.*
*Был донъялар тағын ап-аҡ ҡына,*
*Был донъялар тағы ҡараһыҙ...*

*Ҡалҡҡан, ҡалҡҡан, тағы ҡалҡҡан ҡояш,*
*Беҙҙе онотмаған, ҡабынған.*
*Илай-көлә ошо түңәрәккә*
*Нисә быуын бабам табынған.*

*Ҡояш булғас, туҡтау ярамай шул,*
*Аямай ул үҙен һис ҡояш.*
*Ҡояш нуры тура ғына бара,*
*Ҡояш уғы китмәй һис ҡыйыш.*

*Ҡыйын микән ҡояш булыуҙары,*
*Була алмай микән бүтәнсә?*
*Әллә нисә ҡыйшая бит кеше*
*Ғүмер йомғаҡтарын һүткәнсә.*

*Ҡояш көнбайышта — эңер ваҡыт,*
*Ҡояш көнсығышта — иртәнсәк.*
*Ҡояш кеүек түңәрәк түгелбеҙ шул,*
*Беҙҙең есем буйтым бүтәнсә.*

*Ҡояш ҡарай, ҡояш көлөп ҡарай,*
*Башҡаса ул белмәй ҡарарға.*
*Ул эскерһеҙ ҡарай, ихлас ҡарай,*
*Теләмәй ул шулай ярарға.*

*Алтын ҡалҡан ҡалҡҡан, алтын ҡалҡан,*
*Рухи донъябыҙҙың ҡалҡаны.*
*Болот көндә лә беҙ беләбеҙ бит*
*Офоҡтарҙан уның ҡалҡҡанын.*

*Тәгәрәһен, әйҙә, шулай ғына,*
*Бер — тәбәнәк, берсә — юғары.*
*Ҡанмаҫ һыуһындарҙы ҡандырам тип,*
*Нуры менән ерҙе һуғарып.*

*Һәр бер кеше үҙен эҙләп бара*
*Түңәрәктә ҡояш артынан.*
*Тик кешеләр түңәрәк кенә түгел,*
*Улар тора ярым-яртынан.*

*Яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа ышаныс —*
*Кешелектең бит бер терәге;*
*Донъялағы иң ҙур ҡалҡан-усаҡ,*
*Тормош, тереклектең йөрәге.*

## Уҡ ямғыры аяғымдан йыҡты...

*Күрә алмау һәм нәфрәттән торған*
*Уҡ ямғыры аяғымдан йыҡты.*
*Йәнгенәмде һәм йөрәкте тетеп,*
*Иләк һымаҡ итеп үтә сыҡты.*

*Рәнйеүемде, әрнеүемде күргәс,*
*Йылмайышып тора ҡыллы яндар.*
*Ылбыраған ҡанаттарҙы киргәс,*
*Һис йәлләмәй ҡарай ҡаҙалғандар.*

*Ҡола ялан — ғәрәсәттән ҡалған,*
*Уҡтарыңды йыйып алайыммы?*
*Теткеләнгән түшәк кенә булып*
*Аяҡ аҫтарыңда ҡалайыммы?*

*Һине елекһеткән был күңелем*
*Шартланы бит инде, әй, түгелһен.*
*Ҡотом осҡас төпһөҙ ҡотоптарға,*
*Үҙем өсөн дә мин — мин түгелмен.*

*Ат тояҡҡайҙары алыҫая,*
*Көн һилләнә, яйлап дауыл шыма.*
*«Аһ» тигәнсе үҙем тертелдәйем,*
*Танымайса, яңы тауышыма.*

*Аҡһаҡ күңел, туҡһаҡ йөрәк менән*
*Осоп булмай, барам шыуыштырып.*

*Осратырмын, бәлки, алыҫ түгел*
*Берәй көтөүсенең ҡыуыштарын.*

*Күңел — ҡыуыш, йәнем шундай йыуаш,*
*Яу тот(а) алмай килгән йәберҙәргә.*
*Саф хистәрем уҡтар менән бергә*
*Һыпырылып төштө ҡәберҙәргә.*

*Һинең яуың, һинең ҡара яуың*
*Емереп тә китте аҡ тирмәмде.*
*Һинең мине яратмауың өсөн*
*Үҙ-үҙемде төйәм таш тирмәндә.*

*Һөйөү аҡбуҙатын биленләтеп*
*Башың һуҡҡан яҡҡа сығып киттең.*
*Сәскәләнгән генә гөл-баҡсамды*
*Нәфрәт еле менән йығып киттең.*

*... Күп илама, күҙһеҙ ҡалаһың, тип*
*Ҡот ҡойорға фәрештәләр һырый.*
*Ултырталар донъя арбаһына,*
*Сама кәрәк, тиҙәр, көлөп юрый.*

*Яңы көнгә яңырып ҡояш ҡалҡа,*
*Нур уҡтары миңә яра юлын.*
*Офоҡтағы һыбайлыны уйлап*
*Зыңлап тора йәндәге бер ҡылым...*

## БАҪМА УҠЫУСЫҺЫ МЕНӘН ҠИММӘТ

Бөгөнгө журналистиканың йөҙө һәм хәле нисек? Матбуғат баҫмалары менән ҡыҙыҡһыныуҙы нисек көсәйтергә? Уҡыусыға ниндәй баҫма кәрәк?

Әгәр ҙә ҡәләмдәштәрем танылған физик Петр Капицаның (1894 – 1984), “киң информация саралары күпләп юҡ итеү ҡоралы кеүек үк хәүефле”, тигән тәрән мәғәнәле һүҙҙәрен хәтерендә тотһа, ни ҙә булһа яҙыр алдынан, уның нимә менән барып бөтәсәге хаҡында уйланыр ине. Федераль матбуғат журналистарының күпселеге “тормоштан барыһын да алып ҡал” тигән маҡсат менән эшләгән әлеге дәүерҙә һөнәребеҙгә ихтирам хаҡында һүҙ алып барырға тура килмәй. Рәсәй телевидениеһы каналдары күрһәткән тапшырыуҙарға күҙ һалайыҡ – был да журналистар эшмәкәрлегенең көҙгөһө – улар араһында фәһемле, аҡыл биргәндәрен бик һирәк осратаһың. Ә бит экрандарҙа көн һайын тиерлек “балҡыған” айырым кешеләргә ҡарағанда илебеҙҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырҙай граждандар күберәк.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғы йылдарҙа журналистиканың уҡыусыларға мәғлүмәтте шул килеш, тулыраҡ еткереү, уларҙың көнкүреш проблемаларын хәл итеүҙә ҡатнашыу кеүек тәғәйенләнеше юйыла бара. Бөгөн телевидение экрандарында, матбуғат баҫмаларында тормоштоң үҙе сағылыш тапмай, шуға күрә улар менән ҡыҙыҡһыныу ҙа кәмей. Тимәк, етди проблемалар күтәреүҙән ҡурҡырға ярамай, алға барыу, башҡаларға ярҙам итеү кәрәк. Йәмғиәтте хәҙерге мәлдә борсоған нәмәләрҙе таба, аса һәм унан арыныу юлдарын күрһәтә белеү мөһим. Һуңғы йылдарҙа Мәскәү форумдарында журналистиканың сифаты мәсьәләһенә иғтибар арта бара кеүек. Минеңсә, был төшөнсә иң элек гражданлыҡ, социаль йүнәлешлелек менән бәйле. Әлеге матбуғат баҫмаларында журналистар күберәк үҙ-үҙен күрһәтергә тырышып, башҡаларҙы, ябай граждандарҙы, үтә күренмәҫ арҡаһы менән ышыҡлай. Өҫтәүенә, матбуғат биттәренән һиңә станоктар, баҫыуҙар, фермалар ҡаһармандарына “алмашҡа килгән” һәм бер ниндәй сикләүҙе белмәгән “аҡса тоҡсайҙары” баға. Яңы журналистика ниндәйҙер сәйер юлдар менән журналистарһыҙ ҙа йәшәй ала икән, был беҙгә, журналистар мәғлүмәт эҙләү, эшкәртеү һәм киң йәмәғәтселеккә еткереүҙә өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә, тип иҫәпләүселәр тарафынан ниндәйҙер иҫкәртеү кеүек ҡабул ителә. Уҡыусыларҙың беҙҙән, журналистарҙан, башҡа ла йәшәргә (ә ул ваҡытлы матбуғаттың тиражынан да күренеп тора) хәл итеүенә килтереүе ихтимал. Бындай күңелһеҙлеккә юл ҡуймаҫ өсөн, уҡыусыны гәзит-журнал биттәренә индерегеҙ. Әйҙә улар ҙа көнүҙәк

мәсьәләләр буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашһын. Үҙгәртеп ҡороуҙың тәүге йылдарындағы кеүек, беҙҙең ваҡытлы матбуғат биттәрен үҙ фекерҙәре, борсолоуҙары менән тултырһын. Ә инде журналистар был фекер алышыуҙы көйләүсе ролен үтәһен.

Эйе, йәмғиәтебеҙ алдында үтә лә мөһим бурыс тора: Рәсәй Журналистары берлеге рәйесе Всеволод Богдановтың фекеренсә, беҙгә, милләткә, "үҙ-үҙе менән әңгәмәләшеүсе" мәғлүмәт саралары кәрәк. Бурыс ҙур һәм ҡатмарлы, әммә уны хәл итеү мотлаҡ. Шуға күрә журналистың хоҡуҡи һәм социаль (матди хәлен яҡшыртыу) йәһәттән статусын күтәреү, иҡтисади яҡтан, шул иҫәптән эш урынында һәм эшҡыуарҙарҙан бойондороҡһоҙлоғон тәьмин итергә кәрәк. Ижади союзыбыҙҙың да профессиональ ойошмаға әүерелеүе маҡсатҡа ярашлы. Хәҙерге ваҡытта, журналист һөнәрен пиарсы (инглиз теленең "паблик рилейшнз" һүҙенән), сәйәси технолог эше менән бутағанда, был бигерәк тә мөһим. Шул уҡ Богданов фекеренсә, һин йә журналист, йә пиарсы. Әгәр ҙә кеше пиар менән шөғөлләнә икән, уны журналист тип әйтеп булмай. Был йәһәттән һәр матбуғат вәкиле кем булырға икәнлеген үҙе һайлай ала.

Дөйөм алғанда, Рәсәй журналистикаһы күп кенә ҡиммәтле һыҙаттарынан мәхрүм булды, тик урындағы матбуғат ҡына ниндәйҙер дәрәжәлә үҙен һаҡлай алды. Республикабыҙҙың ваҡытлы матбуғат сараларына, мәҫәлән, яңы сифатҡа күсеү, баҫмаларҙы интеллектуаль йөкмәткe, юғары әхлаҡлыҡ менән һуғарыу хас. Рәсәй матбуғат берлеге 2005 йылда раҫлаған"Золотой фонд прессы" билдәһе баҫмаларыбыҙҙың күбеһенә бирелде. Башҡортостан журналистары сәйәсәттә һәм иҡтисадта барған тәрән процестарҙы һәр яҡлап тикшергән һөйләшеүҙә йәмәғәтселектең дә ҡатнашырға теләүен яҡшы аңлай: ҡала йәки район гәзите биттәрендә донъя күргән мәҡәләләрҙең тотош илдә демократия торошона йоғонто яһауы, минеңсә, һис бер арттырыу түгел. Бындай мәҡәләләр уны әҙерләгән журналистың баһаһын күрһәтә. Ҡала, район матбуғатында, бәхеткә күрә, ундай күренеште йыш күҙәтергә мөмкин. Улар кешеләр тормошон байыта, ауыр минуттарҙа хәлен еңеләйтә. Уҡыусылар йыш ҡына ошондай мәҡәләләргә үҙенең мөнәсәбәтен белдереп хаттар яҙа. Иң мөһиме: күп кенә баҫмалар уларҙы матбуғат битенә сығара. Матбуғат сараһының абруйлығының төп күрһәткесе – уҡыусы менән тура бәйләнеш барлыҡҡа килтереү, нығытыу.

Ҡайһы берәүҙәр шатлыҡ кисерә, имеш, пропагандистарҙың хыялы тормошҡа ашты: мәғлүмәт технологияларының үҫеүенә бәйле матбуғат саралары йәмәғәтселек фекеренә йоғонто яһау мөмкинлегенә эйә булып алды. Ысынлап та, киң мәғлүмәт саралары – йәмәғәтселек аңын формалаштырыусы сығанаҡ. Йәнле аралашыу, әлбиттә, йоғонтолораҡ, ләкин бер юлы биш мең кеше менән осрашып, ҡул ҡыҫышыу мөмкин түгел. Ваҡытлы матбуғат бындай мөмкинлеккә эйә, ул кеше аңына етди йоғонто яһай. Шуныһы үкенесле: иртә менән өр-яңы гәзит алыу, яңылыҡтарҙы ғаилә менән бергә уртаҡлашыу ваҡыттары артта ҡалды. Бөгөн уҡыусыларыбыҙ, айырыуса йәштәр, гәзит-журналдар менән һирәк ҡыҙыҡһына, йәки уларға бөтөнләй битараф.

Апрелдә республика, ҡала һәм район баҫмалары мөхәррирҙәре, "Рәсәй почтаһы" дәүләт унитар предприятиеһының Башҡортостан филиалы вәкилдәре ҡатнашлығында ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу

буйынса ойошторолған кәңәшмәлә байтаҡ етешһеҙлектәр асыҡланды. Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу финанс-иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ шарттарында бара, тимәк, гәзит-журнал алдырып уҡыусылар кәрәкле сығымдарға ҡытлыҡ кисерә. Ләкин бындай шарттарҙа ла редакцияларға баҫмаларға яҙылыу хаҡын арттырыуҙан башҡа юл юҡ, сөнки уны иң элек почта хеҙмәте күтәрә бит. Шул уҡ ваҡытта журналистар республиканың мәғлүмәт киңлеген һаҡларға, халыҡҡа власть даирәләре эшмәкәрлеге, төрлө ваҡиғалар тураһында хәбәрҙәрҙе ваҡытында еткерергә лә бурыслы. Иң мөһиме – баҫманың уҡыусыларын, тимәк, тиражын кәметмәҫкә.

Әлбиттә, теләһә ҡайһы баҫманың абруйы иң элек уның йөкмәткеһе менән бәйле. Административ баҫым, бағымсылар ярҙамы, агитация алымдары, махсус бүләктәр, “шаҡ ҡатырғыс” мәҡәләләр һ.б. Әгәр ҙә гәзит йәки журналда ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ файҙалы әйберҙәр булмаһа, уҡыусылар һанын арттырыу мөмкинлеге бирмәйәсәк. Күңел биреп уҡылмаған баҫма өсөн кем аҡса әрәм итһен! Үҙ эшен яҡшы белгән һөнәрмәндәрҙән тыш, йөкмәткене яҡшыртыуҙы күҙ алдына ла килтереп булмай. Көнүҙәк мәсьәләләрҙе йүнләп белмәү арҡаһында йыш ҡына йәмәғәтселекте ҡуҙғытҡан, борсолоу тыуҙырған материалдар ҙа донъя күреп ҡуя. Һөнәр оҫталығы – тотороҡло һөҙөмтә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ был күрһәткес менән маҡтана алмайбыҙ: матбуғат биттәрен йомшаҡ, тәрән анализ, публицистик фекерләү етешмәгән мәҡәләләр баҫып китә.

Һуңғы йылдарҙа, үкенескә ҡаршы, беҙҙең һөнәр эйәләре араһында эшлекһеҙ, осраҡлы һәм әҙәпһеҙ, нимә тураһында яҙғанын да белмәгән кешеләр күбәйә. Ялҡау, белемен арттырырға ынтылмаған, нисек етте шулай яҙырға өйрәнгән был әҙәмдәр теге йәки был проблеманы тәрән тикшерә, фекер алышыуға саҡыра алмау, өҫтәүенә, көнүҙәк мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын да тәҡдим итергә һәләтһеҙ. Бик күп йылдар элек беҙҙе шулай өйрәттеләр: әгәр ҙә ниндәйҙер темаға тотонаһың икән, иң элек уны ентекле өйрәнергә тейешһең. Һин ошо хаҡта яҙып сыҡҡандан һуң, бер кемдең дә һине булдыҡһыҙлыҡта ғәйепләргә урыны ҡалмаһын. Тимәк, һин үҙ бурысыңды атҡарғанһың.

Ошо айҡанлы халыҡ шағиры Мостай Кәримдең журналистарға ҡарата әйтелгән һүҙҙәре иҫкә төшә: “Журналист шикләнә белергә бурыслы. Бына мин 63 йыл ижад итәм һәм һәр ваҡыт, минең яҙғандарҙы халыҡ ҡабул итерме, тип шикләнәм”. Әгәр ҙә кеше эшен ярата икән, ул үҙен яратҡан һөнәренә тулыһынса бағышларға бурыслы. Шуға күрә миңә журналист кеүек бик ҡыҙыҡлы һөнәрҙе башҡаға, мәҫәлән, аҡсалыраҡҡа алмаштырған кешеләрҙең тәртибе аңлашылып бөтмәй. Әгәр ҙә теге йәки был белгес үҙ эшен бушлай ҙа тейешле кимәлдә башҡарырға һәләтһеҙ икән, ул быны бик юғары хаҡҡа ла атҡара алмаясаҡ. Бының менән мин, матди файҙаны өҫтөнөрәк күрергә ярамай, тип әйтергә теләйем. Тәүҙә үҙеңдең нимәгә һәләтле икәнеңде иҫбатла. Ысын-ысындан профессионал кешегә эш табыу бер ҡасан да ҡыйын түгел, сөнки уны һәр ерҙә көтәләр, ләкин, минеңсә, хикмәт үҙ һөнәреңдә абруй ҡаҙаныуҙалыр ул.

Үҙгәртеп ҡороу йылдарының иң күркәм сағылышы булып матбуғат биттәрендә ябай һөнәр эйәләренең сығыш яһауын, идеялар тәҡдим итеүен, тәьҫораттары менән уртаҡлашыуын, бәхәсләшеүен атарға кәрәктер. Эйе, был ысын-ысындан аҡыл, идеялар, ижад емештәре һандығы ине.

Хатта иң профессиональ коллектив та үҙендә был тиклем сифаттарҙы туплай алмай. Уҡыусылар менән берлектә сыҡҡан гәзиттәрҙең тиражы ла рекорд дәрәжәһенә саҡлы күтәрелде. Әле генә матбағанан сыҡҡан баҫмаларҙы халыҡ туҡталышта уҡ уҡый, ҡулдан-ҡулға йөрөтә, коллегалары менән бергә тикшерә ине. Был баҫмалар ҡыҙыҡһынып уҡылды, сөнки, ҡайһы берәүҙәр, “юғары”нан баҫым яһалды тип раҫларға маташыуға ҡарамаҫтан, материалдар бер ниндәй ығы-зығыһыҙ килеп инә һәм шулай сығып китә торған булды. Ҡала һәм район гәзиттәре, билдәле, уҡыусыларына тағы ла яҡыныраҡ ине. Урындағы матбуғат республикабыҙҙа бөгөн дә ыңғай тәьҫир ҡалдыра.

Тағы ла бер баһа – уҡыусылар ихтыяжы һәм мәнфәғәте, сөнки гәзит-журналдар улар өсөн нәшер ителә. Ваҡытлы матбуғатты алдырыусы, телевизор ҡараусы йәки радио тыңлаусы гәзит-журналдарға баҫылған, эфирҙа яңғыраған фекер берҙән-бер түгел, уның менән бәхәсләшергә мөмкинлеген белһен, уға быңдай мөмкинлекте бирегеҙ. Уҡыусылар менән аралашыу мөһим, шулай уҡ уларҙың фекерен белеү ҙә. Ябай кеше мәнфәғәтен хәстәрләү, сәйәси уйындар менән мауыҡмау кеүек республика матбуғатына хас сифаттарҙы һаҡлап ҡалыу менән бергә, беҙгә уҡыусыларҙы гәзит-журналдарға әүҙем ылыҡтырыу менән шөғөлләнергә кәрәк. Иң элек хеҙмәт, рухи эҙләнеүҙәр, хеҙмәттә уңышҡа өлгәшеү, лайыҡлы тормошта йәшәү – кисәге көн түгел, ә бөгөнгө ысынбарлыҡ икәнлегенә ышандырыу өсөн. Ваҡытлы матбуғатты алдырыусыға унан ни ҙә булһа алыу мөһим бит. Телевидениела сифаттың самалы булыуы, матбуғат баҫмаларына “попса”ға мөкиббән китмәгән кешеләрҙе үҙ яғына ауҙарыу мөмкинлеген хәстәрләү ҡамасауламаҫ ине. Был йәһәттән мин журналистиканың киләсәге өсөн борсолмайым, шул уҡ ваҡытта, “ул тарҡала”, тигән фекерҙе лә уртаҡлаша алмайым.

Үҙенсәлекле йомғаҡлау рәүешендә, журналистар һуңғы ун йыллыҡтарҙа күп нәмәгә өйрәнде, тигән законлы күренеште атап үтеү кәрәк. Улар хәҙер үҙҙәренең төп бағымсылары кем икәнлеген яҡшыраҡ аңлай. Кешеләрҙе бөгөн “алһыу хыялдар” ҡыҙыҡһындырмай, улар үҙҙәре, тормош, проблемалар тураһында хәҡиҡәтте белеүгә мохтажлыҡ кисереп, журналистарҙан ниндәй ҙә булһа ярҙам көтә. Үкенескә ҡаршы, әле лә журналистарҙың байтағы үҙен уҡыусылар менән бер аудиторияла тип хис итмәй, һәм ике аралағы упҡын киңәйә бара. Әйтеп үтелгәндәр “совет журналистикаһын һағыныу” түгел, ә кешеләргә һәр саҡ бер-береңә ышаныу тойғоһо, уртаҡ фекерҙәр, маҡсаттар булырға тейешлеген иҫкә төшөрөп үтеү генә. Теләйме ул юҡмы, журналист нимә хаҡында ғына яҙһа ла, һәр ваҡыт социаль төркөмдәр барлыҡҡа килеүҙә ҡатнаша. Тимәк, ул үҙенсәлекле идеологияның башында тора. Бер саҡ РФ Федерация Советы Рәйесе Сергей Миронов “Мәғлүмәт саралары һәм йәмғиәт” тураһында фекер алышыу барышында”, яҡшы нәмә тураһында яҙыу өсөн дә ҡыйыулыҡ кәрәк”, тигән тәрән фекер белдергәйне. Ысынлап та, бынан бер нисә тиҫтә йыл элек журналист өсөн ҡыйыулыҡ булып кире күренештәр, проблемалар хаҡында яҙып сығыу иҫәпләнә ине. Бөгөн иһә – киреһенсә, ҡайһы саҡ ыңғай тормошто һүрәтләү өсөн дә тәүәккәллек кәрәк.

Республикабыҙҙа тәрән уйланылған мәғлүмәт сәйәсәте ысынбарлыкты шул килеш сағылдырырға ярҙам итә, ә ниндәйҙер насар кәйеф тыуҙырмай. Халҡыбыҙ властарға ышана, сөнки идара итеү органдары үҙ

эшмәкәрлеген ваҡытлы матбуғатта маҡсатлы, дөрөҫ сағылдыра. Баҫмаларҙа донъя күргән мәғлүмәттәрҙең күпселеге социаль йөкмәткеле. Был да тәбиғи, сөнки социаль ғәҙеллек – төп идеология.

Байтаҡ йылдар элек редакцияларҙың эш һөҙөмтәһе почта сифаты менән билдәләнә ине. Үҙәк гәзиттәрҙең һәр береһе йылына 500 меңдән ашыу, ә урындағылар тиҫтәләрсә мең хат алды. Хат – йәмғәтселек фекере сағылышы, журналистар өсөн иһә авторҙаш та булып, кәңәшмә, йыйылыштар шулар хаҡында һөйләшеүҙән башлана торғайны. Хаттар гәзит-журнал биттәрендә баҫылды йәки авторға яуап ебәрелде. “Уҡыусы фекере”, “Гәзит-уҡыусы-гәзит”, ”Хаттар өҫтөндә уйланыуҙар” кеүек махсус рубрикалар бар ине. “Гәзит сығыш яһаны – нимә эшләнде?”, “Беҙҙең сығыштар эҙенән” кеүек рубрикаларҙы хәҙер уҡыусылар онотоп та бара.

Дәүер ике ҡәләм – уҡыусыныҡы һәм журналистыҡы менән яҙылған саҡтарҙы, минеңсә, ғәҙел баһалау зарур. “Гиннестың рекордтар китабы”на индерерлек тираждар ҙа шунан килә. 1990 йылда илебеҙҙә һәр ике кеше уртаса өс баҫма алдырып уҡыны. Почтальондарҙың көсө етмәгәнлектән, баҫмаларҙы уҡыусыларға машина менән ташынылар. 1991 йылдың 21 декабрендә депутаттар ни маҡсат менәндер “донъяла иң демократик” булған “Киң мәғлүмәт саралары тураһында” федераль закон ҡабул итте. Уның 12-се статьяһы әле лә яҡшы тойғо ҡалдырмай: “Редакция граждандар хаттарына яуап бирергә, уларҙы ҡарау күҙ уңында тотолған органдарға, ойошмаларға һәм вазифаларға ебәрергә бурыслы түгел”. Тәжрибәле журналист булараҡ, шуны әйтә алам: мөрәжәғәт итеүселәргә яуап бирмәү – әхлаҡһыҙлыҡ. Бәйләнешкә саҡырған, мәғлүмәт биргән һәм ваҡытлы баҫманы алдырып уҡыған кешегә ҡарата ошондай мөнәсәбәт үҙең ултырған ботаҡты ҡырҡыуға тиң. Яуап алмаҫас, уҡыусы ла тәүҙә яҙыуҙан, артабан гәзиткә яҙылыуҙан төңөлә. Бәлки, шуғалыр ҙа федераль матбуғаттың ҡайһы берҙәре хәҙер йоҡарҙы, тематикаһы тарайҙы, жанрҙары төҫһеҙләнде. Тимәк, мәғлүмәт менән алмашырға, яуаптар яҙырға, уҡыусы менән тығыҙ аралашырға кәрәк. Былар, минеңсә, киң мәғлүмәт саралары өсөн төп принцип булырға тейеш. Бәхеткә күрә, Башҡортостанда уны боҙмайҙар әле.

Уҡыусы менән бәйләнеш тураһында һөйләгәндә, Рәсәй журналистикаһының иң яҡшы традициялары тергеҙелеүе бер ни тиклем ҡәнәғәтләнеү тойғоһо уята. Мәҫәлән, апрелдә “Российская газета”, “Комсомольская правда”, “Известия” кеүек күп таралған гәзиттәр “Бөтә Рәсәй летучкаһы” уҙғарып, уҡыусыларына үҙ фекерен белдереү мөмкинлеге бирә. Тимәк, журналистар тәнҡит һүҙе менән бергә файҙалы кәңәштәрҙе лә ҡабул итергә әҙер. Шулай уҡ журналистар тәҡдиме менән Мәскәүҙәге “По требованию” туҡталышы “Аллея журналистов”ҡа үҙгәртелде. Ҡазанда Журналистар, Өфөлә Рабкорҙар урамдары бар. Дөрөҫ, һуңғы исемдең ни аңлатҡанын халыҡ белеп тә еткермәйҙер, ни өсөндөр журналистар ҙа был хаҡта бер ни өндәшмәй.

Был юлдарҙы яҙғанда XX быуат журналистикаһында тәрән эҙ ҡалдырған шәхестәр тураһында әйтеп үтмәү яҙыҡ булыр ине. Минең тыуған ҡалам Сибайҙа Серафим Вайсман станокта эшләгән, баҡыр сығарған, төҙөлөш алып барған кешеләрҙән тиҫтәләгән ҡәләм оҫтаһы әҙерләне. Елена Зорина, Таисия Денисова, Харис Йәһүҙин, Фәндәс Мөхәмәтйәнов кеүектәр “Сибайский рабочий” гәзитенә әле лә яҙыша.

Серафим Яковлевич эшсе-хәбәрселәргә үҙ туғандарылай ҡараны, ярҙам итте, донъяға ҡараштарын киңәйтергә тырышты. Ләкин...

Вафаты алдынан ул, минең менән тәьҫораттарын уртаҡлашҡандай, былай тигәйне: "Күрәһеңме "Человеку, который меня заметил" тигән яҙыуҙы? Был кеше бөгөн мине күрмәй үтеп китә..."

Башҡортостан Журналистары берлегенең элекке яуаплы сәркәтибе Давид Гальперин таланттарҙы төпкөл районда ла табыу һәләтенә эйә булды. Урындарҙа осрашыуҙар уның өсөн мөһимерәк ине. Осрашыуҙарҙы ҡыҙыҡлыраҡ ойоштороу хаҡында Давид Самойлович үҙе баш ватты, төндәрен ултырып күҙәтеүҙәр яҙҙы – былар уның өсөн иң мөһиме булды. Журналистар Гальперин өсөн изге йәндәр ине, уларға ярҙам йөҙөнән көсөн йәлләмәне. Сибай карьерынан ул алып ҡайтҡан оло таштар, Шәһит Хоҙайбирҙин һәйкәле, мемориаль таҡта...

Давид Самойлович минең өсөн журналистика өлгөһөнән бигерәк журналистарға атайҙарса мөнәсәбәте йәһәтенән өлгө. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, телдән иҫкә алыуҙан башҡа, беҙ уның тураһында иҫтәлектәрҙе һаҡлап ҡала алманыҡ.

Рәсәй журналистикаһын бөгөнгө финанс тотороҡһоҙлоғо шарттарында имен ҡалыу мәсьәләһе күберәк хафаға һала. Реклама баҙары ҡапыл тарайыу сәбәпле, киң мәғлүмәт сараларының финанс хәле ауырлашып, был уларҙың эшмәкәрлегенә кире йоғонто яһай. Ҡайһы бер төбәктәрҙә хатта теге йәки был баҫмалар сығыуҙан туктаған, уларҙың ҡасан яңынан нәшер ителә башлауы ла билдәһеҙ. Кризис арҡаһында меңдәрсә ҡәләмдәштәребеҙ эшһеҙ ҡалды, ғәмәлдәге закондар ҙа улар мәнфәғәтен яҡламай. Был йәһәттән республикабыҙ матбуғаты, һис шикһеҙ, уңайлы хәлдә, сөнки тотороҡһоҙлоҡ ғәләмәте әлегә уларға ҡағылманы. Тимәк, уҡыусылар менән йәнле аралашыуҙы ситкә ҡуйып торорға ярамай, киреһенсә, көсәйтеү талап ителә.

Рәсәй Журналистары берлегенең кризисҡа ҡаршы клубы тарафынан Свердловск өлкәһендә үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, киң мәғлүмәт сараларына ҡаҙна ярҙамы төбәктә һиҙелерлек кәмегән, реклама биреүселәр иһә ҡырҡа аҙайған. Шуныһы ҡыуаныслы: журналистар араһында ошондай ауыр шарттарҙа ла, "матбуғатта эшләүе ҡыҙыҡлы", тиеүселәр байтаҡ. Финанс-иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ тураһында киң мәғлүмәт саралары нисек хәбәр итергә бурыслы? Кризисҡа ҡаршы ҡарарҙар буйынса фекер алышырға саҡырырға, белгестәр, йәмәғәтселектең, әүҙем граждандарҙың ҡарашын сағылдырырға һ.б. Әлбиттә, властарҙың урындағы проблемаларҙы нисек хәл итеүе тураһында даими хәбәр итеү мотлаҡ. Ыңғай күренештәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Үҙ уҡыусылары менән тығыҙ бәйләнештә булған ваҡытлы матбуғатҡа был ауыр хәлдән сығыу еңелерәк буласаҡ.

**Мәүлиҙә ЯҠУПОВА,**
Рәсәй һәм Башҡортостан Журналистар
берлеге ағзаһы.

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНДА ЙОГА ТӘҒЛИМӘТЕ САҒЫЛЫШЫ

Фольклор – халыҡ тарафынан ижад ителеп, быуындан быуынға тапшырыла килгән рухи мираҫ ул. Халыҡтың тормош-көнкүрешен, уй-теләктәрен сағылдырған тел хазинаһы аң-кимәле юғары булған аҡыл эйәләре тарафынан борон-борондан түкмәй-сәсмәй телдән телгә изге аманат итеп тапшырыла килгән. Уның аша һәр бер быуын ата-бабаларҙың тормош тәжрибәһен, әхлаҡ нормаларын үҙләштергән. «Борон аҡһаҡалдар һүҙен тыңлау, сәсәндәр телен өйрәнеү, йолалар үҙләштереү яҙылмаған ҡанундар кимәлендә булған», – тип яҙҙы тел ғалимы Салауат Галин.

Тимәк, боронғо динебеҙ булараҡ, йоганың тәртип ҡанундары халыҡтың ауыҙ-тел ижадында сағылырға тейеш булып сыға. Ошо фараздан сығып, был хеҙмәтебеҙҙә халыҡ ижадының иң боронғо һаналған төрҙәре – ҡобайырҙарҙағы һәм мәҡәл-әйтемдәрҙәге фекерҙең йога тәғлимәтенең эстәлегенә тап килеү-килмәүен күҙәтергә булдыҡ.

Махсус әҙәбиәттән билдәле булыуынса, йоганың төп маҡсаты – кундалини ҡеүәтен уятыу, артабан шул сихри көс ярҙамында ғәҙәти булмаған һәләттәрендә асыу һәм үҫтереү өсөн уның төрлө кимәлдәре үҙләштерелергә тейеш. «Йога-сутра»ла Махариши Патанджали был тәғлимәттең 8 баҫҡысын һүрәтләй:

1. **Яма** – *аңыңды алама ҡылыҡтар ҡылмауға йүнәлтеү һәм яман ғәҙәттәрҙән бөтөнләй арыныуға ынтылыу;*

2. **Нияма** – *бөтә булмышың менән тик яҡшылыҡтар ҡылыуға өлгәшеү, көс-кәреңде изге ғәмәлдәргә сарыф итеү;*

3. ***Асана*** *күнегеүҙәре аша кәүҙәңде ҡатып ҡалған рәүешкә күндереп, хәрәкәттәрҙән азат торороҡло хәлгә килеү;*

4. **Пранаяма** – *махсус күнегеүҙәр ярҙамында һулыш аша эске донъяңды тыныс хәлгә көйләү;*

5. **Һиҙеү** *ағзаларының эшмәкәрлеген ваҡытлыса туҡтатыуға өлгәшеп һәм хис-тойғоларҙан арынып, тышҡы донъяны ҡабул итеүҙән алыҫлашыу;*

6. **Концентрация** – *аңды тәрән туплауға өйрәнеү;*

7. **Медитация**;

8. **Самад(х)и** — *күҙәтеүсенең аңы күҙәтеүгә дусар булған йәнле йәки йәнһеҙ предмет менән бер бөтөнгә әүерелеүе, эске һәм тышҡы донъяның ҡушылыуы.*

Күреүебеҙсә, йоганың ҡатмарлы тойолған юғары кимәлдәренә өлгәшеүҙән элек, кеше тәүҙә уның нигеҙ ташын тәшкил иткән Яма һәм Ниямала камиллашырға бурыслы, йәғни яҡшыны ямандан айырырға тейеш. Уның өсөн билдәле бер йола ҡағиҙәләренә буйһоноу, әҙәплелек талаптарын теүәл үтәү, әхлаҡилыҡ сифаттарын тәрән үҙләштереү һәм йәшәү рәүешендә мөмкин тиклем ябайлаштырыу мотлаҡ. Ошо юл аша тән һәм күңел таҙалығына өлгәшкәндәргә генә

йоганың киләһе баҫҡыстарына күтәрелеү мөмкинселеген биреүсе алымдарҙың серен оҫталар телдән телгә тапшыра килгән.

Ауыҙ-тел ижадының бик боронғо төрөнә ҡараған **ҡобайырҙарҙың** байтағы әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләренә бағышлана. Әгәр санскрит телендә **ҡорау – *асыуландырыу, тетрәндереү, хәрәкәткә килтереү, ҡыбырлатыу, тулҡынландырыу*** мәғәнәһен бирә икән, тимәк, халыҡ ижадының был төрө халыҡтың аңын уятыуға, иҫен йыйнауға, күңелен тетрәндереүгә, аҡылын һиҫкәндереүгә булышлыҡ итергә тейеш булып сыға түгелме? Иң боронғоларҙан һаналған **«Ни яман?»** ҡобайырының исеме үҙе генә лә йоганың **Яма, Нияма** кимәлдәренең атамаларына тап килеп тора бит. Йоганың ошо баҫҡыстары өсөн тәғәйенләнгән талаптарын, бурыстарын, киҫәтеүҙәрен, тыйыуҙарын үҙләштереү маҡсатына көйләнгән был һорау ни өсөн күп тапҡыр ҡабатлана һуң? Сөнки төпкө аң тик күп тапҡыр ҡабатлаған мәғлүмәтте генә үҙләштерә, йәғни йота, һәм ошо мәғлүмәт нигеҙендә өҫкө аң (аҡыл) аша кешенең ҡылыҡтарында, тәртибендә сағыла башлай.

*Бер тигәс тә ни яман?*
*Беҙҙең өсөн бей яман.*
*Ике тигәс тә ни яман?*
*Илһеҙ ҡалъан ил яман.*
*Өс тигәс тә ни яман?*
*Өлгөһөҙ бескән тун яман.*
*Дүрт тигәс тә ни яман?*
*Дәртһеҙ булһаң – шул яман.*
*Биш тигәс тә ни яман?*
*Бишектәге балаң илап ҡалһа – шул яман.*
*Алты тигәс тә ни яман?*
*Атылып баръан атың абынһа – шул яман.*
*Ете тигәс тә ни яман?*
*Етем ҡалһаң – шул яман.*
*Һигеҙ тигәс тә ни яман?*
*Һикһән йәшлек ҡарт әсәң*
*Һуҡыр күҙен секрәйтеп,*
*Ҡатҡан билен бөкрәйтеп*
*Һыу ташыһа – шул яман.*
*Туъыҙ тигәс тә ни яман?*
*Туҡһан йәшлек ҡарт атаң*
*Тумыртҡалай туҡылдап,*
*Ябалаҡтай ухылдап*
*Утын ҡырҡһа – шул яман.*
*Ун тигәс тә ни яман?*
*Ун бармаъы ҡамыштай,*
*Утыҙ теше көмөштәй,*
*Уң бите айҙай балҡыъан,*
*Һул бите ҡояштай яҡтырьан,*
*Уңъан булъан һылыуың*
*Илап ҡалһа – шул яман.*
*Ун бер тигәс тә ни яман?*
*Уҡ-һаҙаҡлы батыр ир*
*Уҡталъан аттан йыъылып,*
*Аяҡ-ҡулы ҡаймыъып*

*Яуҙан ҡалһа – шул яман.*
*Ун ике тигәс тә ни яман?*
*Уттан-һыуҙан ҡурҡҡан ир яман.*
*Ун өс тигәс тә ни яман?*
*Урынһыҙ әйткән һүҙ яман.*
*Ун дүрт тигәс тә ни яман?*
*Ун дүрт йәшлек һылыуҙы*
*Ҡартҡа бирһәң – шул яман.*

«Ололар һүҙе», «Бейек тауҙың үлгәне», «Ил тигәндең кеме юҡ» тип аталған ҡобайырҙар ҙа нәҡ ана шул әҙәп-әхлаҡ хаҡында. Улар яҡшылыҡ менән яманлыҡты, әҙәп менән әҙәпһеҙлекте айыра белергә өйрәтә, кешеләр араһында итәғәтле, кеселекле булырға өндәй, ил-халыҡ мәнфәғәте өсөн янып йәшәүҙе хуплай. Ритм, рифмаға һалынғанлығы өсөн көйләп уҡыу мөмкинселеге биргән был өгөт-нәсихәттәр күп ҡабатланыуҙан ялҡытмай, киреһенсә, төпкө аңға үтеп, иҫтә ҡала, уй-фекер, йәшәү рәүешенә әйләнә. Шуның менән аң кимәлдәре бик юғары булған шәхестәр – аҡһаҡалдар, сәсәндәр, былдай ҡобайырҙарҙы төрлө йыйындарҙа башҡарып, ябай халыҡҡа рухи ярҙам күрһәтеү, әхлаҡи тәрбиә биреү маҡсатында Яма-Нияманың бурыстарын үтәгәндәр булып сыға.

Халыҡтың борон-борондан килгән тәрән мәғәнәле һәм киң йөкмәткеле рухи тәжрибәһен, фәлсәфәүи һәм әхлаҡи ҡараштарын йыйнаҡ һәм ныҡлы ойошҡан бәхәсһеҙ хәҡиҡәт рәүешендә биргән мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙә ошо ихтыяждан барлыҡҡа килгән, тип дәлилләп була. Улар өгөт-нәсихәткә ҡоролған һөйләшеүгә һығымта яһаған ваҡытта фекерҙе нығытыу, ҡеүәтләү өсөн ҡулланылып, тапҡыр һүҙ булып, төпкө аңға, мәргән атылған уҡ кеүек, үтеп инә, шуның менән хәтерҙә һаҡлана, кәрәкле осраҡта аҡыл-кәңәш рәүешендә иҫкә төшә, холоҡ-ҡылығында сағыла, үҙенде үҙең тәрбиәләү, ауыҙлыҡлау алымына әйләнә. Ошоноң менән йога тәғлимәте үҙенең төп маҡсаты – үҫешкән аң нигеҙендә эске мәҙәниәтле, әҙәпле Кеше тәрбиәләүгә өлгәшкән. Шуға күрә башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрен бер ниндәй ауырлыҡһыҙ йога тәғлимәтенең төп принциптарына ярашлы төркөмләп була.

## 1. Донъя алмаш килә

Бөтә замандарҙа ла аҡыл эйәләре был донъяның мәңгелек түгел, ә үҙгәреүсән икәнлеген, тормошта хәл-ваҡиғаларҙың ваҡыт һәм арауыҡ эсендә бер-береһен алмаштырып, сиратлашып килеүен төшөндөрөүҙе алға ҡуйған. Ошоноң нигеҙендә йога, бер яҡтан, ҡырыҫ, ярлы, ыҙа-яфалы тормош кисереүсене ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәҫкә, зарланмаҫка, алдағы көнгә өмөтөн өҙмәҫкә көйләһә, икенсе яҡтан, байманлыҡта рәхәт йәшәүсегә вайымһыҙ ғүмер һөрөүҙең буш ләззәттән бүгеүгә килтереүе тураһында иҫкәрткән. Түбәндәге мәҡәл-әйтемдәр тормоштоң бөтә осраҡтарына ярашлы рәүештә күп һәм төрлө йөкмәткеле булһалар ҙа, уларҙың мәғәнәһе ошондай уҡ киҫәтеүгә тап килә:

*Ай бирҙе, ҡояш алды.*
*Алды болот булһа, арты аяҙ.*
*Аҙҙан күп була, күптән юҡ була.*
*Ала белһәң – бирә бел.*
*Алғандың бирәһе бар.*
*Алы булһа, гөлө лә булыр.*
*Аласаҡ менән бирәсәк бөтмәй.*
*Аттан ала ла, ҡола ла тыуа.*
*Атаң яҡшы, инәң яҡшы – һин кемгә оҡшап шаҡшы?*

*Аҫыраған быҙау осаға тибә.*
*Аҡ аҡса ҡара көн өсөн.*
*Аҡса бөткәс, аҡыл керә.*
*Аҡса кешене кешегә ят итә.*
*Ас сағыңда ни ашағаныңды туҡ сағыңда онотма.*
*Аш ҡәҙерен белмәһәң, аслыҡ язаһын бирер.*
*Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.*
*Аҙ булһа ла, күптәй күр.*
*Ағас күрке япраҡ – ҡырау төшһә, һарғайыр,*
*Кеше күрке сепрәк – баҫып кейһәң, таушалыр.*
*Ағас ҡырҡһаң, оҙон ҡырҡ – ҡырҡа-ҡырҡа ҡыҫҡарыр,*
*Тимер ҡырҡһаң, ҡыҫка ҡырҡ – һуға-һуға оҙайыр.*
*Алданым, тип маҡтанма, үҙеңде лә алдарҙар.*
*Аусы ла ҡапҡанға эләгер.*
*Алма аҫылын ҡорт ашай.*
*Аяҡҡа тартһаң – башҡа юҡ, башҡа тартһаң – аяҡҡа юҡ.*
*Бай булһаң – үҙ туған, ярлы булһаң – тыума ят.*
*Байлыҡ бөгөн миндә, иртәгә һиндә.*
*Балын яратһаң, ҡортон да ярат.*
*Бар ҡәҙере юҡта беленер.*
*Бар сағында бал да май, юҡ сағында ҡаты ла мыты.*
*Башыңа төшһә, башмаҡ булырһың.*
*Бер рәхәте, бер михнәте.*
*Бер әсеһе, бер сөсөһө.*
*Бер олоно, бер кесене тыңла.*
*Бер яҡшыға бер яман, бер яманға бер яҡшы.*
*Бер йыл тартай һимерһә, бер йыл бүҙәнә һимерер.*
*Бер ҡулы менән бирә, икенсеһе менән ала.*
*Берәүгә көн дә байрам, көн дә туй,*
*Берәүгә көн дә һағыш, көн дә уй.*
*Берәү түрә, берәү түрә янында көн күрә.*
*Берәүҙә аш, берәүҙә баш ҡайғыһы.*
*Берәүҙең бәхетенән берәү төшә тәхетенән.*
*Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй.*
*Бешеүе килһә, төшөүө килер.*
*Бишектәге бала бишкә төрләнә.*
*Был да балам балаһы – балдан татлы анаһы,*
*Был да балам балаһы – ҡара йылан анаһы.*
*Болотло көндөң бер аяҙы була.*
*Бөгөнгөнөң иртәгәһе бар.*
*Гонаһ ҡылһаң, тәүбә итә бел.*
*Ғүмер уҙа – күлдәк туҙа.*
*Донъя ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа.*
*Донъя бөтөр, эш бөтмәҫ.*
*Донъя бер гөл итеп, бер көл итеп ярата.*
*Донъя бер алдын, бер артын күрһәтә.*
*Дуҫың кем? – Ирем. Дошманың кем? – Ирем.*
*Дөйәләй биреп, төймәләй алдым.*
*Ерле боланды тирле ҡолан ҡыуалаған.*
*Көлкө көлә китер, артыңдан ҡыуа етер.*

*Көл булмайса, гөл булып булмай.*
*Көн оҙаймай, төн ҡыҫҡармай.*
*Көн көнгә оҡшамаҫ.*
*Көн һайын ҡояш булмаҫ.*
*Кешенән көлмә, үҙең көлкөгә ҡалырһың.*
*Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң.*
*Кешене ҡарғама, үҙеңә төшөр.*
*Кире инер ишегеңде ҡаты япма.*
*Кәмәне ҡоро ерҙә ҡырҡ кеше күтәрә.*
*Кәләш алһаң, төн ҡыҫҡара.*
*Күп көлгән күп илар.*
*Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай.*
*Ҡара тауыҡ та аҡ күкәй һала.*
*Ҡара һыйырҙан да аҡ быҙау тыуған.*
*Ҡара кейем ҡасырмаҫ, аҡ кейем батырмаҫ.*
*Ҡайғы менән шатлыҡ бергә йөрөрҙәр.*
*Ҡыш – ас, йәй – яланғас.*
*Ҡыш аҙығын йәй йыйна.*
*Ҡулдан киткән ҡулға кермәй.*
*Ҡулың менән бирһәң, аяғың менән йөрөрһөң.*
*Ҡурың бөтһә, кеше ҡәҙерен белерһең.*
*Ҡоҙоҡҡа төкөрмә, һыуын үҙең эсерһең.*
*Ирем китте ҡалаға, үҙем киттем далаға.*
*Ире сығыр ишектән, ҡатыны сығыр тишектән.*
*Ирем илгә сыҡһа – мирҙыҡы, ҡайтып керһә – минеке.*
*Иҫкеһеҙ яңы булмай, яманһыҙ яҡшы булмай.*
*Ит изгелек – көт яуызлыҡ.*
*Йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултырта.*
*Йыл йылға оҡшамай.*
*Йылан ағыу тапҡан сәскәнән бал ҡорто бал табыр.*
*Йыраҡ һал – яҡындан алырһың.*
*Йыуаштан йыуан сыҡҡан.*
*Йәйен аҡтан, ҡышын ҡаранан кейен.*
*Йәйгә сыҡһаң – ҡышын, ҡышҡа сыҡһаң, йәйен уйла.*
*Йәйе барҙың ҡышы бар.*
*Михнәт күрмәгән – рәхәт күрмәгән.*
*Михнәт көйрәтә, аҡылға өйрәтә.*
*Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит.*
*Ситлеккә ябылғас, йыртҡыс та йыуашланған.*
*Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор.*
*Һыу тулҡынланмай тормай.*
*Һылыу күңел аҙҙырыр, алтын юлдан яҙҙырыр.*
*Хикмәт бар ерҙә михнәт бар.*
*Хәйерсе байыһа, хәйер бирмәҫ.*
*Шатлыҡ килмәй, ҡайғы китмәй.*
*Тамсы тама-тама таш тишә.*
*Тамсынан диңгеҙ йыйыла.*
*Таш менән атҡанға аш менән ат.*
*Ут менән һыу уйнамаҫ.*
*Уттан алды, һыуға һалды.*

*Уң ҡулым, һул ҡулым – барыһы ла үҙ ҡулым.*
*Әсеһеҙ сөсө булмаç.*
*Уңы барҙың һулы бар.*
*Үлем илауһыҙ, туй үпкәһеҙ, ер ташһыҙ, ил яуһыҙ булмаç.*
*Әсене татымаһаң, тәмлене танымаçһың.*
*Әүәл яфа күрмәй, һуңынан вафа килмәй.*
*Әүәлгенең михнәте – ахырғыһының шатлығы,*
*Әүәлгенең шатлығы – ахырғының михнәте.*
*Юҡты юҡ итһәң, бар булыр.*
*Юҡтан бар булған, барҙан юҡ булған.*
*Юҡтан бар булған – тәңре менән тиң,*
*Барҙан юҡ булған – үлем менән тиң.*
*Яҡшы көндө өмөт иткән – яман көнгә түҙер.*
*Яфа тартмай, вафа юҡ. (Вафа – ғәр. 1. Тоғролоҡ, ышаныс; 2. Ир-ат исеме)*
*Яңы ҡаза килгәс, иçке ҡаза ишек төбөндә ултыра.*
*Яҙ – игенсе, ҡыш – теләнсе.*
*Яҙ сәсеүен ҡыштан ал.*
*Ярлы бай булырға, сирле һау булырға тырышыр.*
*Ябаға тайҙы хурлама: яҙға сыҡһа, ат булыр,*
*Йәш егетте хурлама: уҡыһа, илгә баш булыр.*

## 2. Оҡшаш оҡшағанын табыр

Ғүмер юлын үтә барған һайын, бәндә был тормоштоң күргәҙмәле һәм ғибрәтле һабаҡ икәненә тәрәнерәк төшөнә бара. Уның яҙмышына тәғәйен ата-әсә, туғандар, дуç-иш, икенсе яртыһының кем булыры – барыһы ла карма законы аша хәл ителгән, йәғни бәндә үҙенә тейешле ҡуласа менән ҡармап алынған булыр. Ләкин әҙәмгә һайлап алыу, аҡты ҡаранан айырыу хоҡуғы ла бирелгән. Үҙенде уратып алған мөхит, эргә-тирәндең хәл-торошо – барыһы ла эске донъяңдың, ниәттәреңдең тышҡы сағылышы, ти йога. Психотерапевтар кемуҙарҙан асыш яһап, беҙгә өйрәткән аҡыл-кәңәштәре – беҙҙең ата-бабаларға күптән инде таныш булған хәҡикәт! Түбәндәге мәҡәл-әйтемдәр ошо йәһәттән бик фәһемле:

*Аҡсаны аҡса таба.*
*Айныҡ башта – айныҡ аҡыл.*
*Аптыраш менән йөҙәш икәүһе кергән өйҙәш.*
*Ас теләнсене туҡ теләнсе ҡыçтаған.*
*Астың хәлен ас белер, туҡ белмәç.*
*Атаһы башҡа менән ҡуян аулама,*
*Заты башҡа менән болан аулама.*
*Ат ат эҙенән йөрөр.*
*Аттың үҙе ниндәй – йөгө шундай.*
*Атты ат һаҡлай.*
*Аты барҙың дуçы бар.*
*Аты барҙың ҡанаты бар.*
*Ат аҙғыны тайға, ир аҙғыны байға эйәрер.*
*Ауан ауға сыҡһа, ауҙа ғауға сыға.*
*Ашына күрә табағы, эшенә күрә тамағы.*
*Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.*
*Бал себенде, яҡшы һүҙ әҙәмде эйәләштерә.*

*Бар өҫтөнә бар, май өҫтөнә бал.*
*Бар янына бар һыя.*
*Бай бай өсөн тырыша, ярлы ярлыға булыша.*
*Бай балаһы байға, бей балаһы бейгә оҡшар.*
*Бай менән бай туған.*
*Байға ярлы дуҫ булмаҫ.*
*Бай байҙы оҙатыр ҡоламаһын тип, ярлыны оҙатыр урламаһын тип.*
*Байҙы мал баҫыр, ярлыны бала баҫыр.*
*Байҙың аласағы, ярлының бирәсәге күп булыр.*
*Байҙың ишеге байға асылыр.*
*Байҙың күңеле малда.*
*Батҡан тайғандан, йығылған һөрөнгәндән, йыртыҡ тишектән көлгән.*
*Бер алдар гел алдар.*
*Бер бәләгә тарыһаң, башың бәләнән сыҡмаҫ.*
*Бер кирегә китһә, гел кирегә китә.*
*Берәүҙең быҙауы үлһен тиһәң, үҙеңдең үгеҙең үлер.*
*Булмаҫ иргә бөкрө ҡатын.*
*Бәлә яңғыҙ килмәй, бәләһе артынан ҡазаһы йөрөй.*
*Бүре ҡуйға дуҫ булмаҫ.*
*Дуғаңа ҡарап, ҡыңғырау таҡ.*
*Егет һүҙен егет йыҡмаҫ.*
*Егет – егеттең көҙгөһө.*
*Егетте дуҫынан таны.*
*Елгә ут һимерер.*
*Еләк еләккә ҡарап бешә.*
*Инәһе ниндәй – ҡыҙы шундай.*
*Иплегә иптәш күп.*
*Ир-егет өйҙән сыҡһа, өйөрөн табыр.*
*Ир ҡәҙерен ир белер.*
*Ир аҫылы ҡарталыр, зат затына тарталыр.*
*Ишәй ишен Бохаранан барып тапҡан.*
*Ишәй ишен, ҡушай ҡушын тапҡан.*
*Ишәк түшәк ҡәҙерен белмәҫ.*
*Йылыға йылан да эйәләр.*
*Йәмһеҙҙең көҙгөһө насар, булдыҡһыҙҙың көрәге алама.*
*Йорт һатып алма, күрше һатып ал.*
*Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың.*
*Керемена күрә сығымы.*
*Кесегә мәрхәмәт, олоға итәғәт күрһәт.*
*Кесегә шәфҡәт менән юл бир, олоға хөрмәт менән ҡул бир.*
*Кәкре менән бөкрө бер туған.*
*Кәкрегә бөкрө.*
*Көрәге булһа, сүбе табыла.*
*Көнөн ҡайғы, төнөн хәсрәт.*
*Күл күлгә ҡойор.*
*Күңелдә юҡты күҙ күрмәҫ.*
*Ҡаҙ ҡаҙ менән, өйрәк өйрәк менән осор.*
*Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән.*
*Ҡунаҡ ҡәҙерле булһа, ҡаҙан тиҙ ҡайнай.*
*Ҡунағына күрә хөрмәте.*

*Ҡар башына ҡар етер, хан башына хан етер.*
*Ҡараҡ ҡараҡты бүркенән таный.*
*Ҡарға ҡарға менән осор.*
*Ҡарға ҡарғаны маҡтар.*
*Ҡарлуғас балаһын осорға айыу өйрәтмәҫ.*
*Ҡара болотто ҡара урман тарта.*
*Ҡатыны яман ир аҙыр.*
*Ҡот киткән өйҙән йот китә.*
*Ҡош ҡош менән аулана.*
*Мал эйәһенә оҡшай.*
*Салышҡа ҡыйыш.*
*Силәгенә күрә ҡапҡасы.*
*Суп өҫтөнә сумәлә.*
*Һөймәгәнгә һөйкәлмә.*
*Һабаһына күрә бешкәге.*
*Тайға тай, байға бай эйәрер.*
*Тауығына күрә төлкөһө.*
*Тиңең менән тибешһәң дә килешә.*
*Тиң тиңе менән, йүнле йүне менән.*
*Тиң тиңе менән, тинтәк тиле менән.*
*Тиң тиңде, бизмән герҙе тарта.*
*Тиң-төш килмәй, күңел булмай.*
*Туған туғандың маллыһын ярата.*
*Ут менән һыу ҡауышмаҫ.*
*Шатлығыңды шатланышыр, ҡайғыңды ҡайғырышыр кешегә һөйлә.*
*Хәйерсене хәйерсе күрә алмаҫ.*
*Юрғалыға юлдаш булма.*
*Эйәһенә күрә бейәһе.*
*Эт аяғына эт баҫмаҫ.*
*Эт менән эт, иҫерек менән иҫерек дуҫ.*
*Ялҡауҙың аты ла аҙымһыҙ булыр.*
*Ярлыны хәйерсе талай.*
*Ярлы кешенең аҡсаһын яман тауар бөтөрөр,*
*Ярлы булыр кешегә ҡазалы мал тап булыр.*
*Ярлы малы ярҙан осор.*
*Яҡшы мал эйәһен табыр.*
*Ярлы булыр егеткә ҡазалы мал тап булыр,*
*Яңғыҙ булыр егеткә ҡыҫыр ҡатын тап булыр.*

## 3. Донъя – алдаҡ

Йога аңлатыуынса, һәр беребеҙ хис-тойғоноң алдауы нигеҙендә ысынбарлыҡты боҙоп күҙ алдына килтерә. Шуға күрә һәр бер быуын, ололарҙың киҫәтеүенә ҡарамай, һанап бөтөргөһөҙ күп хаталар ҡыла. Абынғас-һөрөнгәс, арҡаға туҡмаҡтар, башҡа бәләләр төшкәс, бик булмаһа, көс-кәр китеп, түшәккә йығылғас ҡына, һиҫкәнә әҙәм балаһы – һәм был бөтә кешелек тарихына хас. Халыҡ был әсе дөрөҫлөктө йырға ла һалып әйтә:

*Улай тиеп кем әйтә,*
*Былай тиеп кем әйтә?*
*Ышанмағыҙ был донъяға —*
*Был донъялар һемәйтә.*

Донъяның күҙгә күренгән, ҡолаҡҡа ишетелгән, тәме тойолған ләззәттәре менән мауығыу эске донъяндың эйәһе – йән талап итер рухи ҡиммәттәрҙән буш ҡалдырып, үкенес кисертәсәк. Түбәндә килтерелгән өгөт-нәсихәттәр, буш шалтырауыҡ-ялтырауыҡтарға ымһынып, яңынан-яңы ҡармаҡҡа эләкмәҫкә өйрәтә, эшкә ашмаҫ хыялдарҙан арынып, донъяға айныҡ ҡараште булырға саҡыра:

*Айыуҙан ҡастым, бүрегә юлыҡтым.*
*Алланан ҡасҡан – муллаға барып тотолған.*
*Аллаға ышан, үҙең ҡымшан.*
*Аллаға тапшырған – атһыҙ ҡалған.*
*Алмаған ерҙә – алтын, бармаған ерҙә – баҡыр, күрмәгән ерҙә көмөш бар.*
*Барһаң, тимер табылмаҫ.*
*Алтын тотҡан алтынды таныр, күрмәй күргән еҙҙе лә алтын тир.*
*Алтын йүгән атты яҡшыртмаҫ.*
*Алыҫтағы ҡояш нығыраҡ йылыта.*
*Арыҫландың, айға менәм тип, биле биртенгән.*
*Аслыҡ ҡапсык аҫтырыр, иманыңды һаттырыр.*
*Асҡа кәңәш биргәнсе, күмәс бир.*
*Ат бар – арба юҡ, ҡаҙан ҡайнай – ярма юҡ.*
*Аты юҡ – кәртә төҙәткән.*
*Атын алдырғас, ҡапҡаһын йүнәткән.*
*Аҙбары бар, аты юҡ. Аты булһа, ҡамыты булмай.*
*Ата алмаған атаһына үпкәләр.*
*Атай үлде – иркен ҡалды, ҡыҙыл тышлы туны ҡалды.*
*Атҡа менгәс, атаһын танымаған.*
*Ауыҙ ашай, күҙ ояла.*
*Байға ялланма, юҡҡа алданма.*
*Байҙың юҡмын тигәненә, ярлының туҡмын тигәненә ышанма.*
*Байҙар күк ат егә тип, мин дә ектем күк бейә.*
*Байлыҡ – боҙға яҙған.*
*Беләгенә ҡарама, йөрәгенә ҡара.*
*Бер юл бар – алыҫ, алыҫта булһа – яҡын, бер юл бар – яҡын, яҡында булһа – алыҫ.*
*Бер йыландан ҡасып, икенсе йыланға һырынма.*
*Бөтә донъяны һыу баҫыуҙан өйрәккә ни ҡайғы.*
*Булмағанға ышанма.*
*Бүренән бүрек ташлап ҡотолоп булмай.*
*Булмаҫ ир буйраҡ һыуҙа балыҡ тота.*
*Бәхетте сепрәккә төрөп йөрөтмәйҙәр.*
*Бәхет ҡош түгел, бер ысҡынһа, тотоп булмай.*
*Диңгеҙ төбөндәге ынйынан тау башындағы таш артыҡ.*
*Донъя рәхәте сабый саҡта.*
*Дошман ни тимәҫ, төшкә ни кермәҫ.*
*Дуҫ битлеген кейгән дошман хәтәр.*
*Дуҫтан дошманды айыра бел.*
*Дуҫың күбәйһә, шуны бел: аранан бере дошмандыр.*
*Гөлөнә ҡарама, төбөнә ҡара.*
*Ел сәсһәң, дауыл урырһың.*
*Ҙурҙы уйлап, әҙҙән ҡалма.*
*Кеше елкәһе ауыртмай.*

*Кеше иренә ышанып, түшәк йәймә.*
*Кеше ауыҙындағы һөйәк ҙур булып күренә.*
*Кис ҡурҡҡан – көндөҙ сыра яндырыр.*
*Күҙгә күренде, ҡулға кермәне.*
*Күҙ күрмәһә, көйөнөсө юҡ.*
*Күктән көткән – ерҙә табылған.*
*Күптең һанын биргәнсе, аҙҙың бәрәкәтен бирһен.*
*Күпте теләгән – берҙән ҡоро ҡалған.*
*Күрше тауығы ҡаҙ булып күренә.*
*Күршенеке күрекле күренә.*
*Көн күгендә ҡояш ялтырай, ул да миңә булһасы.*
*Кәзә тоҙ, ирҙәр ҡыҙ тип ҡартайыр.*
*Ҡабул булмаҫ доғаға амин тотма.*
*Ҡаҙанға һалмағанды ҡашыҡ менән эҙләмә.*
*Ҡатындың һүҙенә алданма, йүгерек атыңа таянма.*
*Ҡолағын ятҡырған аттан һаҡлан.*
*Ҡошто ем менән алдайҙар.*
*Ҡурҡҡанға ҡуш күренгән.*
*Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма, ҡәйнә ҡыҙҙан ярала.*
*Ҡыҙҙың күҙе ҡыҙылда.*
*Ҡыҙыл алмаға алданма.*
*Ҡыҫыр ҡатындан бала таптырма.*
*Ҡышҡы көндөң йылыныуына, дошмандың йылмайыуына ышанма.*
*Иҙел менән боҙға таянма.*
*Ике кәмә ҡойроғон тотҡан – һыуға батыр.*
*Иҫке өйҙө һүткәнсе, яңыһын һал.*
*Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.*
*Йүгерек атҡа менгән – тәңреһен онотҡан.*
*Йоҡлаған йыландың ҡойроғона баҫма.*
*Йөҙө аҡ тип алданма, эсе ҡара булмаһын.*
*Йәйҙең өйө киң.*
*Йәмһеҙ булһа ла – бай ҡыҙы матур, ярлы ҡыҙы матур булһа ла – йәмһеҙ.*
*Матур матур түгел, һөйгән матур күренер.*
*Себенгә суҡмар күтәрмә.*
*Селләлә берәү өшөп үлгән, байрамда берәү асығып үлгән.*
*Ситкә ышанған илһеҙ, дошманға ышанған ҡулһыҙ,*
*Байға ышанған аш-һыуһыҙ, ҡолға ышанған атһыҙ ҡалған.*
*Сәскәһенә ҡыҙығып, сәнскеһенә ҡаҙалма, һалам ялҡыны тиҙ һүнер.*
*Һауалағы торна тип, ҡулыңдағы турғайҙы осорма.*
*Һауанан балыҡ эҙләмәйҙәр.*
*Һыуға таянма, дуҫҡа инанма.*
*Һәр һаҡаллы олатайың булмаҫ.*
*Һәр ялтыраған алтын түгел.*
*Табағыңда ашың күп булһа, дуҫ-ишең күп була.*
*Тайға эйәрмә, атҡа эйәр.*
*Тауға ҡарап тау булма.*
*Тауыҡҡа күҙ һалып, һарыҡтан ҡолаҡ ҡаҡма.*
*Теләк ҡоторта, оят тыя.*
*Тилегә диңгеҙ тубыҡтан.*
*Туй ашы менән дуҫ табылмай.*

*Туйға барһаң, туйып бар.*
*Туйғас, бал да әсе тойола.*
*Төлкө тотам тип, ҡуяндан ҡоро ҡалма.*
*Төлкө артынан йөрөп, көлкөгә ҡалма.*
*Төлкө төшөнә тауыҡ, тауыҡ төшөнә тары керә.*
*Төтөндән ҡурҡҡан – утта янған.*
*Ун икенең бере юҡ.*
*Үҙ елкәмде күрмәйем, ҡәйнәмдеке – ҡап-ҡара.*
*Үҙе юҡтың күҙе юҡ.*
*Уңмағанды ҡыума.*
*Үлгән һарыҡ бүренән ҡурҡмаҫ.*
*Үлгән ағайға – юғалған тай.*
*Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа.*
*Ышанған ояла ҡош юҡ, ышанған тауҙа кейек юҡ.*
*Әсе менән сөсөнө татыған белер, алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.*
*Әҙәмдең күҙе туймай.*
*Эсе менән тышы булһа, тун тегер инем, энә менән еп булһа.*
*Эшсән бәхетте эштән, ялҡау ситтән эҙләр.*
*Юғалған ҡуйҙың ҡойроғо ҙур булыр, үлгән һыйыр һөтлө булыр.*
*Юҡ аҡсаға ҡапсыҡ текмәйҙәр.*
*Юҡҡа алданып, барҙан буш ҡалма.*
*Ямғырҙан ҡасып, буранға эләкмә.*
*Ямғырҙан кәр ҡасып, дарғяға эләкмә.*
*Яҡшы көндәр, күп булһа ла, аҙ күренер, яман көндәр, аҙ булһа ла, күп күренер.*

## 4. Тормош – ғазап сигеү

Был донъяға килгән йән эйәләре кисерер ыҙа-яфаларҙың бөтәһенә лә тигеҙ тейерҙәре бар: тыуым, сир, ҡартлыҡ, үлем. Унан башҡа ярлылыҡ, ҡоллоҡ, аслыҡ, етемлек, яңғыҙлыҡ, дошманлыҡ, ғәҙелһеҙлек, айырылышыу, төрлө юғалтыуҙар кеүектәре лә һағалай әҙәм балаһын. Был турала Ризаитдин Фәхретдин: «Донъя наҙандарҙы алдай, уҡымышлыларҙы ла рәхәтләндермәй. Уға әҙәм балалары илап килеп керһәләр, олоғайып, михнәт күреп, яфа-ғазап сигеп, зарланып үләләр», – тигән. Ошондай ыҙа-яфаларҙың йән эйәһенә хата-гонаһтарҙан үкенес кисереп, тәүбәгә килеү, рухи таҙарыныу өсөн бирелгәнен тойғанда ғына кеше һыныпбөгөлөп төшмәй, киреһенсә, мин-минлеге менән көрәшергә, үҙ етешһеҙлектәрен үҙе еңергә өйрәнә.

*Башҡа бәлә килде тип, башты ташҡа ормайҙар.*
*Бурыс ашағансы, борос аша.*
*Бурысһыҙ ярлылыҡ – үҙе байлыҡ.*
*Бәндә һағышлай, Хоҙай бағышлай.*
*Бәлә ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөр.*
*Бәлә аяҡ аҫтында.*
*Бәләне һатып йә атып алалар.*
*Етем илаһа, донъя илар.*
*Ирҙе михнәт еңә алмаҫ.*
*Ирһеҙ бер илар, ирле мең илар.*
*Ир ҡайғыһы итәктә, бала ҡайғыһы йөрәктә.*
*Кешене эш түгел, ҡайғы бөтөрөр.*

*Килер ҡаза ирҙән аҡыл таптырмаҫ.*
*Күҙ йәшенә быуа юҡ.*
*Күл ҡамышһыҙ, бәндә һағышһыҙ булмаҫ.*
*Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай.*
*Ҡайғы ҡайғыны баҫа.*
*Ҡайғы юҡта ҡайғы иттем ҡайным ҡарттың үлемен.*
*Михнәтһеҙ тапҡан мал иҫәпһеҙ китер.*
*Нужна күрмәй, ир булмай.*
*Нужна ҡалас ашата.*
*Сабыр иткән – мораҙына еткән.*
*Сирлегә үлем күрше.*
*Һәр башҡа бер үлем, яман ҡатын алғанға ике үлем.*
*Түҙгән – тимер өҙгән.*
*Тән ҡартая, йән ҡартаймай.*
*Үлемдән оят көслө.*
*Әжәл менән бурыстан ҡотола алмаҫһың.*
*Юл ғазабы – гүр ғазабы.*
*Яҡшы килен – килем, яман килен – үлем.*

## 5. Эҙемтәһе сәбәбенә күрә килер

**Карма** тураһындағы тәғлимәт булараҡ, йога кешенең был тормоштағы хәл-әхүәленең торошон элекке ҡылған ҡылыҡтарына бәйләп аңлата. Йәғни сауабы ла, язаһы ла һәр кемдең үҙенеке – үҙенә. Был хәҡиҡәт берәүҙәрҙе тормош һынауҙарын аңлы рәүештә күндәм ҡабул итергә, сабыр булырға, башҡаның уңышына көнләшмәҫкә, кеше бәхетенә ымһынмаҫҡа өйрәтә. Икенселәре иһә уңышҡа өлгәшеп, рәхәтлектә йәшәгәндә тәкәбберлек, һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ кеүек кире сифаттар булдырмауға ынтылырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта әлеге бөтә булмышың менән киләсәк өсөн сәбәп тыуҙырыуыңды белеү, үҙ сиратыңда, маҡсаттарыңды үргә йүнәлтә, йәшәү рәүешең өсөн яуаплылыҡты арттыра. Артабанғы мәҡәл-әйтемдәр был дөрөҫлөктө яп-ябай һәм ап-асыҡ итеп ярып һала:

*Ағас емеше менән, кеше эше менән матур.*
*Ағас тамырына ҡарап үҫә.*
*Айғыр ҡалдырһаң – йүнлеһен, ҡусҡар ҡалдырһаң – йөнлөһөн ҡалдыр.*
*Алдын бер уйла, артын биш уйла.*
*Алдыңа килгән ашты йота бел.*
*Алтылағы – алтмышта.*
*Арпа сәсеп, бойҙай үҫмәҫ.*
*Ат – менгәндеке, тун – кейгәндеке.*
*Атаһын күр ҙә улын ҡос, әсәһен күр ҙә ҡыҙын ҡос.*
*Атаңа ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.*
*Аттың үҙе ниндәй, йөгө шундай.*
*Аты барҙың – ҡанаты, һыйыры барҙың һыйы бар.*
*Ауыр күтәргән – билен һындырған.*
*Ауыҙы бешкән өрөп ҡабыр.*
*Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.*
*Ашаған табағыңа төкөрмә.*
*Ашланған ер аш бирер.*
*Баҡырҙы күпме ағартһаң да, көмөш булмаҫ.*
*Балта оҫтаһы балтаһынан билдәле.*

*Балыҡты йөҙөргә, үгеҙҙе һөҙөргә өйрәтмәйҙәр.*
*Барманың бар булһа, барһаң, айран эсерһең.*
*Башыңа төшһә, башлыҡ булырһың.*
*Бер кеше бәхете икенсегә булмаҫ.*
*Биш уйла, бер эшлә.*
*Бирмәҫтең ашы бешмәҫ.*
*Бирһәң – алырһың, сәсһәң – урырһың.*
*Буйына күрә күләгәһе.*
*Булыр бала биләүҙән.*
*Булырҙың быуынынан билгеле.*
*Булыр ҡолон бәйҙә уйнар.*
*Булмаҫ ҡатындан бөкрө тыуыр.*
*Бур булдың – хур булдың.*
*Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай.*
*Бүре балаһын тоторға өйрәтһә, һарыҡ бәрәсен ҡасырға өйрәтер.*
*Бүре – бәйләүгә, дуңғыҙ әйҙәүгә күнмәҫ.*
*Бүрәнәнең йыуан башы кем елкәһендә – шуға ауыр.*
*Бәйел аҙмай, башҡа бәлә килмәй.*
*Бәхет башы – тәүфиҡ, бәхетһеҙлек башы – ялҡаулыҡ.*
*Бәхет ерҙән түгел, тирҙән сыға.*
*Гонаһына күрә язаһы.*
*Дошманың күп булһа, үҙеңә үпкәлә.*
*Дуңғыҙға эйәргән батҡаҡта аунар.*
*Ел иҫмәй, япраҡ һелкенмәй.*
*Елдән килгән – ергә киткән.*
*Емеш ашағың килһә, сәскәһен өҙмә.*
*Егет үлһә – аты, үгеҙ үлһә, ите ҡалыр.*
*Егеттең үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәҫ.*
*Етеһендә ни булһа, етмешендә шул булыр.*
*Иген келәттә, кеше хеҙмәттә күренә.*
*Иҙел күрмәй, итек сисмәйҙәр.*
*Илар бала атаһының һаҡалы менән булашыр.*
*Инә ҡаҙ ҡаңҡылдамаһа, ата ҡаҙ бармай.*
*Ип-яй булһа, ит-май булыр.*
*Иртә барһаң, ит бешер, кискә ҡалһаң, бит бешер.*
*Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.*
*Исеменә ҡарап есеме.*
*Ишәк маҡтанып толпар булмаҫ.*
*Ишәккә алтын эйәр һалһаң да, һаман ишәк.*
*Йоҙағын эшләгән асҡысын да эшләр.*
*Йөҙөң ниндәй – көҙгө шулай күрһәтер.*
*Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер.*
*Йүнһеҙ бала ата йортон хурлар.*
*Йүнһеҙҙән йүнһеҙ тыуыр.*
*Йыланды ҡотҡарһаң, тәүҙә үҙеңде сағыр.*
*Йыландың балаһы ла йылан.*
*Йыланға юлдаш булһаң, ҡулың сағыр.*
*Йәйең рәтле булһа, сәйең шәрбәтле булыр.*
*Йәрәбә һалынған – яҙмышҡа һалынған.*
*Кем эшләмәй – шул ашамай.*

*Керемenә күрә сығымы.*
*Кеше ҡапҡаһын асһаң аяҡ менән, үҙеңдекен ҡағырҙар таяҡ менән.*
*Кешеһенә ҡарап кейемен бес.*
*Кешенән кеше кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.*
*Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең.*
*Күрекле тыума, бәхетле тыу.*
*Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай.*
*Ҡабат эшләгән эш һабаҡ булыр.*
*Ҡаҙан хәлен сүместән һора.*
*Ҡаҙанда ни булһа, сүместә шул сығыр.*
*Ҡайҙа барһаң да, ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмаҫ.*
*Ҡанъа һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай.*
*Ҡатын ауырыһа, өйҙөң йәме китер.*
*Ҡолон аҫыраһаң, ат менерһең.*
*Ҡулың эшләһә, ауыҙың тешләр.*
*Ҡумыҙ бейетмәй, моңо бейетә.*
*Ҡурайы юҡтың өнө юҡ, өнө юҡтың көнө юҡ.*
*Ҡыҙ ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын.*
*Ҡыҙыл телемде тыйманым, ҡыҙым өйөнә һыйманым.*
*Ҡылыс алғанда ҡулың ҡалтыраһа, башың ерҙә булыр.*
*Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер.*
*Май сүлмәге тышынан билдәле.*
*Мал аҫыраған – май сәйнәгән.*
*Мал көрлөгө көтөүсенән.*
*Мая башы – бер күкәй.*
*Ни сәсһәң, шуны урырһың.*
*Ни ҡысҡырһаң, шуны ишетерһең.*
*Оло ат менән уйнаған тайҙың аяғы аҡһаған.*
*Орлоғона күрә емеше.*
*Осҡондан ялҡын ҡабыныр.*
*Өйө барҙың көйө бар.*
*Өлөшөңә төшкән көмөшөң.*
*Себеште көҙ һанайҙар.*
*Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәҫ.*
*Соҡорға төшкәнсе, сығырыңды уйла.*
*Сәсмәгән – урмаҫ.*
*Сәскән йыяр, сәсмәгән илар.*
*Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың.*
*Таштан йүкә һуйылмай.*
*Тик торған – отторған, тик тормаған – туҡ торған.*
*Тиреҫ кипмәһә, байлығың китмәҫ.*
*Тиреҫ сығарһаң ереңә, ташып бөтөрә алмаҫһың өйөңә.*
*Туйға тип йыр һаҡлаған, туйға килһә, йыр тапмаған.*
*Тырышҡан – ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.*
*Һыу бешеү менән май төшмәҫ.*
*Уйындан уймаҡ сығыр.*
*Улай итмәй, былай булмай.*
*Утһыҙ төтөн булмай.*
*Уттың, сирҙең әҙен ҡалдырма.*
*Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен балаң үҫкәс белерһең.*

*Үҙ ҡылғаның үҙеңә ҡайта.*
*Үҙең ҡарға булһаң, балаң һандуғас булмаҫ.*
*Үҙең яҡшы булһаң, кеше лә яҡшы.*
*Ырыҫ арыҫландың ауыҙында, төркмәндең түрендә.*
*Хеҙмәт ҡаты – емеше татлы.*
*Хеҙмәтенә күрә хөрмәте.*
*Һәр кем үҙенсә табына, үҙенсә абына.*
*Эҙләмәйенсә энә лә табылмай.*
*Энә үткән ерҙән еп тә үтер.*
*Этенән күреп, көсөгө өрөр.*
*Эттән эт тыуа, ҡоштан ҡош тыуа.*
*Эшенә күрә ашы.*
*Эш яратҡан – уңған, яратмаған – туңған.*
*Әсәһе тирәккә менһә, ҡыҙы ботаҡҡа менер.*
*Әсәһе юрға булһа, ҡыҙы йөрөшлө була.*
*Әсәнән күргән – тун бескән, атанан күргән – уҡ юнған.*
*Юнышҡан ерҙә юнышҡы ҡалыр.*
*Яҡшы ҡарсыҡ – өй ҡаҙнаһы.*
*Яман ҡатын түшәгенән билдәле.*
*Ярлы булыр егет бейәһен атҡа һатыр,*
*Яңғыҙ булыр егет ағай-энеһен атҡа һатыр.*
*Яуыз бала атаһының ауыҙын ябыр.*
*Ярыҡ ҡурай уйнамаҫ.*

Шулай итеп, был хеҙмәтебеҙ менән беҙ башҡорт халҡының иң боронғо сәсмә тел төрҙәренән һаналған ҡобайырҙар, мәҡәлдәр, әйтемдәр нигеҙендә уның әхлаҡ нормаларының боронғо донъяуи дин – йога тәғлимәтенең нигеҙе булған Яма-Ниямаға тап килгәнен асыҡланыҡ. Был дәлилләүҙәр аша тағы ла бер тапҡыр боронғо рухи ҡиммәттәребеҙҙең тәғәйенләнешен билдәләнек. Йога – халыҡҡа әхлаҡи тәрбиә биреү мәктәбе. Ә ул мәктәптә төп вазифаны башҡарыусылар – йоганың иң юғары баҫҡыстарына күтәрелгән аҡыл эйәләре, аң үҫеше буйынса юғары шәхестәр – сәсәндәр (санскрит: sasni – табыусы, биреүсе, таратыусы, өләшеүсе).

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

Галин Салауат. «Тел асҡысы халыҡта» Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулланмаһы, – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 224-се бит.

Ғималова М.Ғ., Хөсәйенов Ғ.Б. «Туған әҙәбиәт» Урта мәктәптең 8-се класс уҡыусылары өсөн дәреслек-хрестоматия. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 352-се бит.

Нәҙершина Ф. А. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө –1980. – 472-се бит.

Нуриахметов А.М., Хизбулдина Д.И. Башкирские, русские и английские пословицы и поговорки. – Уфа: Китап, 2002 . – 96 с.

Әхтәмов М. Ҡайҙан һин, халҡым күңеленән ынйы йыйыусы? «Ағиҙел», 2007, №5. – 146 – 157-се биттәр.

## ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ҺӘМ ДӘРДМӘНД

«Эш бөтөү менән атайым дуҫтарына һәм шәйехтәренә сәйәхәткә китә... Юлда Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Бөрйән ырыуҙарына ҡараған дуҫтарының һәм шәйехтәрҙең йәйләүҙәрендә мәжлестәр ойошторолор ине. Унда ғилми, дини, ҡайһы бер ваҡытта сәйәси мәсьәләләр хаҡында һөйләшә торғайнылар. Кире ҡайтҡанда атайым, үҙҙәрен дастан ҡаһарманы тип иҫәпләгән Мәһәҙи һәм Әмин ауылы мосолман казактары, Түңгәүер, Тамъян һәм Ҡатай ҡәбиләләре юлы менән килеп, ундағы дуҫтары менән күрешер ине. Был сәйәхәт ай ярымға һуҙыла. Һәр йыл ҡабатланған сәйәхәттең өсөһөндә мин дә ҡатнаштым. Минең бурыс — ат менән арба бағыу. Һәр сәйәхәт фекер хаятыма йоғонто яһаны»,— тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең "Хәтирәләр" китабында.

Бына ошо сәйәхәттәрҙә Ә. Вәлиди атаһы менән Рәмиевтарҙың алтын приискыларында туҡтап, улар менән, бигерәк тә Мөхәммәтзакир Мөхәммәтсадиҡ улы Рәмиев — Дәрдмәнд менән, яҡындан аралашып йәшәүҙәре тураһында ла "Хәтирәләр"ендә бәйән итә.

1906 йылдың октябрь айынан Фәтих Кәрим етәкселегендә "Ваҡыт" гәзите, шулай уҡ башҡорт ғалимы, Рәсәй мосолмандары ҡазыйы Ризаитдин бин Фәхретдин етәкселегендә Ырымбур ҡалаһында алтын хужалары Рәмиевтарҙың көсө менән барлыҡҡа килгән шул уҡ "Ваҡыт" гәзите матбағаһында 1907 йылдың декабрь айынан "Шура" журналы нәшер ителә башлай.

Атаһы Әхмәтшаһтың яҡын дуҫы ҡазый Ризаитдин хәҙрәттең ойоштороу һәләтенә эйә булыуын һәм уның Рәмиевтар тарафынан төҙөлгән бер ҡатлы йортта йәшәгәнлеге, шулай уҡ Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"ендә был затҡа үҙенең уҡырға, бигерәк тә урыҫса өйрәнеү теләге барлығы тураһында һөйләшеп ултырыуҙарын яҙғас: «Мин "Шура" журналын нәшер итеүселәрҙән шағир Закир Рәмиев менән дә өйөнә барып күрештем. Был зат менән 1906 йылда Троицкиға китеп барышлай Ирәндек тауҙарының көнсығышындағы Солтан тип йөрөтөлгән алтын рудниктарында атайым менән бергә барып танышҡайным. Шиғырҙары бик гүзәл, үҙе сығатай әҙәбиәтен бик яҡшы белә ине. Ырымбурға килгән йылда «Шура» журналының тышында Алишер Навоиҙың "Тәңре, мин ғашиҡ булғанлыҡтан, яратҡан һылыуҙың сәстәрен дә уның үҙе буйлыҡ итеп яратҡан" мәғәнәһендәге ике мысраһы (шиғыр юлы — **И.Ғ.**) (был, асылда, XIV быуат Алтын Урҙа шағиры Хәрәзмиҙең шиғыры булһа кәрәк) дүрт мысра итеп бик гүзәл ысулда нәшер ителде. Мин Закир бейгә был өҙөктөң бик матур булыуын әйттем һәм Навоиҙың хәтеремдә ҡалған бәғзе башҡа шиғырҙарын яттан һөйләнем. Ул был шиғырҙарҙы шунда уҡ дәфтәренә

яҙып алды. Әйткәндәй, шағирҙың «сит илдә инсан һөйөнмәç, ҡул көсөнөң дә, ғалимлығының да шәфҡәтенән хәйер күрмәç, алтын ситлек эсендә матур гөл үçһә лә, былбыл иһә дегәнәк араһында ла оя ҡора алмаç» мәғәнәһендәге шиғыры миңә бик оҡшай ине. Закир Рәмиев шиғырҙың минең хәлемә тап килеүен һис шикһеҙ аңланы. Мин уға Ҡазанға китәсәгемде һәм унда урыç теле мөғәллиме әҙерләү мәктәбенә инеп уҡырға ниәтләүемде һөйләнем, ул да быны хупланы. Аҡса яғынан хәлемдең хөрт булыуын аңлатып торманым. Шулай ҙа ул «Ваҡыт» гәзите идараһындағы Ярулла Вәлиев тигән мөхәррирҙе күрергә кәңәш итте. Ул иһә иртәгәһенә миңә Закир бай исеменән 50 һум аҡса бирҙе. Закир бай бик самими һөйләште. Ул минән, Навои әçәрҙәрен ҡайҙа уҡының, тип һораны. Мин иһә «Диван»дың атайымда һәм Алағуянда Ҡасҡынбайҙарҙа, ташҡа баçылған "Хәмсә"һенең Һайран ауылындағы Бикбулат хәҙрәттә булыуын һөйләнем. «Тимәк, Закир бай ул ваҡыт Навоиҙың «Хәмсә»һе менән «Диван»ын күрмәгән әле, "Мөһәкәмә"һен генә уҡыған", — тип яҙып, М.З. Рәмиевты ихтирамлы, алдан күрә белеүсе, иғтибарлы, ярҙамсыл һәм абруйға лайыҡ кеше булараҡ һүрәтләй.

Ошо осрашыуҙан һуң күп йылдар үтә...

Ә. Вәлиди күп ерҙәрҙә йөрөп төрки ғилем эстәй һәм ғилми китаптар яҙа, уны төрки халыҡтар араһында ғына түгел, ә бик күп урыç зыялылары араһындағы ғалимдар ҙа ихтирам итә. Бигерәк тә төрки халыҡтар тарихына бәйле ғилми хеҙмәттәре менән төрөк ғалимдары ғына түгел, ә башҡа халыҡтар араһындағы тарихи хеҙмәттәре менән дан ҡаҙанған ғалимдар ҙа ҡыҙыҡһына башлай.

1917 йыл... Һуңынан «Бөйөк Октябрь инҡилабы» тип аталасаҡ халыҡ күтәрелеше хөкөм һөрә. Инҡилап алтын хужалары Рәмиевтар өсөн оло ҡара ҡайғыға әүерелә. Совет хөкүмәтенә лә, аҡтарға-ҡыҙылдарға һәм башҡа хакимлыҡ итергә теләүселәргә лә алтын кәрәк. Кемдәргә биргәндәрен дә иçәпләмәй улар, алтындарын таратып бөтөрәләр. Һуңынан: «Күрәһең, Аллаһы Тәғәлә шулай ҡушҡандыр», — тип әйтерҙәр улар.

1917 йыл аҙағында Ырымбур ҡалаһында Бөтә башҡорт ҡоролтайы уҙғарыла. Бында Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә мөстәҡил Башҡорт Мөхтәриәте (Иреклелеге – **И.Ғ.**) иғлан ителә. Ҡоролтай ҡарары менән Мөхтәриәт биләмәләренә ингән ер өçтө һәм ер аçты байлыҡтары уның милке тип яҙыла. Рәмиевтарҙың алтын сығарыу шахталары һәм приискылары ошо тарихи башҡорт сиктәренә инә.

Бик күп йылдар элек 2-се Бөрйән улыçы Муллаҡай ауылында Шәйех Ғабдулла бин Сәид әл-Болғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари ишан Нурмөхәмәтов мөдир булған мәҙрәсәлә уҡыған ваҡытта, шағирсәсәндәрҙең бәйгеләрен тыңларға ратҡан һәм шул ваҡытта шиғриәткә ғашиҡ булған һәм, һуңғараҡ Төркиәгә барып, 1880-1881 йылдарҙа Истамбулда иçәп-хисап, иҡтисад фәнен һәм төрөк телен, әҙәбиәтен, көнсығыш шағирҙарының дастандарын өйрәнеп ҡайтҡан Мөхәммәтзакир Рәмиев үҙенең шиғырҙары менән халыҡ ихтирамын яулай. Ул «Дәрдмәнд» (ғажиз, бисара, ҡайғылы — **И.Ғ.)** тахаллусында яҙа һәм шиғырҙарында үҙенең тыуып үçкән башҡорт ерҙәренең гүзәллегенә һоҡланып туя алмай, уны данлай, уның менән ғорурлана. Тәбиғәттең барса нескәлектәрен, ҡоштар һайрауын, сылтырап аҡҡан шишмә тауыштарын, тауҙарҙың, туғайҙарҙың да матурлығын көй-моңға һалырлыҡ итеп еткерә ул халыҡҡа.

Бында “Хәтирәләр”ҙә зикер ителгән шәхестәр араһында булған сәйәси низағты ла яҙып үтергә булдым.

...Инҡилап осоронда була был бәхәс.

«Башҡорт» исемле гәзит сығара башланыҡ. Унын тәүге һанындағы имзаһыҙ мәҡәләне мин яҙҙым. Был мәҡәләлә башҡорттарҙың Төркөстан менән Волга араһында күпер ролен уйнаясағы хаҡында әйттем, Башҡортостандың мөхтәриәткә ирешеүе был маҡсатҡа ҡаршы сыҡҡан ҡазандарҙың да, аҙаҡҡы сиктә, Рәсәйҙең көнсығышында ҡупҡан бөйөк азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылыуына сәбәп буласаҡ, тип яҙҙым.

...Мөхәррирҙәрҙең береһе был гәзиттә (23 майҙа) “башҡорт” тигән һүҙҙән баш тартып, башҡорттарға ла татар исемен мәжбүри рәүештә тағырға кәрәк, мәғәнәһендә мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Был иһә беҙҙең юлыбыҙға урыҫтар ғына түгел, үҙ арабыҙҙан да ҡаршы сығыусылар буласағын, улар менән көрәштә күп ҡеүәт һәм ваҡыт сарыф итергә мәжбүр буласағыбыҙҙы күрһәткән йән әсеүле хәлдәрҙең береһе ине», — тип яҙа Ә. Вәлиди Туған.

Ун ике йыл үткәс, Закир Рәмиев менән күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеүҙәре хаҡында иҫләп, Зәки Вәлиди бына нимәләр яҙа: “Был килгәнемдә көнсығыш төрөктәрҙең мәшһүр ғалимы Ризаитдин Фәхретдин һәм уларҙың бөйөк шағиры Закир Рәмиев менән ике тапҡыр күрештем. Ризаитдин (Риза) ҡазый, беҙҙең эшебеҙгә уңыш теләп, һәр саҡ доға ҡылып тороуын, улдарының беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итеүенә ҡәнәғәт булыуын һөйләне...

...Шулай уҡ яңғыҙ, үҙе бер өйҙә йәшәгән элекке миллионер шағир Закир Рәмиевты ла Ырымбурға ошо килгәндәме, әллә йәйен икенсе тапҡыр килгәнендәме барып күрҙем. Был зат сығатай шағиры Алишер Навоиға ғашиҡ ине. Ун ике йыл элек Навоиҙың мин уға яттан һөйләп биргән шиғырҙарына оҡшатып шиғыр яҙыуын һөйләне. Ауырыу хәлдә диванда ятҡанда баш аҫтына һалған мендәре лә яҡшынан түгел ине. Байлығын юғалтыуға ҡайғырмауын, әммә милләтенең яҙмышы хаҡында борсолоуын әйтте. Орск ҡалаһында йәшәне. Хушлашып сығыр алдынан Алишер Навоиҙың бер шиғырын хәтерләнем, тигәс, Ә. Вәлиди шиғырҙы сығатай телендә килтерә, (быныһын яҙып тормайым — **И.Ғ.)** һәм, мәғәнәһе: «Үлемдән дә ауыр тормошомдо алаһыңмы? Ҡайғымдан һәм ауыр кисерештәрем арҡаһында аҡҡан күҙ йәштәремде алаһыңмы? Юҡһа, таш өҫтөнә һалған хәсрәтле башымды алаһыңмы?» Ысынлап та, шағирҙың баш аҫтындағы мендәре таш кеүек ине. Риза ҡазыйға бер миҡдар ҡағыҙ һәм алтын аҡса биреүемде, әгәр рөхсәт итһә, уға ла ярҙам итергә теләүемде әйттем», — тип тамамлай һүҙен ғалим. Был осрашыу уларҙың һуңғы мәртәбә күрешеүҙәре була.

Ике шәхес... Икеһенең дә ике төрлө яҙмыш. Ләкин уларҙың икеһенең дә яҙмышы башҡорт халҡы менән тығыҙ бәйле.

«Хәтирәләр»енең тәүге биттәрендә: “Уралда һәм Урта Азияла ошо (XX — **И.Ғ.**) быуат башында булған бөйөк сәйәси хәрәкәттәрҙә ҡатнашасағым, төрөк милләтенең киң ҡатламдарының азатлыҡ өсөн көрәше менән етәкселек итәсәгем (был китапта һүҙ шул саҡта барасаҡ), шәреҡте өйрәнеү фәне буйынса халыҡ-ара кимәлдә һүҙ әйтәсәк шәхес буласағым тормошомдоң башланған осоронда бер нисек тә алдан күреп белерлек хәл түгел ине” — тип яҙа Ә. Вәлиди Туған үҙе тураһында.

Башҡорт йөмһүриәтен төҙөгән беренсе юлбашсы, халҡының һәм төрки халыҡтарҙың даһи шәхесе, даны бөтә донъяға таралған шәрҡиәт ғалимы, Европа һәм Азияның байтаҡ университеттарының ихтирамлы докторы, Истамбул, Бонн, Геттинген университеттары профессоры булараҡ беләбеҙ бөгөн Әхмәтзәки Вәлиди Туғанды.

Заманында совет шымсыларына уны — “халыҡ дошманы”н күргән ерҙә үк хөкөмһеҙ, тәфтишһеҙ атып үлтереү йөкмәтелә. Вафатынан һуң бик күп йылдар үткәс тә уның өҫтөнән сүп өйөүсе көнсөл, әшәке дошмандар етерлек. Хәҙер инде, имеш, ул “Германия шымсыһы” булған икән дә баһа, тип күрһәтергә, халыҡҡа еткерергә тырышалар, Аллаһ һаҡлаһын.

Ғайса ғәләйһиссәләм донъяға килмәҫ элек, боронғо ғалимдар башҡорт халҡы тураһында бик күп мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған. Бына ошо халыҡтың ябай ғына урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуып, башҡорттоң милләт булараҡ һаман да юҡҡа сыҡмағанлығын күрһәтеүсе, донъя кимәленә лә күтәреүсе ғалим, халҡының тоғро улы ул Зәки Вәлиди. Әлхәмдулилләһ, был кеше милләтен дә, илен дә, телен дә, хатта динен дә һатманы, халҡының даһи улы булараҡ, донъя кимәленә күтәрелде һәм халҡын да таныттырҙы, күтәрҙе. Ғүмеренең һуңғы сәғәттәрендә лә тыуған ауылын, Урал тауҙарын, ҡурай моңдарын һағыныуын балаларына һөйләй торған булған.

Тормош юлдашы Нәзмиә ханым Әхмәтзәкигә: “Хәҙер ауылыңа ҡайтһаң, ни эшләр инең?” — тигәс, ул оҙаҡ уйламай ғына: “Балалар уҡытыр инем”, — тип яуап биргән һәм ошо һүҙҙәре менән, оло йәштәге ғалим булыуына ҡарамаҫтан, һаман да үҙенең туған башҡорт халҡына хеҙмәт итергә әҙер булыуын белдергән.

1970 йыдың 26 июлендә, үҙе нигеҙ һалған Башҡортостан йөмһүриәтенә ҡайта алмай, сит кеше булһа ла, үҙ итеп ҡабул иткән мәмләкәттә вафат булып ҡала данлыҡлы юлбашсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Ике көн үткәс, уның рухына бағышлап Баязит Жәми мәсетендә йыназа намаҙы уҡыла. Күп йылдар үҙе эшләгән университеттағы матәмдән һуң, уны Стамбулдың Карача Әхмәд зыяратында ерләйҙәр.

Ниһайәт, XX быуат аҙағында ғына, вафатынан 30 йыл үткәс кенә, ҡайта ул үҙенең тыуып үҫеп, дан ҡаҙанған иленә, Әлхәмдүлилләһ.

Рәмиевтарға нәҫел исемен биргән Рәмиҙең тамырҙары тарихи башҡорт ерҙәре биләмәһенә ҡараған Миңзәлә өйәҙендәге байлар ырыуы башҡорто Биксура хан нигеҙ һалған Тайһуйған ауылынан таралған. Татарҙармы улар, башҡортлоғон онотҡан башҡорттармы — уныһы Аллаһ Тәғәләгә мәғлүм. Ошо рисаләнең мөәллифенә архивтарҙа ултырып Закир Рәмиевтың “татармын” тигән шиғырын уҡырға насип булманы. Күреүебеҙсә, был — бармаҡ менән һауа тишеп яҙған Салауат батырҙы ла, инҡилапҡаса ғилми хеҙмәттәре, әҫәрҙәре менән дан ҡаҙанған мәшһүр башҡорттарҙы ла татар тип әйтергә тырышҡан милләтселәр уйҙырмаһы.

Башҡорт ауылы Тайһуйғандан бөгөнгө Башҡортостан йөмһүриәтенә ҡараған Стәрлетамаҡ өйәҙе Ағиҙел йылғаһы туғайында ултырған Ергән ауылына күсеп киләләр М. Рәмиевтың ата-бабалары. Ошо ерлектә тыуған Мөхәммәтзакирға өс йәш була. 1862 йылда ғаиләләре менән Үрге Яйыҡ өйәҙендәге Юлыҡ ауылына күсеп килгәндәр. Бында ла уларҙың ғаиләһе башҡорттар араһында йәшәй, улар менән эшләй. Башҡорт ерҙәрендә сығарған алтын уларҙы Рәсәйҙең иң бай миллионерҙары рәтенә күтәрә.

Шул уҡ ваҡытта улар алтын сығарған утар һәм ауылдарҙа мәсет, мәҙрәсәләр төҙөткәндәр. Мәҙрәсәлә дәрес биргән мөҙәрис-хәлфәләргә эш хаҡы түләп торғандар. Бында күпселектә башҡорт балалары ғилем алып, һуңынан имам, мөҙәрис, мәзин булып киткәндәр, ахун, шәйех дәрәжәһенә еткәндәр ҙә бар, шағир-сәсәндәр ҙә булғылаған. Янғындан һуң, 1911 йылда ҡайтанан Рәмиевтар тарафынан төҙөлгән, ҡасандыр үҙҙәре уҡып ғилем эстәгән Муллаҡай ауылы (хәҙерге Баймаҡ мөҙафәтендәге) мөдире Шәйех Ғабдулла бин Сәйед ишан булған мәҙрәсәлә йыл һайын уҡып сыҡҡан шәкерттәрҙең һаны 400-гә еткән. Үҙҙәре үҫкән Үрге Йайыҡ өйәҙе Юлыҡ ауылы мәҙрәсәһендә йыл һайын 60-ҡа яҡын шәкерт ғилем алып сыҡҡан. Былар — иң-иңдәре, ә күпме бәләкәй мәҙрәсәләрҙә һәм мәсет-мәҙрәсәләрҙә Рәмиевтар иғәнәһенә уҡып сыҡҡан шәкерттәр... Теүәл генә әйтеүе еңел түгел.

Ғөмүмән, Урал аръяғында башҡорт зыялыларының үҫеп сығыуында аталы-уллы Рәмиевтарҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Башҡорт, татар яҙыусыларының шиғырҙарын, әҫәрҙәрен баҫтырып сығарыу мәсьәләһе күтәрелә килә. Ләкин батша хөкүмәте быға ҡәтғи ҡаршылыҡ күрһәтә. Ырымбурҙа матбаға булдырыу өсөн Закир Рәмиев ун йылға яҡын ғүмерен виләйәт һәм хөкүмәт тупһаһын тапап уҙғара. Моратына ирешә: уның тырышлығы менән төрки халыҡтар араһында уртаҡ тел булған сығатай телендә әүәл “Ваҡыт” гәзите, һуңынан “Шура” журналы нәшер ителә башлай. Бында, башлыса, башҡорт ерҙәрендә тыуып, ата-әсәләре тамырында башҡорт ҡаны аҡҡан ҡатнаш ҡанлы татарҙар, үҙҙәренең башҡортлоғон йәшермәгән Риза ҡазый Фәхретдин, Мәжит Ғафури, Һаҡмари, Әхмәтзәки Вәлиди Туған, Шәйехзада Бабич һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре нәшер ителә. Мөхәммәтзакир Рәмиев — Дәрдмәнд тә үҙенең шиғырҙарын баҫтыра торған була. Әлбиттә, уның шиғырҙарының йәмғеһе мең юлдан артыҡ түгел, ҡайҙа ул иллегә яҡын шахта һәм приискыларҙа алтын сығарыуҙы ойошторған шәхескә шиғыр яҙырлыҡ ваҡыт? Мөхәммәтзакир ғүмеренең күп өлөшө, бигерәк тә ағаһы Мөхәммәтшакир 1912 йылда поезда китеп барғанда, Мәскәүгә етмәҫ элек, фажиғәле рәүештә вафат булғас, Ырымбур, Орск ҡалалары һәм Үрге Йайыҡ өйәҙҙәрендә урынлашҡан прииск эштәрен яйға һалыу ниәте менән юлда уҙа. Ниндәй генә яҡшы ат булһа ла, юл йөрөүҙәр аҙна-айҙарға һуҙыла торған булған. Был саҡта ҡайҙа ул шиғыр яҙыу ҡайғыһы?

Бармаҡ менән һауа тишеп, Дәрдмәндтең шиғырҙары бихисап булған, тигән кешегә, ялғансы тип әйтһәм, яңылышмам. Милләт рухын күтәрәйем әле, булмаһа ла яҙайым, ышанһындар, тип яҙғандар юҡ түгел, бар. Ундайҙарҙан Алла һаҡлаһын. Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡайыҡ!

Дәрдмәндтең үҙенең туған башҡорт тәбиғәтенә хас шиғырын бөгөнгө телгә ауҙарып, уҡыусыларға тәҡдим итәм:

*Һеңеп ергә, менеп елгә, булып быу,*
*Ағып кисмәктәлер гөрләп ағын һыу.*

*Ағас, таштар тынып, тауҙар ҙа тыңлар,*
*Менеп таштан, осоп ташҡа, төшөп һыу.*

*Аға гөрләп, аға зарлап ағын һыу,*
*Китә йомғаҡланып-йомғаҡланып был.*

*Ҡасан, балҡып, йыһанға тулды яҡты,*
*Килеп, нур ағылған тауҙарҙы баҡты, —*

*Аяныс, нур күҙ йәшен гәлсәргә оҡшатты,*
*Кереп буяуға, ал ҡанға буянды.*

*Ишет төндәрҙә былбыл һайрауын,*
*Уның да ҡарасы залим яҡты йәнен.*

*Осоп, сүлдәр кисеп, тауҙар ашып,*
*Килеп төшкән микән, башҡай аҙашып?*

*Ят илдең ят итеп яҡты ҡояшын,*
*Ҡамышлы һыуҙарын, ҡырсынлы ташын.*

*Тауыштар сыңрауын ул саф һауала,*
*Һағыштар яңғыратып иркен далала,*

*Алыҫ диңгеҙҙә ул ҡыштар кисергән,*
*Сит илдәрҙән ят-сит моңдар килтергән.*

Илдә граждандар һуғышы бара, төрлө ауырыуҙар көсәйә... 1921 йылдың 9 октябрендә Мөхәммәтзакир Мөхәммәтсадиҡ улы Рәмиев — Дәрдмәнд Орск ҡалаһында ҡара һарҡау йоғоп, ошо ауырыуҙан һауыға алмайынса донъя ҡуя. Уны Ильяс ауылы ҡәберлегендә дәфен ҡылалар. Бында ла уға һәм уның эргәһендә ятҡан мәрхүмдәргә тынғы бирмәйҙәр. Күп йылдар үткәс, Ырымбур өлкәһе Ильяс ауылы ҡәберлеге өҫтөнә хәрби завод төҙөп ултыртып ҡуялар.

Башҡорт халҡына хеҙмәт иткән, иғәнәсе булараҡ дан ҡаҙанған, мәҙәниәт, зыялылыҡты үҫтергән, шиғырҙарында үҙенең тыуып үҫкән башҡорт ерҙәренең матурлығын данлап яҙған заттарҙы беҙҙең, башҡорттарҙың, оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Үҙ дәүерҙәрендәге башҡорт халҡының тормошон, йәшәйешен әҫәрҙәрендә дөрөҫ һәм хаҡ тасуирлап яҙған граф Лев Толстой менән Александр Пушкин һымаҡтар беҙҙеке булған шикелле, Мөхәммәтзакир Рәмиев — Дәрдмәнд кеүектәр ҙә үҙебеҙҙеке. Башҡортостандағы улар йәшәгән, улар эшләгән, улар төҙөткән биналарҙы йүнәтеп, тәртипкә килтереп, хөрмәт таҡтаташтары ҡуяйыҡ. Урамдарыбыҙға уларҙың исемен бирәйек. Улар быға лайыҡ, тип тамамлайым рисаләмде, амин.

**Ғариф хәҙрәт ҒАБДРАХМАНОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## *2010 — Республика йылы*

# «Тоғролоҡто еңер көстәр юҡ...»

*Александр Пушкин, Михаил Лермонтов, Николай Некрасов, Анна Ахматова, Марина Цветаева, Сергей Есенин, Ольга Берггольц, Юлия Друнина... Бөтә донъяны таң ҡалдырырлыҡ күпме сағыу исемдәрҙе бүләк иткән Рәсәй! Уларҙың һәр береһенең ижады — тиңе булмаған аҫыл таш, илаһи тере ялҡын, сихри балҡышлы йәйғор! Ҡыҙғаныска ҡаршы, был илаһи таланттарҙың, шиғриәт тылсымсыларының барыһы ла тип әйтерлек фажиғәле яҙмышлы. XX быуатта бигерәк тә Рәсәй шағирәләренең яҙмышы аяныслы... Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы сәйәси яҡтан ғына түгел, мәҙәни яҡтан да ҙур әһәмиәткә эйә була. Борон-борондан Көнсығыш әҙәбиәтенең һутын үҙ күңеленә һеңдергән, үҙенең дә бай фольклоры булған, быуаттар буйына шиғри һүҙҙең сағыу өлгөләрен тыуҙырған башҡорт халҡы аҡрынлап рус әҙәбиәтенә ылыға бара. Быуаттар буйына халыҡ бер-береһе менән аралаша, үҙ милләтен, телен, йолаһын һаҡлап алып ҡалыу менән бергә, бер-береһенең мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен дә үҙләштерә. Бөгөнгө көндә беҙ әҙәбиәтебеҙҙе Пушкин, Лермонтов, Толстой кеүек яҙыусыларҙан башҡа күҙ алдына ла килтермәйбеҙ.*

*Рус һәм башҡорт халҡының дуҫлығы — быуаттар буйына яу яландарында ла, ҡайғыла ла, шатлыҡта ла һыналған оло дуҫлыҡ. «Тоғролоҡто еңер көстәр юҡ»,— тип яҙғайны Ольга Берггольц үҙенең бер шиғырында. Эйе, беҙҙең халыҡтарҙың дуҫлығы һыналған, был дуҫлыҡ — мәңгелек.*

*Төп журналыбыҙ «Ағиҙел»гә, Республика йылы уңайы менән, үҙем тәржемәләгән бер шәлкем шиғырҙарҙы тәҡдим итәм.*

***Әнисә ТАҺИРОВА.***

## Анна АХМАТОВА

***

*Тауыш ишеттем. Ул әйтте:*
*«Гонаһтар менән тулы*
*Рәсәйҙән кит. Бәхет бирмәҫ*
*Уның ҡараңғы юлы.*

*Мин йөрәгеңдән ҡыуырмын*
*Ҡара ғәрлектәреңде.*
*Яңы дан менән ҡапלармын*
*Барлыҡ рәнйештәреңде».*

*Ҡапландым ҡулдарым менән*
*Ишетмәҫкә тауышты.*
*Еңел юлдарҙы эҙләмәм,*
*Булһам да гел һағышлы.*

***

*Ниңә һыуымды ағыулап,*
*Икмәгем бысраттығыҙ?!*
*Һуңғы иркемә лә хатта*
*Ҡупме яла яҡтығыҙ!*

*Кұңелдә һаҡлағанғамы*
*Киткән дуҫтарҙың төҫөн?*
*Әллә яныр, көйгәнгәме*
*Ҡайғылы ерем өсөн?*

*Йәшәмәгән шағир ерҙә*
*Палачһыҙ һәм язаһыҙ.*
*Яҙған беҙгә алға атлау*
*Ғазаптар аша юлһыҙ.*

***

*Мин белмәйем: иҫәнме һин, юҡмы,—*
*Йәшәйһеңме фани донъяла?*
*Баҡыйлыҡҡа уҡталһынмы уйым,*
*Һағышымды төрөп моңдарға?*

*Барыһы һинең өсөн: доғаларым,*
*Төнгө уйҙарымдың алҡыны;*
*Йырҙарымдың ап-аҡ ҡанатлыһы,*
*Күҙҙәремдең нурлы ялҡыны.*

*Тормошомда мөхәббәт тә булды:*
*Наҙы, ғазаптары ялманы.*
*Тик һис ҡасан һис кем һинең кеүек*
*Мине әсир итә алманы.*

**Ольга БЕРГГОЛЬЦ**

## *Госпиталдә*

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Ленинградта 35 мең ҡатын-ҡыҙ, дружина ағзаһы булырға теләк белдереп, Ҡыҙыл Тәре йәмғиәтенә мөрәжәғәт итә.

*Һалдат ыңғыраша. Яралары*
*Төн буйына ирек бирмәй.*
*Һаташа ул. Һыҙланыуҙан алйып,*
*Йәнгә яҡын кешеләрен эҙләй:*
*— Әсәй, кил яныма, ҡайҙа һуң һин?!*
*Йәп-йәш кенә шәфҡәт туташы*
*Килеп етә йәһәт ыҡталып:*
*— Мин яныңда, мин бындамын, улым!*

*Һалдат шул саҡ еңеп ғазаптарын,*
*Күҙ алдында әсә йөҙөн шәйләп,*
*Әйтә:*
*— Һин бындамы? Әсәй, рәхмәт!*
*Ә ҡайҙа һуң минең ҡатыным?*
*Һәм яңынан шәфҡәт туташы:*
*— Мин бында! — тип килә талпынып —*
*Мин бындамын — һинең ҡатының.*
*Булам һеңлең, булам әсәйең,*
*Беҙгә кәрәк һинең йәшәүең.*

*Ватан һаҡсылары янында*
*Беҙ барыбыҙ һәр саҡ тоғро терәк.*
*Сөнки һеҙ бит ғәзиз Ил-төйәккә,*
*Ерҙә тормош ҡороу өсөн кәрәк.*

*Һаташыуҙар тиҙҙән артҡа сигә,*
*Ҡайта һиллек, ҡайта тыныслыҡ.*
*Һин йәшәрһең. Бындай тоғролоҡто*
*Еңә алыр көстәр ерҙә юҡ.*

## *Блокада ҡарлуғасы*

Ҡамауҙа ҡалған Ленинград халҡы суҡышында хат илтеүсе ҡарлуғасты һынландырған жетонды түштәренә тағып йөрөткән.

*Үткәндәрҙе иҫләп, йөрәк өткән*
*Ҡайғы, шатлыҡтарҙы барлаһам,*
*Ут-ҡулсала ҡалған ҡалабыҙҙың*
*Бер яҙына ҡайтам мин һаман.*

*Кескәй генә ҡалай ҡарлуғасты*
*Мин дә гел түшемдә йөрөттөм.*
*Мин дә һәр көн изге хәбәр көттөм,*
*Йәнгә дауа булыр хат көттөм.*

*Беҙ үҙебеҙ уны уйлап таптыҡ —*
*Ҡарлуғасты — өмөт билдәһен.*
*Белә инек беҙгә бары ҡоштар,*
*Самолеттар ғына етәһен.*

*... Был яҙҙан һуң күпме хаттар алдым,*
*Тиң ниңәлер ғүмер буйына*
*Мин өҙөлөп, һағышланып көткән*
*Хат килмәгән төҫлө тойола.*

*Кем яҙырға тейеш ине уны?*
*Еңеү яҙындағы бер моңмо?*
*Әллә, ғүмер буйы мин көтөп тә,*
*Күрмәй, белмәй ҡалған дуҫыммы?*

*Мин, таң йылмайыуын көткән кеүек,*
*Ошо хатты көтәм көн һайын.*
*Урау юлдар менән йөрөйҙөр ул,*
*Табалмайҙыр мине, моғайын.*

*Бер көн көтмәгәндә хайран итеп,*
*Йәнем болоҡһоуын таратып,*
*Һуғыш утын ярып үткән шул хат*
*Килер төҫлө, елпеп ҡанатын.*

*Тере ялҡындар һип йөрәгемә,*
*Хыял-уйымдағы хат-ҡанат.*
*Һин дәһшәтле, утлы ҡулсалағы*
*Ҡарлуғастан ҡалған аманат.*

## Юлия ДРУНИНА

***

*Шинелемде һаҡлай алманым мин,*
*Пальто тектем унан үҙемә.*
*Ауыр ине йылдар,*
*Онотаһы килде*
*Һуғыш мәхшәрҙәрен тиҙерәк.*

*Пальто туҙҙы,*
*Мин ҡыҙыма бирҙем*
*Күптән пилоткамдың йондоҙон.*
*Тик 41-ҙәге кеүек,*

*Был йөрәгем әгәр кәрәк булһа,*
*Етә, илем, бары бер һүҙең.*

***

*Ахырҙа һин күпме йылдарҙан һуң,*
*Төштәремә кермәй башланың.*
*Тик ҡыуанмай һис тә күңел ҡошом,*
*Бары түбән эйә башҡайын.*

*Моңһоу ғына ҡуна ағастарға,*
*Һайрамай ул ҡанат ҡағынып.*
*Әллә бер өйрәнгән ситлекте лә*
*Була микән шулай һағынып?*

**Вера ИНБЕР**

## *Гиҙеп сыҡтым*

*Барлыҡ йыһанды мин гиҙеп сыҡтым,*
*Йыраҡтарға илтте һуҡмағым.*
*Болоттар ҙа, күктәр күкрәүе лә*
*Ҡалалманы мине туҡтатып.*

*Алдарымда утлы таҫма һуҙып,*
*Баш осомда йәшен йәшнәне.*
*Кометалар, тынмаҫ илгиҙәрҙәр,*
*Ебәрҙеләр миңә сәләмен.*

*Йәйғор янында мин ҡунаҡ булдым,*
*Гиҙеп үттем ҡояш бил әмен.*
*Күрҙем мамыҡ болоттарҙың, һөйөп,*
*Яңы тыуған айҙы биләүен.*

*Ҡош юлдары менән елеп үттем,*
*Ҡайҙа ғына барып ҡайтманым.*
*Барлыҡ йыһанды мин гиҙеп сыҡтым,*
*Рәсәйгә тиң ерҙе тапманым.*

## *Пушкин йәшәй*

*Туптар шартлауынан аҡтарылып*
*Төштө тыныс йорттоң ҡыйығы.*
*Шул саҡ тәҙрәнән һонолдо ла:*
*— Китаптарым яна! — тине кеше,—*
*Бында Пушкин! — тине һыҙылып.*

*Уға ҡысҡырҙылар: «Сыҡ тиҙерәк!»*
*Йортто һаман ялҡын ялманы.*
*Ә ул янып ятҡан китаптарын*
*Ҡапыл ташлап китә алманы.*

*Шул саҡ түбә төштө емерелеп,*
*Барлыҡ донъя китте буталып.*
*Ауҙы кеше ҡысып күкрәгенә*
*Һөйгән шағирының китабын.*

*Больницала оҙаҡ иҫһеҙ килеш*
*Ап-аҡ булып ятты мендәрҙә.*
*Ә күҙҙәрен асҡас әкрен генә:*
*«Пушкин ҡайҙа?»— тине иң тәүҙә.*

*Дуҫы әйтте башы осонда:*
*«Пушкин иҫән ҡалды, борсолма!»*

## Николай НЕКРАСОВ

***

*Ҡара көндәремдең тоғро дуҫы,*
*Килдем бөгөн һинең ҡәбергә,*
*Саф һәм яҡты булып, бар булмышың*
*Тағы ҡалҡты минең хәтерҙә.*

*Хәтеремдә: ауыр ғазаптарым,*
*Ҡайғыларым йөрәк телгәндә*
*Һәм яңғыҙлыҡ мине иҙгән саҡта,*
*Ял табырмын, тинем, эргәңдә.*

*Ләкин көлөүҙәрең, йор һүҙҙәрең*
*Ҡыуманылар күңел һағышын,*
*Аҙ ғына ла үҙгәртмәне улар*
*Ярһыу уйҙарымдың ағышын.*

*Уйлай инем, ғәмһеҙ күңелеңдән*
*Мин торамдыр, тиеп, бик йыраҡ.*
*Һәм әсенеү барлыҡ уйҙарымды*
*Уралаңы һаман нығыраҡ.*

*Хаталарҙан арынмайҙыр йәшлек,*
*Тик ҡайтарып булмай үткәнде.*
*Йәшлек шатлыҡтарға баһа белмәй,*
*Күреп етмәй күҙ-йәш түккәнде.*

*Һин юҡ хәҙер... Дауылдар ҙа тынды,*
*Мин иш иттем башҡа берәүҙе.*
*Ул йәш түккән һайын хәтерләнем*
*Һинең шаян, көләс күҙҙәрҙе.*

*Инде барлыҡ үткән шул көндәрем*
*Ҡәҙерлеләр миңә, яҡындар.*
*Ни ҡәҙәрле илһам, көс биргәндәр*
*Һинең йылы наҙҙар, ялҡындар!*

*Үҙ-үҙемә үпкә-әрем бөтмәй:*
*— Белмәнең шул уның баһаһын!..*
*Һин һаман да минең хыялымда*
*Йәш һәм тере килеш ҡалаһың.*

*Тулҡын сәсең һирпеп баҡаһың да*
*Әйтәһең һин: булма һағышлы!*
*Тик әрнеткесерәк күҙ йәшенән*
*Һинең ҡайтҡан көлөү тауышың.*

## Римма ҠАЗАҠОВА

***

*Юлдан ауырлы бер ҡатын килә,*
*Уйсан ғына алға текләгән.*
*Баҫыуы — һаҡ,*
*Сөнки изгеләрҙән-*
*Изге йөктө ул бит йөкмәгән.*

*Уның йөгө — яҡты мөхәббәттең*
*Мираҫы һәм йәнле йәдкәре.*
*Ҡояш нуры һымаҡ сәселәләр*
*Битендәге аҡһыл таптары...*

*... Ҡатын килә. Гүйә, яҡты донъя*
*Матурая уға баҡҡанда.*
*Ә Ер шары, туптай, сыңлап ҡуя*
*Һәм һығыла ҡатын баҫҡанда.*

***

*Ватан, хеҙмәт һәм дә саф мөхәббәт —*
*Шуларҙан ҙур ниндәй ҡояш тағы?!*
*Шул өс ҡояш араһында аҙаш,*
*Үҙ-үҙеңде тап та аҙаш тағы.*

## Мария ПЕТРОВЫХ

## *Осрашырға саҡыр...*

*Осрашырға саҡыр әле мине,*
*Саҡыр егерменсе быуатта.*
*Бары мөхәббәтең терәк миңә,*
*Бары мөхәббәтең йыуата.*

*Саҡыр мине*
*Йылы көньяҡ еле*
*Елеп үткән таныш ҡалаға.*
*Онотолоп, диңгеҙ тулҡынының*
*Ете төҫөн ҡабат һанарға.*

*Иҫеңдәме, тәү ҡат осрашҡайныҡ*
*Тар тыҡрыҡта, ҡала ситендә.*
*Ә һуңынан юл һорашып ҡайттыҡ,*
*Өйрәттеләр беҙгә ят телдә.*

*Емерелеп бөткән тәпәш өйҙәр*
*Бахыр булып беҙгә ҡарайҙар.*
*Ләкин алмас төҫлө балҡый ине*
*Сүплек өҫтөндәге ҡалайҙар.*

*Тар һуҡмаҡтан тауға күтәрелдек,*
*Иҫеңдәме тәүге үбеүең?*
*Ошо мәлдән башлап һулар һауам,*
*Яҡты көнөм инең һин минең.*

*Хыял менән ҡабат ҡайтыр өсөн*
*Йәшлектәге гүзәл бер саҡҡа,*
*Осрашырға саҡыр әле мине,*
*Йөрәктәрҙә йылы бар саҡта.*

*Күҙ күргәндә, йөрәк типкән саҡта,*
*Бер баҡһам да һиңә, үкенмәм.*
*Осрашырға саҡыр әле мине —*
*Күҙ йәштәрем менән үтенәм.*

*Ел-ямғырлы көҙгө урамғамы*
*Йәки халыҡ геүләп торғандамы,*
*Һуңғы сәғәтемме алдынан,*
*Һин аралап мине ҡайғынан,—*
*Саҡыр һәм ебәрмә яныңдан,—*
*Тик беҙҙеке булһын һуңғы таң!*

**Людмила ТАТЬЯНИЧЕВА**

## *Төштә үҙен Рәсәй итеп күрҙе*

*Улы ғүмерен ҡыйып үтте пуля,*
*Әсә йөрәген дә ул өттө.*
*Ҡайтмаҫ тыуған йортҡа берҙән-бере —*
*Һөйөү менән көткән өмөтө.*

*Үкһеп әсә, алйып күҙен йомдо,*
*Төшөндә ул күрҙе Рәсәйҙе.*
*Абайлаһа, имеш, үҙе — Рәсәй,—*
*Йөҙ миллион улдың әсәһе.*

*Имеш, яңы ғына һуғыш үткән,*
*Яу ҡырҙары буйлап ул килә.*
*Яуҙа ауғандарҙың һәр береһен*
*Исемләп ул әйҙәй үҙенә.*

*Рәсәй-әсәй өсөн ауҙы яуҙа*
*Уның батыр, матур улдары.*
*Тулҡыныулы диңгеҙ һыуы төҫлө,*
*Һәр саҡ тере хәтер юлдары...*

*Ҡайнар ҡандан ҡар быулана ерҙә.*
*Барлап һәр бер ғәзиз балаһын,*
*Килә Рәсәй,*
*Улар исеменә*
*Һалып изге хәтер тамғаһын.*

*Йөрәгендә һис кәмемәй көсө,*
*Киләсәккә бара юлдары.*
*Яҡты рухы менән алға әйҙәй*
*Уның йөҙ миллион улдары.*

## *Ғорур кешеләр*

*Ғорурҙарға анһат,*
*Улар һыҡтамайҙар*
*Яраларҙан,*
*Күңелдәге йәрәхәттән.*
*Сит-ят юлда тормай улар*
*Һерәйешеп.*
*Хәйерселәй,*
*Инәлмәйҙәр мөхәббәттә.*

*Киң ҡанаттар бирелгәндәр*
*Ғорурҙарға,*
*Хәтәр сирҙән —*
*Көнсөллөктән улар азат...*
*Эйе, дөрөҫ —*
*Ғорурҙарға еңелерәк,*
*Ләкин ғорур була белеү*
*Түгел анһат.*

## Александр ПУШКИН

Я воздвиг памятник.
Гораций.

***

*Мин үҙемә тиңһеҙ һәйкәл һалдым,*
*Бындай йәдкәр ерҙә юҡ әле.*
*Мәғрурлығы менән ул дан тотҡан*
*Барлыҡ һәйкәлдәрҙән юғары.*

*Юҡ, мин үлмәм, был исемем ҡалыр*
*Сихри йырым һалған тамғала.*
*Йәшәр минең даным, был донъяла*
*Тик бер генә шағир ҡалһа ла.*

*Мине иҫкә алыр барлыҡ Рәсәй,*
*Яңғырармын төрлө телдәрҙә.*
*Минең менән ғорурланыр славян,*
*Тунгустар ҙа, ҡалмыҡ, финдар ҙа.*

*Игелекле йырым һәр халыҡтың*
*Күңелендә булыр ҡанатлы.*
*Сөнки данланы ул азатлыҡты,*
*Кәмһетелгән йәнде яҡланы.*

*Дан тажына, шағир, һис ҡыҙыҡма,*
*Илаһи Моң илтә юлыңдан.*
*Маҡтау, ғәйбәттәрҙе гел урап үт*
*Һәм йыраҡ бул иҫәр дуҫыңдан.*

## Марина ЦВЕТАЕВА

### Илем

*Һәр бер ябай кешең йырлай:*
*«Россиям, илем минең!»*
*Ә миңә нисек әйтергә*
*Йөрәктең изге һүҙен?*

*Калуга ҡалҡыулыҡтарынан*
*Аса ине киңлеген,—*
*Ете диңгеҙ аръяғында*
*Ҡалған еркәйем минең!*

*Киңлектәре, әйтерһең дә,*
*Йөрәгемдә яралған.*
*Ҡайҙа барһам да, уларҙы*
*Мин үҙем менән алам.*

*Сит ерҙәрҙең йәме лә ят,*
*Гел әйҙәй тыуған киңлек:*
*«Тыуған төйәгең алыҫта,*
*Ҡайт өйөңә, ҡайт»,— тиеп!*
*Юҡҡа ғына шул киңлек*
*Үҫтермәгәндер һөйөп.*

*Ҡалһам да ике ҡулымдан*
*Мин яҙа майҙанында,*
*Яҙырмын тештәрем менән:*
*«Бәхет — тыуған яғымда!»*

***

*Йырлай алмаусылар бәхетлерәк,*
*Бәхетлерәк,*
*сөнки уларға*
*Мөмкин,*
*Ҡайғы, хәсрәт килгән саҡта,*
*Ҡойма йәштәр түгеп иларға.*

*Яҙмыш сыбыртҡылап һыҙырһа ла,*
*Һис ярамай миңә иларға.*
*Ҡәбер һалҡынлығын тойғанда ла,*
*Мин тейешмен һаман йырларға.*

*Һуңғы минутҡаса йырлай шағир,*
*Килгән әжәл менән алышып.*
*Йәшәү бөйөклөгөн данлар өсөн*
*Яратылған уның тауышы...*

*Шағир, гүйә, арҡан буйлап уҙа*
*Яҡтылыҡҡа ғүмер буйына.*
*Һин ымһынма*
*башҡа бүләктәргә,*
*Бар яҙмышың һинең — йыр ғына!*

**Әнисә ТАҺИРОВА** тәржемәләре.

# ИЛДЕ ИМЛӘР ИЛ ИНӘҺЕ

*(Факиһа Туғыҙбаева ижады хаҡында)*

Байтаҡ ҡәләмдәштәремдең китаптарын барлау, өйрәнеү-тикшереү нигеҙендә шундай һығымтаға киләм: ысын мәғәнәһендәге ижад тәү сиратта мөғжизәгә ышаныуҙан, хыялдағыны ысынбарлыҡҡа яҡынайтырға ынтылыуҙан башлана. Был фекерҙең дөрөҫлөгөнә Факиһа Туғыҙбаева әҫәрҙәре менән ныҡлабыраҡ танышыу һөҙөмтәһендә тағы ла бер тапҡыр инандым. Әҙибәнең:

*Тамсы ышанысым ҡалмаъанда,*
*Әкиәтте алам ысынъа.*
*Ышанам мин ерҙә мәрхәмәткә.*
*Ышанам мин ерҙә тылсымъа, —*

**(«Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр»)**

тиеүе лә әлеге уйҙарҙы тулыһынса ҡеүәтләй.

Эйе, Факиһа мөғжизәгә ышаныусылар затынан. Мөғжизә тигәнең иһә йыш ҡына башҡалар аңламағанды аңлай алыуға, күрмәгәндәрен күреүгә, һиҙмәгәндәрен һиҙә белеүгә бәйле булыусан бит. Шағирә үҙе лә:

*Кеше күрмәгәнде күрә күҙем, —*

**(«Хәтер йондоҙлоғо»)**

тип һүҙ уйнатыу өсөн түгел, ә булғанын әйтә.

*Телһеҙҙең телен асайым,*
*Һуҡырҙың күҙгенәһен, —*

**(«Яңы һулыш»)**

тигән маҡсаттан сығып эш итә. Шуның өҫтәүенә, шағир йөрәге менән күргәне-һиҙгәне-белгәнен башҡалар күңелен тибрәлтерлек образлы тел, ҡанатлы һүҙ, йөкмәткеһенә ярашлы форма аша еткерә алыу маһирлығына эйә. Был тырышлыҡтар бушҡа китмәйәсегенә өмөтө ҙур. Сөнки бәҫле һүҙ тылсымы мөғжизәләр тыуҙырыуға һәләтле.

Идея-тематик йәһәттән Факиһа Туғыҙбаева ижады ярайһы күп ҡырлы, киң офоҡло: ҡаһарман халҡының тарихи үткәне, ҡаршылыҡлы бөгөнгөһө, билдәһеҙ киләсәге; милләтебеҙҙең йондоҙлоғон хасил итеүсе шәхестәребеҙҙең (Салауат, Бабич, Аҡмулла, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Рәми һ.б.) шағирә күҙаллаған образдары; һөйөп-һөйөлөү кисерештәре; баланың әсәгә, әсәнең балаға мөнәсәбәттәре, дуҫ-туғанлыҡ хистәре; йәшәү һәм үлемгә бәйле уйланыуҙар; тәбиғәт менән мәжүсиҙәрсә бер бөтөнлөктө һынландырыу һ.б. Был идея-тематик даирә, тармаҡланғандан-тармаҡлана барып, тағы ла әллә күпме йүнәлештәрҙе үҙ эсенә ала (беҙ әле балаларға арналған — үҙе бер айырым донъя булған өлөшөн иғтибарҙан ситтә ҡалдырырға мәжбүрбеҙ) һәм юғары рухлы, нескә зауыҡлы, тәрән уй-хәсиәтле замандашыбыҙҙың ил-көн, халҡым тип ысын мәғәнәһендә янған, борсолоп-хафаланған, үҙенә теләктәшлек уятырҙай күркәм образын тыуҙыра.

Факиһа Туғыҙбаева әҫәрҙәрендә күңел торошо, хис-тойғо тирбәлештәре, фекер осош-боролоштары, тәбиғәт-йәмғиәт күренештәре, эреле-

ваҡлы ваҡиғалар — ғөмүмән, әйтергә теләгән уй-ниәт формаға ярашып килә. Был осраҡта йөкмәтке менән жанр берлеге, уларҙың бер-береһенән айырылғыһыҙ, бер-береһенә тығыҙ үрелгән булыуы хаҡында әйтеп булыр ине. Күҙәтеү мәлендә иғтибарға алырбыҙ: шағирә һүрәтләгән даирә тормоштоң үҙе кеүек үк ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы, әммә бер бөтөн, сөнки автор һүрәтләү объекты ниндәй — әҫәрҙә лә шул килеш бирергә ынтыла.

Факиһаның төп ижад майҙаны — шиғыр, әлбиттә. Шиғыр унын өсөн — намыҫ, шиғыр унын өсөн — һағыш, шиғыр унын өсөн — хеҙмәт («Шиғыр»). Уларҙы фәлсәфи, граждандыҡ, пейзаж, интим лирикаға төркөмләргә мөмкин. Күләме яғынан да улар ярайһы күп төрлө. Парсалай ҡабул ителер дүрт юллыҡтары бар, әммә күп түгел. Бына бер нисәүһе:

*Шундай оло ине шатлығы,*
*Ҡояш һүнгән кеүек яй ғына,*
*Уртаҡлашыр дуҫы булмағанға,*
*Шатлыҡ әйләнде бит ҡайғыға.*

***

*Гел һин булып ҡарай миңә йондоҙ,*
*Ымһынғанда уға һонолоп,*
*Бәхеттең дә була бер сиге, тип,*
*Упҡын да бит ҡарай һин булып.*

***

*Битарафлыҡ һаҙлыҡ кеүек йота*
*Кешеләрҙең аҡыл-зиһенен.*
*Һаҙлыҡ төбөнә бит ишетелмәй*
*Орандары батыр-көслөнөң.*

Һирәк-мирәк булһа ла биш-алты юллыҡтары осраштыра. Һигеҙ юллыҡтарҙы автор «Ваҡыт тамғалары» баҫмаһында бергәрәк туплаған (мәҫәлән, «Күңел халәттәре»). Уларҙың исемдәре генә лә уйландырырлыҡ: «Намыҫ», «Илһам», «Нәфрәт», «Өмөт», «Хыянат», «Фатиха», «Көнсөллөк», «Хәйлә» һ.б., һ.б. Әйтергә теләгәнен Факиһа, уртасалап алғанда, егерме дүрт юллыҡ шиғыр эсендә бирә. Күңел кисерештәрен ҡәҙимгә күренештәр аша асып һала. Мәҫәлән, данды ҡиммәтле күлдәк менән сағыштыра: мәлендә ни саҡлы ҡиммәт тормаһын — кейгәне моданан сыҡҡан икән дә. Уйлаһаң, күпселек дан-шөһрәттең дә ғүмерлеһе һирәк бит. Улай ғынамы, бәғзеләрҙең ҡатлы-ҡатлы титулисем-шәрифтәрен үҙҙәренән башҡа бер кем дә белмәй. Бына һиңә дан! (Бәлки, шуғамылыр ҡайһы берҙәребеҙ һәр мәҡәләһе аҫтына бөтә регалийҙарын күрһәтергә тырыша — белеп ҡалһындар! Уйлаһаң, әҙәм балаһына хас йомшаҡлыҡ инде.) Һәр хәлдә кисә яҡҡан усаҡҡа бөгөн йылынып йөрөү егетлек түгел.

Ижад итеүҙе бала табыу менән сағыштырыу бар. Был тән, йән ғазабын — ике ғазапты бергә уҡмаштырып — Факиһа уҡыусыға дүрт юл эсендә ғәжәйеп үҙенсәлекле еткерә алған. Әсә булараҡ, өлгөрөп етәсәк шиғырын, шағирә булараҡ, тыуасаҡ балаһын ҡайғырта ул:

*Мин яр һалһам, йыһан емерелер,*
*Емерелер һымаҡ, эй Алла!*
*Зыян ғына килеп ҡуймаһасы*
*Йөрәк аҫтындағы балаға.*

Күренеүенсә, шағирә ябай ғына күренештәр аша уҡыусы күңелендә (әлбиттә, уҡыусы талантына эйә булған хис-тойғоға бай күңеллеһендә) күп ҡырлы ассоциатив фекерҙәр тыуҙырыуға һәләтле. Билдәле донъяны ул үҙенсә, ҡайтанан аса:

*Астым,*
*астым,*
*өр-яңынан астым,*
*Күптән асһалар ҙа, донъяны...*

Һәм шунда уҡ тәғәйен һығымта ла яһап ҡуя:

*Һәр кем асҡан өсөн яңы баштан*
*Иҫке донъя һаман өр-яңы...*

**(«Һин туҡтама, Ваҡыт!»)**

Ғүмергә йомғаҡ яһағандай уйланғанда ла Факиһа ижадты — осошйырҙы онотмай, шул нигеҙҙә йәшәүенең төп мәғәнәһе ижадта булыуына инандыра:

*Хыялдарҙан күңел төңөлмәне,*
*Мин йәшәүҙән өмөт өҙмәнем.*
*Өҙөлә-өҙөлә,*
*Кеше күҙҙәренән*
*Һине, йырым, һине эҙләнем...*

**(«Йыр»)**

Китаптарында идея-тематик йәһәттән бер-береһенә ауаздаш шиғырҙарҙы берләштергән шәлкемдәр күренгеләй. Поэма жанрында ҡыйыу эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә уңыштарға иреште. Улар күләме яғынан да (әйтәйек өс битлек «Тыуыу» әҫәре, егерме биттән торған «Күкрәк һөтө» поэмаһы), идея-тематик йәһәттән дә ҡабатланғыһыҙ үҙенсәлектәргә эйә. Иң күләмле әҫәре «Ҡаңным — Һомайғоштоң ҡәлғәһе» дастаны (51 бит) — үҙе бер китаплыҡ. «Атылған йыр»ҙы реквием тип тамғалау ҙа ғәмәлгә ярашлы.

Шағирә, башлыса, традицион алымдар менән эш итә. Аҡ шиғыр ҡалыбы ҡайһы бер поэмаларына ғына хас («Тыуыу», «Ҡыңғырау», башҡаларында айырым-айырым өлөштәр).

Факиһа ижадында, әйтергә яраһа, шундай үҙенсәлекте лә билдәләргә мөмкин: теге йәки был тема, образлы фекер шиғырҙан шәлкемгә, шәлкемдән поэмаға, хатта дастанға тиклем «ҙурайыу» осраҡтары күҙәтелә. Минең ҡарамаҡҡа, мәҫәлән, «Тәүбә» поэмаһына юл «Һин икәнһең Урал батырым» шәлкеме аша һалынғайны, ә шәлкем үҙ сиратында айырым шиғырҙарҙан үҫеп сыҡҡайны. «Салауатнамә» иһә айырым шиғырҙарҙы, поэмаларҙы тәбиғи берләштереүҙән хасил булды. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, Факиһа Туғыҙбаева күбеһенсә үҙен поэмала нығыраҡ, тулыраҡ, уңышлыраҡ асалыр төҫлө. Гражданлыҡ, илһөйәрлек мотивтары менән һуғарылған әҫәрҙәре лә уйлы уҡыусыны һиҫкәндерерлек кимәлдә.

Әҫәрҙәренең строфикаһын иғтибарлаһаҡ, 10х9, 8х7 ижекле строфалар өҫтөнлөк итеүен күрербеҙ. 3х3, 4х4, 6х6, 8х8, 12х12 ижеклеләр осрай, ләкин һирәк. Ҡағиҙә буларак, икенсе-дүртенсе юлдар аҙағы рифмалаша, асыҡ рифма ла, ябыҡы ла ҡулланыла.

Ҡапма-ҡаршы ҡуйып һүрәтләү алымының уңышлы үрнәктәре байтаҡ:

*... Йәшәп булмай һинһеҙ генә,*
*Һинең менән дә ҡыйын,*
*Йәшәү миңә — һинең ҡуйын,*
*Үлем дә һинең ҡуйын.*

**(«Ҡойон тиһәң, ҡойон түгел»)**

*Осар күгем, ерләр тупрағым — һин...*

**(«Был ғаләмдең утлы ҡулсаһында»)**

*Гел һин булып ҡарай миңә йондоҙ,*
*Упҡын да бит ҡарай һин булып...*

**(«Гел һин булып ҡарай миңә йондоҙ»)**

*Мәкер ҡәбер ҡаҙа төнөн...*
*Һөйөү бишек яһай көндөҙ...*

**(«Мәкер ҡәбер ҡаҙа төнөн»)**

Факиһа Башҡортостандың ҡабатланғыһыҙ, һоҡланғыс образын тыуҙырҙы. Был образ Башҡортостан исемен телгә алғанда ғына ярала, тип уйлау — ижадты сикләү булыр ине, әлбиттә. Башҡортмон тигәндәргә ғәзиздәрҙән-ғәзиз был образ ябай шишмәне лә әүлиә шишмәһе итеп күреүҙәр («Әүлиә шишмәһе»), Йүрүҙәндә Салауат тынын тойоуҙар («Тауыш бирсе, батыр!»), Балҡантауға меңгәндә башын эйеп ҡалған (фатиха биреп!) ҡылғандар («...Ер-һыуғынам минең»), һеңлеләрҙәй күргән ҡайындар («Ҡайынлыҡҡа ҡайтам») аша тулылана, баҙыҡлана бара. Батырҙар иле булыу менән бер рәттән, көтмәгәндә, ҡолдар иле булып та һынлана. «Нилектән был» тигәнерәк һорау тыуа ҡалһа, «Ил, халыҡ тарихын йөрәгең аша үткәргәндән, уның һис уңалмаҫ яралары менән һыҙланғандан, уларҙы имләр им таба алмай ғазапланғандан» тиергә булыр ине.

Бөгөнгө хаяһыҙлыҡ һәм битарафлыҡтарға ла күҙ йома алмай Рух илсеһе булырҙай шағир. Быныӊ өсөн уға,

рухи бөтөнлөк өҫтөнә, рухи бөйөклөк һәм рухи ныҡлыҡ кәрәктер. Ә бит, һәр осраҡта ла, һәр яҡлап та көслө булып булмай, тигән бер аҡыл эйәһе. Шуға ла Факиһа ижадының йомшағыраҡ яҡтарына ҡағылырға тура килгәндә был хәҡиҡәтте күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышырбыҙ.

Ижадының емешле булыуы менән дә (быға бәйле иң тәүҙә ижади егәрлелек тураһында ауыҙ тултырып әйтергә кәрәк), китаптарын мәлендә, йәғни әҫәрҙәрен йылы килеш уҡыусыһына еткерә алыу йәһәтенән дә — даланлы әҙибә ул Факиһа: 28 йыл эсендә 15 китап сығарыу (ике йылға бер!) бик һирәктәргә генә тәтей. Был һандар артында иркенләп һөйләшерҙәй ысын мәғәнәһендәге ижад булыуы уғата һөйөнөслө.

Факиһаның шағирә буларaҡ тамам өлгөрөп етеүен «Фатихамды бирәм һиңә» (1994 йыл) йыйынтығы дәлилләне. Уның өсөн Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булыуҙы — рәсми рәүештә талантты таныу тип ҡарау зарур. Был да — бәхетлеләр яҙмышы. Йәшерен-батырыны юҡ: һәр осраҡта ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, талант тейешенсә баһалана, тип әйтә алмайбыҙ. Хәйер, Факиһа үҙе лә «Талант илдә бер артыҡ йән» тип раҫлап ҡуя. Әле лауреат көйөнсә (хаҡлы рәүештә!), ә төрлө сәбәптәр арҡаһында ала алмағандар (Талха Ғиниәтуллин, Мәүлит Ямалетдин, Тамара Ғәниева ише рәнйетелгән-ситләтелгәндәр) ни эшләргә тейеш һуң?!

Һүҙ барған китапты асып ебәргән «Көнөм менән төнөм» шиғыры тәрән мәғәнәле образға эйә булыу йәһәтенән дә, был тупланмаға ғына түгел, әҙибәнең бар ижадына асҡыс хеҙмәтен үтәрҙәй кимәле менән дә әһәмиәтле. Хыялында ике аҡҡош осорған — көнө менән төнөн оҙатҡан — лирик геройға (беҙ был сығышта лирик герой менән автор шәхсиәте араһында әллә ни ҙур айырмалыҡ ҡуймабыҙ) ике ҡауырһын ҡалдырғандар икән. Шуларҙың ҡараһы менән ул — йөрәк яраһын, ағы менән тормошто янып яратыуҙан тыуған ғазаптарын, аһтарын яҙасаҡ, туған халҡын, ғәзиз Башҡортостанын төшөнөргә ынтыласаҡ. Кендегең ҡаны тамған ерҙе йөрәгең менән аңлау өсөн илең күтәрелгән бейеклектәргә артылыу, ул кисергәндәрҙең барыһын да кисереү кәрәклеген бар булмышы менән тоясаҡ:

*Башҡортостан,*
*Һине аңлау өсөн,*
*Далаларың кеүек киң күңелле,*
*Йылъғаларың кеүек моң-һағышлы,*
*Урмандарың кеүек мең балҡышлы,*
*Ҡаяларың кеүек бейек, серле*
*Булыу кәрәк,*
*Ерем — Башҡортостан!..*
*Һинең менән бергә яу сабырға,*
*Дарға аҫылырға, сабылырға,*
*Үлдем, тигәс, ҡабат терелергә,*
*Урал батыр булып әүерелергә*
*Кәрәк...*

**(«Эй, яҙмышым минең — Башҡортостан»)**

Артабан шағирә «Ут булырмын, утның ҡалһа әгәр халыҡ» тип ант итәсәк һәм «Мин халҡыма ғына хаж ҡыламын» («Аҡмулла»), «Оҙонайһын өсөн һинең ғүмер, Ғүмеремде һиңә бирәйем» («Һаумы, илем») тип шул антҡа ижады, шәхсән тормошо менән тоғролоҡ һаҡларға тырышасаҡ,үҙен бәпләгән тупрағына бар булмышы менән һөйөү йөрөтәсәк:

*Тыумаҫ ерҙән барыбер тыуыр инем,*
*Һайлап ошо башҡорт ерен генә...*

Сөнки ул үҙен тыуған еренең айырылғыһыҙ бер тере күҙәнәге итеп һиҙә һәм уға ихлас бирелгән, илһамды ла, көстө лә бары унан ғына ала:

*Күңелемде һағыш баҫҡан саҡта*
*Мин далаңа барам йүгереп,*
*Хәл етмәһә — мин имгәкләп барам...*

**(«Башҡортостан»)**

Тыуған ергә бирелгәнлек шағирәне тәбиғәткә мәжүсиҙәрсә бағырға өйрәтәсәк, уның менән бер бөтөн булыуын инандырасаҡ. Тикмәгә генә ул бер шиғырын «Туғанлыҡ» тип атамай, күрәһең:

*Бынау имән ҡараъайҙар менән*
*Бармы икән әллә туъанлыҡ?..*

Икенсе бер шиғырында:

*Аңлайһыңмы мине,*
*Көн сыуаҡта*
*Скрипка тартҡан сыуаҡ көҙ?!*
*Апаймы һин миңә, һеңлеме һин,*
*Серләшәйек икәү кыҙмә-кыҙ...*

Йәки:

*Сылтыратып көләп ебәрҙем мин,*
*Услап һипкән кеџек көмөштәр.*
*Ел йүгерҙе, ҡолон сыңъырҙаны,*
*Ҡушылдылар миңә иңкештәр...*

**(«Көләүем»)**

Тәбиғәт менән туғанлыҡ, ауаздашлыҡ иһә тәбиғилеккә килтерә. Тап шуның өсөн Факиһа Туғыҙбаеваның әҫәрҙәрендә йыш ҡына фекерҙе образдан, образды фекерҙән айырып алыуы ҡыйынырак. Йәғни образ менән фекерҙең бөтөнлөгө барлыҡҡа килә. Ә инде уларҙы айырым-айырым бүлгеләп ҡарайым тиһәң, мәғәнәһеҙлек килеп сығыуы ихтимал. Быны тап ана шул тәбиғилек менән генә аңлатып булалыр. Әйтәйек «Тарпандар» шиғыры. Лирик герой, хистәренә ирек ҡуйып, сал дала иңләп, һыбай елә. Ҡылғандар ҡаршы йүгерә, ер сайҡала. Шул саҡ ҡылғандар артынса:

*Осҡандай тарпандар өйөрө...*
*Атҡандар,*
*Ә улар даламда,*
*Артҡандан, имештер, артҡандар.*
*Баш бирмәҫ ут кеџек кейектәр...*
*Ҡушылыр толпарым —*
*Өйөрмә сыъаръан тарпанъа:*
*Ялкынъа ялкындар ҡушылыр...*

Тарпандар, — ғөмүмән, ирек, азатлыҡ, тәбиғилек символы. Был шиғырҙа иһә тарпандар — тәбиғәт балаһы — башҡорттоң үҙен кәүҙәләндерә. Һәр дәүерҙә «Ҡош булып күккә менергә, Балыҡтай һыуҙа йөҙөргә, Боландай ерҙә елергә» (Салауат Юлаев) ынтылған милли рухыбыҙҙы һынландыра. Атылған, аҫылған, сапҡылаптуралған (артыуын инде лирик герой, «имештер» тип, шик аҫтына ҡуя. Ерен ҡаны менән һуғарған аҫабаның артыуы, ысынлап та, икеле — ысын башҡорттоң артыуы иһә бөтөнләй мөмкин булмаған хәл), әммә Факиһа кеүек шәхестәребеҙгә милли рухиәт «ҡан хәтере» аша тапшырылған.

Йәки «Сабый тауышы»ндағы Әсә менән Бала берлеге. Ҡайҙа, ниндәй халәттә булыуына ҡарамаҫтан, сабыйы тауыш биргән саҡта, ярҙамға мохтажлыҡ кисергәндә әсәмен тигән йән эйәһе «Түбәнлектәрҙән — тауҙарға, бар донъяны ҡармаған төндән ҡояшлы таңдарға» ынтылырға, сабыйы эргәһендә булырға үҙендә көс табасаҡ. Сөнки был уның үҙе өсөн дә (**кеше** булып ҡалыу өсөн!), балаҡайы өсөн дә (уны **кеше** итеү өсөн) бик кәрәк.

Факиһала яҡындарына, кешеләргә кәрәклелек тойғоһо көслө. Шуның өсөн ул күтәрелә алмаҫтай хәлдә ҡалған осраҡта ла аяғына баҫырға, зәңгәр күгендәге ал Ҡояш-әсәһенә Һомайғош ҡыҙылай ҡанат ҡағырға, уға — йәшәүгә табан — осорға үҙендә рухи ҙа, физик та көс таба. Улай ғына ла түгел әле:

*Тыуъанһың икән һин —*
*Кәрәкһең йыһанъа, —*

тип яуаплылыҡ үлсәмен йыһанғаса күтәрә.

Күренеүенсә, шағирә аҡыл һатмай, йәғни аҡыллы булып ҡыланмай. Уға яһалмалылыҡтың хәжәте лә юҡ. Үҙенсәлекле ҡараш-һығымталар, баһадөйөмләштереүҙәр хыялға бай авторҙың тирә-йүнде рәссам күҙлегенән күреүенә, хәл-ваҡиғаларҙы шағирә булараҡ барлауына, ассоциатив фекерләү һәләтенә бәйле. Ҡыҙғаныс, әммә бөгөнгө тормошобоҙ, башлыса, яһалмалыҡтарҙан ғына ғибәрәт шул. Хатта

аҙыҡ-түлек тә суррогаттарҙан торған ваҡытта әҙәм балаһы ла роботҡа яҡынайғандан-яҡыная бара. Үҙе уйлап сығарған виртуаль донъяны ул йәнле аралашыуҙан өҫтөнөрәк күрә. Ихласлыҡ, кеше хәленә инә белеү кеүек сифаттарҙы яланғас рационализм, бары тик матди иҫәп-хисап алыштыра башланы хәҙер. Фәкиһаның лирик геройы бындай ысынбарлыҡтан тәбиғәт ҡосағына ҡасып ҡотолорға теләй (беҙ бындай күренешкә Хәсән Назар ижадын тикшергәндә лә тап булғайныҡ):

*Ҡолаҡтарым тонһан*
*моңһоҙ йырҙан,*
*Тыңлайымсы ямғыр ҡойһанды...*

**(«Һауа монологы»)**

Ауыр мәлдә тәбиғәткә һыйына алыу, уның менән аңлаша алыу тәбиғилектән бит. Шуға лирик геройҙың һағыштарын да күк менән ер тарата:

*Күккә баҡтым. Һағышымды*
*йотто*
*Күк әҙ-әҙләп, талғын, яй ғына.*
*Йәнгә тулды күктең зәңгәрлеге,*
*Күңелемдә ҡояш, ай ғына.*
*Көндәр үтте.*
*Ер йөҙөнә баҡтым,*
*Һағышымды йотто һыу-урман.*
*Йәнгә тулды ерҙең йәшеллеге,*
*Ер ҡеҙрәте менән һау торам.*

Уның һөйгәненә үҙе өсөн айырата ҡәҙерле — сафлыҡ билдәһе булған тәбиғәт күренешен иң-иң ҡәҙерле бүләк итеп бирергә теләүе лә аңлашыла:

*Минән һуң да улар йәшәр, тиеп,*
*Бүләк итәм һиңә сауҡалыҡ.*
*Аҡ ҡайындар йырлар йырҙарымды,*
*Елгә, дауылдарға сайҡалып...*

**(«Сауҡалыҡ»)**

Антын боҙған йәрен дә ул кисерергә әҙер, тик:

*Минән түгел, теге имәндәрҙән*
*Ғәфү һора, йәнем, теҙләнеп...*

**(«Минән түгел, теге имәндәрҙән»)**

Үҙен тәбиғәттең аңлы өлөшө итеп тойғанға, Фәкиһә тирә-йүнгә вәхшиҙәрсә ҡараш менән һис кенә лә килешә алмай. Иртәгәһен уйламай тәбиғәттән бары алыу-һурыу-имеү, ҡырыу-бысратыу сәйәсәтенең ауыр эҙемтәләрен күрһәтә:

*... Сәрмәсәндең һыуы ағыр-аҡмаҫ —*
*Афәттең дә ҡаты афәте...*
*Сәрмәсәндән ҡалған исем генә —*
*Үҙәнендә үҫкән ҡый үлән...*

**(«Таң һыуы»)**

Ә ни өсөн әҙәм балаһы үҙе ултырған ағас ботағына үҙе үк балта саба һуң?! Сөнки:

*Тәхеттәге батша кеүек,*
*Креслола күпме түрә*
*Ерҙе, шаҡмаҡ-шаҡмаҡ итеп,*
*Юғарынан ғына күрә...*
*Тәхеттәге батша кеүек,*
*Креслола күпме түрә*
*Юғарынан халыҡты ла*
*Һандар итеп кенә күрә...*

**(«Ҡыңғырау»)**

Ошондай «шаҡмаҡ күҙҙәр», һаҙлыҡ киптереп, сәсеүлек киңәйтәбеҙ, планды арттырып үтәп, күкрәктәргә орден-миҙал тағабыҙ тип, күпме күҙ йәшендәй саф шишмәләребеҙҙе юҡҡа сығарҙы (әлегеһе мәлдә иһә тағы ла ҡурҡынысыраҡ эксперименттар үткәрелә — быныһы инде һыналған ысул менән (!) «перспективаһыҙ» ауылдарҙағы мәктәптәрҙе «оптималләштереү»). Был көнүҙәк теманы Фәкиһә «(Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр» поэмаһында асырға ынтыла. Был осраҡта ул уҡыусы күңеленә туранантура өндәшеүҙе кәрәкле таба:

*Эй бәндә!*
*Йәнең бармы тәндә?*
*Һәр ағастың,*
*һәр үләндең,*
*һәр ҡоштоң,*
*һәр кейектең*
*Ҡарғышы төшмәҫ, тимә, һиңә.*
*Кипкән йылға ҡоролоҡ*
*булып язалар,*
*ағтыр бәлә-ҡазалар.*

*Йәне күккә осҡан һандуғас һиңә*
*Моңһоҙлоҡ булып ҡайтыр —*
*Алйоттар артыр.*
*Үҙеңде үҙең үлтергәнгә ила, бәндә!*
*Үҙеңдең йортоңдо үртәгәнгә*
*ила, бәндә!..*

**(«Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр...»)**

Күренеүенсә, әҫәрҙә иғтибарҙы йәлеп итерлек, хәтерҙә оҙаҡ йөрөрлөк юлдар байтаҡ, әммә ул, тотошлай алғанда, поэма булараҡ, эшләнеп бөтмәгәндәй тәьҫир ҡалдыра. Шуғамылыр Факиһа был темаға «Ҡыңғырау»ҙа ла мөрәжәғәт итә. Быныһы Абдулхаҡ Игебаевтың «Оран һала Ер-Әсә»һен хәтерләтә, әммә уны ҡабатламай. Силәбе еренең атом фажиғәһенә дусар ителеү касафаттарын асыҡлай автор. Әҙәм балаһына ҡыңғырау һуғып өндәшә (ә ҡыңғырау — уның йөрәге. Аңлы рәүештә өҙөктө оҙонораҡ бирербеҙ — фажиғәне күҙ алдына баҫтырып, тағы ла бер тетрәнеп уйланыу өсөн):

*... Көмөш ҡыңғырау булһа йөрәгем —*
*һөйләр ине кәрәген!*
*Борон-борон ата-бабам*
*һыуын эскән Динес йылғаһы —*
*Ҡыҙылтүш күленән юл башы —*
*терелер ҙә*
*әкиәттәгенән дә күркәмырак*
*яуыҙлыҡты итер ине бәйән —*
*әле ул ауыҙлыҡлы:*
*яр ситтәре сырмалған тимер*
*сым менән —*
*һөйләй алмай хатта ым менән!*
*Ул һөйләр һүҙҙе мин һөйләйем,*
*Хаҡым бар —*
*Халҡым бар!..*
*Э-э-э-й-й!*
*Бер тере йән ҡалмай күпме ауылда*
*Силәбе лә тигән яҡтарҙа —*
*Йәнем аҡтарыла,*
*ҡушыла бит аһым*
*йорт-еренән генә, ай, ҡыуылған*
*мең-мең кешеләрҙең аһтарына.*
*Туғандарым минең,*
*Беҙ бит — кеше!..*
*Ҡайтмағыҙ, оҙағыҙҙы эҙләп,*
*һандуғастар,*
*ҡарлуғастар, торналар!*
*Ҡайта күрмәгеҙ,*
*һеҙҙе бында көтә әжәл...*

Аңлашылыуынса, шағирә иң өҫтә ятҡан әҙәмтәләрҙе генә күреүҙән һыҡранмай, ә «тәбиғәтте яулау»ҙан кешенең рухы имгәнеүенә ныҡыраҡ әсенә.

Милли рух көслө булғанға, Факиһа Туғыҙбаеваның, тамырҙарҙы юллап, тарихҡа инеп китеүе, ауыҙтел ижадын ентекле өйрәнеүе, заманға ярашлы файҙалана алыуы тәбиғи ине, әлбиттә. Шуға ла уның Урал батыр образына бөгөнгө Һомай күҙлегенән бағыуы (һәр хәлдә «Һин икәнһең Урал батырым» шәлкемен мин шулай аңланым), Заятүләк менән Һыуһылыуҙы үҙ әҫәрҙәрендә терелтеүе («Киләсәкте уйлайым мин»), Һомайҙы бөгөнгө әҙәбиәт күгенә осороп, ҡаңнылар төбәген был Рух инәһенең ҡәлғәһеләй күреүе, Аҡбуҙатты алып ҡайтыуы, азатлыҡ яулашып, иң бәләкәстәргә ҡыҙыҡлы баҫма нәшерләүе («Ут эсендә бейей Аҡбуҙат») — халҡыбыҙҙы ҡайтанан Аҡбуҙатлы итергә ынтылыуы, миңә ҡалһа, уҡыусы тарафынан ихлас ҡабул ителде.

Шағирә Шүлгән мәмерйәһе, Балҡантау, Янғантау, Торатау, Асылыкүл, Ҡандракүл, Каруанһарай кеүек башҡорт өсөн изге урындарҙы тағы ла изгеләштерә, үрҙә телгә алған Башҡортостан образына яңы һыҙатбиҙәктәр өҫтәй.

Башҡорт уҡыусыһына яҡшы билдәле бүре образы Факиһа Туғыҙбаева ижадында бер нисә, ҡайһылыр осраҡта ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә ҡулланыла: 1) риүәйәттәргә ярашлы, ҡасандыр ата-бабаларыбыҙҙы Уралға алып сығыусы, шуға ла илебеҙ-халҡыбыҙҙың рухын һаҡлаусы-ҡурғалаусы януар («Уралтауҙа илай Инә Бүре»); 2) ҡанһыҙлығы менән айырылып тороусы йыртҡыс («Ике бүре

сыҡты юлға»); 3) үҙен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла өйөрөн (балаларын) яҡлаусы-һаҡлаусы инә кейек («Бүрене һуң кем ятатһын инде», «Төнгө буран үкһей»).

Шәжәрә, толпар (ат), уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс һ.б. образдар милли колорит тыуҙырып ҡына ҡалмай, ә әйтәһе фекерҙе тейешенсә еткерергә ярҙам итә. Мәҫәлән, әрем образы төрлөсә балҡый. Берсә ул дарыу булараҡ әсе:

*Әрнеүемде баҫыр өсөн*
*Эсәмен әрем һыуын...*

**(«Эсәмен әрем һыуын»);**

*берсә әселеге менән әсе:*
*Мин әреммен үҙе әремгә...*

**(«Һәр берәүгә ҡояш булғым килмәй»);**

берсә тыуған яҡтың әрһеҙ ҙә, ғорур ҙа бер биҙәге:

*Юлсыларҙы аяғынан йығып,*
*Буран айҡағанда ер өҫтөн.*
*Башын һоноп көрттәр араһынан,*
*Хәтерләтер әрем ер төҫөн...*

**(«Йәйҙәр китә ҡоштар ҡанатында»)**

Кирза итеккә лә үҙенсәлекле мәғәнә һала автор. Бер шиғырҙа ул был образ аша кешенең эске донъяһы менән тышҡы булмышының тап килмәүенән әсе көлһә:

*Костюмдарың бик шәп тә бит —*
*Аяғыңда кирза итек...*

**(«Эй үҫтең һин юғарыға»);**

икенсеһендә инабатһыҙ тормошто һынландыра:

*Кирза итек иҙгәндә лә...*
*Ишетелә мәңгелектән*
*Ҡош һайрауы ҡолаҡҡа.*

**(«Эсәмен әрем һыуын»)**

Буран образына ла туҡталмай ярамаҫ. Ул әле телгә алынғандарына ҡарағанда ла йышыраҡ ҡулланыла һымаҡ. Йә ул лирик геройҙың ҡылығын хупламаусы тәбиғәт күренеше:

*Шулай инде...*
*Буран ҡоторона —*
*Һинең менән сыҡһам мин юлға...*

**(«Яҙа»);**

йә хәтерҙә йөрөтөргә теләмәгән мәлдәрҙе «күмеп китеүсе»:

*Мин буранға аттым*
*Ғүмеремдең*
*Туҙған шәлдәй иҫке көндәрен...*

**(«Һыуыҡ ине, үҙе оҙон ине...»);**

йә лирик геройҙың кисерештәренә тап килгәнгә серҙәштәй яҡын ҡабул ителеүсе:

*Төнө буйы үкһеҙ буран менән*
*Үкһей уйым, үкһей урамда.*
*Сабый булып буран илағанда,*
*Бүреләр ҙә олор урманда...*

**(«Төнгө буран үкһей»);**

*Әллә ниңә буран ҡосағында*
*Аҡ һыныңды мин йыш шәйләйем...*

**(«Йондоҙло шәл»);**

йә билдәһеҙлек булып күҙаллана:

*Аҡҡош булып осҡан хаттарым...*
*Бурандарҙа ҡала аҙашып...*

**(«Аҡҡош булып оса хаттарым...»)**

Бер үк образды төрлөсә уйната алыуҙа мин, тел маһирлығы, күҙәтеүсәнлек һәләтенән тыш, һүҙ барған тәбиғилекте лә күрәм: автор ҡабатланғыһыҙ мәлдәрҙе күңел торошона ярашлы ҡабул итә. Мәлдәр ҙә, күңел торошо ла һәр саҡ үҙгәрештә — шуға ла билдәле күренештәр ҙә, әйберҙәр ҙә яңыса балҡып китә икән, ғәжәпләнәһе түгел. Ижадсыны ҡылыҡһырлар сифат был, уның бер үткән юлды ҡабат-ҡабат таҡырламауын күрһәтеүсе билдә.

Әйткәнебеҙсә, Факиһа, кәрәк икән, халҡын йылытырҙай, юлын яҡтыртырҙай ут булырға әҙер. Ут образына бәйле Ғайса Хөсәйенов: «Факиһа, һин, Максим Горькийҙың Данкоһылай, йөрәгеңде, гүйә, күкрәгеңдән һурып алып, шиғырҙарыңда ут

кеүек яҡтыртаһың», — тигәйне. Хәтергә уйылырҙай сағыштырыу. Әле мин шиғырҙа күтәрелгән проблеманың («Ут булырмын, утһыҙ ҡалһа әгәр халыҡ») икенсе яғына иғтибар итмәксемен. Хикмәт шунда: Факиһа Туғыҙбаева ижадынан асыҡланыуынса, халыҡтың утһыҙ сағы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күберәк, күрәһең.

*Шомло донъя...*
*Илем буйлап тағы һуйыш бара...*

**(«Баррикада»)**

Утһыҙлыҡтан (етәкселектең ожмахтай байманлыҡта, халыҡтың иһә төптө икенсе төрлө йәшәү мөмкинлектәре, принциптары, ҡиммәттәре арҡаһында тормоштоң мәғәнәһен, ҡыҙығын юғалтыуҙан, хатта киләсәктә лә өмөт күренмәүенән, шул сәбәпле сараһыҙлыҡтан) алда телгә алынған көн менән төн әҫәрҙән-әҫәргә шомға тула бара, ни өсөн тиһәң:

*Бишек йырын йырлар шағирҙары*
*Йырламайҙар — улар ҡол инде...*

**(«Минең илем»)**

Быныһы инде ысын мәғәнәһендә — трагедия: шағир — Рух илсеһе, тигәйнек, ә ул ҡол (икмәк хаҡына ҡол булғанмы, әллә ҡолдарға баш булыу өсөн, ҡәләмдәштәре араһында иң юғары дәрәжә алыуына ҡарамаҫтан, ҡол булғанмы — быныһы икенсе мәсьәлә). Ә шағир — халыҡтың теле! Әле XVIII быуатта уҡ Ҡарас сәсән үҙенең халыҡтың теле булыуына баҫым яһай, әммә уның шундай иҫкәрмәһе лә бар: «Эйе, мин — халыҡтың теле, тик халыҡ ауыҙын асырмы икән?» (Башҡорт халыҡ ижады: риүәйәттәр һәм легендалар. Өфө, 1980, 175-се бит.) Был һорау бөгөн дә ни тиклем актуаль! Ауыҙын аса аламы халыҡ (һүҙ әйтәйем тип, ауыҙын асһа, үпкәһе күренмәйме?), уның исеменән сығыш яһай аламы шағир? Сығыш яһай ҡалһа, артынан эйәртерлекме, һүҙенә ҡолаҡ һалырлыҡмы, әллә һүҙе үҙенән дә ары китмәйме? Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаев раҫлауынса: «Батырҙар күп, ләкин шағир түгел, Шағирҙар күп, батыр түгелдәр...».

Факиһа ла тикмәгә генә: «Аҡса хаким хәҙер», — тип аҙарынмай. Әммә бындай күренеш менән ризалашмай уның йәне — дау күтәрә:

*Осһоҙланмаҫ өсөн, ана, Пушкин*
*Дуэлдәргә сыҡҡан йөҙгә-йөҙ...*

Артабан:

*Беҙ бахырҙар ғына түҙәбеҙ ул,*
*Тубыҡ ҡатҡан мәңге теҙләнеп, —*

тиеүе лә сараһыҙлыҡтан өҙгөләнеү, ошондай хәлгә төшөргән көнләксә власть әһелдәренә ләғнәт.

Факиһа ижадына бәйле, Мостай Кәрим (1994 йылда): «...шағир үҙенең күңел ҡылдарын скрипка көйләгән шикелле көйләй булыр. Әгәр һағышҡа көйләһә, шул нота дауам итә, уйланыуға көйләһә, уйланыу китә, мөхәббәт нотаһына ҡағылһа, шул яңғырай, зар ҡылдарына ҡағылһа, зар артынан зар китә», — тигәйне. Фәһемле фекер. (Әйткәндәй, скрипка менән сағыштырыу шағирәгә оҡшап ҡаласаҡ, һәм ул был образға ҡайта-ҡайта мөрәжәғәт итәсәк.) Аҡыл эйәһе булған халыҡ шағиры, бер уйлаһаң, йәшерәк ҡәләмдәшенең инде көйләнгән күңел торошона тоғролоҡ һаҡлауын хуплай ҙа һымаҡ, ә, икенсе яҡтан, һинең ҡәҙимге көндәлек ыңы-зыңың, аһ-зарың һәр осраҡта ла урынлы булмауына бик ипле генә ишаралай ҙа кеүек. Үкенескәлерме, был зарҙар ишәйә генә баралыр төҫлө (авторҙың олоғайыу ғәләмәтеме был, әллә халыҡтың хәл-торошо шуға сәбәпсеме — өҙә генә әйтеүе лә ҡыйын). Хатта ки ул ижадтың һәлмәк кенә бер йүнәлешен тыуҙырғандай. Ябайлаштырмайынса, ошо тарафҡа иғтибарлабыраҡ ҡарайыҡ әле. Әйтәйек, башҡа ҡарашҡа урын ҡалдырмаҫлыҡ ҡәтғи рәүештә:

*Донъя — боҙлауыҡ мәмерйә... —*

**(«Юлыма тоҙ һипмә, дуҫым...»)**

тиергә нигеҙ бармы икән? Лирик геройыбыҙ ут булырға йыйынғайны түгелме? Ут булып, ниңә шул мәмерйәне яҡтыртмаҫҡа (иретмәҫкә), бәлки, археологтар күрә алмаған яҙыуҙар табылыр, һис юғы өшөгән-туңғандар йылынып, ел-ямғырҙан ышыҡланып сығыр ине. Шиғыр — күңел торошо, тибеҙ икән, бәлки, былар үтеп китә торған осраҡлы ғына мәлдәрҙер? Юҡ икән шул!

«Уҙғанмын» шиғырында ҡаршылыҡлы донъя алдында ул бөтөнләй бирешеп үк ҡуя:

*Нәфрәтләнеүҙән мин уҙғанмын,*
*Рәнйеү-әрнеүҙәрҙән уҙғанмын,*
*Юҡтан ғәрләнеүҙән уҙғанмын —*
*Тамам туҙғанмын!*

**«Бикле кәмә»лә:**

*Һығылып та төшәм*
*көсһөҙлөктән:*
*Ҡулымдағы зәңгәр ишкәктәр*
*Ҡанат түгел,*
*Инде ҡанат түгел,*
*Бары күсәк , ауыр күсәктәр...*

**«Әсәйем менән һөйләшеү»ҙә:**

*Кеше ҡайғыһы юҡ кешеләрҙә,*
*Күҙҙәр үсал, ҡаштар емерек.*
*Кеше ҡайғыһы юҡ кешеләрҙә,*
*Кешеләрҙә тамаҡ ҡайғыһы...*

Улай ғынамы:
*Сығып китке килә башты алып*
*Йәһәннәмгә, әллә ҡайҙарға...*

**(«Хәбәр көтәм»)**

Икенсе бер шиғырында:

*Сүгә бара иңбаштарым —*
*Торалмайым күкте терәп...*
*Йөрәгемә баҫып өсөн*
*Ҡалмаған бер йәшел япраҡ...*

**(«Миләш бешкән»)**

Артабан:
«Был ни хәл һуң?» —
Тиеп бер кемгә лә
Өндәшке лә килмәй.
Арыҡкан...

**(«Мәрҫиә»)**

Ә арыған кешенән (шағирҙан!) ни көтәһең?!

*Ғүмер туҙҙы,*
*Уҙҙы-уҙҙы инде*
*Йотоп күҙ-йәш йәки туҙанын...*

**(«Ғүмер туҙҙы»)**

*Тупаҫлана бара ғәзиз йәнем,*
*Тупаҫлана йөҙөм, һәр бармаҡ.*
*Ғүмер генә тигән арауыҡты*
*Сәнске дегәнәктән аралап...*

**(«Өлөшөмә генә тейгән тормош»)**

Ахыр сиктә:

*Аҫты өҫкә килә донъяларҙың*
*Тамуҡ та бер миңә, йәннәт тә.*
*Бөтөн ғәләм күнгән ошо хәлгә*
*Ни ҡылайым инде йәлләп тә? —*

тип әйтеп һала... Был аһ-зарҙар донъянан төңөлөү ауаздарына ла әйләнгеләп китә:

*Ҡая ише инем мин ҡасандыр,*
*Таныр҃армы хәҙер тауҙар һуң?..*
*Йәш ҡайындай инем мин ҡасандыр,*
*Ҡайыным, тип хәҙер кем әйтер?..*
*Телдәремдә бал да майҙар ине,*
*Ниңә хәҙер тоҙҙоң асыһы?..*

**(«Сафтыр, тиеп, даръяларға төштөм»)**

*Иртәгә көн бөткән кеүек,*
*Әрнергә лә әрнергә...*
*Йәндә бөртөк нур ҡалмаған*
*Йәнем, гүйә, мәмерйә...*
*Мин еңелдем...*

**(«Иртәгә көн бөткән кеүек...»)**

*Кешегә кеше — яу,*
*Кешегә кеше — үс.*
*Үҙ көсөмә генә йәшәгәнгә*
*Был хәйләкәр донъя ала үс...*

**(«Байлығым юҡ минең, дәрәжәм юҡ...»)**

*Күпме ғазаптарға тарыйым мин*
*Эшләй-эшләй йөрәк ҡушҡанды...*
*Ә фәрештә инде булып булмаҫ,*
*Тормош әйләндерҙе ҡолона...*

**(«Бизмән»)**

Лирик геройҙың ошолай өҙгөләнеп-бәргеләнеүҙәренә бәйле уйланғанда уның:

*Мин көслө, тип килмәй*
*алдашҡым! —*

тиеүе күпте аңғарта булһа кәрәк. Исем-шәрифе йәмәғәтселек тарафынан ололоҡлап ҡына телгә алынған, данынан да өлөшһөҙ ҡалмаған, етәкселек яғынан үгәйһетелмәгән авторҙың (шағирә, үҙе лә һиҙмәҫтән, «Зарланыуы оят инде миңә» тип ҡуя. «Ғүмер музыкаһы» шиғырында «Скрипка икән дә ул минең яҙмыш... Илап туймай», тип тә өҫтәй) аҙарыныуҙарын — халыҡтың иңрәүе итеп ҡарағанда ғына тулыһынса аңларға мөмкин.

Шағирмын тигән шағир — иленең, халҡының рух барометры. Бөгөнгө хаяһыҙ тормошта, матди байлыҡ ҡына төп үлсәм, бары ул ғына барыһын да хәл итә, тип баһаланған йолҡ-ҡослоҡ солғанышында һығылмалы йәш ҡайындың утынға әйләнеүенә, бал тамған телдән тоҙ әсеһе килеүенә, бөртөк нур ҡалмаған йәндең тамам тупаҫланыуына аптырайһы юҡ. Аяуһыҙ ысынбарлыҡ фәрештәләй заттарҙы ла (бәғзе шағирҙарҙы ла!) ҡолға әйләндерә. Тимәк, ҡатын-ҡыҙ затынан булған лирик геройҙың һығылып төшөүе, рәнйеүҙән, ғәрләнеүҙән, нәфрәтләнә белеүҙән уҙып, бындай тормошта тамам туҙыуы, арыуы, еңелеүе, йәһәннәмгә олағырға әҙер булыуы — бөгөнгө көнитмешебеҙҙең бер яғы ул. Уны — тормошобоҙҙоң күләгәле яғы (йәнәһе, һәр нәмәнең дә күләгәһе була), тип тыныҫланырға, тыныҫландырырға тырышыусылар ҙа етерлек булыр. Эйе, шағирә данлаған алһыу таңдар ҙа, сыуаҡ көндәр ҙә, айлы төндәр ҙә бар әлегә. Әлегә (!) бар. Әммә рухи донъяның ярлылана барыуы көн кеүек асыҡ. Ул рухи донъяның төнө — аййондоҙһоҙ ҡараңғылыҡ, көнө — ауыр болоттар менән ҡапланған, шомло, шыҡһыҙ, ел-дауыллы, киләсәгенә — өмөт самалы. Ә бит кешеләге кешелек сифаттарын юғары кимәлдәге рухиәт кенә һаҡлай ала. Ҡурҡыныс күренһә, ҡомға башын тығып, ҡотолдом тип ҡыуаныусы дөйәғош хәлендә булмайыҡ тиһәк, тормоштоң был иләмһеҙ һәм иманһыҙ яғын да онотторға тейеш түгелбеҙ. Ул яҡҡа эләгеп өҙгөләнеүсе, Уралынан яҙып, ҡанаттарын ҡанатыусы Һомайғоштоң ғазаптарына эсендә йәне булғандарҙың битараф ҡалыуы мөмкин түгел!

Әйткәнебеҙсә, Фәкиһә Туғыҙбаеваның мөғжизәләргә бай илендә һөйөп-һөйөлөүгә лә урын етерлек. Лирик герой мөхәббәттә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас ғорур, сәмсел:

*Ос ҡошсоғом! Ос һин,*
*Мөхәббәтем!*
*Иламайыҡ! Ғорур булайыҡ!*
*Ҡолаһаҡ та, беҙ абынып түгел,*
*Йәшендәрҙән яныпҡолайыҡ.*

**(«Мәрхәмәтле булсы, Мөхәббәтем!»)**

Хатта үлемесле хәләттә лә һынын тура тота:

*Тынғы бирмәй йәндәремә*
*ғорурлығым,*
*Үлде йәнем, ҡалды бары*
*ғорур һыным...*

**(«Онотаһың бергә кискән һыу-уттарҙы»)**

Бер үк мәлдә ул уғата тыйнаҡ, сабыр:

*Ялбарыуым йәндәремдә һыҙлай,*
*Юҡ, ысҡынмаҫ ләкин телемдән...*
*...Әйтелмәгән һөйөү һыҙҙарем бит*
*Муйыныма аҫҡан таш кеүек...*

**(«Мин юҡ һинең өсөн»)**

Йәки:

*Кисер мине әйтәлмәгән өсөн*
*Һөйөүемде һиңә, үкталып.*
*Кисер мине меңдәр араһында*
*Ҡарап ҡалған өсөн түкталып...*

**(«Кисер мине»)**

Икенсе бер урында:

*Күңелемдә әйтелмәгән һөйөү*
*Әйтелмәгән рәнйеш, аһ-зарҙар...*

**(«Ҡырыҫлыҡ»)**

Артабан:

*Иң ҡәҙерле һүҙҙәр күңелемдә*
*Тороп ҡалды төптә, тәрәндә...*

(«**Көткәйнем мин һинән башҡа һүҙҙәр...»**)

Эйе, ул сабыр. Һөйгәнен дә Одиссейын көткән Пенелопалай көтөргә әҙер. Әммә ҡул ҡаушырып ҡына ултырмаясаҡ. Ваҡыт үткәреү өсөн түгел, ә бергә булған мәлдәрҙең балҡышын күңеленән ҡайтанан кисереп, йондоҙло шәл бәйләйәсәк:

*Ҡыштар оҙон.*
*Ҡайтмай оҙаҡланың.*
*Көтәм һаман...*
*Күпме көттөрҙөң?*
*Үкһеҙ аҡ буранлар үкһегәндә,*
*Ап-аҡ бер шәл бәйләп бөтөрҙөм.*

*Һайлап алып бүләк иткәйнең һин*
*Яҡты төндө йондоҙ сәйләнен.*
*Күңелдәге уның балҡышын мин*
*Йондоҙло шәл итеп бәйләнем...*

(«**Йондоҙло шәл»**)

Ә мөхәббәте уның иҫ китмәле көслө. Уны:

*Туҡтата алмай шул*
*Мең әмер,*
*Тыя ла алмай шул*
*Мең әмир,*
*Ҡурҡыта алмай шул*
*Мең вәзир,*
*Һин — батша, мин — батша*
*Беҙ хәҙер...*

(«**Мин һине урлайым»**)

Быңдай эскерһеҙ һөйөүҙе йәшереп тә булмай икән:

*Бәхетемде тәрән йәшерҙем мин*
*Күкрәгемдең генә түренә.*
*Ул күҙемдән әммә, һәр һүҙемдән,*
*Атлап килеүемдән күренә...*

(«**Һин һөйәһең мине, минең Аллам!»**)

Һөйөүҙә баҫалҡы, тыйнаҡ, сабыр лирик герой ижадта тәүәккәллерәк сығыш яһай, ихласыраҡ та:

*Аймылышты уйым — аҙаштым,*
*Бәхетһеҙлек кенә аҙашым;*
*Бер өмөтһөҙ уйҙар — ташламай,*
*Баҫа улар мине асмандай...*

Ә нилектән был бәхетһеҙлек? Яуабы бар:

*Аймылышты уйым —*
*яңылыштым.*
*Йырҙы икмәккә бит алыштым...*

(«**Аймылышты уйым — аҙаштым»**)

Фекер тура әйтелгән, икенсе урында ул образлы яңғыраясаҡ:

*Аҡты ҡаралар҈ан айырам, тип*
*Әйтәлмәйем инде хәҙер мин.*
*Йырҙан ерғә төшкән аҡсарлаҡтар*
*Ҡарға менән супләй әҙер ем.*

(«**Зәңгәр тулҡындарын һалмаҡ ҡаға...»**)

Әгәр ҙә һүҙ уйнатыу өсөн генә әйтелмәһә, бында ижадсы өсөн һынылыш осоро сағылыш тапҡан. Артабанғы ижад ихлас дауам итәсәкме, күтәрелгән рухи бейеклектәр кимәленән төшмәйәсәкме, әллә икмәк, дан юлынан китәсәкме — быныһы әлеге шул рухи ныҡлыҡҡа бәйле (автор иһә, шөкөр, икмәгенән дә, данынан да мәхрүм ителмәгән. Алла бирһә, был тәңгәлдә хафаланырлыҡ сәбәптәр ҙә юҡ, булмаҫ та). Йәнә лә бер күренеште күҙ уңында тотайыҡ: яуыз ниәтленең ысын мәғәнәһендәге ижадсы булып ҡала алыуы икеле (Зәйнәп апай Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәте быға классик дәлил). Факиһаның ниәттәренең изгелегенә шикләнеүе мөмкин түгел (әлеге шул рациональ солғаныш ниәттәрҙе үҙгәртергә мәжбүр итмәһә). Икенсе яҡтан, ижад — ул үҙеңде үҙең күтәреү, әйтергә яраһа, үҙеңдән юғары күтәрелеү. Шул осраҡта ғына һиңә башҡалар күрә һалып бармаған донъялар асыла:

*...Күкте баҫҡан болот өйөмдәре*
*Ҡояштан бит барыбер түбәндә.*
*Болот аша уны күреп була,*
*Түбәң күктәргә үк тейгәндә...*

(«**Күкте болот баҫты»**)

Шуға ла Факиһаның:

*...Үҙ-үҙемдән талантлыраҡ,*
*Үҙ-үҙемдән ҡөҙрәтлерәк,*
*Үҙ-үҙемдән ҡиммәтлерәк, —*

була алырына ышанаһың. Унын, кәрәк икән, алғы һыҙыҡҡа, тура мәғәнәһендә, көрәшселәр сафына баҫа алыуы ла шик тыуҙырмай. Әлбиттә, һабантуй майҙанынан, митинг трибунаһынан айырмалы рәүештә был көрәш-тартыш ябайҙарҙан түгел. Еңеүгә лә өмөттәр самалы. Булмышы менән оптимист шағирә «Төҫһөҙләнә бара хыялдарым» тип тә әйтеп һаласаҡ. Аптырарға ла кәрәкмәйҙер, бәлки, сөнки бөгөнгө ысынбарлыҡта Рух инәбеҙ булған бүре үкһей:

*Уралтауҙа әрнеп илай Бүре,*
*Инә бүре, беҙҙең Рух Инәһе...*
*Рәнйейҙер ул Башҡорт балаһына,*
*Төштөң, тиеп,*
*һин ҡыҙғаныс хәлгә...*

**(«Уралтауҙа әрнеп илай Бүре»)**

Ошондай ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы заманда Фakиһа Тығыҙбаеваның лирик геройы йөрәген баррикада итәсәк («Баррикада»). Ул унда илен, телен, рухын һаҡлаясаҡ.

Халҡының һынмаҫ рухын йөрөткән лирик герой быны менән генә лә сикләнмәйәсәк, илен берҙәмлеккә, әүҙемлеккә саҡырып, милләткә хәүефхәтәр янауын иҫкәртеп, Балҡантауға күтәрелеп, усаҡ яғасаҡ:

*Ирәмәлдең алыҫ Торатауға,*
*Ирәндектең алыҫ Янғантауға*
*Туғанлығы булып янһын усаҡ,*
*Уяныр ҙа, бәлки, халыҡ шул саҡ,*
*Үҙ-үҙенә ҡарар һушы китеп,*
*Ғүмер һөрә ниндәй бәхет көтөп.*
*Бөлөп бара икән илгенәһе —*
*Үлеп бара икән үҙ инәһе...*

**(«Усаҡ яғам»)**

Еренде талап, урман-һыуыңа ябырылып, телеңде ҡырҡып, дарға аҫып, «бәхетеңде урлағандар. Уян, халҡым! Ғорурлығыңды ҡайтар!» («Уян, халҡым!») — тип саң ҡағасаҡ, Силәбеләге «Маяҡ» фажиғәһен күҙаллап, йөрәген бейек тау башына ҡыңғырау итеп эләсәк («Ҡыңғырау»), хәтерен юйған маңҡорт эшмәкәрлегенең Ер-Әсәбеҙгә килтергән ауыр әҙемтәләрен юллаясаҡ («Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр...»), инҡилапсыларҙың хаталаныуҙарын, башҡортҡа ниндәй оло ҡаза килтергәндәрен аңлап, тәүбәгә киләсәктәренә өмөтләнәсәк... («Тәүбә»). Тик аҡланамы өмөттәр, шәйләйҙәрме «шаҡмаҡ күҙлеләр» һырттағы усаҡтарҙы, ишетәләрме афәт хәбәрен еткереүсе шомло ҡыңғырау ауаздарын, тояларmы аҡ томандарға үлемесле ағыу уралыуын? Икеле. Эйе, әҙиптең ил алдындағы төп бурысы ла, тәү сиратта, халҡының рухын нығытыуҙа, әлбиттә. Ә власть (властың ҡайһы бер йүнәлештәге эшмәкәрлегенә бәйле уй-фекер менән уртаҡлашыуҙы йә уның ҡайһы бер вәкилдәрен тәнҡитләүҙе — тотош власты инҡар итеү, революция яһарға саҡырыу тип аңларға ярамай. Власты ил менән бутау ҙа бер ҡатлылыҡ булыр ине: етәкселәр алышынып тора, ил — үҙ урынында, «шаҡмаҡ күҙҙәр»гә дәғүәләр ҡуйырға мөмкин, ә ил менән ниндәй иҫәп-хисап ҡылаһың?! «Ҡан хәтере»ндә лирик герой тикмәгә генә: «Тыуған илде ҡарғап буламы ни, Ниңә аттырҙың, тип, атамды...» — тип, репрессия ҡорбаны булған атаһын хәтерләп, аҙарынмай. Еңел түгел зат-ырыуыңа килгән ҡырғынды күтәреү, әммә ул был трагедияла иленең ғәйепле булмауын аңларлыҡ кимәлдә, шуның менән ул ниндәй рухи юғарылыҡта тороуын да раҫлай. Бына ҡайҙан авторҙың рухи ҡеүәте!) менән типә-тиң һөйләшә-аңлаша, һүҙең менән иҫәпләшергә мәжбүр итә алыу өсөн Салауаттың ҡылды ҡырҡҡа ярыр ҡындағы булат ҡылысы менән тел осондағы бар халайыҡҡа етерҙәй осҡор ораны, Байыҡтың айыҡ аҡылы менән сикле күңелдәрҙе уятыр ҡанатлы һүҙе, Вәлидиҙең сәйәси һиҙгерлеге

менән милләт киләсәге алдындағы яуаплылығы, Шәйехзаданың осор фажиғәһен үҙ йөрәгенә, иңенә алып, шиғри генийын эшкә егеүе, Мостайҙың төплө уйланылып, мәленә ярашлы һәр саҡ сәпкә эләгеүсе образлы ла, кинәйәле лә, фәлсәфи ҙә фекере, Рәмиҙең хатта үҙенә сигенеүгә юл ҡалдырмаҫ сая рухы менән ҡанатлы һүҙенең йәшәү рәүешенә тап килеүе кәрәк! Бармы, ҡалғанмы ул беҙҙә?! Үҫтерә, һаҡлай-яҡлай, мәлендә бәпләй беләбеҙме ундайҙарҙы? Бит шағирәнә күңелдәр айырыуса яланғас, ҡурсалауға мохтаж. Рух һағында тороусылар иһә бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалған! Әлбиттә, әлегеләй риторик һорау-саҡырыуҙар яуаплы етәкселәрҙе һиҫкәндерер, тип өмөтләнеүе ҡыйын (был фекерҙәр өҙгөләнмәй-ҡырҡҡыланмай уҡыусыға барып етә алһа ла мең шөкөр!). Тормоштоң ҡырыҫ күренештәре шундай һығымтаға килтерә: әгәр ҙә Рәми, терелеп ҡайта ҡалһа, Хөкүмәт указдарына ярашлы, илдә ҙур-ҙур саралар үтер, әммә тамашаларҙан алйыған ҡайһы бер власть әһелдәре, түшәктәренә етеп ауғас: «Нисегерәк эшләгәндә был боласыны тынысландырып булыр ине икән?» тип әйләнептулғанып, йоҡоһоҙ төн сығыр ине...

Бәхеткә күрә, әҙиптәр мөғжизәгә, һүҙ тылсымына ышана. Әгәр ҙә был осҡон булмаһа, әҙәм ышанмаҫтай олоғара бурыстарҙы атҡарам тип, бил дә быумаҫ ине күптәре. Факиһа кеүектәре иһә былдай ҙа тәүәккәллеккә йөрьәт итеү генә түгел, йөрәген усаҡ итеп дөрләтеп, ҡыңғырау итеп һуғып, яуға күтәрелә. Сөнки ундайҙарҙа рухи ныҡлыҡ бар, халҡың алдында яуаплылыҡ бар, милләтем тип һыҙланыу бар. Рух һүнмәгәндә башҡорттоң йәшәйәсәгенә, юғалып ҡалмаясағына инаныстары йәшәү рәүешенә әйләнгән.

Күренеүенсә, Факиһа Туғыҙбаеваның ижад йылғаһы мул һыулы: бөркөттәре саңҡыған мәғрур ҡаяларға ла һуғыла, һандуғастары сутылдаған талдарҙы, кәкүктәре саҡырған тирәктәрҙе лә һуғара, йөҙҙәрсә төҫтә балҡыясаҡ болондарҙы ла иңләй. Был ижадта Салауат оранын ишетәһең, Бабичтың ғазаптарын кисерәһең, уның яҡты рухын эҙләп тауҙарға артылаһың, асмандарға ашаһың, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һуңғы йырын йөрәгеңдә тояһың, Һомайғош булып ҡағынаһың, Аҡбуҙат булып еләһең, Ил Инәһе Бүре менән бергә үкһейһең...

Һағышлы, мөхәббәтле шағирә ул Факиһа Туғыҙбаева. Ғүмере буйына әсәһенең, башҡаларҙың «Кеше булыр!» тигән ышанысын аҡларға тырышҡанға ул бәҫле һүҙ әйтә алды, ә әйтер һүҙе, халыҡ яратып ҡабул иткән йырындағыса («Йәй ғүмере»), ысыҡ тамсыһында йыуылғайны. Яҙғандарын бер ни тиклем үҙгәртеп, үҙенә төбәгәндә:

*Аралаша ҡояш теленд ә ул,*
*Йөҙө яҡты, яҡты күңеле.*
*Тайфундарың ҡоторһа ла,*
*Заман,*
*Ул бит күрә донъя киңлеген.*
*Ул бит күрә тарих киңлектәрен —*
*Шуға күрә башы юғары!*
*Әйтерһең дә, ерҙе тотоп торған*
*Урал батырҙың ул һыңары...*

Мәртәбәләр ҙә уны урап үтмәне, бейеклектәр ҙә яуланы... Иң мөһиме:

*Еңеүҙәрем — минең хәләл көсөм, —*

тиергә тулы хаҡы бар. Илде имләр ил инәһе йәшенә еткәндә, бер ҡулына икмәк тотоп, икенсеһен йөрәге өҫтөнә ҡуйып, һәр башҡорт әҙибе, Факиһа, һинең кеүек шулай әйтә алһын ине!

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# САБЫРЛЫҠТЫҢ ТӨБӨ — ҺАРЫ АЛТЫН

*(Гөлнур Яҡупованың шиғриәте хаҡында)*

Тормош асылына, ерҙә йәшәү мәғәнәһенә аҡыл эйәләренсә ҡараш ташлап, Гөлнур Яҡупова утыҙы тулыртулмаҫ мәлдә үк әле кеше ғүмерен етеҙ тәгәрләгән тәгәрмәскә тиңләгәйне:

*Китер кеүек бер саҡ келтер-келтер*
*Түбәнләскә генә тәгәрләп,*
*Ҡатар ғына ике эҙ ҡалдырып,*
*Ғүмер тигән етеҙ тәгәрмәс.*

**(Тауға үрләгәндә, 1978).**

Етмешенсе йылдар аҙағында донъяға килгән был шиғыр шул заманда уҡ берәй гәзит йә журнал битендә баҫылмай ҡалмағандыр, әлбиттә. Ә бына миңә уны тәү тапҡыр тик тукһанынсы йылдар башында ғына, Гөлнур Яҡупованың «Автограф» (1992) тип аталған йәшкелт тышлы йоҡа ғына йыйынтығы ҡулға килеп эләккәс кенә, уҡырға насип булды. Йыйынтыҡты Өфөнөң Ленин урамындағы китап кибетендә (ә был кибет миңә һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ йылдарҙан бирле таныш һәм, шуға микән, ул һәр ваҡыт күңелде үҙенә тартып торҙо) һатып алғанда кисергән уй-хистәрем бөгөнгөләй хәтерҙә.

Иң башта Рауил Бикбаевтың «Автобиография» (1969) тигән китабы иҫкә килеп төштө. Күләме яғынан (шиғырҙар һаны буйынса ла, баҫма табаҡтар иҫәбе менән дә) ул да әллә ни ҙур түгел, ләкин, ҡатырға тыш менән сығарылғанға күрәлер инде, ҡалын ғына тойола ине. Гректарҙан килеп ингән «авто» (беҙҙеңсәгә уны «үҙ» тип ауҙаралар) һүҙе Гөлнурҙың да иғтибарын йәлеп иткән да баһа. Уның «Автограф»ы минең шәхси хазинама әйләнгәс, ғәҙәттәгесә, йыйынтыҡҡа бирелгән аннотацияға күҙ һалдым. Унда былай тип яҙылғайны: «Һәр кеше ер йөҙөндә үҙ эҙен – автографын ҡалдыра. Гөлнур Яҡупованың шиғырҙары ла шағирә яҙмышының үҙенсәлекле автографы ул. Авторҙың ижады уның биографияһы менән тығыҙ үрелеп, бөгөнгө замандаштың тулы ҡанлы образын күҙ алдына баҫтыра».

Һуңыраҡ, төрлө белешмәләр аша, Гөлнур Яҡупованың оҙаҡ йылдар район гәзитендә эшләгәнлеген һәм унда оло тормош мәктәбе үткәнлеген, унан һуң Өфөгә күсеп килгәнлеген һәм «Башҡортостан ҡыҙы» журналында хеҙмәт иткәнлеген, һикһәненсе йылдар башында «Йәш көстәр» альманахының бер нисә һанында шиғри шәлкемдәр менән сығыш яһағанлығын, ошо уҡ ун йыллыҡтың аҙағында «Нағыш» исемле бәләкәй генә тәүге китабы баҫылып сыҡҡанлығын белдем.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, «Автограф»ҡа ингән йөҙҙән ашыу шиғырҙың байтағы миндә быға тиклем таныш булмаған хистәр уятып ебәрҙе, шул хистәрҙе башҡалар менән дә уртаҡлашыу теләге ҡытыҡлап ҡуйҙы күңелде. Оҙаҡламай шул ихтыяждан «Ә үҙем ул үҙе әллә нисәү...» тигән мәҡәлә тыуҙы һәм ул «Ағиҙел»дең тукһан дүртенсе

йылғы һуңғы һанында донъя күрҙе. Әле бына шул мәҡәләне табып, яңынан уҡып сыҡтым да «ғүмер тигән етеҙ тәгәрмәс» метафораһы хаҡында уйланып алдым. Миңә, авторға, мәҡәлә кисә генә яҙылған һымаҡ тойолһа ла, уға инде ун биш йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ошо дәүерҙә Г. Яҡупованың шиғриәте хаҡында ни бары бер мәҡәлә («Йөрәк хаты» тигән йыйынтыҡҡа М. Ғәли яҙған рецензия) баҫылып сыҡҡан. Ә үҙҙәре тураһында матбуғат биттәрендә бер ауыҙ ҙа һүҙ ишетмәгәндәр күпме икән?

«Нағыш»тан һуң Гөлнур Яҡупованың ижад һуҡмағы киңәйгәндән-киңәйә, асыҡланғандан-асыҡлана барҙы. Был һуҡмаҡтың төп йүнәлеше һәм төп байлығы поэзия булһа ла, унда әкренләп сәсмә әҫәрҙәргә лә урын табыла башланы. Балалар донъяһы ла ят булманы шағирәгә. Егерменсе быуат ахырында, ғүмеренең алтын уртаһын билдәләгәндә, ул инде ете китап авторы ине. Шулай итеп, гәзит-журналдарҙан башланған һуҡмаҡ Гөлнурҙы оло юлға – ысын мәғәнәһендәге әҙәбиәт донъяһына алып сыҡты. Ул бөгөн дә үҙе һайлап алған ошо ауыр ҙа, шул уҡ ваҡытта ифрат мауыҡтырғыс та өлкәлә арымай-талмай эшләүен дауам итә. Яңы быуаттың тәүге ун йылында байтаҡ китаптар баҫтырып сығарҙы. Әүәлгесә «Ағиҙел» журналының даими авторы булып ҡала килә. Өҫтәүенә, һуңғы йылдарҙа ул ҙурыраҡ, ҡатлаулыраҡ поэтик жанрҙарҙа ла үҙ көсөн һынап ҡарай башланы. «Мираҫ» («Ағиҙел», 2007, 12-се һан) һәм «Әҙәм вә Һауа» («Ағиҙел», 2008, 6-сы һан) тигән поэмалар – быға асыҡ дәлил.

Сюжет ҡоролошо йәһәтенән «Мираҫ» бер ҡәҙәр М. Ғәлиҙең «Ҡапҡаңды ас, Быуат!»ын хәтерләтеп ҡуя. Оҡшашлыҡ айырыуса поэмаларҙың экспозицияһында күҙгә ныҡ салына. Уларҙың икеһе лә тышта йәйге йылы ямғыр һибәләү күренешен тасуирлауҙан башлана; ямғырҙан һуң йәйғор ҡалҡып сыға; йәйғор иһә ейәндәр образы тыуыуға сәбәпсе була. «Ҡапҡаңды ас, Быуат!» тағы ейән, йәйғор-ҡапҡаға күрһәтеп, «Әйҙә, шул ҡапҡанан үтәйек урман арттарына» тип ҡартатаһын урамға алып сығып китһә, «Мираҫ»тағы шуҡ ейән «...Өләсәкәй, ана, тәтәй күпер, йөрөп киләйексе шул юлдан!» тип өләсәһенең еңенән тарта. Ике поэмала ла әҫәрҙең тәүге юлдарынан уҡ сюжет ебен лирик геройҙар үҙ ҡулдарында тота.

*Собханалла!*
*Һушты алды йәйғор бер мәлгә –*
*Урал аръяғынан, дуғаланып,*
*Алдыма уҡ килеп терәлгән,–*

ти «Мираҫ»тың лирик героиняһы, шатлыҡ ҡатыш ғәжәпләнеү тойғоһо кисереп. Йәйғор юйылғас, ҡарашын күккә йүнәлтә лә хыялдарға бирелеп китә: *«Болот, тиһәм... Аҡбуҙ толпарҙарҙа елеп үтеп бара һыбайҙар»; «Офоҡ ҡырлап, сәйер тәгәрмәс... дала яҡҡа бара тәгәрләп»; «Ерҙең кендегенә – Арҡайымға арийҙары ҡайтып бара бит »; «Күктә – мираж... Ләкин сын тарихта булған улар – камил иманым».* Тора-бара лирик героиняның уй-хыялдарынан риторик һорау үҫеп сыға:

*Дөп-дөп... тек-тек...*
*Тояҡ тауышымы*
*Дөпөлдәй?*
*Йыһан сәғәтеме*
*Текелдәй?*
*Йөрәгемсе –*
*Арҡайым тип ярһый*
*Дөлдөлдәй...*

Артабан был юлдар рефренға әйләнеп китә. Тик сюжет ярҙары киңәйә барған һайын, алда һүҙ нимә тураһында буласағын иҫкәрткәндәй, рефрендың да һуңғы юлдары үҙгәрә төшә, ә поэманың ахырына яҡынлашҡанда уның тәүге юлы ғына һаҡланып ҡала. Быларҙың бөтәһе лә, берҙән, автор әйтергә теләгән фекерҙе уҡыусы зиһененә йәһәтерәк илтеп еткереү

ниәтенән сығып эшләнгән булһа, икенсенән, төрлө идея төрөлгән хәл-ваҡиғаларҙы бер-береһенән айырыбыраҡ тороу маҡсаты ла күҙ уңында тотолғандыр, тип уйлайым.

Экспозицияла лирик героиня үҙе-нең ҡайһы бер характер үҙенсәлектәре менән дә таныштырып уҙа: *«Сор хәтерле башҡорт ҡатыны мин. Сәфәр сығам һиңә, Арҡайым»; «Киләм олоғайып... Йәйғор күпер һуҙып, саҡырҙың бит, көтәһеңдер мине, моғайын»; «Саялығым барсы, баш күтәрҙе: күктәр көн дә бирмәй ишара. Тәүтөйәген ҡайтып күрер өсөн ҡоштоңҡошо оса – түш яра».* Был юлдарҙа, бәлки, шағирәнең автобиографик һыҙаттары ла сағылып китәлер. Әгәр шулай була ҡалһа, тимәк, поэманың авторы менән уның лирик героиняһы араһындағы сиктәр ҙә юйыла һәм оҡшашлыҡтар бермә-бер арта бара. Ошонда сюжет та төйөнләнә: лирик героиняның сәфәре башлана. Сәфәр барышында уның күргән-белгәндәре, ҡайҙалыр һәм ҡасандыр ишеткән һәм хәтерендә һаҡланған фараздар, көтмәгәндә килеп тыуған һорауҙарға яуап эҙләгәндә кисергән уй-кисерештәре әҫәрҙең йөкмәткеһен тәшкил итә лә инде.

Поэмала ваҡиғалар үҫеше йылдам бара. Сәфәр сыҡҡан лирик героиня, *«Сал даланың данлы үткәндәрен айҡап барҙы йылғыр уйҙарым»* тип әйтергә лә өлгөрмәй, күҙ асып-йомған арала барыр еренә барып та етә һәм унда тыуған тәүге хистәре менән уртаҡлашырға тотона: *«Әйтерһең дә, ҡайттым төп йортҡа мин, асыр өсөн тыуған ишекте»; «Был төйәк бит Ерҙә тиңдәшһеҙ!»; «Юллап килдем рухым тамырҙарын...»; «Ер менән күк тоташҡанын күрҙем...».* Артабан ул тирә-йүнгә күҙ ташлап ала ла уй-хистәре менән бүлешеүҙе дауам итә: *«Каулан араһында аулаҡ ятҡан тамға-ташҡа иттем иғтибар. Башҡорт балаһына баҫып һуҡҡан аҫаға ул төҫмөр, оҡшашҡан»; «Ҡурҡып киттем. Күкрәгем боҙ булды: свастикаға тартҡан был тамға?»* Һәм шунда уҡ аҡланырға ашыға: *«Ҡояш билдәһе ул свастика – Арҡайымдың ысын арийҙары танытмаһы...»*

Бында «Мираҫ»ты энәһенән ебенә ҡәҙәр тикшереү маҡсат итеп ҡуйылмай. Уны поэма жанры менән махсус шөғөлләнеүселәр эшләр. Әгәр әҫәрҙең сюжет канваһы буйлап ваҡ ҡына аҙымдар менән хәрәкәт итә башлаһаң, уның асылын бөтә киңлегендә һәм бөтә тәрәнлегендә асып һалыр өсөн байтаҡ ваҡыт һәм байтаҡ урын кәрәк булыр ине. Сөнки алты йөҙгә яҡын шиғри юлдан торған был әҫәрҙә автор бик күп мәсьәләләр күтәрергә өлгөрә. Уларға ныҡлап төшөнөр өсөн тарих, фәлсәфә, сәйәсәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт, диниә өлкәһендә күпмелер әҙерлек кәрәктер. Ябай уҡыусы Г. Яҡупованың «Мираҫ»ын тәү танышыуҙа уҡ бөтә тәрәнлегендә аңлап та бөтмәҫкә мөмкин. Дөрөҫ, бынан әҙ генә элегерәк («Ағиҙел», 2006, 11-се һан) баҫылып сыҡҡан «Минең Одиссеям» тигән шәлкемгә асыҡлыҡ индереүсе төшөрмәлә шағирә: «Ағиҙел»де зыялылар алдыра, шуға күрә донъя мәҙәниәтенең тәүнигеҙе булған боронғо Эллада (Греция) мифтары тәңгәлендә оҙон-оҙаҡ аңлатмалар биреүҙе кәрәк тапмайым» тип иҫкәрткәйне лә иҫкәртеүен, әммә «Мираҫ»та һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар ябай уҡыусыны ғына түгел, зыялыһын да уйға һалыуы ихтимал. Әҫәрҙең телендә лә беҙҙең бөгөнгө көндәлек аралашыуҙа һирәгерәк осрай торған һүҙҙәр мул ғына ҡулланылған. Ләкин был «уңайһыҙлыҡтарға» ҡарап ҡына «Мираҫ»тың тирә-йүнде, беҙгә хәтлемге тормошто һәм беҙҙең заманға хас хәл-ваҡиғаларҙы танып белеүҙәге әһәмиәтен инҡар итеп булмай. Ни тиһәң дә, әҙәби әҫәрҙең уҡыусы кимәленән (ябаймы ул, зыялымы) әҙ генә булһа ла юғарыраҡ торорға тейешлеге, кешенең эстетик зауығын камиллаштырырға, мәғлүмәт даирәһен киңәйтергә, мөмкин тиклем

күберәк ыңғай сифаттар тәрбиәләргә саҡырылғанлығы юҡтан ғына түгел бит.

«Мираҫ» авторҙың үҙенә лә еңел генә бирелмәгәндер. Поэмаға тотонорҙан алда уға байтаҡ ҡына өҫтәмә сығанаҡтар өйрәнергә, донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте үрнәктәре тупланған фолианттарҙы яңынан ҡат-ҡат аҡтарырға тура килгәндер, моғайын. Был фаразды өҫтә телгә алынған «Минең Одиссеям» тигән шәлкем дә ҡеүәтләй. Шәлкемгә ингән туғыҙ шиғырҙың бөтәһе лә шағирәнең антик әҙәбиәт нигеҙҙәре менән яҡшы хәбәрҙар булыуын ғына түгел, бәлки, уның юғары өлгөләрен үҙебеҙҙең ерлектә уңышлы файҙаланыуын да күрһәтеп тора.

«Минең Одиссеям»ды асып ебәргән «Сер түгел дә...» тигән шиғыр – үтә хикмәтле, үтә кинәйәле. Боронғо грек мифологияһынан беҙҙең аңға һеңеп ҡалған батыр йөрәкле һәм хәйләкәр Одиссей, уның тоғро ҡатыны Пенелопа, Циклоп тип йөрөтөлгән һыңар күҙле дейеү, кәйеф-сафа аллаһы Дионис, аллалар аллаһы Зевс, ул бүләк итеп биргән ҡумтанан көнөтөнө бөтә ғаләмгә бер туҡтауһыҙ бысраҡ атыусы Пандора образдары аша бөгөн донъя күләмендә хөкөм һөргән хәл-ваҡиғалар оҫта сағылдырылған был шиғырҙа. Шуныһы ҡыуаныслы: лирик героиня, Одиссей карабына ултырып, уның менән серләшкәндә Сфинкс шәйенә инә яҙып ҡалһа ла, үҙенең тыуып-үҫкән ерҙәренә, Ағиҙеленә, башҡортлоғона хыянат итмәй. Киреһенсә, тамырҙары тарих атаһы Геродотҡа, йөрәк тибештере Прометейға барып тоташыуы менән ғорурлана.

Һүҙ «Минең Одиссеям» шәлкеменә күскәс, ундағы тағы бер нисә шиғырға туҡталып китеү яҙыҡ булмаҫ. Шулар араһынан иң тәүҙә «Һыңар», «Утҡа бағыу», «Медея» тигәндәренә иғтибарҙы йүнәлтер инем.

«Һыңар» күнегелгән формала яҙылған: дүртәр юллы дүрт строфанан тора. Лирик героиняның эске халәте бөтә нескәлегендә, ышандырырлыҡ итеп асып һалынған был әҫәрҙә. Яңғырашы буйынса ла һүҙ тейҙерерлек түгел. Лирик героиня үҙен Пенелопа һыңары тип атай. Ләкин, Пенелопанан айырмалы буларaҡ, уның Одиссейы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайтмаҫ ергә киткән. Бер автобиографик мәҡәләһенән белеүемсә, авторҙың хәләл ефете йәшләй вафат булған һәм уның ғүмере "ҡатар ғына ике эҙ ҡалдырып" түгел, ә һыңар тәгәрмәстә тәгәрләй. Әммә рухы һынмай, тормош йөгөн мыжымай тарта, балаларын үҫтерә. Ҡәләмен дә ташламай, тәбиғәт биргән талантына ла хыянат итмәй.

«Утҡа бағыу» ҙа донъя мәҙәниәтенең тәүнигеҙе булған боронғо Эллада мифтарына барып тоташа. Кешеләргә ут бүләк иткән өсөн утыҙ мең йыл ғазап сиккән Прометейға мөрәжәғәт итеп, лирик героиня былай ти:

*Остоҡ ҡына осон ъазабыңдың*
*Тура килде миңә татырға,*
*Ҡара эсле, ҡара хислеләрҙең*
*Тырнағына бер саҡ тарырға.*

*Бәғеремә ҡандар һауған саҡта*
*Утҡа баҡтым – үҙе бер аҡыл.*
*О, Прометей, минең хаҡҡа ла бит*
*Ҡотҡарғандыр һине Геракл.*

Ире Ясондың хыянатын кисерә алмай, ике балаһын һәм көндәшен үлтергән боронғо Медея һыны ла Гөлнурҙы вайымһыҙ ҡалдырмаған. Тик уның лирик героиняһы «Медея» тигән шиғырҙың тәүге юлдарында уҡ *«Һөйөү, нәфрәт – игеҙәктәй, әлмисаҡтан (ҡырағай саҡтан) минең ҡанға бергә күскән»* тип иҡрар итһә лә, Ясонды ла, Медеяны ла үҙенә иш тә һанамай, аҡламай ҙа. *«Рухташ түгел Медеяға, ғишыҡ утын йүгәнләрлек көс бар миндә»* ти ул. Шиғыр фәһемле, хисtarga бай. Лирик героиня, яҙмыш ярҙарына якорь һалған Ясондың хыянатына нәфрәтен белдереп һәм

шул уҡ ваҡытта әҙәп һәм ғорурлыҡ һаҡлап, уны кире ҡаға: *«Ҡыуа төшмәм Медеялай. Хаслыҡ көтмә минән улай. Тиҙерәк кит. Юҡһа, Ясон, нәфрәт ҡайнай ҡанда – ысын...»*

«Минең Одиссеям» шәлкеменә ингән шиғырҙар төҙөлөштәре йәһәтенән бер төрлө генә түгелдәр. Унда, мәҫәлән, икешәр юллы строфа менән яҙылған «Сибайҙа» исемле шиғыр айырылыбыраҡ тора. Йөкмәткеһе буйынса ул «Мираҫ» поэмаһына һалынған һуҡмаҡ кеүегерәк яңғырай. Сибай, Арҡайым яҡтарында йөрөгән саҡта тыуған уй-кисерештәре менән уртаҡлашып, автор ошо тирәлә ҡасандыр арийҙар йәшәгәнлегенә, башҡорт ҡанында мәжүсилек барлығына ишара яһай.

«Минең Одиссеям» шәлкеме «Әҙәм вә Һауа» поэмаһына ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Сөнки унда ҡайһы бер образ-фекерҙәр (әйтәйек, тоғро ҡатын Пенелопа) яңынан ялтлап китә. Лирик героинялар араһында ла яҡынлыҡ ҡына түгел, ниндәйҙер оҡшашлыҡ та, хатта рухи уртаҡлыҡ һиҙелә. Был героинялар – нескә күңелле, саф йөрәкле, сабыр холоҡло, тәрән аҡыллы, ғорур тәбиғәтле заттар. Донъялағы төрлө ҡаршылыҡтар, бысраҡлыҡтар менән осрашырға тура килгәндә лә, улар ихтыяр көсөн һәм йәшәү дәртен юғалтмайҙар, үҙҙәре булып ҡалалар.

«Әҙәм вә Һауа»ның нигеҙендә дини риүәйәт ятһа ла, Гөлнур Яҡупова был легенданы ысынбарлыҡтағы хикәйәт дәрәжәһенә күтәреүгә ирешкән. Әгәр «Мираҫ» поэмаһында мөхәббәт темаһы башҡа темалар менән йәнәш ҡуйылып ҡына яҡтыртылған булһа *(«Түбәләстәр бында әллә нисәү: бар Мөхәббәт тауы, Шамантау, Теләк тауы, тағы Аҡыл тауы...»)*, бынынһында иһә ул башкөлләй үҙ аллыға әйләнгән. Улай ғына түгел, «Әҙәм вә Һауа»ла, бөтә кешелек донъяһы мөхәббәттән яралған, тигән фекер алға һөрөлә. Автор уйынса, йәшәү һәм үлеү, илау һәм көлөү, яҡшы һәм яман, йомарт һәм һаран, аҡ һәм ҡара төшөнсәләре лә донъя менән бергә барлыҡҡа килгән. Шуға күрә донъя гел мөхәббәттән генә тормай. Мөхәббәт менән бер ҡатарҙан Ер йөҙөндә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көнсөллөк, үс, хыянат, ялған, хөсөтлөк һәм шуның кеүек башҡа бик күп тиҫкәре сифаттар ҙа йәшәп ята. Ә был тиҫкәре күренештәр, ҡапма-ҡаршылыҡтар, үҙ сиратында, лирик героиняны, шул иҫәптән шағирәне лә, тәрән уйға һала һәм өмөтөн күккә йүнәлтергә мәжбүр итә:

*Иблис ҡыла тантанаһын,*
*Иманъа ул янай һаман,*
*Яҡын әллә ахрызаман,*
*Әҙәмгә, бәлки, таман?*
*Раббым, ишет!*
*Сиртәм бишек –*
*Бир именлек*
*Ергә, һиллек.*

*– Һуъыш-ыҙъыш*
*Кемдең эше?*
*– Кешенеке.*
*– Үҙенә – гонаһ!*
*– Эйе, Аллаһ...*

«Әҙәм вә Һауа» диалогтарҙан һәм монологтарҙан тора. Ҡайһы берҙә Һауа менән лирик героиня бер бөтөнгә әйләнеп киткәндәй, ә диалогтарҙың күбеһе Һауа менән Аллаһ араһында барғандай тойола. Сюжет-композиция ҡоролошо йәһәтенән ҡайһы бер һорауҙар тыуҙырһа ла, Г. Яҡупованың «Әҙәм вә Һауа»һы – уйландырырлыҡ әҫәр. Уны ысын, тотороҡло һәм тоғролоҡло мөхәббәткә, шундай мөхәббәтте үҙҙәрендә түкмәй-сәсмәй һаҡлап йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙар затына мәҙхиә тип атарға мөмкин. Әҫәрҙең төп идеяһы ла, бәлки, бына был юлдарға төрөлгәндер:

*Ә мин – Әсә,*
*Иртә-кисен*
*Бишек сиртәм.*
*Ә мин – Ҡатын,*
*Ҡурсалайым*
*Усаҡ утын,*
*Донъя ҡотон.*

Лирик героиняның *«Бишек сиртәм.*

*Йырлай-йырлай, илай-илай, бәпесемдең ҡолағына өгөт киртәм: тик иманға, тик аманға. Күкрәк һөтөм, аҡ өгөтөм аралаһын яманаттан, яман заттан!»* тигән теләге һәм өгөтнәсихәте лә поэманың төп идеяһына көс һәм ҡеүәт өҫтәй, уны уғата ла үтемлерәк һәм әүрәткесерәк итә. Бөгөнгөнө үткәндәргә бәйләп, «хәтер хаты»н яҙыусы Г. Яҡупованың «Әҙәм вә Һауа»һын уҡып сыҡҡас, ирекһеҙҙән Достоевскийҙың «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән ҡанатлы һүҙҙәре иҫкә килеп төшә. Ун туғыҙынсы быуат ахырҙарында яңғыраған был ифрат тәрән фекерҙе егерме беренсе быуат башында уғата ла киңәйтеп, «Донъяны дыуамаллыҡтарҙан, боҙоҡлоҡтарҙан, һәр төрлө афәттәрҙән матурлыҡ һәм саф мөхәббәт ҡотҡарыр» тип иҡрар итке килә.

«Мираҫ» шикелле, «Әҙәм вә Һауа» ла юҡтан ғына бар булмаған, әлбиттә. Мин уны Г. Яҡупованың шиғриәт баҡсаһындағы мөхәббәт лирикаһынан яралған һәм шунан үҫеп сыҡҡан һутлы емешкә тиңләр инем. Ишетер ҡолаҡҡа был сағыштырыу, бәлки, мәҙәгерәк тә тойолор. Әммә, ни тиһәң дә, мөхәббәт темаһы Гөлнур өсөн иң ҡәҙерле, иң изге темаларҙың береһе булды һәм әле лә шулай булып ҡала. Уның ҡайһы ғына йыйынтығына күҙ ташлама, һөйөү һәм һөйөлөү ҡылдарын сирткән әҫәрен осратмай ҡалмаҫһың. Бында шундайҙарҙың быуат башында ижад ителгәндәренә бер аҙ туҡталып та китергә мөмкин.

Егерме һигеҙ шиғырҙы эсенә алған «Китә ҡышым, йәйләмәҫ тә ҡошом...» («Ағиҙел», 2002, 4-се һан) һәм «Хистәремдең көмөш һиҙәбе...» («Ағиҙел», 2004, 1-се һан) тигән шәлкемдәр күптәрҙең иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмағандыр, моғайын. Ошо ике шәлкем тураһында үҙ аллы һәм ярайһы уҡ күләмле мәҡәлә яҙырға булыр ине. Бөгөн иһә улар әлеге күҙәтеүҙәрҙең бер өлөшөн генә тәшкил итәләр.

Сер түгел, йыш ҡына һөйөү һәм һөйөлөү тойғолары беҙҙә (айырыуса йыр текстарында) бушҡа яңғыраған бөҙрә һүҙҙәргә генә ҡайтып ҡалыусан. Г. Яҡупованың мөхәббәт лирикаһы ялған биҙәктәрҙән азат. Уның мөхәббәт лирикаһы тормоштоң үҙенән үҫеп сыға, шуға ла мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарында ерҙә йәшәүҙең ҡыуанyслы яҡтары ла, хәсрәтле мәлдәре лә берҙәй сағылыш таба. «Йәй сәләме» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, лирик героиня уны үкһеҙ ҡалдырып киткән йәрен, йәре менән бергә йәшәгән дәүерҙә кисергән бәхетле саҡтарын һағынып иҫкә ала һәм шул саҡтарҙы тәбиғәт күренештәре аша ябай ғына, шул уҡ ваҡытта ышандырырлыҡ итеп күҙ алдына баҫтыра. Әҫәр һағышлы уйхистәр менән һуғарылған булһа ла, ул ҡара буяуҙарға буялмаған: унда яҡты уй-теләк, йәшәү дәрте өҫтөнлөк итә. Үтеп барған «ғүмер йәйе»нә лә лирик героиня эске бер тыныслыҡ һәм сабырлыҡ менән ҡарай.

Г. Яҡупованың лирик героиняһы тормош һынауҙары аша үткәндә мөхәббәткә тоғролоҡ һаҡлаусы булараҡ та иғтибарҙы йәлеп итерлек. Әгәр «Талҡаҫ йыры»нда уның был сифаты туранан-тура асып һалынһа *(«Мөхәббәткә тоғро йәнемдә һин тынмаҫ йыр инде ...»), «Һинең ҡулдар», «Әлләсе...», «Исемеңде һыуға яҙҙым...», «Күңелем фәрештәһе», «Яҙыҡлы яҙым», «Ғазап», «...Ап-аҡ ҡына ҡаурыйҙар...»* тигәндәрендә ул кинәйәләберәк асыла. Был шиғырҙар үҙҙәренең үтә эмоционаллеге, үтә лириклығы менән айырылып торалар. Күләме яғынан оҙон ғына тойолған «Һинең ҡулдар»ҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, йәне менән әҫәрҙең буйынан-буйына хыял донъяһында йөҙһә лә, һуңғы строфала ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайта:

*Һыйынмайым бушлыҡ ҡосағына,*
*Урталыҡтан китәм,*
*Таянырға һинең ҡулдарыңа*
*Хыял итәм. Көтәм.*

«Әлләсе...» лә нескә тойғолар менән

һуғарылған һәм ул тойғолар ифрат нескә итеп тасуирланған: лирик героиня йөрәге түрендә күптән һаҡланған хистәренә тап төшөрмәҫкә, үҙ данын үҙе һатмаҫҡа һүҙ ҡуйған һәм шул һүҙендә тороуын дауам итә. «Күңелем фәрештәһе» рустарҙағы Ангел-хранитель тигән мифологик төшөнсәнән үҫеп сыҡҡанға оҡшай. Лирик героиня үҙенең Фәрештәһенән ҡәнәғәт, сөнки ул «тоғролоҡло отҡор» Һаҡсы: *«Өмөт һүнеп, ҡалһам ҡараңғыла, етәкләп ул ала тиҙ үк ҡулдан». «...Апаҡ ҡына ҡаурыйҙар...»*ҙы күпмелер кимәлдә «Күңелем фәрештәһе»нең дауамы тиергә була. Аҡлыҡ, паклыҡ бөркөп тора был лирик шиғырҙан. Ергә һибелгән ап-аҡ ҡаурыйҙар лирик героиняға әҙгә генә булһа ла һөйгәне менән элемтә урынлаштырып алырға форсат биргән тылсымлы көс итеп тасуирланған. Ә бына «Яҙыҡлы яҙым»дың лирик героиняһы хыялында ғына булһа ла һөйгән йәренең йәшлегенә барып ҡайтыр өсөн тыны менән ҡарҙы иретергә һәм үҙ ҡышын үҙе яҙ итергә әҙер. Шиғыр аллитерацияға ҡоролған *«Миңә яҙһын өсөн был яҙың, ҡышты яҙ итерлек йыр яҙҙым»* тигән строфа менән башлана һәм *«Ялан аяҡ ҡарҙан йүгерҙем дә умырзаяң булдым саҡ ҡына...»* тигән метафора менән тамамлана. Гөлнур Яҡупова поэзияһында мөхәббәт темаһының тәрән һәм көслө бер ағым булып тороуын уның «Ғазап» тигән шиғырында ла тойомларға мөмкин.

Әҙәбиәт ғилемендә, поэтик әҫәрҙең лирик геройы менән уның авторы араһында ҡайһы берҙә әҙме-күпме, ә ҡайһы берҙә байтаҡ ҡына оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡ булырға мөмкин, тигәнерәк фекер йәшәп килә. Ошо фекерҙән сығып уй йөрөткәндә, Гөлнурҙың күп кенә шиғырҙары автопортрет һымағыраҡ яңғырай кеүек – ғәмәлдә был, әлбиттә, шиғриәттең инандырыу көсө, ихлас хистәр менән һуғарылыу күренеше. «Ҡариҙелдә боҙ киткәндә», «Юлаусы», «Рәхмәт», «Ғәйбәт», «Бирнәм», «Шатлығым», «Ҡанат», «Будулай», «Мәмерйәлә», «Хәтер урманы», «Шәһит гөлдәр», «Аңла-аңлама...», «Ышан!» тигән шиғырҙарҙа был үҙенсәлек айырыуса һиҙелеп тора.

«Ҡариҙелдә боҙ киткәндә»лә, әйтәйек, кешенең эске халәте тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып һүрәтләнә. Башта автор ҡапыл ҡуҙғалған боҙҙо аяғүрә баҫҡан дәү бәһлеүәнгә оҡшата, һәм был сағыштырыуҙы *«Үҙ күкрәгән үҙе йырта йылға»* тигән метафора көсәйтеп ебәрә. Артабан ул *«Күңелемдә урғый ташҡын хистәр, йылғаның мин әллә туғаны?»* тигән риторик һорау ҡуя, кеше ғүмере йылғыр йылғаға тиңләнә, сөнки ғүмер ҙә киткән боҙҙар кеүек аға. Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған «Юлаусы» тигән шиғыр ҙа ғәйәт тәрән фекер уята: кеше был донъяға, юлаусы булыуҙан да бигерәк, юллаусы булып килә. Лирик героиняның төп кредоһы, уның кешелек асылы һуңғы строфала кире ҡаҡҡыһыҙ итеп асып һалынған:

*Баҫҡынсы түгел мин –*
*Юлаусы. Юллаусы*
*Бәхетте. Мөхәббәт*
*Барҙыр, тип уйлаусы.*

Г. Яҡупованың лирик героиняһы ҡайһы саҡта ғәйбәт тоҙағына ла эләгеп ҡуйғылай, күрәһең. Йөкмәткеһе буйынса ла, эшләнеше йәһәтенән дә иғтибарға лайыҡлы «Ғәйбәт» исемле шиғырҙа, мәҫәләнән, бөтә заманда ла бер сама таралған был яман ғәҙәт кешенән һәр ваҡыт ҡан һорап, ҡарҡылдап торған ҡарға шәйенә индерелгән. Ошо яман сир арҡала лирик героиняның ҡаны «тамған ерҙә» «ҡыҙыл ҡыналар» үҫеп сыҡһа ла, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, *«күңелемдә, ҡарғаларҙан ҡурҡып, шып-шым ғына гөлдәр һыналар»* ти ул. Әммә, нахаҡ һүҙҙәр лирик героиняның йөрәген күпме генә әрнетмәһен, ул һәр төрлө ғәйбәттәрҙән өҫтөн тора. Уның бөтә байлығы –

һөйөүе, сәскә атҡан хисе, йөрәгендәге изге хәҙис. Үҙенең күңел байлығын ул «затлы бирнә», «бай бирнә» тип атай, ә бына уға күҙе төшкән берәүҙе былар һис кенә лә ҡыҙыҡһындырмай, сөнки уға алтын һәм көмөш кәрәк («Бирнәм»). Өҫтәп тағы шуны әйтергә була: Гөлнурҙың лирик героиняһы – киң күңелле, ярҙамсыл шәхес. Ай йөҙөн болот ҡаплағанда, дөм һуҡыр ҡалған төндө яҡтыртыр өсөн, ул хатта алтын алҡаһын һалып бирергә әҙер («Шатлығым»).

«Ғәйбәт» шиғырында яңғыраған мотив «Шәһит гөлдәр»гә лә күскән. Уның лирик героиняһы, әсенеп, кемгәлер үҙенең үпкәһен белдерә:

*Юҡ, һин миңә мылтыҡ күтәрмәнең,*
*Күкрәгемә терәп атманың.*
*Гөлдәр белә – һинең таштай ауыр*
*Һүҙҙәреңдән йөрәк сатнаны.*

«Мәмерйәлә», «Ышан!» тигән шиғырҙарҙа лирик героиняның эске донъяһы, уның характер үҙенсәлеге уғата ла сағыуыраҡ кәүҙәләндерелгән. «Мәмерйәлә»нең сая холоҡло лирик героиняһына халыҡ телендәге «инер алда уйла сығырың» тигән киҫәтеү яҡшы таныш булһа ла, тәүтормоштан бирле боҫоп ятҡан серҙе әҙ генә булһа ла асыу теләге уны мәмерйәгә йүнәлтә. Һәрмәнә-һәрмәнә мәмерйә буйлап барғанда *«сал быуаттар сыйған сәнъәтте»* төҫмөрләй башлай. Сәскә есемен үпкән иңкеш һүрәтен күргәс, лирик героиня һөйөү тойғоһоноң шул замандан уҡ килеүен раҫлай, нескә сәскәнең үҙ асылын тоғро һаҡлауына һоҡлана. Иң һуңғы строфала лирик героиняның саялығына уның гуманлығы ла килеп ялғана:

*...Ҡараңғыла, ҡырыҫ мәмерйәлә*
*Йыртҡыс менән йылан – ҡалһындар.*
*Сәскәңде мин көнгә алып сығам,*
*Күңелемдә уға ҡалҡан бар.*

«Ышан!» тигән шиғырҙың да лирик героиняһы шундай заттарҙан. Ул үҙен тубырсыҡтан шытып сыҡҡан һәм үҫеп киткән шыршыға оҡшата. Тубырсыҡты тапағандар, ергә һеңдергәндәр, ә ул түҙгән, үҙ сәғәтен көтөп ятҡан. *«Һин сүп тигән емеш булған, емеш булған, еңмеш булған. Оҡшағанмы мин шыршыға? Сүп түгелмен – ышан шуға!»* тип тамамлана шиғыр.

Г. Яҡупованың быуат башындағы шиғриәтенә уның граждандлыҡ пафосы менән һуғарылған әҫәрҙәре лә көс һәм ҡеүәт өҫтәй, идея һәм тематик яҡтан байыҡтыра. «Төнгө Өфө», «Илгә һамаҡ», «Шағир йөрәге», «Акация», «Эт муйылы» тигәндәре – тап шундайҙар иҫәбендә. «Илгә һамаҡ»ҡа ойотҡоно башҡорт халыҡ әкиәтенән алынған «Ҡурай осонан ҡан тама» тигән һүҙбәйләнеш һалған. Тәүге строфала уҡ автор уҡыусыны былай тип киҫәтә:

*Башкөлләй инеп бара ил*
*Убырҙар тамағына.*

Артабанғы строфаларҙа ошо тема оторо ла үҫтерелә һәм конкретлаштырыла: бисмиллаһыҙ бизнесмендар, һары алтын, ҡара алтын, йәшел алтын, һатылған аҡылдар, хурланған ҡатындар, Чечняла, шешәлә һәләк булған улдар телгә алына. Ошоларҙың бөтәһе лә үҙенә һәм һүҙенә тоғролоҡло шағирәнең йөрәге аша үтә һәм әҫәрҙең һуңғы строфаһында уның әйтергә теләгәне бер ниндәй икеләнеүһеҙ, асыҡтан-асыҡ яңғырай:

*...Ҡурай осонан ҡан тама –*
*Кем өсөндәр тантана,*
*Кем өсөндәр тамаша?!*

Идея-тематик йөкмәткеһе менән «Илгә һамаҡ»ты «Шағир йөрәге» дауам итә. Әҙәм балаһы аҡса ҡолона әйләнгән бер заманда шиғриәттең артҡы планға күсә барыуы тураһында әсенеп яҙа бында шағирә. Донъяны «яңы урыҫ» менән «яңы башҡорт» баҫып алғас, улар Күкте лә рәшәткәләп ҡуймаҫ тимә, кеүегерәк фекер уята был шиғыр. Шағир иһә Дон Кихотҡа тиңләнә: уның һүҙен тыңлаусылар, ишетеүселәр ҡайҙа?!

Өфө тураһында элегерәк тә шиғырҙар әҙ яҙылманы, әле лә күренгеләп тора. Һәм был һис тә ғәжәп түгел, сөнки Өфө – беҙҙең баш ҡалабыҙ. Быға тиклем ижад ителгән шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә көй яҙылған һәм улар йыш ҡына радио һәм телевизор аша яңғырап торалар. Г. Яҡупованың «Төнгө Өфө»һө атамаһы менән романс тексына оҡшап тора. Ләкин йөкмәткеһе менән лирик ғәйрәтте ҡайтара һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙағы Өфөнө хәтергә төшөрә: ул йылдарҙа ла төндә ҡала урамдары буйлап йөрөү ҡурҡыныс ине. XX һәм XXI быуаттар ҡауышҡанда Өфөбөҙ тышҡы яҡтан ялтырап торһа ла, эстән уны ҡалтыратыусы көстәр ҙә йәшәп килә шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шағирә шуны бик оҫта тотоп алған.

Гөлнур Яҡупованың күпселек шиғырҙары психологик нескәлектәре менән айырылып тора. Билдәле булыуынса, кеше психологияһы үҙ эсенә күп төрлө сифаттарҙы һыйҙырған. Унда ыңғайҙары ла бар, тиҫкәреләре лә етерлек. Ыңғай сифаттарҙың береһе – сабырлыҡ. Был сифат психология буйынса яҙылған ҡалын-ҡалын китаптарҙа, ғилми тикшеренеүҙәрҙә, бәлки, бигүк күҙгә лә салынып бармайҙыр. Әммә халыҡ аңына ул бик күптән һәм бик тәрән инеп ултырған. Юҡҡа ғынамы ни «Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар» тигән мәҡәл йөрөй ауыҙ-тел ижадында. Кеше психологияһының бер төрөн тәшкил иткән ошо сифатты Гөлнурҙың «Мираҫ», «Әҙәм вә Һауа» поэмаларындағы лирик героиняларҙа ла, шулай уҡ уның лирик шиғырҙарында һүрәтләнгән аҫыл заттарҙа ла һиҙемләргә мөмкин. Уҙған быуатта уҡ яҙылған «Сабырлыҡтың төбө – һары алтын» тигән шиғырҙа иһә уны һиҙемләйһе лә юҡ – ул ус төбөндә ялтырап ята шикелле. Дүрт кенә строфанан торған ошо мөләйем шиғырҙы бында тулы килеш күсерһәм, һис тә яҙыҡ булмаҫ:

*«Сабырлыҡтың төбө – һары алтын» –*
*Был һүҙҙәрҙең асылын мин беләм,*
*Шуға ла бит ауыр минуттарҙа*
*Күҙ йәштәрем йотоп мин көләм.*

*Өҫкә ауып килгән болоттар ҙа,*
*Мәле еткәс, ҡапыл тарала.*
*Түҙә белһәң, әгәр еңә белһәң,*
*Ҡайғыларҙан шатлыҡ ярала.*

*Ямғырҙан һуң аяҙайтмай ҡалмай,*
*Дауыл баҫып ергә һил килә.*
*Һағыштарҙы кем һемереп эскән,*
*Бәхеттең дә ҡәҙерен шул белә.*

*«Сабырлыҡтың төбө – һары алтын» –*
*Был һүҙҙәрҙең асылын мин беләм.*
*Мең бәләне атһам иңдәремдән,*
*Һөйөнөстән сәсәп мең көләм.*

«Автограф» тигән йыйынтыҡтан алынған был шиғырға автор үҙе лә битараф түгел кеүек, сөнки уны, исемен һәм тыныш билдәләрен бер аҙ үҙгәртеп, «Йөрәк хаты» (1998) тигән китабына ла индереп ебәргән. «Сабырлыҡтың төбө – һары алтын»ды шағирәнең бүтән йыйынтыҡтарында ла осратырға булалыр, бәлки, был турала өҙөп кенә әйтә алмайым. Тик ошо урында быға тиклемге мәҡәләләремдә лә белдерелгән бер ризаһыҙлығымды яңынан хәтергә төшөрөп китмәй булмаҫтыр. Нишләптер беҙҙең бәғзе әҙиптәребеҙ уҡыусы хазинаһына әйләнгән әҫәрҙәренә «кәләм төртөргә» яратыусан. Гәзит-журнал биттәрендә донъя күреп, күпмелер һынау үткән шиғырҙы китап битенә күсергәндә ҡайһы бер төҙәтмәләр индереү – бер хәл, ә бына әҫәр бер китаптан икенсеһенә күскәндә уға тейергә ярамай, минең ҡарашымса. Сөнки шиғыр матбуғат битенә эләккән икән, ул инде һинеке генә түгел. Был турала беҙгә ныҡлабыраҡ уйланырға кәрәктер.

Сабырлыҡ темаһы, әгәр уны шартлы рәүештә генә булһа ла шулай тип атаһаҡ, Г. Яҡупованың яңы быуат

башындағы шиғриәтендә лә байтаҡ урын алып тора (өҫтә был турала һүҙ сыҡҡылап ҡуйғайны инде). 2004-се йылда донъя күргән бер шиғырын («Сабырлыҡ һөрәне») ул хатта туранан-тура ошо һүҙ менән атаған, уның лирик героиняһы донъя мәшәҡәттәрен, тормош ҡаршылыҡтарын тешен ҡыҫып булһа ла *(«Аһтарымды эскә йыйҙым, сығарманым тышҡа, түҙҙем»)* күтәрергә өйрәнгән шәхес итеп һүрәтләнгән. Ә «Ғүмер» тип аталған икенсе бер шиғырҙың лирик героиняһы ла үҙенең сабырлығы менән айырылып тора – ғүмер миҙгелдәрен тыныс ҡына үткәреүен бәйән итә ул. «Көҙгө ауаз», «Насибым», «Һуңғы шырпы», «Күнәм инде...», «Хараба аҫтында...», «Оҙон көй» тигән шиғырҙарҙа ла ошо мотив яңғырай.

«Көҙгө ауаз» – йөкмәткеһе менән оригиналь шиғыр. Уның лирик героиняһы, көҙгөгә ҡарап, үҙенең көҙө етеп килгәнен шәйләй, башта уға ышанмаҫҡа әйтә, алдаҡ тип уйлай, хатта көҙгөнө ватмаҡсы була, ләкин һуңыраҡ тынлана, сөнки үҙеңдән үҙең ҡаса алмағанды ул яҡшы аңлай.

Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына юлдарҙан һәм строфаларҙан торған «Насибым» – тәрән йөкмәткеле шиғыр. Уға халыҡ телендәге «Ҡатын ҡырҡтан уҙған – уҡаһы ҡойолған» тигән һүҙҙәр эпиграф итеп алынған. Лирик героиняның уҡаһы ҡойолор ваҡыты еткән, ләкин ул һис тә бошонмай, сөнки уның уҡаһын ҡыҙы йыя: тормош дауам итә – тәбиғәт кешелекте шулай яралтҡан.

Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән «Күнәм инде...»гә лә фәлсәфәүи фекер төрөлгән – күпме генә тырышһаң да («Көҙгө ауаз»дағы шикелле) үҙеңдән үҙең ҡасып булмай:

*Күнәм инде...*
*Киләсәккә еләм,*
*Үткәндәрҙе егеп мисәүгә.*
*Яуап көнөндә лә ҡалмаҫ улар,*
*Алдан килеп ятыр үлсәүгә.*

«Хараба аҫтында...» (2005) тигән шиғырға ла уҡыусы битараф ҡалмағандыр. Сабыр холоҡло, түҙемле лирик героиня, дуҫы хыянат итеп таяуһыҙ ҡалғас, иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы күтәрергә көс таба һәм үҙен хараба аҫтынан өҫкә ҡалҡып сыҡҡандай тоя, ә ышанысһыҙ таяуға “йыназа уҡый”.

Гөлнур Яҡупованың быуат башындағы шиғриәтенә бағышланған был күҙәтеүҙәремде тамамлағанда, уның «Селтербей ҡоралайы» һәм «Шиғыр иманы» тигән әҫәрҙәренә лә ҡарашымды белдерергә булдым. Миңә ҡалһа, күрер күҙгә бер-береһенән алыҫ торған был ике әҫәрҙе эстән ниндәйҙер ептәр тоташтыра һымаҡ. Уларҙың тәүгеһе Әнисә Таһироваға бағышланған. Уға хас ҡайһы бер һыҙаттарҙы автор элегантлы итеп асып биргән. Әйтергә кәрәк, «Селтербей ҡоралайы» – Г. Яҡупованың нескә тойомлау һәләтен һәм юғары этикетын күрһәтеп тороусы асыҡ миҫал. «Шиғыр иманы»нда иһә ул үҙенең ошо сифаттарын ябай ғына, ләкин уғата ла үтемлерәк итеп асып һалған: *«Иман кәрәк һәр бер эштә, бигерәк тә шиғриәттә»* ти ул.

Беҙгә иһә, шағирә артабан да аҡлыҡ, сафлыҡ, сабырлыҡ, хаҡлыҡ йырсыһы булып ҡала килһен, тигән өмөт бағлайһы ғына ҡала.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы профессоры.**

# АҠМУЛЛА ИЖАДЫНА БЕР ҠАРАШ

Мифтахетдин Аҡмулла – шағир, мәғрифәтсе булараҡ Башҡортостанда киң билдәле шәхес. Уның “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” тигән шиғырын хәҙер белмәгән кеше юҡ. Халыҡ араһында Аҡмулланың ҡулдан-ҡулға тапшырылып, күсереп алынған шиғырҙарын һәм уға бәйле риүәйәттәрҙе бөгөнгө көндә лә осратырға мөмкин.

М. Аҡмуллаға ҡағылышлы фольклор ҡомартҡыларын заманында Ә. Вилданов, Ғ. Ҡунафин, Р. Шәкүр, Ф. Нәҙершина, Н. Шоңҡаровтар экспедициялар ваҡытында яҙып алған булған. Ул материалдарҙың күбеһе Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге архивында һаҡлана. Фольклорсылар шағир хаҡында гәзит биттәрендә лә мәҡәләләр менән сығыш яһаған. Миҫалға Ф. Нәҙершинаның 1970 йылда “Совет Башҡортостаны”нда баҫылған “Аҡ ҡайындар һәм зәңгәр күлдәр” (16 июль), Р. Шәкүрҙең 2001 йылда “Башҡортостан” гәзитендәге “Шиғриәтебеҙҙең мәңгелек хазинаһы” (26 декабрь) мәҡәләләрен килтерергә мөмкин.

Аҡмуллаға бәйле материалдар беҙҙең тарафтан да яҙылып алынды. Өфө ҡалаһында йәшәүсе Латипова Исламия Фазылйән ҡыҙы Салауат районының Торналы ауылында тыуып үҫкән (1949 йылғы), хәҙерге Мәсетле районының Арыҫлан ауылы тарихы хаҡында һөйләгән саҡта: “Аҡмулла был ауылға килеп йөрөгән. Уның ике йәнһаҡсыһы ошонан булған”, – тип һөйләне. Салауат районының Мөсәт ауылынан Ғайсин Фәсхетдин Сәмсетдин улы (1935 йылғы): “Аҡмулла дөрөҫлөк тураһында шиғыр яҙғас, уның дошмандары күп булған, шуға уны Мейәс янында үлтергәндәр. Зәйнулла ишан – уның дуҫы, әүлиә булғас, уны үлтергәндәрен өйөндә белеп ултырған. Эх, Аҡмулланы әрәм иттеләр, тигән”, – тип һөйләне.

Ҡыйғы районының Сутыш ауылында Камалова Сайма Абдулйән ҡыҙынан (1935 йылғы) уның “Нәсихәттәр” шиғырының 8 строфаһы “Аҡмулла шиғыры” исеме аҫтында яҙып алынды. Әлбиттә, ул халыҡ араһында йәшәү дәүерендә, оригинал менән сағыштырғанда, бер аҙ үҙгәреү кисергән.

Аҡмулла “Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе” тигән шиғырының һуңында:

*Уны маҡтауъа мин ъәҙеб –*
*Ҡаҙаҡса бер бәйет яҙып*
*Тараттым йортҡа мин,–*

тип әйтеүенән, ул шиғырҙарын үҙе лә халыҡ араһында таратып йөрөгән, тигән фараз ҡылырға мөмкин.

Аҡмулланың шиғырҙарын халыҡ ныҡ яратып ҡабул иткән. “Ә ни өсөн һуң уның шиғриәте шундай танылыу яулаған?” – тигән һорау тыуа. Беренсенән, шиғырҙарының һәр бер юлы

мәҡәл кеүек тос әйтелә. Ул әйтем, мәҡәлдәрҙе йыш ҡуллана: “хаҡҡа үлем юҡ”, “эт эсенә һары май онамаған”, “яман дуҫ – ҡара йылан”, “аҡыллыға ишара”, “дәртем бар – дарманым юҡ”, “иламаған балаға имсәк теймәҫ” кеүек мәҡәлдәрҙе ҡулланып, Аҡмулла шиғырҙарын ул заман халҡына аңлайышлы, халыҡсан тел менән яҙған.

Икенсенән, Аҡмулла дини кеше булған, һәм шиғырҙарында уның күңелендә булған иман яҡтыртыла: ислам диненең төп ҡанундары булып торған әҙәп-әхлаҡ, иман һәм фарыз ғәмәлдәр: тимәк, мотлаҡ үтәлергә тейеш һаналған ғилем өйрәнеү, дәғүәт ҡылыу темаһы шиғырҙарында төп ролде уйнай. Дин буйынса әҙәм балаһына гүргә ингәнсе дин өйрәнеү, белем алыу – фарыз ғәмәл булып иҫәпләнә, һәм һәр мосолман халыҡҡа динде аңлатып, халыҡты шуға өндәргә тейеш. Аҡмулла шулай эшләгән дә.

Ул заманда Зәйнулла Рәсүлев Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең Халидия тармағының етәксеһе булып торған, Мифтахетдин, уның шәкерте булараҡ, уны суфый шағир, тип әйтә алабыҙ. Уның шиғырҙарының һәр юлында тиерлек дини, Салих инсандың уйҙары ярылып ята. Быға саҡлы халыҡ араһында “Суфый – донъянан ваз кискән, халыҡтан ситләшеп, үҙенең ғүмерен ғибәҙәт ҡылып ултырыуға ғына бағышлаған кеше” тигән хата ҡараш йәшәй килде. Был хата халыҡтың ислам динен, уның нескәлектәрен бөтөнләй белмәүҙән килә.

“Суфый” тип Мөхәммәт ғәләйһиссәләм пәйғәмбәр янына белем алырға килгән хәйерсе шәкерттәрҙе әйткәндәр. Сөнки улар өҫтәренә күбеһенсә дөйә йөнөнән (ғәрәпсә “суф”) тегелгән әйбер кейгән булғандар. Ошо пәйғәмбәребеҙҙән килгән юғары дини белем шәйехтәр тарафынан уҡыусыларынан уҡыусыларына бирелеп килә.

Ҡай берәүҙәр суфыйсылыҡты, русса әйткәндә, “аскетизм, отшельничество” терминдары менән генә билдәләй. Әммә ләкин, ундай донъянан ваз кискән кешеләр күп булған, тип әйтә алмайбыҙ. Әлбиттә, кешеләр араһында йәшәгән дәүерҙә гонаһҡа батыуҙан һаҡланып, халыҡ менән аралашыуҙы бер аҙ кәметеп йәшәгән суфыйҙар булған. Мосолмандарға, үҙ-үҙҙәренә артыҡ зыян килтермәҫ өсөн, салих инсандар араһында йәшәргә тәҡдим ителә. Сөнки, кеше ниндәй йәмғиәттә йәшәй, үҙе теләмәһә лә, ошо мөхиттең насар яҡтарын үҙенә һеңдерә. Икенсенән, Мөхәммәт пәйғәмбәр саллалаһу ғәләйһиссәләм өммәтенә ике донъяны ла тигеҙ алып барырға ҡушҡан, һәм мосолмандарыбыҙ шулай йәшәргә тырыша ла.

Ә хәҙистәр буйынса, Аллаһ ҡаршыһында халыҡ араһында йәшәп, уларҙан зыян күргән һәм шул уҡ ваҡытта күңелен таҙа тоторға, Раббыһының бөтә ҡушҡандарын үтәргә тырышҡан мосолмандың дәрәжәһе ҙурыраҡ, сауаплыраҡ була, тиелә.

Дин буйынса, кеше Аллаһты иҫләп, зикер әйтеп, йөрәген таҙа тоторға, шуға ынтылырға тейеш. Кеше йөрәге рухи аҙыҡҡа мохтаж, ә ул мохтажлыҡты фәҡәт дин өйрәнеп һәм дини ҡанундарҙы үтәгәндә генә тулыландырырға мөмкин. Ә былар: йөрәктең ихтыяж булған, көткән теләктәре, саҡырыуҙары, өмөттәре – барыһы ла Аҡмулланың шиғырҙарында сағыла. Шуға ла Аҡмулланың шиғырҙары халыҡ күңеленә яҡын, элек тә, хәҙер ҙә актуаль, популяр булып ҡала килә.

Аҡмулла тәү сиратта үҙе ныҡ дини кеше булған, шиғырҙарын да шул

ҡараштан сығып яҙған. Үҙенең “Нәсихәттәр”ендә лә ул былай ти:

*Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,*
*Әхирәт эштәренә инан, тигән...*
*“Иман шарты”н өйрәнмәһә –*
*Иван, тигән(1).*

Ә “иман шарты”– тип беҙ нимәне әйтәбеҙ һуң? Ул – Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә инаныу, Аллаһы Тәғәләнең фәрештәләренә, пәйғәмбәрҙәренә, Ҡиәмәт көнөнә, тәҡдиргә ышаныу. Тәү сиратта кеше Аллаға ышанырға һәм үҙ динен белергә тейеш, тигән Аҡмулланы бөгөн ҡайһы бер милләттәштәребеҙ, дингә ҡаршы көрәшкән, тип әйтеп маташыуы ҡыҙғаныс. Был дингә, Аллаһҡа, Ҡөрьәнгә ҡаршы сығыш яһау булыр ине. Уйлап ҡараһаҡ, әгәр ул дингә ҡаршы булһа, мәҙрәсәләргә уҡырға бармаҫ ине. Ул үҙе хаҡында ла шиғырҙарында “пак мулла, хаҡ мулла” тип әйтә. Ә “пак” тип беҙ саф йөрәкле кешене генә әйтәбеҙ. Ул муллаларҙан көлмәй, ә кешенең холҡондағы кире һыҙаттар: наҙанлыҡ, ялҡаулыҡ, тәкәбберлек хаҡында әсенеп яҙа, әҙәмдәрҙең тормошта ебәргән хаталарына иғтибар йүнәлттерә. Халҡының киләсәге хаҡында уйлап, улар яҙмышы өсөн борсолоп, уларҙы рухи яҡтан үҫтереү өсөн белем алырға өндәй. Үҙе Стәрлебашта суфый шағир Шәмсетдин Зәкиҙә, Троицкиҙа суфый ишан Зәйнулла мәҙрәсәләрендә белем алған, ислам динен, Ҡөрьәнде ныҡ яҡшы белгән, юғары рухлы, белемле инсан булғанлығы мәғлүм. Дөйөм алғанда, XIX быуатта – ул заманда һәр бер ауылда тиерлек мәсет, мәҙрәсә булғанлыҡтан – башҡорттар динде, ғөмүмән, яҡшы белгәндәр, халыҡ араһында иң аҡыллы кешеләр – муллалар иҫәпләнгән. Ризаитдин Фәхретдиновтың “Аҫар” исемле китабынан күренеүенсә лә, дини ғилемле кешеләрҙең ни тиклем күп булыуын, араларында Нәҡшбәндиә тәриҡәтендә торған, тассауф менән шөғөлләнеүселәрҙе байтаҡ күрәбеҙ (5).

Уның шиғырҙарының һәр юлында тиерлек нескә хис-тойғоло дини инсандың уйҙары ярылып ята.

“Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе” шиғырында:

*...Сәләмәтлек шишмәһенән*
*юлдар асып,*
*Хәҡиҡәт йылъғаларын ағыҙъған ул.*
*... Хоҙайым үтә һиҙгер йөрәк биргән,*

– тиелә. Быны нисек аңларға? Әгәр һәр ваҡыт зикер әйтеп, йөрәген таҙартҡанда, бөтә ағзалар ҙа һауыға, кеше сәләмәт була. Ә тәндең һау булыуы рухи һаулыҡҡа ла ярҙам итә. Хәҡиҡәт, ысынбарлыҡ кемдә? Ул Аллаһы Тәғәләлә, белем унан килә. Тимәк, Аллаһтан ғилем ала алған кеше хаҡында һүҙ бара. Ә Аллаһ белемде бөтә кешегә лә бирмәй. “Һиҙгер йөрәк” тигәнен “нескә күңел, тере йөрәк” тип аңлар кәрәк. Ә Аллаһтың барлығына ихлас ышанған, уны һәр ваҡыт иҫләп, зикер әйтеп йөрөгән кешенең йөрәге тере була. Ә күңелендә эрелек, яуыз уйҙар, көнсөллөк һәм ошолар һымаҡ кире һыҙаттары булған кешенең йөрәген ауырыу йөрәк тиҙәр.

*Мин үҙем бер дәрдмән, диуанамын,*
*Ҡайҙа бер тәхҡиҡ күрһәм,*
*ҡыуанамын.*
*Был затта ғәжәп тәхҡиҡ*
*күргәндән һуң,*
*Ихтыярһыҙ шул сәбәптән*
*йыуанамын,*

– был хәлде суфыйҙар тәфәккүр хәле тип атайҙар. Нимәгәлер ҡарап, уны Аллаһы Тәғәлә бар ҡылғанлығына, уның бөйөклөгөнә хайран ҡалыу, һоҡланыу ул. Ошо тәфәккүр хәле өсөн Аллаһы Тәғәлә бәндәһенә ҙур сауаптар яҙа, хатта ки 41 йыл нәфел намаҙын уҡыған кимәлендә була, тиҙәр. Бындай миҫалдарҙы, аңлатмаларҙы бик күп килтерергә мөмкин.

Бөгөнгө көндә, әлбиттә, исламды бөтөнләй белмәгән, аңламаған, диндән алыҫ торған кешеләргә Аҡмулланың шиғырҙарын аңлау ауыр. Улар шағирҙың ни әйтергә теләгәнен, ниндәй кәйеф менән яҙғанын, уй-кисерештәрен дөрөҫ аңламаясаҡ. Ғүмерендә бер тапҡыр ҙа намаҙ уҡымаған, сәждә ҡылмаған, хатта ки Аллаһтың барлығын иҫтәренә лә төшөрмәгән әҙәмдәр ул заманда йәшәгән дини кешенең күңелен нисек тәрән аңлаһындар инде? Үкенескә ҡаршы, бигерәк тә совет заманында, атеистик рухта тәрбиәләнгән ғалимдарыбыҙҙың күбеһе иҫке ҡараштарынан баш тартып, икенселәй фекерләүгә күсә алмай. Шуға ла улар дини кеше ижадына дөрөҫ, тулы баһа бирә алмай.

Раббыбыҙ бойорған бөтә ҡанундарҙы үтәп йәшәгәндә генә, йылдар буйы намаҙ уҡып, Аҡмулла һымаҡ, Аллаһ, ислам дине, халыҡ тормошо, киләсәге хаҡында тәрән уйланып йөрөгәндә генә, уның шиғриәтен аңларлыҡ кимәлгә ирешеп буласаҡ. Шағир йәшәгән заманды күҙ алдына килтереп, уның күҙлеге, тойомлауы аша донъяға күҙ һалып ҡарар кәрәк. Дини ғилемде баш менән генә түгел, йөрәк менән аңлау, тойоу ҡеүәһенә ирешкәндән һуң ғына, фекерләү юғарыраҡ даирәләргә еткәс кенә, һығымталар яһарға мөмкин.

Аҡмулла фәҡәт халыҡ араһында йөрөгән мосолман булған. Аҡмулла шиғырҙарында үҙен дә, таҙ эт, бисара, диуана, тип әйтә. Беренсенән, дин буйынса күңелендә әҙ генә эрелеге, тәкәбберлеге булған кеше ожмаҳҡа инмәй. Ә революцияға саҡлы ауылдар буйлап доға уҡып, кираматтар күрһәтеп йөрөгән кешеләрҙе беләбеҙ. Уларҙы дәрүиш, диуана тип атағандар. Ә кемдәр һуң кираматтар күрһәтә ала? Уларҙы “Аллаһтың дуҫтары” тиҙәр. Аллаһы Тәғәлә бойорғандарын тулыһынса үтәгән һәм уның ризалығына был донъялыҡта уҡ ирешкән әҙәмдәренә Аллаһ бүләк итеп оло ғилем бирә. Шунлыҡтан уларҙы вәли – изгеләр тигәндәр.

Был ҡыҫҡа мәҡәләлә беҙ дин, суфыйсылыҡ тураһында күп итеп һөйләп, ентекле аңлатма биреүҙе маҡсат итеп ҡуйманыҡ. Ул белемде һәр кем үҙе алырға, эҙләнергә, уҡырға тейеш, ә дини ғилем алғансы йылдар үтә, бер ни тиклем тормош тәжрибәһен туплағас ҡына кеше алдында бөтөнләй икенсе донъя асылырға, уның юғарыраҡ үрҙәр, киң даирәләр барлығын аңлауы, күреүе мөмкин.

**Фәнирә ҒАЙСИНА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре.**

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

1. Аҡмулла. Шиғырҙар /Төҙ., аңлатмалар һәм баш һүҙ авт. Ә. Вилданов. Яуаплы мөхәррир Ғ. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡ. китап нәшр. 1981. 224-се б.
2. Ғайсина Ф. Аҡмулла суфый шағирмы? //Башҡортостан. 2007, 19 сентябрь.
3. Нәҙершина Ф. Аҡ ҡайындар һәм зәңгәр күлдәр // Совет Башҡортостаны. 1970, 16 июль.
4. Шәкүр Р. Шиғриәтебеҙҙең мәңгелек хазинаһы //Башҡортостан. – 2001, 26 декабрь.
5. Фәхретдинов Р. Аҫар. /Ғилем, 2006. 176-сы б.

# АҠМУЛЛА ҺӘМ ҠАҘАҠ ӘҘӘБИӘТЕ

Башҡорт халҡының бөйөк шағиры Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулланы быуаттар һуҙымында уртаҡ яҙмышлы, ауыҙ-тел әҙәбиәтенең килеп сығышы һәм илһам сығанағы дөйөм булған өс туғандаш халыҡ – ҡаҙаҡ, башҡорт һәм татарҙар үҙҙәренеке итеп ҡабул итәләр. Шағирҙың демократик мәғрифәтселек ҡараштары Солтанмәхмүт Торайғыров, Сәкен Сәйфуллин, Сабит Моҡанов, Ғабдулла Туҡай, Ғәлимйән Ибраһимов, Мәжит Ғафури һәм башҡа шул осор мәғрифәтселәренең ижади үҫешенә идеялы йоғонто яһаған.

Үҙ заманының танылған ижадсыһы булараҡ, М. Аҡмулла һәр ваҡыт башҡорт һәм татар тикшеренеүселәре иғтибары үҙәгендә була, мәгәр хаҡлы рәүештә Салауат Юлаев менән Мәжит Ғафури ижады араһындағы осорҙа демократик идеяларҙы таратыусы иң талантлы һәм абруйлы мәғрифәтсе шағир тип табыла. Бынан тыш Мифтахетдин Аҡмулла башҡорт милли әҙәбиәтенең нигеҙ һалыусыһы булып та тора. Аҡмулланың поэтик мираҫын өйрәнеүгә ҡаҙаҡ әҙәбиәт ғилеме белгестәре лә тос өлөш индерҙе.

Шағирҙың халыҡты белемле итеү хыялы, үҙенең белем усағына ябай халыҡты ылыҡтырырға ынтылыусы фекерҙәштәрен йәлеп иткән. М. Аҡмулла Нуржан Наушбаев менән Ҡустанай ҡалаһы эргәһендә балалар уҡытҡан осорҙа таныша, яҡын аралаша. Аҡындар асыҡ һүҙ бәйгеһе – айтысҡа (әйтешкә) сыҡмаһалар ҙа, улар бер-берҙһенә шиғри формалағы шаян бағышлауҙар – үҙенсәлекле эпиграммалар менән алышалар.

Был мөнәсәбәттәр Нуржандың поэтик телмәренә тәьҫир итмәй ҡалмаған, унда Аҡмулланың йоғонтоһо асыҡ ярылып ята. Иғтибар итәйек.

Аҡмулла:

*Иң әүүәл паклау кәрәк эстең керен,*
*Эстә тулып ятмаһын һаҫыҡ эрен.*
*Аһ, дәриға! Эс таҙарһын, эс таҙарһын,*
*Булмаһа, файҙа бирмәҫ ҡоро белем.*

Нуржан, кешенең белеме, мәҙәниәте юҡ икән, уның ҡиәфәте, тышҡы матурлығынан ғына ниндәй файҙа, ти:

*Кысқаша осы болар түсіндір,*
*Адамның сыртын көрмей, ішін білу,*
*Ішінен ілім-білім табылмаса,*
*Не пайда келтірмекші сырты сулу?*

*(Ҡыҫҡаса ошо булыр төшөндөрөү:*
*Әҙәмдең һыртын күрмәй, эсен белеү,*
*Эсенән илем-белем табылмаһа,*
*Ни файҙа килтермәксе һырты һылыу?)*

Был үрнәктәр ике шағирҙың идея йүнәлешенең асылын ҡылыҡһырлай. Аҡмулла менән Нуржан ижадының бер-берһенә йоғонтоһон сағылдырыусы бындай поэтик юлдар бихисап. Нуржан, Мифтахетдиндән күпкә йәш булараҡ, өлкән дуҫына ҙур хөрмәт менән ҡараған, ә Аҡмулла вариҫына айырыуса иғтибарлы, яҡшы мөнәсәбәттә була, унда үҙенең рухташ туғанын күреп, Нуржанға йыш ҡына килеп йөрөгән. Аҡмулланың алдынғы

ҡарашлы поэзияһы яңы осор таңы менән уянған йәш ҡаҙаҡ шағирҙарының күңел түренә ныҡлап урынлаша. Улар Аҡмулланың йөкмәткеле һәм бай образлы поэзияһы менән һутланып, унан рухи энергия алалар. Ҡаҙаҡ шағиры Солтанмәхмүт Торайғыров – Аҡмулла мәктәбен үтеүсе шағир-демократтарҙың береһе. Солтанмәхмүт Троицк ҡалаһында уҡыған саҡта бөйөк шағирҙың шиғырҙары менән таныша. Ваҡыт үтеү менән, Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙары дөрөҫлөк эҙләүсе йәш шағирҙың күңел түрендә ныҡлы урын ала. Солтанмәхмүт М. Аҡмулланың шиғырҙарын күсереп алып кесәһендә йөрөтөр һәм йәштәр менән йыйылышҡан мәлдә яттан уҡыр булған. Ул Аҡмулла шиғырындағы идеяларҙы артабан да дауам иттерергә кәрәклекте аңлай.

Шулай итеп, Аҡмулла ижады ҡаҙаҡ шағирҙары йөрәгендә йәнле фекер уята, уларҙың поэтик үҫешенә көслө йоғонто яһай, шулай уҡ поэзияны үҫтереүсе яңы формалар, яңы юлдар табыуға ынтылыш тыуҙыра.

Талантлы шағирҙар һәм күренекле ҡаҙаҡ әҙәбиәте белгестәренән Тормәгәмбәт Изтлеулов, Омар Шипин, Иманжола Жылкайдаровтарҙа Аҡмулла йоғонтоһоноң тәьҫире һиҙелә, шулай уҡ ҡаҙаҡ совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе – күренекле ҡаҙаҡ яҙыусыһы Сабит Моҡановты ла әйтергә була. Ул Аҡмулланың ижадын бик яҡшы белә, шағирҙың әҫәрҙәрен яттан һөйләй, һәммә ерҙә лә уларҙы пропагандалай. Ошо урында Сырбай Мәүленовтың түбәндәге һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр: «Аҡмулла шағирҙар араһында лидер була. Ул Омар Шипин һәм башҡа ҡаҙаҡ халыҡ аҡындарына тормошҡа йүнәлеш бирә».

Сабит Моҡанов башҡорт әҙәбиәте менән яҡшы таныш була һәм уның ҡаҙаныштары менән нигеҙле ғорурлана. Ғалим, Аҡмулланың поэтик ижадын юғары баһалап, ҡайҙа ғына бармаһын, уның шиғырҙарын ятҡа һөйләп йөрөр булған. «Әсе телле шағирҙың һүҙҙәре йылан кеүек сағыр булған. Халыҡты иҙеүселәрҙе һәм эксплуатациялаусыларҙы ул һүҙ менән ҡаҙаҡлай алған, быларҙы ул ярһыу һәм ярыша алмаҫлыҡ итеп башҡарған», – С. Моҡановтың был һүҙҙәрендә уның Аҡмулла ижады менән һоҡланыуы күренә.

Ҡаҙаҡ поэтик традицияһы менән ауаздаш булған М. Аҡмулла шиғырҙарында йәмғиәттең XIX быуаттың икенсе яртыһындағы социаль-сәйәси проблемалары сағылыш таба. Шағир халыҡ тормошоноң шул осорҙағы негатив яҡтарын киҫкен тәнҡитләй. Аҡмулла һәр бер ҡаҙаҡ кешеһенә ҙур өмөттәр бағлай:

*Халҡыңыз жатар жеріңді ойыңа ал,*
*Отка түспе біреудің бөлеі үшін.*
*Жіберме адал дауың шамаң келсе,*
*Күс канатын жаяды баласы үшін.*

*(Халҡығыҙ йәшәгән ерҙе уйыңа ал,*
*Утҡа төшмә берәүҙең бәләһе өсөн.*
*Ебәрмә изге дауың самаң килһә,*
*Ҡош ҡанатын йәйәлер балаһы өсөн.)*

Дөйөм алғанда, шағир үҙенең шиғырҙарын кешелек көнкүрешенең мораль-этик яҡтарына бағышлай, ватандаштарына нимәнән һаҡланырға, нindәй бейеклектәргә үрләргә кәрәклекте өйрәтеп өгөт-нәсихәт бирә. М. Аҡмулланың нәсихәттәре ғәжәп рәүештә бөйөк ҡаҙаҡ аҡыны Абай әҫәрҙәре менән ауаздаш.

**Тләктәс ТУҠҺАНБАЕВА,**
**С. Байышев исемендәге Аҡтүбә университеты доценты.**

# ТЕРЕ ТАРИХ



*Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов.*

*60-сы йылдар урталарында мин Фатима өләсәйем менән Йүрүҙән яры буйынан ҡыҫҡа юл менән Михайловка ауылына табан атлай инек. Ҡаршыға өлкән йәштәге ир кеше килеп сыҡҡас, өләсәйем уның менән иҫәнләште лә үтеп китергә ниәтләнде. Ләкин теге ир уны туҡтатты,унан хәл-әхүәл белешергә тотонды. Өләсәйемдең уның менән һөйләшкеһе килмәгәне күренеп тора. Уларҙы бер аҙ тыңлағас, мин был кешенең беҙгә яҡын туған икәнен аңланым.*

*– Кем ул? Ниңә һөйләшмәнең?– тинем өләсәйемә.*

*– Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов, – тип яуапланы ул. – Таһира апайымдың тәүге ире, Ғабдулхаҡ ағайымдың атаһы.*

*– Ғабдулхаҡ ағай Ғәйнуллин бит, ә был Ҡолмөхәмәтов?– тинем мин.*

*– Хәйрулла тәүҙә Ҡолмөхәмәтов ине, Ҡаҙағстандан Ғәйнуллин булып ҡайтты. Хәҙер тағы Ҡолмөхәмәтов булып йөрөй, – өләсәйемдең яуабы ҡыҫҡа булды.*

*Ул башҡаса был кеше тураһында бер нәмә лә һөйләмәне. Мин дә төпсөнмәнем. Күп йылдар үтеп, Х. Ҡолмөхәмәтовтың архивы ҡулыма килеп эләккәс, уның яҙмышы тулыһынса асыҡланды. Фамилия алмаштырыуы иң ҡыҙыҡлығы һәм серлеһе түгел икән. Х. Ҡолмөхәмәтовтың тыуған ягын яраткан үҙешмәкәр тарихсы булыуы асыҡланды. Ул башҡорттар тарихында үҙе бер айырым ҡомартҡы булған Таҙлар ырыуынан сыҡҡан. Боронғо грек тарихсыһы Геродот «Тарих» тигән китабында был ырыуҙың беҙҙең эраға тиклем бишенсе быуатта уҡ Урал тауҙары буйында йәшәгәнен иҫкә ала. Ошо ырыуҙың бер нәҫеле Ҡаратаулы ауылында көн күргән булып сыға. Был мәғлүмәт ауылды бик боронғолар исемлегенә индерә.*

*Хәйрулла бабайҙан үҙ яҙмышы, ауылдаштары һәм башҡа кешеләр тураһында яҙылған бер ҡульяҙма ҡалған. Мәрхүмдең 1963 йылда яҙылған ошо хеҙмәтенең бер нисә өлөшөн мин журнал уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итергә булдым.*

**Радик ВАХИТОВ.**

Элек ауылда барыһын да ҡарттар хәл иткән. Уҫалыраҡ, һүҙгә байыраҡ оло кешенең ауыҙынан сыҡҡан һүҙен күтәп кенә ултырғандар. Улар, билдәле, – муллалар, байҙар араһынан, һәм уларҙың һүҙе – һүҙ, ә ярлыларҙың уй-фекерҙәре бай, үткер булһа ла, үтмәгән.

Мин 1904 йылдың 1 сентябрендә Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Нәсибаш волосының Ҡаратаулы ауылында тыуғанмын. Атайым Динмөхәмәт, ҡарт-атайым Ҡолмөхәмәт, атайымдың инәһе Көнәй (моғайын, Көнһылыу булғандыр – **Р.В.**) исемле булған. Ҡартинәйем – Салауат Юлаевтың бүләһе Килдейәр ҡыҙы – бик уңған һәм тырыш ҡатын булған. Ғаилә әйләнәһе алты аршын, башы тыранса менән ябылған өйҙә йәшәгән. Уның мейесе булмағас, сыуал яғып йылытылған. Атайым Урыҫ Малаяҙында байға эшләгән. Ҡартинәйем үлеп киткәс, 1899 йылда ауылда янғын сыға һәм өй менән лапаҫ янып бөтә. Толоптан башҡа бер нәмә лә ҡалмай.

Ҡартатайым, Ҡолмөхәмәт, Әлкә ауылына барып, икенсегә өйләнә. Туйға бер нәмәһе булмағас, ул Динмөхәмәтен алпауыт Мурашовҡа аҡса алып торорға ебәрә. Атайым толопто аманатҡа биреп, алпауыттан 5 һум аҡса, 10 ҡаҙаҡ он алып ҡайта. Урыҫ Малаяҙына барып, балта оҫтаһы эшенә яллана, бер бот он да ала. Шунан ҡартинәйҙе туйға алып ҡайтырға китәләр.

Толопто аманатҡа биргәндә атайым Мурашовҡа йыл ярым эшләү тураһында килешеү төҙөй. Ҡыш та етеп килә. Торорға өй ҙә, кейеп йөрөргә толоп та юҡ. Әйләнәһе дүрт аршындан бура бурап, мунса кеүек тупаҡ башлы, бер ҡарындыҡ тәҙрәле өй һалып инәләр. Йәш ҡартинәйемдең өс балаһы була: тәүгеһе Хөрмәтулла, Сибәркәй исемле ҡыҙ һәм Вәлиулла. Ҡартатайым үлеп киткәс, атайым алпауытта эшен ташлап ҡайтырға, өс йәтимде ҡарап үҫтерергә тейеш була. Был юлы ул Михайловка утарында йәшәгән Емельян Чванов тигән урыҫҡа хеҙмәтселеккә яллана. Ләкин бай бик аҙ түләй, йәтим балаларҙы ҡарарға көс етеңкерәмәй. Йәш ҡартинәйем ҡәйнеше Кәлимуллаға кейәүгә сығырға мәжбүр була.

1898 йылда атайым Динмөхәмәт Ҡаратаулы ауылынан Ғәйфулла Тайсыновтың ҡыҙын һората. Ләкин Ғәйфулланың ҡатыны Бәҙриҡәмәр, хәйерсегә ҡыҙ бирәләрме ни, тип ҡаршы төшә. Ә Ғәйфулла ҡарт иһә, Динмөхәмәттең инәһе юҡ, ҡыҙыма ҡәйнәһеҙ тороуы еңелерәк булыр тип, Маһиҡәмәрен атайыма бирергә риза була. «Егет кеше тырыш булыр әле, ярҙам да итеп ебәрербеҙ»,– тип үҙен йыуата. Шулай атайым Маһиҡәмәрҙе, инәйемде, кәләшкә ала.

Мунса кеүек кескәй генә өйҙән Сибәркәй апайымды алып, тәүҙә йәш ҡартинәйем сығып китә. Хөрмәтулла менән Вәлиулла ағайымдар атайым янында ҡала. Ғәйфулла ҡарт ҡыҙы менән кейәүенә бер тана һыйыр, бер һарыҡ, бер ҡаҙ бирә.

Атайым менән инәйем, байға эшкә кермәһәләр ҙә, бер нисә йыл йәйҙәрен ураҡ урырға ялланып эшләгәндәр. Уларға ашлыҡ урышырға Хөрмәтулла ағайым да йөрөгән. 1899 йылда әйләнәһе алты аршын иҫке өй һалып, башын тыранса менән яптырып, йәшәй башлайҙар. 1903 йылда көслө дауыл сығып, өй баштарын, 30-40 метр урам аша йәшәгән Фәсәхетдин ағайҙың өй мөйөшөн емергән. Күрше Аллабирҙе бабайымдың өйөн бөтөнләй ҡыйшайтып ҡуйған. 1911 йылға тиклем ярлы, асҡа туҡ булып йәшәгәндәр. Атайым бер ат, бер һыйыр, ике һарыҡ аҫырап, йыл һайын бик күп сығым түләү арҡаһында тормоштарын яҡшырта алмаған.

Атайым ваҡытлы хеҙмәттә (ополчение) булып, Карпочинский тигән бер офицерҙан русса хәреф танырға өйрәнгән. Бер ай эсендә аҙ-маҙ булһа ла яҙыу танып

ҡайтҡан. 1912 йылда, ҡыш көнөмө, яҙмы, Ерал ауылында йәрминкә булған. Атайым Шағанай ауылында ағаһында ҡунаҡта булғандан һуң, ҡайтышлай шул йәрминкәне күрергә барған һәм шунда теге Карпочинскийҙы осратҡан. Был офицер атайымды сәй эсергә саҡырған. Уның атаһы Ералда һатыусы икән, шул атайымды үҙендә эшкә ҡалырға өндәгән. Ләкин атайым, юҡ, мин батрак булмайым, тип баш тартҡан. Хатта сәйен дә эсмәй сығып киткән. Карпочинский атайымды кире индереп, һыйлап сығарған, ҡайһы ауылдан икәнен дә һорашҡан.

Ул офицер Ҡыҙырбаҡта йәшәгән алпауыт Мурашовҡа килеп, уның ҡыҙын алырға ниәтләнеп йөрөгән. Бер ваҡыт Мурашовтарҙа ҡунаҡта ултырғандамы, үҙ-ара һөйләшкәндәме, Карпочинский атайымды һорашҡан: «Ҡолмөхәмәтов Диникай кәрәк ине. Уны нисек күрергә? Ул миндә һалдат булды», – тигән. Ғаилә ағзаларымы, Мурашов үҙеме, атайымдың бында торғанда яҡшы эшләгәнен әйткән. Офицер алпауыттың көймәле тарантасына өс ат ектереп атайыма килә. «Һинең байға керәһең килмәй булды инде. Улайһа, һин минән 10 һумлыҡ тауар ал да тубалсы булып һатыу ит. Мин һиңә өй һалдырып бирәм»,– тип өндәй. Ләкин атайым быға ла риза булмай, инәйем дә: «Кәрәге юҡ, һатыу килеп сыҡмаһа, йә тауар юғалһа, һөргөнгә оҙатырҙар», – тип ҡаршы төшә. Карпочинский буш ҡайтып китә, ләкин ул атайымда сауҙа эшенә тотонорға ниәт уята.

Ҡаратаулыла ауылдың уртаһынан ағып ятҡан Шерҙәле йылғаһы бар. Йылғаның уң яғынан, яр буйлап (мин тыуған урам – **Р.В.)** өйҙәр теҙелгән. Һул яҡлап ярға арҡыры йәнә бер урам ултырған. Уң яҡ ярҙа Сирай сауҙагәр, уға күрше Нафиҡ бай йәшәй (Нафиҡтар беҙгә нисектер туған. Яҡуп Нафиҡов атайым менән Өфөлә аралашып йәшәне – **Р.В.**)

Шерҙәленең һул яҡ урамында байҙар юҡ, урта хәллегә күскән Сәйфит мөәзинде исәпкә алмағанда, барыһы ла ярлылар. Мөәзин ике ат, бер һыйыр аҫыраны. Атайымдың да аҙыраҡ килеме бар ине. Еренең бер өлөшөн ул Татар Малаяҙында йәшәгән Шакир сауҙагәргә ваҡытлыса файҙаланыуға биргән. Шакир атайымды ҡунаҡҡа ла саҡырғылаған. «Һинең менән, Диникәй ағай, күптән дуҫлыҡ тотабыҙ, һин минән аҙлап ҡына ваҡ-төйәк алып, һатыу итергә өйрән», – тигән ул атайыма. Һәм 5 һумлыҡ бер тубал тауар биргән. Шакир сауҙагәр тауарҙары менән бер йыл һатыу иткәс, атайым уға аҡсаһын ҡайтарып биргән дә, һыйырын һатып, үҙ аҡсаһына сәй-шәкәр менән һатыу итергә тотонған. 1913–1914 йылдарҙа атайым үҙ аҡсаһы менән генә эшләгән. 1914 йылғы хаҡтар менән уның лавкаһында 20 – 25 һумлыҡ тауар йыйылған була. Ләкин атайым байып китә алмай, 1914 йылдың көҙөндә һалдатҡа алына һәм Беренсе империалистик һуғыштан 1917 йылда ғына әйләнеп ҡайта.

Ул саҡта ҡурала күк бейә, туры тай һәм бер ҡолонҡай, бер һыйыр, бер тана, өс баш һарыҡ була. Ҡош-корттан – ике ҡаҙ, биш-ун тауыҡ. Сауҙа менән шөғөлләнеүсе булмай. 1918 йылдың башында туры тайҙы саптар атҡа алмашып, ике егенке атлы булдыҡ, тана ла быҙауланы. Бер быҙауыбыҙҙы бүре тамаҡлап киткәс, тағы ла бер быҙауға ҡалдыҡ. Ике һыйыр булғас, тормош йүнәлә башлаған кеүек булды. Ләкин шул йәйҙә Михайловка ауылына аҡ казактар килеп тулды. Өс казак Ҡаратаулыға килеп, һимеҙ генә тана һыйырыбыҙҙы, аҡса түләмәй генә, йорттан алып сығып киттеләр. Инәйем арттарынан барып, танаға йәбеште, ләкин уны ҡыуып ебәрҙеләр. Шул уҡ көндө казактар тана һыйырҙы һуйып ашаған.

Йүрүҙән таша башлағас, казактарҙың ғәскәре Карпочау (Кропачево

станцияһы, Карпочинскийҙар утары ла шунда – **Р.В.**) яғына табан йүнәлде. Улар китеп бөткәс, «аҡ казактар ҡаса, ҡыҙылдар килә» тигән хәбәр таралды. Ауыл халҡы, ҡыҙылдарҙан ҡасабыҙ тип, аттарын егеп сыҡты. Күп тә үтмәне, Көскәнде йылғаһы яғынан аҡтарҙың йәйәүле ғәскәре килеп сыҡты. Ауыл халҡының ылауҙарына тейәлгән әйберҙәрен ергә ташланылар ҙа егеүле аттарҙы үҙҙәренең ылауына ҡуштылар.

Йүрүҙәнде кисеп сығырлыҡ түгел. Арбаларҙы кәмәгә тейәп, аттарҙы йөҙҙөрөп сығарып, Ҡалмаҡ ауылы зыяратынан бер аҙ киткәс, Сусҡа ташы ҡулында ылаусыларҙы йыйып алдылар. Атты кешеһеҙ йөрөтөп булмай тип, аҡтар мине ылаусы итеп алды, Нәсибаш ауылын үткәс ҡайтарырбыҙ, тинеләр. Нәсибашты ла уҙып киттек, ҡалдырмайҙар. Урмансы, Тирмән ауылдары ла артта ҡалды, ләкин, ҡайтырға ярай, тип әйтеүсе юҡ. Бер тәүлек үтеп, ҡараңғы төшкәс урман араһына инеп, аттарҙы туғарып, ашатырға булдылар. Ҡараңғынан файҙаланып, мин саптарыма атландым да урман араһынан ҡастым. Төн буйы барҙым да барҙым. Ике мәртәбә суйын юлын аша сыҡтым.

Яҡтыра башланы. Тауға табан ынтылдым, бер юл таптым. Ул юл түбән төшә икән. Мин унан барырға ҡурҡтым, тағы ла тотоп, атымды алып китерҙәр, тип уйланым. Аттың ҡамыты менән ыңғырсағы өҫтөндә булғас, ылауҙан ҡасҡанлығым күренеп тора. Туҡтап, тыңлап алам. Үлән оҙон, ләкин тыңлағанда ташлыраҡ ерҙәрҙә бричка тәгәрмәстәре тауышы ишетелә. Һыу эске килгәс, аттан төшөргә тура килде. Юл ситендә сылтырап аҡҡан шишмә һыуын эскәндә, атым өркөп киткәндәй булды, ҡараһам, ике һыбайлы хәрби килә. Минән юл һорашалар, мин, белмәйем, тим. Һин ҡайҙан, ти хәҙер былар. Береһе ары китмәксе булғайны ла, икенсеһе, был ҡасып киткән ылаусылыр, тине. Атым менән түбәнгә үҙҙәренең артынан эйәрергә ҡуштылар. Мин, асмын, атым да ашамаған, арыған, тигән булам. Һалдат арҡаһынан мылтығын алды ла, «вперед, рысью марш!» тип, мине алып китте. Ике-өс саҡрымдай үтеп, ылауҙарын ҡыуып етеп, ҡушылдыҡ. Куркино утары урыҫтарының аттары арығас, минең атты егеп көн буйы килдек.

Төн булды, ат ашатылмаған. Бер суйын юлының күпер аҫтынан сыҡтыҡ. Төн ҡараңғы, ямғыр яуа. Таң атҡансы килдек. Мин бик асыҡтым. Бер татар һалдатынан ашарға һораным. Ул мине ашатты ла «тиҙҙән завод булыр, шунда һине атың менән ҡалдырырҙар» тип йыуатҡан булды. Ул завод Һатҡы икән, уны уҙып киттек – туҡтаманылар. Бер ни хәтлем китеп, кескәй генә ауылды үткәс, ял бирҙеләр. Аттарҙы ашарға ебәрергә ҡушылды. Мин атты туғарҙым да, һыбай атланып, кире заводҡа ыңғайланым. Һатҡыға керәм тип килгәндә, ике һыбайлы артымдан ҡыуып етеп, береһе ҡамсы менән арҡа буйыма тартып та ебәрҙе. Икенсеһе мылтығын алды. Әшәке һүҙҙәр менән тиргәп, кире алып киттеләр.

Был юлы атымды икенсе кешегә бирҙеләр. Хайуан бик ныҡ ябыҡты. Ә миңә ҡасып киткән икенсе кешенең атын тотторҙолар. Ашарға биреүсе юҡ. Тик әлеге татар һалдаты, Минзәлә өйәҙе кешеһе, аҙыраҡ ашарға биргеләне. «Һин, энем, атыңды ҡалдыр ҙа ҡайт та кит»,– тип тора. Ләкин мин атты йәлләйем, атайымдың, ниңә атты ҡалдырҙың, тип туҡмауынан ҡурҡам. Шул ваҡыт янибыҙға Мөсәт ауылының бер кешеһе килде. Ул да ылауҙа йөрөй икән. «Һин, ҡустым, атыңды үҙеңә ал, – тине ул. – Тиҙҙән пискә (һаҙлыҡ – **Р.В.**) була, шуның эсенә аттарҙы кертербеҙ ҙә үҙебеҙ бер өйҙә ҡалырбыҙ». Ләкин ул урында туҡтатманылар. Төн буйы барҙыҡ. Алла һаҡлаһын, эре-эре таш араһынан үтәбеҙ. Златоуст та артта ҡалған, ҡайҙан үткәнбеҙҙер.

Златоустан һуң да бик күп ауылдар артта ҡалды. Мейәс ҡалаһын көндөҙ

үттек. Атты туғармайынса ғына ашатабыҙ. Бер төн ниндәйҙер башҡорт ауылына барып индек. Ямғыр яуа, юлдар бысраҡ, аттар һис кенә лә тарта алмай. Бер башҡорт ҡартының өй артына аттарға ашарға һалып, үҙебеҙ өйгә үттек. Был Илмәш ауылы икән, станцияһы ла бар, бер казарма, ике разъезд. Йыраҡ түгел – Медведево тигән рус ауылы. Мин бик ныҡ өшөгәйнем. Хужа мине мейес башына, йылын, улым, тип мендереп ебәрҙе. Йылыға иҙрәп, ҡаты йоҡлағанмын. Уянып китһәм, яҡтыра башлаған. Саптар ат юҡ, ихатала арба ғына ултыра.

Аҡтарҙы Ҡыҙыл Армия ҡыуып килеү сәбәпле, кемдер минең атҡа атланып ҡасҡан. Мин ауыҙымды асып тороп ҡалдым. Өй хужаһы Әхмәтйәр бабай: «Вәт, малай, ат йәлләп, хитланып йөрөмәҫкә ине һиңә. Ҡапталып китһен атың, ҡайт та кит ине»,– тип һуҡранды. Бабай мине өс көн ашатып-эсереп аҫраны. «Суйын юлын төҙәтһендәр, шунан һуң поезда ҡайтырһың»,– тине. Аҙна-ун көн үткәс, мине Медведевка ауылына илттеләр. Шунда утын киҫеп ике айға яҡын йөрөнөм. Ҡар берсә яуа, берсә ирей. Ул арала ике-биш вагон тағып, паровоздар ҙа йөрөй башланы. Ноябрҙең аҙаҡтарында бер паровозға ултырып, Златоустҡа барып еттем. Был паровоз ары бармай, икенсеһе китә, тинеләр. Паровоз машинисына: «Күмер ташлашырмын, утын тейәшермен»,– тип бик үтенеп һорағас, ул ризалашты.

Паровоздан паровозға күсеп, вагондар араһындағы буферҙарында баҫып тороп Усть-Ҡатау станцияһына килгәс, төшөп ҡалдым. Кис булды. Станцияла йоҡлап, иртәгәһенә төшкә тиклем поездың китеүен көтөп ала алмағас, йәйәүләп Яхъя ауылында йәшәгән Әхтәрйән ағайҙарға (ҡартинәйем Хәбирәнең ағаһы – **Р.В.**) киттем. Унда бер кис ҡунғас, ағайым мине ат егеп Кропачевоға илтте. Станцияла Юныс ауылынан Ғөбәйҙулла еҙнәм осраны. Атайымдың тыуы Зәғифә апайымдың кейәүе ине ул. Уларҙа бер көн ҡунаҡ булып, иртәгәһенә еҙнәм мине Ҡаратаулыға килтереп ҡуйҙы. Атайым менән саҡырышып йөрөгән бажалар булғанлыҡтан, мине лә алып килгән ҡыуаныстан ул беҙҙә өс көн ҡунаҡ булды.

Бер айға яҡын үткәс, 1919 йылдың ғинуарында, мин тифтән ауырып, ике айға яҡын түшәктә яттым. Ана үлә – бына үлә тип, атайым менән әсәйем ҡулымдан тотоп, янымда илашып ултыра. Мин өндәшергә теләһәм дә, ауыҙҙы аса алмайым, сөнки яңағым ҡатҡан да ҡуйған. Инәйем шыйыҡ ҡына аш бешереп, бер ҡалаҡ менән ауыҙымды ҡайырып, икенсеһе менән ашата ине. Мин ауырып ятҡанда, инәйем тағы ла бер ҡыҙ бала тапты. Шулай мин әкренләп ашай, өй эсендә йөрөй башланым. Инәйем ҡыуанды, ана, Хәйрулла улым йөрөй, терелеп китте, тип әйтер ине. Ләкин шатлыҡлы көндәр оҙаҡҡа барманы. Инәйем үҙе бик ҡаты ауырый башлап, тамам ятты. Шунда уҡ телдән дә ҡалды. Туғыҙ көндән инәйем вафат булып ҡуйҙы.

Ҡәрендәшем Зөләйха, энем Ғиндулла менән инәйҙе ҡосаҡлап илашабыҙ. Атайым ҡартатайым менән ҡартинәйемде саҡырып килтерҙе. Улар артынса инәйемдең бер туған ҡәрендәштәре Хәтижә, Ғәйнисафа апайҙар ҙа килеп етте. Атай-инәйемдең барлыҡ туғандары йыйылды. Китте илаш, иламаған кеше юҡ. Туғандарым менән мин инәйемдең янынан китмәнек. Икенсе көндө уны зыяратҡа алып барып ерләнек. Ҡар иреп бөтмәгәйне әле. Һары һыу ваҡыты, апрель айы. Инәйемдең ҡәберенә таш яҙып ҡуйҙым. Таш бер метрға яҡын ер өҫтөнән сығып тора, ярты метрҙан күберәге тупраҡта ине булһа кәрәк.

Өйҙә хәҙер бер йәм юҡ, күңелһеҙ. Өс туған, өсәүебеҙ ҙә ҡосаҡлашып илашабыҙ. Алда ни булыры билдәһеҙ. Беҙҙең илағанды күрһә, атайым да беҙҙе

ҡосаҡлап илай. 20-30 көнләп ваҡыт үткәс, атайым беҙгә инәй эҙләй башланы. Димселәр күбәйеп китте. Унан да, бынан да ҡарсыҡтар килә, уныһын да, быныһын да маҡтайҙар.

Атайым Михайловка ауылына барып килде. Ҡайтҡас, мине янына ултыртты ла: «Улым, һеҙгә инәй булмаһа ла, инәй рәүешле ҡатын килтерергә булдым. Үҙ инәйегеҙ булмаҫ инде», – тине. Мин: «Килтер, атай», – тинем. «Улым, тағы ла бер һүҙ бар, – тине атай, – һине Йәмәлкә (Емельян) бай эшкә ялларға итә. Ошо йәкшәмбе үтһен, дүшәмбе көн барырһың», – тине. Мин тағы: «Ярай, атай»,– тинем. Күпмегә икәнен ул да әйтмәне, мин дә һораманым.

Дүшәмбе лә килеп етте. Мин Йәмәлкәгә барып керҙем. Иҫәнләштем, ашарға ултырттылар. Тамаҡ туйҙырғас, мунсаға ебәрҙеләр. Ҡарсығы, Матрена апай, күлдәк, ыштан һәм эш кейеме бирҙе. «Үҙеңдекен кеймәҫһең инде», – тине. Мунсанан сыҡҡас, дүрт ат, өс һауын һыйыр, егерменән ашыу һарыҡ, ун дүрт тай, ундан күберәк һыйыр малы, таналар, үгеҙҙәр күрһәтеп, «шуларҙы ҡарарһың» тинеләр. Шулай бер аҙна мин өйгә ҡайта алманым, туғандарымды ныҡ итеп һағындым. Әлеге көс тә самалы, ауырыуҙан нығынып етмәгәнмен. Шулай ҙа йәкшәмбе еткәс, Йәмәлкәнән һорап, ауылға ҡайтып киттем.

Өйгә керһәм, бәләкәй генә бер ҡап-ҡара апай һыуҙан ҡайтып етте. Уның артынан Зөләйха һәм Ғиндулла килеп керҙеләр. Зөләйха: «Инәй, ағайым ошо инде», – тип мине ҡосаҡлап алды. Ғиндулла яҡын килмәне, арыраҡ барып, һикегә ултырҙы. Мин уның янына барҙым да: «Йә, Ғиндулла, инәй һәйбәтме?»– тинем. «Һәйбәт, һәйбәт», – тип ҡустым стеналағы кәштәгә ынтылды, асыҡтым, тине.

Ул арала инәй кеше һыуын ултыртып, соланға сығып китте лә, килеп инеп: «Йә, улым, күрешәйек, инәйең булырмын,– тип самауыр ҡуя башланы. –Ҡунаҡҡа ҡайттыңмы, исемең кем, улым?»– тип һорашты.

– Исемем Хәйрулла,– тинем.

– Йә, ярай, Хәйрулла улым,– тине. Шат күңелле, йомшағыраҡ, ҡәрендәшем менән энем, инәйебеҙ һәйбәт, тиргәшмәй, тине. Улар шулай тип торғас, мин дә шатландым. Самауыр ҡайнаны, сәй эстек, атайым да ҡайтып инде.

– Иҫәнме, улым,– тине. – Йә, бай оҡшанымы, әллә оҡшамаймы?

– Оҡшай,– тинем мин.

– Ярай улайһа,– тип бүреген, кейемен элеп, сәйгә ултырҙы. «Эй, һин, самауырыңды ниңә алып киттең?»,– тине. Йәш инәйем: «Самауырҙы яңыртып килтерәм», – тип яуапланы. Күмер һалды, самауырҙан пар сыҡты. Ул арала күрше Хилем апайым килеп инде. Атайым уға ҡарап: «Балдыҙ, Маһи апайыңдың яғаһын (түшкә ҡуя торған шау тәңкә биҙәнеү әйбере – **Р.В.**) таба алмайым, әллә берәйһе типте инде», – тип һораны. Хилем апай аптырап бер миңә, бер Зөләйхаға ҡараны. Йәш инәйем самауырҙы килтереп ултыртты. Мин дә аптыраушта ҡалдым, Зөләйха иларға тотондо. Атайым ҡыҙыу ғына кеше, мин дә ҡурҡып киттем. «Барыбер табырмын,– тине атайым.– Кем алғанын белһәм, кәрәген бирәсәкмен».

Йәш инәйем Хилем апайҙы сәй эсергә ҡыҫтап ҡараны. Ләкин ул көйһөҙләнеп, аптыраған килеш:

– Әллә, Динекәй еҙнә, бер ҙә ишеткәнем юҡ. Мин уға бара торған кеше түгелмен. Кем алды икән, – тип аптырап, һике ситенә килеп ултырҙы.

Кис була башланы. Мин дә китергә булдым, сөнки эш күп. Атайым да: «Барбар, йыш ҡайтып, буталанып йөрмә»,– тип асыуланды.

– Ниңә улай әйтәһең, уның яғала ни эше бар,– тип йәш инәйем мине яҡлашты.

Мин шым ғына сығып киттем. Ике аҙна буйы өйгә ҡайтманым. Ишетәм, атайым йәш инәйемде ҡыуа икән, ни өсөн икәне билдәһеҙ. Ауылға ҡайтып инһәм, Зөләйха, Ғиндулла өйҙә юҡ. Ә йәш инәй бик күңелһеҙ. Иҫәнләштем дә: «Ниңә күңелһеҙ ултыраһың?» – тип һораным. «Эй, улым, атайыңдың былай булыуын белһәм, һис Ахун ауылынан сыҡмаҫ инем. Яҡшы кеше, тигәнгә килгәйнем. Көн дә ҡыуа, сығып кит, торма, тип әйтә»,– тип яуапланы ул.

Бер аҙҙан атайым да ҡайтты: «Ҡайттыңмы, улым?»– ти.

– Эйе, атай, ҡайттым.

– Ярай ҡайтһаң,– тине лә сығып китте. Кире керҙе.

– Зифа, һин бөгөн үк сығып кит, бер минут та торма. Һин миңә кәрәк түгелһең,– тип тағы сығып китте.

Зөләйха менән Ғиндулла ла ҡайтты. Яныма килделәр. Зөләйханан: «Атайым нишләгән, ниңә асыулы?» – тип һораным.

– Зифа инәйемде ҡыуып сығарып, Биби еңгәмде килтерергә йөрөй. Йәш инәйемде яратмайым, тине, – тип һөйләне һеңлекәшем.

Мин барыһын да аңланым һәм: «Ҡартатайым менән ҡартинәйемдәргә барам», – тип сығып киттем. Уларҙан барыһын да һораштым. Икеһе лә:

– Атайың аҙғынға әйләнгән. Өс туған энеһенең бала тапмаған бисәһен тартып алырға йөрөй. Һин ҡыҫылма, теләһә нишләһен, – тине.

Ултыра торғас, кискә ҡалғанмын. Ҡайтһам, йәш инәйемде Хилем апай ҡыуып сығарған. Ул квартираға киткән. Үҙе лә йәтим үҫкәс, беҙгә яман күҙ менән ҡараманы, бик яҡшы булды. Икенсе көндө үк атайым Биби еңгәне алып килгән. Бер аҙнанан һуң атайымдың был ҡатыны Зөләйха туғанымды тотоп туҡмаған, Ғиндулланы өйгә индермәй башлаған. Ҡустым кемдә тура килһә, шунда йоҡлап йөрөгән. Ҡартинәйем менән ҡартатайым килеп кейәүҙәрен әрләмәксе булғандар ҙа, тик ҡыуылып сығып киткәндәр.

Йәй эш күп булып, мин бер айҙан артыҡ ауылға ҡайта алманым. Бер ваҡыт, Йәмәлкәнең ҡалған көлтәһенең ҡалдыҡтарын алып ҡайтҡанда атайымдарға һуғылдым. Сентябрь ине булһа кәрәк, һалҡын. Өйгә инһәм, Биби еңгә «инәй» тип әйтмәйһең тип, ҡәрендәшем Зөләйханы көйәнтә менән туҡмай. Көйәнтәһен тартып алдым да үҙен ҡаҙан яғына төртөп осорҙом. Зөләйха сығып йүгерҙе. Икәүләп көрмәкләшеп киттек, мин Бибиҙе сәсенән эләктереп иҙәнгә аттым да сығып киттем. Ул тәртешкә алып, мине ҡыуа сыҡты. Мин атҡа ултырып ҡастым.

Атайым Урыҫ Малаяҙында балта оҫтаһы булып ялланып эшкә киткән икән. Иртәгәһен ул мине эҙләп Йәмәлкә Чвановҡа килгән. Биби, күрәһең, ошаҡлаған. Атайым килгән ыңғай мине бәреп тә осорҙо. Тора алманым, тибеп ебәрҙе. Матрена апай килеп сығып, араға керҙе: «Диникай! Что ты! Что ты делаешь? Он с работы устал, а ты его бьешь! Где у тебя совесть?»– тип мине туҡматманы. Мин лапаҫҡа йәшендем.

Матрена атайымды тиргәй-тиргәй өйҙәренә алып инеп китте. Артабан ни булғандыр, мин күрмәнем. Инәйемде уйлап ултырҙым. Бер саҡ мине өйгә саҡырҙылар. Мин ишетмәгәнгә һалыштым. Атайым да сығып саҡырып ҡараны. Өндәшмәнем.

Атайым ҡайтып киткәндән һуң өс көн үткәс, мин Йәмәлкәнән ял һораным. «Бар, эш еңеләйҙе, ике көнгә ҡайтып кил»,– тине бай. Мин ҡайтып, ҡартатайымдарға барҙым. Зөләйха ла унда ултыра. «Ағай, һин унда ҡайтма»,– тигәс, мин дә ҡайтманым. Ҡайтҡанымды ишетеп, атайым үҙе килде. Инде лә, яныма ултырып, арҡамдан һөйҙө: «Ҡайт инде, улым. Йәмәлкәләргә ҡабат барма. Срогың тулды»,– тине.

Алдаштырып, атайым мине өйгә алып ҡайтты. Зөләйха ла, Ғиндулла ла өйҙәләр. Йыйылышып сәй эстек. Ғиндулла нишләптер әллә һөттө, әллә ашты түккәйне, еңгәм уны һикенән бәреп тә төшөрҙө. Ҡустыма ярҙам итмәксе булғайным, минең дә башҡа ҡаты ғына эләкте. Хатта күҙҙән уттар сәсрәне. Атайым бер һүҙ ҙә әйтмәне. Мин шым ғына сығып киттем дә Хилем апайымдарға керҙем. Сәй эстек. Артымдан атайым килде лә өйгә ҡайтырға саҡырҙы. Ҡайтҡас, атайым менән еңгәм талашырға тотондолар. Атайым һикереп кенә торҙо ла Бибиҙең сәсен уратып алып, иште генә. Балалар менән булашмаҫҡа ант иттерҙе.

Шулай ҙа мин Йәмәлкәләргә яңынан киттем, сөнки өйҙә торорлоҡ түгел. Үҙенең балалары булмағас, балалы кешеләрҙе еңгәм күрә алмай. Бер-ике аҙнанан һуң ғына ҡайтып индем. Еңгәм Зөләйханы туҡмап тора. Атайымдың Урыҫ Малаяҙына эшкә китҡәнен белдем дә Бибиҙән үс алырға булдым. Көйәнтәне алып, тегенең иҫен китергәнсе бирҙем-бирҙем дә, Хөжәт, Сәйфулла ағайҙарға эйәреп, Минкә утарына утын бысырға киттем. Мине эҙләп, атайым Миндәш ауылында йәшәгән Ялалетдин еҙнәм менән Гөлбаҙыян апайымдарға барған. «Атып үлтереп китәм мин ул малайҙы», – тип үсәгән. Мине ул Кропачевола ла эҙләп ҡараған.

Беҙ утарҙа бер аҙнаға яҡын утын киҫеп, ҡайтырға сыҡтыҡ. Яңы Ҡаратаулы ауылында Зифа инәйем осраны. «Әйҙә, улым, Оло Ҡатауға (Катав-Ивановск) китәйек. Ағайым шунда заводта эшләй. Эшкә керербеҙ. Атайың һине, ҡайҙа осрай, шунда атам, тип тиргәй. Ул тиле бит, атыр ҙа ҡуйыр. Оло Ҡатауҙа бер аҙ эшләгәс, ҡайтырһың»,– тине.

Ауылға ҡайтып тормайынса, йәш инәйемә эйәрҙем дә киттем. Әлкә ауылында ҡундыҡ. Иртән сәй эсеп сығыуға, Нурмөхәмәт, Сәйфулла, Хөжәт ағайҙар Кропачевоға эшкә китергә торалар. Беҙ ҙә уларға эйәрҙек. Ләкин унда «әле эшселәр кәрәкмәй, яҙғараҡ алабыҙ» тинеләр.

Беҙ Оло Ҡатауға киттек. Поезға кем нисек булдыра ала, шулай ултырҙыҡ. Вязовая станцияһында төшөп ҡалып, Йүрүҙәндә өс көн утын киҫтек. Зифа инәйем Оло Ҡатауға бер үҙе генә китте. Өс көндән һуң беҙ ҙә барып еттек. Ҡар яуғас, өшөттөрә башланы. Бер айға яҡын эшләп, ағайҙар менән ҡайтып киттек. Мин Ҡаратаулыға ҡайтманым, Миндәшкә Ялалетдин еҙнәмдәргә киттем. Гөлбаҙыян апайым ҡаршы алды. 1921 йылғы аслыҡ яҡынлашты. Аҡса бар ҙа бит, аҙыҡ табып булмай. Ҡайҙа ла – норма. Икмәк табыуы бик ҡыйынлашты. Кемдең ашлығы бар, уныҡын хөкүмәт ала, сөнки хөкүмәт эше алдан йөрөй. Кулактар булған игенен йәшерә.

Граждандар һуғышы, кулактарҙың төрлөсә аяҡ салыуҙары, яңы ғына ойошҡан совет хөкүмәтенә тирә-яҡтан һөжүм итеү икмәк үҫтереүгә ҙур ҡамасаулыҡ килтерҙе. Икмәкте норма менән эшләгән кешегә генә бирҙеләр. Ә эшкә инеп булмай. Заводтарҙың күбеһе туҡтаны. Суйын юлдарында ташкүмер етмәй, паровоздар юл буйында туҡтап ултыра. Урманлыраҡ ергә туҡтаһалар, утын киҫеп, утын яғып китәләр.

Ялай еҙнәмдә оҙаҡ тороп булманы. Үҙҙәре алты кеше бит. Миңә бер һүҙ ҙә әйтмәһә лә, еҙнәм Баҙыян апайымды минең өсөн өткөләй башланы. Ысынлап та, ашарға юҡ.

1920 йылдың апрель-май баштарында Ҡаратаулыға ҡайтып, туғандарымды күреп, бер генә кис ҡартатайымдарҙа ҡунып, тағы Кропачево станцияһына килдем. Баҙар көнө ине. Яхъя ауылынан Әхтәрйән ағай осраны.

– Хәйрулла, һин ни эшләй йөрөйһөң? Әйҙә, минең менән телеграф бағанаһы ултыртырға! Мин Сим станцияһында бригадир булып эшләйем, – тине.

Мин шатландым. Ағай мине телеграф контораһына алып барҙы.

– Бер-ике кеше кәрәк ине. Бына мин бер егет таптым. Симгә алып китәм, – тине.

Минең исем-фамилиямды яҙып алдылар ҙа, Әхтәрйән ағайға эйәреп мин Сим станцияһына киттем. Бригада станциянан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан икән. Сәй эсерҙеләр. Эшселәр рельстарҙы һындыра, ҡайһылары һындырылғанын платформаға тейәй.

Әхтәрйән ағай миңә көрәк-кәйлә бирҙе лә телеграф бағанаһына соҡор ҡаҙырға ҡушты. Миндәш ауылынан Ғариф ағай ҙа ошонда эшләй икән. Ул күрһәткән урында соҡор ҡаҙый башлап, көн буйы ла бөтөрә алманым. Тик таш тура килде. Нишләргә? Ҡасырға уйлайым да, ҡурҡам. Ғариф ағай янына килеп: «Тик таш, арыным, хәлдән килмәй»,– тинем. «Кәләш алып бирһәк, нишләрһең, шулай уҡ «төнгө эш»тән баш тартырһыңмы?» – тип күмәкләшеп көлдөләр. Махсус ҡорал биргәс, интегеп-интегеп соҡорҙо ҡаҙып бөтөрҙөм. Кискелекте ашағанда мине маҡтаған булдылар, «йүкә сөй» ҡаҡтылар.

Аҙағыраҡ мине күбеһенсә йомошҡа йүгертә башланылар, сөнки мин – араларында иң йәше. Етмәһә, ағайымдар ҡулы аҫтында эшләнем. Шулай эшләй торғас, Берҙәшкә лә килеп еттек. Эштә маҡталыбыраҡ йөрөйөм. Ләкин бер мәл Ғариф ағай Миндәшенә ҡайтып китте, Әхтәрйән ағай сирләне. Күп тә үтмәне, йәш үҫмерҙәрҙе эштән сығара башланылар. Мине Кропачево станцияһының телеграф-телефон батареяларын ҡарауылларға алып ҡалдылар. Ҡыш буйы шунда эшләнем, айына һигеҙәр кило он да биреп торалар. Март менән апрелдә он бирелмәне, кешеләрҙе эштән сығара башланылар. 1921 йылдың май башында мин дә эшһеҙ ҡалдым.

Ҡайҙа барырға? Ни күрһәм дә күрермен, үҙемдең атайым бит, тинем дә ауылға ҡайтырға булдым. Берәй ауылдашым осрамаҫмы тип, станцияның һарыға буялған бәләкәй генә вокзалының күләгәле яғына ултырҙым. Күп тә үтмәне, ауылдаштарым Хызыр бабай, Закир бабай килде. «Нишләп йөрөйһөң, Хәйрулла?» – тиҙәр. «Ҡайтырға йөрөйөм,– тим.– Мине лә алып ҡайтығыҙ әле».

«Юҡ, балам, беҙ Себергә әпәйгә китеп барабыҙ. Ауылда халыҡ бик ас. Атайың да беҙҙең менән бармаҡсы булғайны, аҡса әҙ, тип тороп ҡалды. Халыҡ астан шешенә, ҡайһылары малдарын һуйып ашай, ваҡ мал ҡалманы шикелле. Этбесәйҙәрҙе лә бөтөрҙөләр. Хәлдәр, улым, бик мөшкөл. Атайың Бибийен ҡыуып маташа ине, нишләгәндер. Вәлиулла ағайың бик аҡһай, шешенеп бөткән, Михайловкаға етә алмай ултыра ине»,– тип һөйләнеләр.

Зөләйха менән Ғиндулланы һағындым, күргем килде. Баҙыян апайым ебәргән ярты икмәгемдән бәләкәй генә киҫәген һындырып алдым да, бер стакан һыу менән ашап, ҡайтырға сыҡтым. Станция урамы буйлап килә инем, Юныс ауылынан Зәғифә апайым осраны. «Эй, туғаным, ҡайҙан киләһең?» – тип арҡамдан һөйҙө. Асыҡҡанһыңдыр, тип бер күмәс бирҙе. Ғөбәйҙулла еҙнәмдең тормошо бик бай булмаһа ла, арыу ғына. Үҙ көнөн үҙе күрә торған кеше ине.

Зәғифә апайыма суйын юлында телеграф-телефон бағаналары ултыртып йөрөгәнемде, эшһеҙ ҡалыуымды, ике айлыҡ эш хаҡын ала алмауымды һөйләп бирҙем. «Эй, Хәйрулла туғанҡайым, ауылға ҡайтып та нишләрһең икән? Ас хитланырһың инде. Атайың Бибикәйе менән бик һәйбәт тормай, тип ишеткәйнем. Бар, булмаһа, ҡайтып, белеп-күрерһең, энем. Мәһиҡәмәр еңгәм кеүекте атайың ҡабат таба алмаҫ инде. Мәрхүмә кешегә бик яҡшы булды,

барһаң, самауырына йәбешер, ҡыҙҙарым килде, тип ашын бешереп йүгереп торор ине. Ауыр тупрағы еңел булһын инде»,– тип һөйләнде.

Мин моңайып китеп, бер һүҙ ҙә әйтә алманым. Апайым мине арҡамдан һөйөп: «Юныс ауылына һуғылып, еҙнәм менән сәй эс»,– тип хушлашты. Инәйемде иҫемә төшөргәс, башыма әллә ниндәй уй-хистәр килде. Әкрен генә атлап киттем. Юныс ауылына тиклем ара – алты саҡрым. Үтәһе юл тауҙан түбән төшә, соҡор буйлап Һары Ҡондоҙ йылғаһы ағып бара ла Көскәндегә ҡоя. Һары Ҡондоҙға көскә килеп еттем. Бер аҙ киләм дә, ултырып, үкереп илайым. Станциянан йылғаға тиклемге ике километр араны ике-өс сәғәт килгәнмендер. Илай-илай арыным, күҙҙәрем шешенеп бөттө.

*Ҡулъяҙманың ошо ерендә туҡтайыҡ. Авторҙың ғүмерендә ошондай ҡайғылы, ауыр көндәр тағы ла булдымы икән – белмәйем. Ләкин шундай ауыр хәлдә, ул үҙенең иң мөһим асышын яһаған. Ул былай тип яҙа: «Һары Ҡондоҙ тамағында «Иҫке йорт» тип аталған йорт урындары бар. Урындың исеме – Тәкәй ауылы. Тап шул ауылда батыр Салауат Юлай улы донъяға килгән».*

*Күп йылдар үткәс, Х. Ҡолмөхәмәтов шундағы бер ҡайынға «Салауат батыр төйәге» тип яҙылған таҡта киҫәге ҡаҙаҡлап ҡуя. Шул таҡта киҫәге – милли батырыбыҙға беренсе һәйкәл.*

*Һары Ҡондоҙҙо Хәйрулла һикереп кенә сыҡты.*

*Бер йыл элек, 1920 йылда, В. Ленин һәм И. Сталин, Ә. Вәлидовтың талабына ҡаршы килә алмай, Башҡортостанға автономия биреү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Ләкин, «башҡорттар араһында инженер кадрҙар юҡ» тип, башҡорт ерҙәренән Сим, Ҡатаутамаҡ, Оло Ҡатау, Йүрүҙән, Һатҡы заводтарын һәм ҡалаларҙы «киҫеп алып», Силәбе өлкәһенә ҡуштылар. Күрше өлкә менән Башҡортостан араһындағы сик тап шул Һары Ҡондоҙ һәм Көскәнде йылғалары буйлап үткән. В. Лениндың ҡулы саҡ ҡына ҡалтыраһа, Салауат Юлаевтың төйәге Башҡортостан сигенең теге яғында ҡалыр ине.*

Һары Ҡондоҙ һыуында баш-аяғымды йыуып, күл буйлап үргә киттем. Ул күлдең исеме «Урыҫ баҫар» (ошо күл буйлап урыҫ ғәскәре Салауат Юлаевтың тыуған ауылын яндырырға килгән – **Р.В.**). Бер аҙ барғас, ял итергә ултырҙым. Ғөбәйҙулла еҙнәмдең өйө күренә, мөрйәһенән төтөнө лә сыға. Был ауылда туғандар күп, ләкин мин еҙнәмә инергә булдым. Тыҡрыҡҡа инһәм, тун кейгән бер ир йығылып ята. Янына килеп, тотоп ҡараным. Астан үлгән кеше булып сыҡты, кем икәнен таныманым.

Мин килгәндә Ғөбәйҙулла еҙнәм тимер мейестә кесерткән бутҡаһы бешереп маташа ине. Улдары Хәйрулла, Ниғмәтулла һәм ҡыҙы һикелә теҙелешкән. Иҫәнләштем.

– Һаубыҙ, балдыҙ? Хәйрулла. Ҡайҙан киләһең, һау ғына йөрөйһөңмө? Бажа ни хәлдә? – тип һорауҙар биреп ташланы. – Ултыр һикегә!

– Атайым нисек торалыр, бер нәмә лә белмәйем, – тинем. – Мин Карпочауҙан киләм, телеграф линияһында эшләнем.

– Ҡайтып бараһың инде. Ярай улайһа. Хәҙер сәй эсербеҙ, балдыҙ. Былай сәй түгел, ер еләге япрағын ҡайнатып эсәбеҙ. Зәғифә апайыңды Карпочауға ебәрҙем әле. Сәй таба алырмы, юҡмы? Донъялар бик ауырайып китте әле. Әҙ генә арыш бар ине, ул да бөттө. Бер ат, бер һыйыр, ике баш һарығыбыҙ ғына ҡалды, балдыҙ, – тип теҙеп алып китте хужа.

Ул берсә ихатаға сыға, берсә мейестәге кесерткән бутҡаһы менән булаша. Бутҡа ҡыҙыу ҡайнап, әллә ниндәй әсе еҫ сыҡты.

– Әй, балдыҙ, апайың булмағас, бутҡабыҙ ҙа янып китте,– тип еҙнәм сүмес менән ҡаҙанға һыу һалып ебәрҙе.

Бутҡа ҡайнауҙан туҡтаны.

– Арыш ярмаһы, алабута ла бар ине. Шуларҙы таба алмайым,– тип еҙнәм һикегә ултырҙы. Бер аҙҙан тағы сығып китте.

Бутҡаға ул ике ҡалаҡ арыш ярмаһы, бер ҡалаҡ бик матур таҙартылған аҡ алабута бөртөктәрен һалып ебәрҙе, тоҙ ҙа һалды. Бутҡа бешеп сыҡҡас, ул табаҡҡа һоҫоп:

– Йә, балдыҙ, ҡулыңды йыу. – Балаларына ҡарап, – һеҙ ҙә ҡулығыҙҙы йыуып килегеҙ,– тип, ашъяулығын йәйеп, батмусын ҡуйып, ағас табаҡ менән бутҡаны килтереп тә ултыртты.

Ашаныҡ, туйҙыҡ.

– Кесерткән бутҡаһы, балдыҙ, тәмлеме? – тип һораны еҙнәм.

– Тәмле, еҙнә, тәмле. Ана, аръяҡта Карпочауға сыға торған тыҡрыҡта бер кеше туңҡая биреп ятҡан, – тим уға. – Кем икән?

– Белмәйем, балдыҙ. Халыҡ ас бит, – тип һөйләп алып китте еҙнәм. – Кесерткәне лә үҫмәй, исмаһам, һарынаһы ла кипте. Имән, йүкә ҡабығын да һыҙыра башланылар инде. Малы булмаған кешеләр шешенеп үлә. Карпочау яҡын булғас, беҙ унан-бынан табып торабыҙ. Һеҙҙең яҡта, Үҙән буйҙарында, бик үләләр, тип ишетелә. Тормош бик ауыр, балдыҙ! Бик-бик ауыр! Ниндәй хәлгә етербеҙ инде? Мин дә Себергә китмәксе инем дә, малдарымды һуйып ашап бөтөрҙәр, тип ҡурҡам. Малдарҙы һаҡлап торорға апайыңдың хәленән килмәҫ. Хәйрулла улыма бик ышанып булмай, бәләкәй әле.

– Ярай, еҙнә, мин ҡайтайым инде,– тип сығырға булдым.

Ҡапҡанан сығып, теге кеше йығылып ятҡан яҡҡа ҡараһам, унда өс-дүрт кеше тора. Еҙнәм ҡапҡаһынан сығып ҡараны ла кире инеп китте.

Мин Әлкә ауылына ҡарай атланым. Юныс яғынан Әлкәгә теп-текә тауҙан төшөлә, сөнки Әлкә Көскәнде буйында ултыра. Бында мин үҙемде бәләкәй саҡта күтәреп йөрөткән Байрамғол быуайымдың ҡыҙы Хәсмиәне күргем килде. Йорттарына һуғылғайным, өйҙә булманылар. Урамға сыҡһам, ике ат егелгән арба тауҙан Әлкәгә төшөп килә. Ултыртмаҫтар микән тип, ҡаршыларына киттем. Көн кискә ауышҡан. Атҡа әләкһәм, Яңы Ҡаратаулыға етеп булһа ла ҡунырмын, тип уйланым.

Алдағы атта – Яңы Ҡаратаулынан Йәғләмун, икенсеһендә – Заһит ағайҙар. Береһе – атайыма, икенсеһе инәйемә ике туған ҡустылар.

– Әйҙә, Хәйрулла, алып ҡайтайым,– тип Йәғләмүн ағайым мине арбаһына ултыртты.

Улар ҡайҙан килеүемде һорашып, миңә атайымдың нисек йәшәүе хаҡында һөйләп бирҙе. Ҡарағайлыҡулдан сыҡҡанда Яңы Ҡаратаулыла шәмгә ут алғайнылар. Йәғләмүн ағайымда ҡунып, иртән Йәкәс күл аша ҡыя юл буйлап ауылға киттем. Юлда Илтәй ауылының бер кешеһе осраны. Яп-ялтыр булып шешенгән. «Ай, энем, әҙ генә булһа ла әпәйең юҡмы?» – тип һораны.

Зәғифә апайым биргән күмәсте алып бирәйем тип, кеҫәмдән алмаҡсы булғайным, Зөләйха менән Ғиндулла иҫкә төштө. Улар ҙа шулай шешенгәндер, тигән уй килде. Ҡолағыма «ағай, әпәйеңде бирмә!» тигән һымаҡ булды. Сөнки ауылда халыҡ ас, унда ла, бында ла ятып үләләр, тигән хәбәр күп булды.

Күмәсте бирмәнем. Теге кеше Ҡыя юлында ултырып ҡалды, мин Ҡаратаулыға

төшөп киттем. Ҡартинәйем мейескә яҡҡан, ҡартатайым иҫке итектең үксәһенә ҡаҙау ҡағып ултыра. Ул – итексе, үҙенең эше менән була. Ҡартинәйем мине, мин уны ҡосаҡланым. Ҡартатайым менән күрештем. Улар минән «Ҡайҙан киләһең?» тип һорашты. Карпочауҙа телеграф линияһы йүнәтеп йөрөнөм, ашарға бирә алмағастар, эштән сығарҙылар, тип һөйләп бөтөүгә, Ғиндулла килеп инде. Ҡартинәйем күмәс һала башланы. Әпәй күнәгендә ҡамыры йәм-йәшел һымаҡ, бик шыйыҡ түгел, боламыҡ ине.

– Улым, тормош насарайҙы. Ашарға бер нәмә лә юҡ. Кесерткәнде йыйып, шуны бешерәбеҙ, һыулап һығып алабыҙ ҙа, шуға аҙ ғына картуф, һарына йыйып килтереп, шуны бешереп, бер-береһенә ҡушып, бына хәҙер мейестә күмәс бешереп ашайбыҙ, – тип ҡартинәйем күмәс һала-һала һөйләнде. – Күмәскә һөт ҡушмай булмай. Аҙаҡ та һөт эсмәһәң, хәл бөтә.

Ҡартинәйем Ғиндулланың астан шешенгән күреп, «улым, кил әле» тип саҡырып алды. Йөҙөнә ҡарап:

– Улым, һин дә шешенә башлағанһың, әллә ашаманыңмы? – тип һораны.

– Юҡ, ҡартинәй,– тип ҡустым илап ебәрҙе. Минән: «Ағай, әпәйең юҡмы?»– тип һораны. Баяғы күмәсемде уға бирҙем. Ул шатланды, үҙе ашай, үҙе илай, мине ҡосаҡлай.

Ҡартинәйем Ғиндуллаға һөт бирҙе. Уны эскәс, бер аҙ ултырған Ғиндуллам, быуынһыҙ кеше кеүек, һике янында торған көйө йығылды ла китте. Уны ҡартатайым менән күтәреп, һикегә һалдыҡ. Бер аҙҙан йәм-йәшел күмәс тә бешеп сыҡты. Һәр беребеҙгә берәр күмәс, яртышар стакан һөт эләкте.

Ашанғас, Ғиндулла тороп ҡалды, мин ҡайтырға сыҡтым. Ҡартинәйем: «Хәйрулла, һаҡ бул. Атайың үҙеңде туҡмап ташламаһын»,– тип артымдан сығып әйтеп ҡалды.

Шәрҙәле йылғаһы буйында Хызыр быуайымдың ике улы ташбаш, селбәрә балығын күлдәк менән һөҙөп йөрөй. Ғиззәте мине күрҙе лә, «Хәйрулла ағай!» тип йүгереп килмәксе булды. Ләкин бер ташҡа эләгеп, йөҙтүбән йығылды.

Ҡустыһы менән Ғиззәтте күтәреп ултырттыҡ. Танауы аҙ ғына ҡанағайны. Ғиззәт әкрен генә тауыш менән: «Хәйрулла ағай, икмәгең юҡмы?» – тип һораны. «Эй, туғаным, бер нәмәм дә юҡ шул», – тинем. Хызыр быуайым ситән аша ҡарап торған икән. Ул да әкрен генә төшөп, янибыҙға килде. Уның менән Ғиззәтте күтәреп өйгә индерҙек.

*Аслыҡ Бөйөк Ватан һуғышынан һуң, 50-се йылдарҙа ла, булып алды. Ул заман минең бала саҡҡа тура килде. Беҙ Шәрҙәле буйындағы урамда йәшәнек. Мин аслыҡтан интекмәнем. Сөнки атайым менән инәйем эшләй, мал, ҡош-ҡортто күп тоталар. Ләкин беҙҙең арала күп балалы ғаиләләр, йәтим малайҙар бар ине. Улар асыҡты.*

*Беҙ ҙә йылғала ташбаш тотто.к. Селбәрә балығын «мелтәй» тип исемләй инек. Хәтерҙә ҡалған: Мөҙәристең энеһе бер саҡ селтәргә эләккән ташбашты ҡойроғонан эләктерҙе лә ялт итеп тереләй йотто. Олораҡ малайҙар тартып алмаһын, тип ҡурҡҡандыр инде.*

*Малайҙар ас булғас, һарынаны тауҙар битендә лә ҡаҙыныҡ. Шуның өсөн Мирзағаян быуайымдың тимерлегендә махсус ҡорал эшләп ала инек. Зөләйха күле һарынаға бик бай булды. Мин Фатима нәнәйемдән: «Ниңә уны «Зөләйха күле» тип йөрөтәләр?» – тип һорағайным, ул: «Шул күл аша Салауат Юлаевтың ҡатыны Зөләйха тыуған ауылы Ҡалмаҡҡа ата-әсәһенә ҡайтып йөрөгән. Тура юл шунан булған», – тип яуап бирҙе.*

*Хәйрулла бабай дауам итә…*

Йылғаны аша сыҡҡанда ҡояш байып бара ине. Тиҙ генә үҙебеҙҙең тыҡрыҡҡа еттем дә баҡса аша артҡы лапаҫҡа яҡынланым. Бәрәңге баҡсаһында ҡуйы булып үлән үҫеп килә. Атайым лапаҫта балта менән нимәлер эшләй. Уның менән иҫәнләштем. Атайым балтаһын түмәргә сапты ла, мине ҡосаҡлап, илап ебәрҙе. Бик яратып һөйөп: «Әйҙә, улым, керәйек», – тип өйгә саҡырҙы.

Соландан еңгәм – үгәй инәйем сығып килә. Мине күргәс: «Бынаһы тағы ла ҡайтып килә. Аслыҡ бит. Юлда тонсоҡһа ни була инде. Аяулылар үлеп тора, аяуһыҙҙар тонсоҡмай», – тип соланды шап итеп ябып, атайыма һуғыла яҙып үтеп китте.

Мин уға һаулыҡ та бирә алманым. Өйгә инеп, ишек төбөндәге тәҙрә янында эскәмйәгә ултырҙым. Сит өйгә кергәндәй, йөрәгем тертләп китте. Атайымдың Бибигә асыулы икәнлеге һиҙелә, сөнки мин уға бала бит әле. Бисәһе лә яҡын, шуға күрә атайыма уңайһыҙ. Ул миңә ҡарап торҙо-торҙо ла:

– Хәйрулла, һин утын ватып керт. Инәйең йәймә бешерер. Ул ҡайтҡансы, мин тимер мейесте яғайым, – тине.

Сыҡһам, утын юҡ. Ҡайҙан алырға ла белмәйем. Атайым: «Лапаҫ эсенә кер ҙә тәкә ситәнен һурып алып ват», – тине.

Ситәндең бер буйын алыуға, иҫке һалам араһынан инәйемдең түш яғаһы килеп сыҡты. Ҡараһам, 25 рәттән аҫҡы яғындағы көмөш тәңкәләрҙән 50 тинлектәренең унынһы юҡ, 10 һәм 20 тинлектәре бар. Яғаны алдым да атайыма индереп бирҙем. «Бына, атай, инәйемдең яғаһы. Ситән араһынан килеп сыҡты», – тинем. Ул яғаны ҡараны ла, 50-шәр тинлек тәңкәләре булмағас, кеҫәмде аҡтарҙы. Ул арала килеп ингән Биби инәйемә: «Бына бит яға табылды, Хәйрулла кертте, тине. Биби: «Әйттем бит, Хәйрулла эттән башҡа кем алһын, тип. Башҡа бер кем дә алмаған. Мин ул ваҡытта юҡ инем. Йә Зөләйха алған. Үҙ балаларыңдан башҡа бер кем дә алмаған. Балаларың әллә яҡшыға йөрөй тип беләһеңме? Бына бит килгән, һиңә ярарға тырышып, юхаланып килгән»,– тип атайым янына һикегә ултырҙы.

Мин ҡаттым да ҡалдым. Атайым да өндәшмәне. Шул арала Зөләйха килеп инде. Биби инәйем уға ҡарап: «Бына бит, әллә ҡайҙа хәйерселәп йөрөп килде. Баламы ни ул, минең турала әллә кемгә әллә ниндәй ғәйбәт һөйләп йөрөй. Шуның өсөн сығып китә. Нимә тупһала баҫып тораһың? Ана, ағайың янына бар, яҡлар һине, тағы ла мине туҡмар?»,– тине.

Биби атайымды һаман ҡыҙҙыра, кәрәсин һибә, тик шырпы ғына кәрәк. Атайым да ахыры түҙмәне:

– Етер! Күп лығырҙаның. Зөләйха – минең үҙ балам, – тине.

Биби инәйем һикереп торҙо ла ҡысҡырырға тотондо:

– Һин шулай булырһың инде. Улың да туҡманы, һин дә ажғырып ултыраһың! Үҙеңә лә, улыңа ла бисә булайыммы? Оятһыҙ! – тип үкереп илап, соланға сығып китте. Соландан буш биҙрә шалтыратып килеп инде. Мин лапаҫтан әлеге ситәнде ватып керттем. Инәйем һаман атайым менән әрләшә: «Улың бында торһа, китәм»,– тип еңешә. Атайымды еңеп алған, ул Бибигә бер ҙә һүҙ тейҙермәй.

Ауылда сәй генә эсеп ятып, бер-ике көн үтте. Өйгә ҡайтырлыҡ түгел, ыҙғыш. Ишбулды бауайымдарҙа минән ике йәшкә оло Нурмөхәмәт ағайым менән бергә йоҡлап йөрөйөм. Беҙҙең менән бергә Йомаҙил ағайҙың улы Ҡазыхан, Ниғмәтулла бабайҙың улы Хөжәт, Ҡәнни ҡарт улы Хәтмулла бергә йоҡлайбыҙ. Барыбыҙ ҙа бер йылғылар.

*Ҡазыхан Йомаҙил улы – минең ҡартатайым. Атайым Шакирйәндең атаһы. Бөйөк Ватан һуғышында вафат булды. Ҡазыхан менән Хәйрулла тәүҙә дуҫ булып, бер нисә йылдан бажалар булып киттеләр. Ҡазыхан – Фатима нәнәйемде, Хәйрулла уның апаһы Таһираны алды. Уларҙың Ғабдулхаҡ исемле бер улы булды. Хөжәт Хәйрулланың һеңлеһе Зөләйхаға өйләнде. Уларҙың ҡыҙҙары Гүзәлиә менән беҙ бергә үҫтек. Уны «Һандуғас» та тип йөрөтәләр ине. Хөжәт ҡарт колхозда бригадир булып эшләне.*

*Мине лә алдаштырып, колхоз эшенә алып китә ине. Уҡыу бөтөп, йәйге каникулдар башланыу менән мин Ҡаратаулыға ҡайтам. Хөжәт ҡарт ауыл ситендә йәшәй һәм тәҙрәһенән минең ҡайтҡанды күреп тора. Иртәгәһен таң менән, һыбай килеп, тәҙрәгә сыбыртҡы һабы менән шаҡылдата:*

*– Фатима! Улың ҡайттымы? Эшкә, күбә тарттырырға сыҡһын!*

*Нәнәйемдең ни сәбәп менән булһа мине иртәрәк уятырға ярата торған бер генә алама холҡо бар. «Тор, ана, Хөжәт быуайың килгән»,– тип ул мине йоҡлатмай. Икәүләп уятҡанға үсегеп, иртәнге һалҡынға сыҡмай ғына, тәҙрәне асып: «Бармайым!» – тим. Ләкин Хөжәт ҡарттан тиҙ генә ҡотолоп булмай.*

*– Улым, сыҡ эшкә. Берәһе лә һинең кеүек күбә тарттыра белмәй. Төшкә тиклем күк бейә менән йөрөрһөң, төштән һуң үҙемдең «Моряг»ымды бирермен, – тип ныҡыша ул.*

*Атты мин үлеп яратам. Бригадир үҙенең «Моряк» ҡушаматлы айғырын бирәм тигәс, һикереп торам.*

*Ана шулай, мин Хәйрулла Ҡолмөхәмәтовтың ҡулъяҙмаһында үҙемә яҡын, таныш кешеләрҙе осраттым, бала сағыма ҡайттым.*

*Ә ул дауам итә…*

Бер ваҡыт Нурмөхәмәт ағайым:

– Хәйрулла! Әйҙә, бында асҡа үлгәнсе, Себергә китәйек. Унда ашлыҡ күп, тиҙәр. Яхъя, Әлкә яҡтарынан поезд менән барып бойҙай алып ҡайтҡандар.

Мин риза булдым. Ләкин атайыма әйткәйнем, ул «йөрөмә!» тип ҡырҡа һуҡты. Ләкин ашарға юҡ бит. Биби инәйем, атайым өйҙә булмағанда, беҙгә кесерткән ашы ғына бешерә, үҙе һөт эсә, беҙгә бирмәй. Атайым Урыҫ Малаяҙына эшкә киткәс, мин Биби менән талашып, Карпочауға сығып киттем. Ҡартинәйем аша Нурмөхәмәт ағайыма хәбәр ебәрҙем. Нурмөхәмәт ағайым менән Ҡазыхан иртәгәһенә үк Карпочауҙа ине. Уларҙы күреп, мин бик шатландым. Нурмөхәмәт ағайым:

– Йә, ҡайһы яҡҡа йүнәләбеҙ? Хәҙер пассажир поезы килә. Кем нисек шулай ултырығыҙ. Мин башҡа менәм,– тине.

– Ә ҡайҙа төшәбеҙ?– тип һораным мин.

Златоуста төшөргә булдыҡ. Поезд килгәс, мин вагон аҫтындағы күмер һала торған урынға инеп яттым. Ҡаты еҫ, туҙан, етмәһә ел арҡаға бәрә. Өс-дүрт станцияны үткәнсе сыҙаным. Ятҡан таҡтаның бер башы ҡаҙауынан ысҡына башлағас, мин бик ныҡ ҡурҡтым. Ул ысҡынып китһә, мин тәгәрмәс аҫтына ғына төшөп ҡалам. Бәхеткә күрә, поезд бер аҙҙан аҡрынайҙы ла туҡтаны.

Урынымдан сығып ҡараһам, поезд станцияла түгел, юлда туҡтаған. Вагон башына менергә маташҡанда, ул ҡуҙғалды. Саҡ йәбешеп өлгөрҙөм. Вагон башында халыҡ бик күп, берәүҙәре ята, икенселәре ултыра. Юлдаштарым күренмәне. Халыҡ әрләшә, «кит!» тип ҡыуалар, кемелер «төш!» тип төртә. Донъя – көслөнөкө. Ләкин мин Вязовая станцияһына килеп еттем.

Поезд туҡтағас, станцияның ҡарауылсылары вагон башында барған

кешеләрҙе төшөрөп, станция бинаһына индерҙеләр ҙә бысҡы-балта тотторҙолар. Егерме биш-утыҙлап кеше йыйылдыҡ, ләкин Нурмөхәмәт ағайым менән Ҡазыхан арала юҡ ине. Бер үҙем ҡалғанмын. Станциянан бер-ике саҡрым урманға илтеп, ҡайын киҫергә ҡуштылар. «Штраф өсөн бер көн эшләйһегеҙ», – тинеләр.

Өс-дүрт кубометр утын киҫтекме-юҡмы, Ҡазыханды алып килделәр. Мине күреп, ул ҡыуанды:

– Һин дә бындамы ни? Ашарыңа бармы? Бик асыҡтырҙы бит, – тине.

Ашарға икебеҙҙә лә юҡ. Нурмөхәмәт ағай ҙа әллә ҡайҙа булды. Мин бик арыным, хәлем бөттө, сөнки ике тәүлек һыуҙан башҡа бер ни ҡапҡан юҡ. Ә утын быстыралар.

Мин ятып торҙом. Ҡараңғы ла төштө. Бер аҙҙан яныма Ҡазыхан килде. «Әйҙә, киттек, бында астан үләбеҙ бит», – тигәс, мин тороп баҫтым. Хәл ингән һымаҡ, ләкин баш ауырта, иҫерек кеше һымаҡ йөрөйөм. Кире вокзалға һыпырттыҡ.

Ҡараһаҡ, бер суйын юлында өс кенә вагон таҡҡан паровоз тора. Вагондарҙа бер кем юҡ, ҡараңғы. «Әйҙә», – тип Ҡазыхан алдан керҙе лә мине тартып алды. Поезд Берҙәүеш станцияһына килеп еткәнсе туҡтаманы. Уның Ҡуҫаға керәгәнен белгәс, төшөп ҡалдыҡ. Инде ҡайҙа барырға? Кемдер, Златоусҡа бер паровоз китә, тип әйтә ҡуйҙы. Шуны ишетеп, тиҙ генә уның янына барҙыҡ. Машинист бик яҡшы кеше булып сыҡты. «Ана, арт яҡтан менегеҙ», – тип рөхсәт итте. Беҙ Ҡазыхан менән шатланып megдек. Ас булғас, баш әйләнә. Машинист: «Хлопцы, ну-ка, покидайте дрова ближе»– тигәс, бер аҙ утын ташланыҡ.

Хәл тиҙ бөттө. Машинист икмәк ашай, һөт эсә. Мин сыҙаманым, үтенеп икмәк һораным. Бер аҙ икмәк биреп, ул: «Только воды не пей, вот, молока выпей немного»,– тип стакан менән һөт бирҙе. Ашағайным, бына эс бороп ауыртырға тотондо, сыҙап та булмай. Златоусҡа килеп еттек. Эс шул тиклем ҡатҡан, ауыр яраусан мин бер әбейҙән эсемә клизма яһатып, көс-хәл менән ҡотолдом. Златоуст вокзалының баҡсаһында бер тәүлек шулай үтте.

Ҡазыхан бер саҡ юғалып булды. Мин бер әбейҙән йөҙ грамм кукуруз күмәсе алғайным. Шуны ашап, аҡрын ғына вагондар араһында йөрөй инем, Ҡазыхандың тауышы: «Хәйрулла, бында кил»,– тип мине саҡыра. Бер йөк поезының Силәбегә киткәнен белгән икән. Вагонға инеп, бер таҡтаға ултырҙыҡ. Ҡараңғы. Мин Ҡазыханға: «Ниңә мине ташлап киттең?» – тип үпкәләнем. Ул: «Бына ни өсөн», – тип ике һыныҡ икмәк бирҙе. Поезд ҡуҙғалып китте, беҙ ҡаранғы вагонда Силәбегә тиклем ҡаты йоҡлағанбыҙ. Уянып киткәндә яҡтырғайны. Ишекте асып ебәрһәк, йоҡлаған вагоныбыҙҙа – оло йәштәге ике ир мәйете.

Беҙ тиҙ генә Силәбе станцияһына төштөк тә икебеҙ ике яҡҡа һоранырға сығып киттек. Бер өйгә кергәйнем, унда миңә кескәй генә икмәк бирҙеләр. Икмәк биргән ҡарсыҡ: «Һин, улым, бик күренеп йөрөмә. Һуйып ҡуйырҙар»,– тип ҡурҡытты. Силәбе станцияһына төрлө яҡтан ас халыҡ килә. Ҡайһы бер урамдарҙан үтерлек тә түгел. Йәшерәктәрҙе тотоп йәки алдап индереп, һуялар ҙа итенән пирожки бешереп баҙарҙа һаталар икән. Шулай ҙа мин тамаҡ туйырлыҡ икмәк, картуф ҡабығы йыйып өлгөрҙөм. Станцияла сей картуф ашап ултыра инем, Ҡазыхан йүгереп килде.

– Ҡазыхан, Силәбенән тиҙерәк китәйек! – тинем уға.

– Ниңә?

Уға ишеткәнемде: кеше үлтереп, пирожки эшләп һатыуҙары тураһында һөйләп бирҙем. Ҡазыхан ризалашты. Ләкин Силәбенән өс көн китә алманыҡ.

Бер саҡ иптәшемде юғалттым. «Харап иткәндәрҙер инде», – тип уйланым.

Златоуст яғынан поезд килде. Нисек ултырырға, тип ҡаңғыра инем, вагондан Йомағужа ағайым сығып килә.

– Йомағужа ағай,– тип ҡысҡырып ебәрҙем. Ул әйләнеп ян-яғына ҡаранды.

– Ә, Хәйрулла, ни эшләп йөрөйһөң?– ти.

– Мин, ағай, Себер яғына китә алмай йөрөйөм. Билетым юҡ.

Ул вагонға кире инеп, билет алып сыҡты ла миңә тотторҙо.

– Ошоноң менән керә тор, алып китербеҙ,– тип үҙе вокзал бинаһына инеп китте.

Вагонға инһәм, унда Миндейәр ағайым тап булды. Күрештек. Йомағужа ағайым бәләкәй генә йәймә алған икән, шуны ашатты. Поезд ҡуҙғалып, Себер яғына елдерҙе. Ҡурған ҡалаһын уҙып, Петухово станцияһына етте. Шунда мин Силәбелә юғалтҡан Ҡазыханды күреп, саҡырып алдым.

– Ниңә ҡастың?– тип һорайым.

– Ҡасманым. Бер вагонға хәл алайым тип кергәйнем, йоҡлап киткәнмен. Уянып китһәм, вагон китеп бара. Ҡурған станцияһында төшөрөп ҡалдырҙылар. Мин бер урыҫҡа эшкә ялландым. Ошонан 40-50 саҡрым барырға кәрәк икән, – тине. – Хәҙер китәбеҙ.

Ул миңә бер күмәс бирҙе. Беҙ Себер яғына киттек, Ҡазыхан Петухово станцияһында тороп ҡалды.

***

*Ҡазыхан ҡартатайымды мин күрмәнем. 1944 йылда нәнәйемә, «хәбәрһеҙ юғалды» тигән ҡағыҙы килгән. Ҡартатайымды белгән кешеләр уның тураһында, бик уңған, эшсән кеше булды, тип һөйләнеләр. Уның хаҡында мәғлүмәттәр эҙләп ҡараным, ләкин улар бик аҙ ине.*

*Һуғыштан һуң атайым, Шакир, Салауат районында прокурор булып эшләгәндә, растрата өсөн бер ҡатыусыны яуапҡа тарттырған. Ул ҡатыусы Ниғмәтйән Ғәлин тигән кешенең ҡыҙы икән. Уларҙың өйөндә прокуратура тентеү үткәргәндә, Н. Ғәлиндең немец полицайы формаһында төшкән бер фотоһүрәте килеп сыҡҡан. Ниңә был һүрәтте һуғыштан алып ҡайтҡанын белмәйем. Ауылдашыбыҙ полицай булған икән. Шуның өсөн ул ун йыл лагерҙа ултырған. Һорау был ялған ҡартатайымдың яҡты иҫтәлегенә ҡара тап төшөргән. Атайым менән Ҡазыхан ҡартатайымдың әнеһе, Ҡәнзәфәр ағайым, коммунист булараҡ, яуаплы эштә эшләгәс, КПСС өлкә комитетына тикшереү үткәреүҙе һорап, ғариза яҙҙы. Тикшергәндәр һәм: «Һеҙҙең атайығыҙ һәм ағайығыҙ Ҡазыхан Йомаҙиловҡа дәғүә юҡ», – тип яуап биргәндәр.*

*Атайым ҡартатайымдың ҡайҙа һуғышҡанын тикшереп ҡарағас, уның һөйәктәренең Ҡара диңгеҙ төбөндә ятыуы асыҡланды. Ҡазыхан ҡартатайым 1944 йылда Керчь ҡалаһы янында төшөрөлгән десант составында булған икән.*

*Атайым да шул ваҡыттарҙа Севастополь ҡалаһы тирәһендә һуғышҡан, 1944 йылдың 9 майында Сапун тауын азат итеүҙә ҡатнашҡан.*

Йомағужа һәм Миндейәр ағайҙар Петухово станцияһынан һуң икенсе станцияла төшөп ҡалған. Мин Ҡаҙағстандың Малютка станцияһында уянып киттем. Шунда татар ауылы бар, тигәс, төшөп ҡалдым. Тура килһә килә бит. Станцияла мин Йомаҙил ағайым менән Хажи ағайымдың берәр ҡапсыҡ бойҙай алып, бер аттан бушатып торғанын күреп ҡалдым да яндарына йүгерҙем. «Ни эшләп йөрөйһөң бында?» –тиҙәр. Мин һөйләп бирҙем. Ҡазыхан улың Петухово станцияһынан 40-45 саҡрым ергә бер урыҫ кешеһенә ялланып китте, тигәйнем, Йомаҙил ағайым:

– Ахмаҡ! Ниңә сығып китте икән? – тип илап ебәрҙе.

Хажи ағайым уларға килтергән ҡаҙаҡ кешеһен эҙләп алып килде. Ҡаҙаҡҡа көтөүсе кәрәк икән. Хажи ағайым уға:

– Был минең энем, бер бот бир ҙә алып ҡайт, – тине.

Ул бер бот он алып, атайыңа бирермен, тип ҡайтып китте. Миңә үҙенең справкаһын ҡалдырҙы. Был ҡағыҙҙа Хажи исемен Хәйруллаға, фамилияны Ғәйнуллинға үҙгәрттем. Ҡаҙаҡтың атына ултырып Букановка тигән немец утарына лютерандарҙың һыйырын көтөргә киттем.

*Йомаҙил олатайым тураһында ла мин ишетеп кенә беләм. Мин тыуыуға көн ҡалғас, ул донъя ҡуйған. Һуғыш ваҡытында, оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, олатайым колхозда бал ҡорттары ҡараған. Фатима ҡартинәйем менән Шәрҙәле йылғаһы ярында бәләкәй генә өйҙә йәшәгәндәр. Олатайым бик һәйбәт, кешегә асыҡ, йомарт, ипле кеше булған, балалары уны бик яратҡан. Башҡа сығарғанда, ул һәр улына бәләкәй генә булһа ла өй һалып биргән, ат, тана, ваҡ мал да биргән. Зыяратҡа барып, уның һәйкәленә ҡуйылған фотоға ҡараһам, ниндәйҙер йылылыҡ һирпелә кеүек.*

*Фатима ҡартинәйем, минең кеүек, йәй еткәс ауылға ҡайтып китә ине. Ҡалала ул Ҡәнзәфәр ағайымдарҙа йәшәне, ә йәйҙе Нәғимә әбейемдә үткәрҙе. Үҙе лә Фатима, килене – минең нәнәйем дә Фатима ине.*

***

Букановкала йүнле эш табылманы. Катанай утарына католиктарға табан киттем. Унда барып кергәндә хәлем бөтөп, ныҡ итеп асыҡҡайным. Өйҙән-өйгә йөрөп эш һорарға тотондом. Бер немец өйөнә килеп керҙем. Ҡараһам, бер кеше юҡ. Өҫтәлдә бармаҡ башындай ғына ап-аҡ әпәй киҫәге ята. Ян-яҡҡа ҡарандым да теге әпәйҙе алып ҡаптым. Ҡабыуым булды, бәләкәй генә, бик йыуан йәш ҡатын килеп тә сыҡты. «Кемдең рөхсәте менән икмәкте алдың?– тип һуҡҡыларға, тибергә кереште. Йығылып киткәс тә бәргеләне. Тик мин, ҡайһы еремә типһә лә, һиҙмәйем. Бер саҡ был йыуан бисә мине ботомдан тотоп алып, тышҡа сығарып ташланы.

Бер нисә минут яттыммы-юҡмы, ауыҙынан күбек сәсеп, бер ата сусҡа миңә табан килә башланы. Метр ярым самаһы ҡалғас, мине туҡмаған ҡатын килеп сыҡты ла биҙрә менән сусҡаға ашарға ултыртты. Биҙрәгә алданып, сусҡа мине ташлап китте. Әлеге йыуан ҡатын мине һөйрәтеп ат һарайына индереп һалды. Ишектәрен ябып ҡуйҙы. Бер-ике сәғәттәй үткәс, яныма Леонтий тигән немец килде. «Ну чего тут лежишь? Надо уходить, иначе умрешь»,– тип мине йәлләне. Үҙенә лә был ҡатындан эләккәне барҙыр, тип уйланым. Шул арала теге ҡатын яңынан килеп сыҡты. Немецтар үҙ-ара ниҙер һөйләште лә, өйгә инеп киттеләр.

Леонтий 200 грамм икмәк, стакан тулыр-тулмаҫ һөт алып сыҡты. Мине ашатып, тимерлеккә кертеп: «Бер өс көн ял ит, шунан мин һине ҡаҙаҡтарға алып барырмын» –, тине. Мин Леонтийҙа ун ике көн яттым. Ни ҡушһа, шуны эшләнем, ҡушмаһа ла эшләнем. Бик яҡшы ашаталар, ҡалған аштарын да миңә бирәләр. Леонтий бик һәйбәт кеше булып сыҡты. Тора-бара аяҡ-ҡулдарҙағы, күҙ төбөндәге шештәр уңала башланы.

Бер мәл Леонтий мине биш өйҙә йәшәгән ҡаҙаҡтарға алып барҙы. Оло йәштәге түңәрәк һаҡаллы, суфый ғына Шаҡыбай исемле кеше был ғаиләнең башы ине. «Үҙемә ул булаһыңмы?» – тип һораны. Риза булдым. «Улым Хәйрулла» тип йөрөттө. Төш еткәс, Шаҡыбай улы Әүбәкер менән миңә күк байталды

күрһәттеләр: «Шуны менеп, мал артынан йөрөрһөң»,– тинеләр. Мин күк байталды менеп ҡараным, ул миңә оҡшаны.

Тәүге көн миңә унынһы ла, бынынһы ла эш ҡуша. Мин йүгерәм, хәлем бер ҙә юҡ. Астан шешенгәнлек тиҙ генә бөтмәй икән. Ләкин нисек тә быларға ярарға кәрәк. Иркәләнергә атай-әсәй юҡ. Кем яратыр, аҡыл бирер? Нисек тә астан үлеү ҡурҡынысынан ҡотолорға кәрәк. Ярарға, йылы һүҙ ишетергә. Үҙемә ҡарайым да, нисек кеше булырмын икән, тип уйлап ҡуям. Ғүмер буйы шулай аяҡта туҙған сабата, өҫтә ҡап-ҡара күлдәк, ҡырҡ ямаулы салбар, иҫке пинжәк булырмы икән?

Леонтий Шаҡыбай менән бик оҙаҡ, кискә саҡлы һөйләшеп ултырҙы ла ҡайтып китте. Ҡаҙаҡтарҙа тәүге тапҡыр ҡундым. Иртән Шаҡыбай тороп кейенде лә: «Хайруллау, сен дә тор. Утарҙың малдарын айҙап (ҡыуып) кил, бына ошо колдең итәгенә айҙап ҡыуырһың»,– тине.

Аяғыма иҫке сабатамды кейҙем дә: «Хәҙер ҡыуып килтерәм»,– тип сығып киттем. Ҡарт артымдан сыҡты ла: «Күк байталды артылып ал», – тине. Мин бер нәмә лә аңламаным, йәйәү киттем.

1921 йыл майының 18-се көнө ине. Ашлыҡ сәселеп бөткән, ҡайһы бер урындарҙа шытҡан бойҙай тупраҡты ҡаплай ҙа башлаған. Мин тиҙ генә Ҡатанай утарының осонан төштөм дә: «Малдарығыҙҙы ҡыуығыҙ!» – тип ҡысҡырҙым. Немец ҡатындары малдарын ҡыуалап сығара башланы. Бер киҫәк икмәк өсөн мине туҡмаған йыуан Ева ла килеп сыҡты. Ул дүрт һыйырын ҡыуғанда, мин ҡаршыһына туҡтап, ҡарап торҙом. Леонтий ҙа мине күреп, килеп сыҡты.

– Но, Хайлура, начал работать? – тип яныма килде лә: – Бына һиңә жареный колбаса, – тип ит киҫәге бирҙе. Мин уны алдым да ауыл араһында уҡ ашап бөтөрҙөм. Малдарҙы ауылдан алып та сыҡтым, хәлем дә бөттө. Малдар таралыша башланы.

Шаҡыбайҙың икенсе улы Ғәлимйән һыбай сабып килеп етте лә тиргәшергә тотондо: « Козең көрмәйме, пәрейнең боласы»,– имеш. Ул минең хәл юҡ икәнде аңламай шул. Артынса энеһе Сәләп һыбай килеп сыҡты: «Ах, пәрейнең боласы, нигә атты, күк байталды, артылмадың (атланманың – **Р.В.**)»,– тип ағаһына ҡушылды. Мин бер нимә лә әйтә алмай тик торам. Хәлем юҡ, сөнки әлеге «жареный колбаса» быуыныма төшкән.

Ғәлимйән менән Сәләп малдарҙы йыйып алып, күл буйына ҡыуҙы. Мин килеп еткәс, Ғәлимйән күк байталды тотоп бирҙе: «Сен, Хайрулда, осы байталды салт (һыбай – **Р.В.**) менеп алып, өстеннән төсмә, – тине. – Ал инде аттан төсеп калсаң, өйгә кайталмайсың».

Атты менеп алдым да малдарҙы һыбай ҡыуып йөрөнөм. Төш еткәс, билдәле, аттан төшөргә тура килде. Малдарҙы көтөүгә алып сыҡҡанда, бер немец ҡарты Иван Иванович, ҙур ала һыйырға күрһәтеп: «Әгәр еленәнән һөтө аға башлаһа, берәй һауытҡа һауып эс», – тигәйне. Ысынлап та, төш еткәс, ала һыйырҙың дүрт имсәгенән дә һөтө тама башланы. Атымдан төшөп, фляжкаға һөт һауып алдым да аҙлап ҡына көнө буйы һөт эсеп йөрөнөм. Хәлем дә бөтмәне, күңелем дә тынысланды. Шул һыйырҙы мин йәй буйы һауып эсеп йөрөнөм. Ала һыйырҙан хужалары иртән биҙрә ярым, төш һәм кис икешәр биҙрә һөт һауып ала ине. Ундай һыйырҙы башҡаса бер ерҙә лә күргәнем булманы. Шул тиклем һөтлө, симментал тоҡомло һыйыр ине.

Көҙгә тартты. Өҫтөмдә – тире күлдәк, тире ыштан. Ул кейемдәрҙең йөнө бет менән тулған. Йөрөгәндә бөжәктәр бик һиҙелмәй. Эҫе көндә тирләнеңме, бет тәнгә йәбешеп, терелəй ашарға тотона, иҫ китерлек. Тирҙе һыпырһаң, ус тула яҙып, бармаҡ араһынан беттәр сығып тора. Был арттырып һөйләү түгел, дөрөҫө шул.

Беттәр бик күбәйгәс, мин тире салбарҙың йөнөн иң әүәл ҡайсы, һуңынан үткер салғы бысаҡ менән ҡырып төшөрә башланым. Йөнөн ҡырһаң да, йөйҙәрендә бет ҡала икән. Кейемемде йыуан түмәргә һалып, сүкеш менән туҡмайым. Ләкин эре бет үлһә лә, һеркәһе ҡала. Уныһын көтөүҙә ут яғып, һыйырҙар туплауҙа ятҡанда утҡа ҡыҙҙырып ала инем. Бер аҙға тән еңеләйеп ҡала. Ә таҙа күлдәк менән ыштан алырға аҡсам булманы.

Ошо 1921 йылдың август-сентябрендә Шаҡыбайҙың энеһе Рәхимжан «Аҡмолгубсоюз»дың сеймал әҙерләүсеһе булып китте. Кокшетау, Аҡбасар, Аҡмола, Ҡараганда яҡтарына барып, ике – дүрт ай кешенән мал һатып алып йөрөр ине ул. Ғаиләһендә 35–40 йәштәге ҡатыны ғына, балалары юҡ. Ҡатыны бала тапмағас, 40–45 йәштәрҙә булыуына ҡарамаҫтан, бер мәл ошо Рәхимжан ҡыҙҙан ҡатын алырға булып китә. Оло ағаһы Шаҡыбай уға ҡаршы төшмәй. Ҡатыны иһә был хәбәрҙе ишеткәс, ҡайғыра, туғандарын саҡыра. Рәхимжан уларҙы ҡунаҡ итә, оҙатып ҡала. Тегеләр: «Алһа ала инде, бер ни ҙә ҡыла алмайбыҙ», – тип ҡайтып китәләр. Рәхимжан бик күп аҡса, йылҡы, һыйыр, ҡуй биреп, йәш кенә ҡыҙ баланы ҡатынлыҡҡа ала.

1922 йылдың көҙөндә Ҡатанай немецы Иван Иванович мине үҙенә ҡыш-ҡылыҡҡа эшләргә саҡырҙы. Мин ризалаштым, тик, Шаҡыбайҙан һора, тинем. Сөнки ҡарт мине «улым» тип йөрөттө, ҡаҙаҡ ҡыҙын алып бирәм, тине. Иван Иванович минең үтенесемде үтәгәндер, сөнки Шаҡыбай йәй мал көткән өсөн миңә берәр тана, ҡуй, ҡолон бирҙе.

1922-1923 йылдың ҡышына Шаҡыбай мине Иван Ивановичҡа эшкә ебәрҙе. Немец мине баштан-аяҡ бик матур итеп кейендерҙе, ике пар күлдәк-ыштан, ябай ғына булһа ла пинжәк, салбар, тун бирҙе. Тире күлдәк менән салбарымды һалам менән ҡушып яндырҙым. Кейенеп алғас, бик шатланып киттем.

Шаҡыбайҙарға аҙна һайын барып йөрөйөм. Рәхимжан, Шаҡыбай һәм Әбү-бәкерҙең ҡатындары: «Уй-бай, бынау Хәйрулда ҡандай матур булып кетепте»,– тип маҡтай башланылар. Ағас – япраҡ, кеше сепрәк менән күркәм шул. Мин инде нисек тә Иван Ивановичта йәй ҙә ҡалырға тырыштым. Клемент тигән бер немец, Ҡазан татары Ибраһимов ҡатыны менән байҙа йәшәне. Бәләбәйҙән килгән Нурлығаян, Ганс Миллер тигән немец та ошонда тора ине.

Бер көн Нурлығаян миңә: «Һин тиҙ арала ҡас! Юғиһә һине ҡырғыҙҙар үлтерә», – тип ҡурҡытты. «Бер ғәйебем дә юҡ, мине ни өсөн үлтерәләр?»– тип һорайым. Нурлығаян: «Һине үлтерергә Рәхимжан бер кеше яллаған. Һин бөгөн үк теләһә ҡайҙа кит» – тине.

Нурлығаяндың хәбәрен мин Иван Ивановичҡа еткерҙем. Ул миңә ике гәзит ҙурлығы ҡағыҙ аҡса бирҙе. Мин төнгө өстәр тирәһендә, ат менеп, Петро-павловск ҡалаһына табан сығып киттем. Таң атҡанда Кондратьевка разъезына килеп еттем. Шул разъезд янында Кургузкин тигән бер алпауыттың пар тирмәненә һыу ташыусы булып эшкә керҙем.

**Хәйрулла ҠОЛМӨХӘМӘТОВ.**

***

*Ошонда Х. Ҡолмөхәмәтовтың ҡульяҙмаһы тамамлана. Һаулығы ҡаҡшаныңмы йә үлеп киттеме – билдәһеҙ. Аҙағын мин уның архивы буйынса өйрәндем. Кургузкинда эшләгәндә Х.Колмөхәмәтов комсомолға инә, һәм комсомол ойошмаһы уны ҡаҙаҡ батрактары курсына Петрозаводск ҡалаһына уҡырға ебәрә. Шунда уҡығанда егетте коммунистар партияһына алалар.*

*1926 йылда ул Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла һәм, ике йыл хеҙмәт иткәс,*

*тыуған яғына ҡайта, Өфөлә партия мәктәбен тамамлай. 1938 йылдың декабренә тиклем Х. Ҡолмөхәмәтов төрлө партия һәм совет ойошмаларында эшләй. Партияла «таҙартыу» осоро һәм Сталиндың язалау саралары башланғас, уны партиянан сығаралар. Атаһының сауҙа менән шөғөлләнеүен, үҙенең Колчак армияһында ылаусы булып йөрөгәнен хәтеренә төшөрәләр. Эштән дә ҡыуыла.*

*Яҙмыш билдәләнде: тиҙҙән берәй «тройка»нан хөкөм ителеү һәм атылыу йә 15 – 20 йыл лагерҙа ултырыу. Ышаныу ауыр, ләкин уны аҡлайҙар, Башҡортостандың партия комиссияһы уны кире партия сафына ҡайтара.*

*Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн Салауат районында һабантуйға тура килә. Һуғыш башланыуы иғлан ителгәс, Хәйрулла менән Ҡазыхан хәрби комиссариатҡа барып, үҙ теләктәре менән фронтҡа ебәреүҙе һорай. Партия мәктәбен тамамлаған кеше булараҡ, һуғышта Х. Ҡолмөхәмәтов политрук вазифаһын башҡара. Был – легендар вазифа, сөнки политруктар беренсе булып: «Коммунистар, минең арттан!» – тип һөрән һалып, һөжүмгә беренсе булып күтәрелер ине. Ҡурҡыуһыҙ, батыр кешеләр ине политруктар, улар Ватанға намыҫлы хеҙмәт итте. Күкрәгенә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, күп кенә миҙалдар тағып, контузияланған Х. Ҡолмөхәмәтов тыуған төйәгенә ҡайта. Тағы партия мәктәбендә уҡый, төрлө партия һәм совет ойошмаларында эшләй.*

*Район буйлап күп йөрөргә, халыҡ менән аралашырға тура килә. Ҡайҙа берәй риүәйәт ишетһә йәки берәй шәжәрә йомғағы сиселһә, бөтәһен дә яҙып ала Ҡолмөхәмәтов. 1950 йылдың башында Ҡыйғы районында мәҙәниәт йорто директоры булып эшләгәндә, ҡапыл ғына һаулығы ҡаҡшап, эшенән китергә мәжбүр була. Ошо осорҙа тыуған яғы тарихы менән ентекләп шөғөлләнергә тотона. Февралдә ул Салауат районының Лағыр ауылында Тырнаҡлы ырыуының шәжәрәһен, апрелдә Яңы Ҡаратаулы ауылында Гөлсафия Исламованан милли батырыбыҙ Салауат Юлай улының шәжәрәһен яҙып ала.*

*Салауат батыр шәжәрәһендә телһеҙ Кәнәй ҡартинәһенең исемен күргәс, үҙенең Салауат тоҡомонан булыуын асыҡлай. 9 майҙа Хәйрулла Өфөлә Бөйөк Еңеүҙең биш йыллыҡ тантаналарында ҡатнаша, артабан М. Ғафури исемендәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының архивында эҙләнергә тотона.*

*Себер юлының XVIII быуатҡа ҡараған картаһын, Красильниковтың ландкартаһын, П. Рычковтың «Топография Оренбургской губернии» тигән китабын ҡарап сыға. Шул карталарға нигеҙләнеп, үҙенә йыйылма карта төҙөй. Ауыл һәм йылға исемдәрен, айырым ваҡиғалар булған урындарҙы теркәй. Шунда ул Ҡыуаҡан ырыуының X-XI быуаттарҙа таралып йәшәү, 1735 –1740 йылдарҙағы милли-азатлыҡ һуғышы менән бәйле, 1754 –1755 йылдарҙа Батырша етәкселегендәге ихтилал үткән, Салауат батыр урыҫ ғәскәрҙәре менән һуғышҡан, яндырылған ауылдарҙың урындарын күрһәтә.*

*Ошо картала Х. Ҡолмөхәмәтов Салауат батыр тыуған Тәкәй ауылын билдәләй, ауыл халҡының Юныс, Аҙналы, Шағанай ауылдарына күсеп киткәндәрен күрһәтә. Хәйрулла ҡарттың Өфөгә сәфәре емешле була. Ул баш ҡалала Салауат батырҙың тыуыуына 200 йыл тулыу тантаналарын үткәрергә тәҡдим итә. Өфөлә оҙаҡ йәшәргә мөмкинлеге булмағас, ул районға ҡайтып, бер ауылдағы ете йыллыҡ мәктәпкә тарих уҡытыусыһы булып эшкә урынлаша. Ләкин эшләй алмай. Дипломы булмағанлыҡтан эшһеҙ ҡала. Әйтерһең, 1951 йылда башҡа уҡытыусылар бөтәһе лә дипломлы булған.*

*Салауаттың юбилейы яҡынлаша. Тантаналарға яҡыныраҡ булырға тырышып, Х. Ҡолмөхәмәтов тыуған ауылы Ҡаратаулыға ҡайта һәм Рәсәй һаҡлыҡ*

*банкыһы мөдире булып эшкә инә. Партия өлкә комитетының Салауат батырҙың юбилей тантаналарын үткәреү тураһындағы ҡарары йәмәғәтселек өсөн көтөлмәгән булып сыға. Салауат батырҙың ғәмәл хәле, көрәше менән ғилми рәүештә бер кем дә шөғөлләнмәй. Яҙыусылар, рәссамдар, композиторҙар юбилейға бер ниндәй ҙә яңы әҫәр тәҡдим итмәгән. Ләкин махсус комиссия саралар планын бик ҙур итеп эшләгән.*

*Салауат Юлаев исемен улар Башҡорт академия драма театрына, Мәсәғүт уҡытыусылар институтына, Белорет металлургия комбинатына ҡушырға тәҡдим әҙерләгән. Салауаттың шиғырҙарына көй яҙыу, портретын төшөрөү, һәйкәл ҡуйыу, һабантуй үткәреү ҙә күҙ уңында тотолған. Иң мөһиме, бер аҙнала Салауат батырҙың биографияһын яҙып сығырға, шиғырҙар, йырҙарының йыйынтығын нәшер итергә кәрәк була.*

*Исемлектәге бер сара ла тормошҡа ашмай. Киреһенсә, юбилей тантаналарын үткәреү урынында бәхәс ҡуйыра. Салауат батырҙың тыуған төйәге лә ныҡлы асыҡланмаған икән. Иглин районында ла Тәкәй ауылы булыу сәбәпле, шул район етәкселәре, Салауаттың тыуған төйәге ошонда, тип ныҡыша. Ә Салауат районындағы Тәкәй ауылының көлө күптән күккә осҡан.*

*Салауат райкомының беренсе сәркәтибе Б. Абдрахманов ни эшләргә белмәй. Аптырағас, ул был мәсьәләне партия активы йыйылышында күтәрә. Көтөлмәгәндә район һаҡлыҡ кассаһы мөдире Х. Ҡолмөхәмәтов тороп баҫа ла: «Салауат батырҙың беҙҙең районда тыуғанлығына дәлилдәр бар, улар – минең өйҙә», – ти.*

*Береһе лә таралмай, Х. Ҡолмөхәмәтовтың өйөнә ҡайтып, дәлилдәр алып килгәнен көтәләр. Үҙенең карталарын һәм дәфтәрен алып килеп, ул Тәкәй ауылының Күскәнде йылғаһы буйында, Һары Ҡондоҙ тамағында урынлашҡанын күрһәтә. Аҙналы ауылының урынын ҡарттар ҙа белә икән.*

*Өфөлә ике район вәкилдәре йыйыла. Иглин яғынан 60-лап кеше килә. Салауаттан иһә Б. Абдрахманов, Х. Ҡолмөхәмәтов һәм тағы бер нисә кеше генә. Иглиндар беренсе булып сығыш яһай. Х. Ҡолмөхәмәтов бер нисә тапҡыр тороп: «Юҡ! Улай түгел, ялған!» – тип ҡысҡыра. «Залдан ҡыуып сығарабыҙ»,– тип иҫкәрткәс кенә тыныслана ул. Аҙаҡ Салауат районы вәкилдәренә һүҙ бирелә.*

*Х. Ҡолмөхәмәтов Салауаттың тыуған төйәге, Тәкәй тураһында хәбәр итә, бороңғо картала ауылдың урынын күрһәтә. Салауат районының Әлкә, Юныс, Шағанай ауылдарында йәшәгән кешеләрҙең Салауат батырға туған булыуын һөйләй, хатта Салауат батыр тураһындағы Йүрүҙән, Әй буйында таралған йырҙарҙы йырлап ишеттерә.*

*Иглиндарҙа бындай дәлилдәр юҡ. Шулай итеп, бәхәскә нөктә ҡуйыла. Салауат Юлаевтың тыуған төйәге тип Салауат районы Шайтан яҡ танылды. Был ваҡиғалар тураһында миңә Х. Ҡолмөхәмәтовтың улы Ғабдулхаҡ ағайым һөйләне. Ул үҙе был хаҡта Б. Абдрахмановтан ишеткән.*

*Шулай итеп, Х. Ҡолмөхәмәтов Бөйөк Ватан һуғышында оло Ватанын яҡлап алып ҡалһа, һуғыштан һуң Кесе тыуған төйәгенең рухи байлығын тоғро һаҡлаған.* Беҙ уға шуның өсөн рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

**Радик ВАХИТОВ әҙерләне.**

# ТУЙМАЗЫЛАР – БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫНДА

Барлыҡ донъяның яҙмышын хәл иткән XX быуат афәтенең һәр көнө һәм төнө ил тормошонда, һәр ғаиләлә юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. 1941 йылдың 22 июнендә Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт иткән Туймазы районы ир-егеттәре Европала һуғышып тәжрибә туплаған һәм ҡеүәтле техника менән ҡоралланған дошманға ҡаршы тәүге көндәрҙән үк батырҙарса һәм оҫта һуғышты. Һайран ауылынан пулеметсы Мирғазиян Гәрәев Брест ҡәлғәһендә фашистар менән башланған тәүге сәғәттәрҙә үк алышҡа инде. Гавриловтың легендар батальонында ул ҡәлғәне авиация һәм танкылар ярҙамында һөжүм иткән немец пехотаһынан 17 июлгә тиклем һаҡлауҙа ҡатнашты. Ауыр яраланған һәм контузияланған Гәрәев әсиргә алынһа ла, яйын табып ҡаса. Артабан ул Курск дуғаһындағы һуғыштарҙа, Украина менән Белоруссияны азат итеүҙә ҡатнаша. Һуғыштан һуң ҡаһарман оҙаҡ йылдар «Туймазынефть» идаралығында эшләй.

Ардатовка ауылы егете Афанасий Карманов һуғыш башланғандың икенсе көнөндә үк вафат була. Капитан Кармановтың награда ҡағыҙында түбәндәге юлдар яҙылған: «1941 йылдың 23 июнендә Кишинев ҡалаһы янындағы һауа һуғыштарында А. Карманов «Мессершмитт» тибындағы өс фашист истребителен бәреп төшөрҙө. Киске сәғәт 8-ҙә ул самолетын яғыулыҡ һәм патрондар менән тәьмин итеү өсөн Ревака аэродромына ултырта. Шул ваҡытта күктә дошман истребителдәре күренә. Карманов самолетына яғыулыҡ тултырғанды көтөп тормай, һауаға күтәрелә һәм дүрт «Мессершмитт» менән тиң булмаған алышҡа инеп, ҡаһармандарса һәләк була.

Карманов аҡ финдар менән һуғышта ла ҡатнаша. Иң хәүефле һәм яуаплы бурыстар башҡара. Ул дошман позициялары өҫтөнән 50-нән ашыу осош яһай. Үҙенең «И – 15 БИС» самолеты менән ул летчик Морозовты дошман баҫып алған урындан алып сыға. Немец фашистарына ҡаршы һуғышта батырлыҡ күрһәткәне өсөн капитан А. Г. Кармановҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе юллайым». Был документҡа 20-се йыйылма авиация дивизияһы командиры Советтар Союзы Геройы генерал-майор Осипенко ҡул ҡуйған. СССР Юғары Советы Президиумының 1942 йылдың 27 мартындағы Указы менән А. Кармановҡа Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып Советтар Союзы Геройы исеме (үлгәндән һуң) бирелә.

Башҡортостанда ойошторолған 170-се уҡсы дивизияла йөҙәрләгән Туймазы егете һуғыша, 23 июндә үк улар фронтҡа ебәрелә һәм Себеж, Невель ҡалалары янындағы ауыр һуғыштарҙа була. Улар танкылары һәм моторлаштырылған частары булған дошмандың һөжүмен кире ҡағып ҡына ҡалмай, үҙҙәре лә һөжүмгә күсә. Мәскәү өсөн барған һуғыштарҙа туймазылар Калинин фронтының 361-се уҡсы дивизияһында була. Республикала ойошторолған дивизиялар араһында тәүгеләрҙән булып ул Мәскәү янында фашист илбаҫарҙарын ҡыйратыуҙа

күрһәткән батырлығы һәм фиҙакәрлеге өсөн 1942 йылдың 17 мартында «гвардия уҡсы дивизияһы» исеменә лайыҡ була. Артабан дивизия Великие Луки, Невель, Полоцк, Двинск хәрби операцияларында һәм Латвияны азат итеүҙә ҡатнаша. Туймазы ҡалаһындағы хәрби дан музейы (артабан 21-се гвардия Невель дивизияһы исеме бирелгән) ошо берәмек командирҙары һәм һуғышсыларының батырлығына арналған.

Данлыҡлы 16-сы гвардия Башҡорт атлы дивизияһы сафтарында 245 Туймазы егете дошманды еңеүгә ҙур өлөш индерә. Улар беренселәрҙән булып Днепр йылғаһын кисә һәм, арғы ярҙа нығынып, дошмандың ҡеүәтле оборонаһын уңышлы өҙөүгә булышлыҡ итә. Башҡа яҡташтары менән бер рәттән, Днепр янындағы һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн, Иҫке Ҡандра ауылы егете Ф. Ғәбдрәшитов менән Мулла (хәҙер Октябрьский ҡалаһына инә – **Р. Г.**) ауылынан Ш. Ғәтиәтуллинға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Вермахтың һайланма частары 1942 йылда Волгаға ынтылғанда уның юлын бүлеүсе 214-се уҡсы дивизияла Туймазы районынан да егеттәр күп була. Дивизия Башҡортостанда ойошторолоп, тәүге хәрби сирҡаныуҙы Тормосин ҡалаһы янындағы алышта ала. Харьков ҡалаһын азат итергә ынтылған Ҡыҙыл Армияны Барвенково янында артҡа алып ташлауҙан дәрте хәтәр тоҡанып киткән дошман бында йәнле көс буйынса ике тапҡыр өҫтөнлөккә эйә була. Ҡанға батҡан Сталинград фронтын немец танкылары киҫәктәргә өҙгөләй. Туҡтауһыҙ һуғыштарҙа ҙур юғалтыуҙар кисергән Ҡыҙыл Армия частары Дон йылғаһына табан сигенә. Ошо көндәрҙә 214-се дивизияның 776-сы һәм 780-се полктары дошманға ҡаршы сыға. Көслө ҡаршылыҡҡа осрап, фашистар полктарҙы урап үтә лә көнсығышҡа ынтыла. Позиция биләп ятҡан ике полк, сигенергә бойороҡ булмағас, ҡамауҙа ҡала. Сигенергә бойороҡ килгәс кенә полктар дошман ҡулсаһын өҙөү өсөн көнсығышҡа табан йүнәлә. Танкылар, авиацияла ҙур өҫтөнлөк менән файҙаланған фашистарҙың ҡаты ҡаршылығына осрамаҫ өсөн, төндәрен генә хәрәкәт итергә мәжбүр була.

Төнгө һуғыштың ниндәй дәрәжәлә ҡатмарлы һәм ҡот осҡос икәнен уны үҙ елкәһендә татып, иҫән ҡалған кешеләр генә белә. Ҡапыл яҡтыртҡан прожекторҙарҙан күҙе һуҡырайыр хәлгә еткән, шартлауҙарҙан ҡолағы тонған һуғышсы, ҡайҙа барырға кәрәклеген дә аңғармайынса, дошман уты өҫтөнә табан атлай. Полктар бик ҙур юғалтыуҙар кисерә, күп һуғышсы яу яланында ятып ҡала. Бишҡурай, Үрге Троицк, Покровка, Кожай-Андреевка, Кәкребаш, Никитинка, Ярмунса, Сыуаш-Олҡан һ.б. ауылдарға «батырҙарса һәләк булды», «хәбәрһеҙ юғалды» тигән «ҡара ҡағыҙҙар» килә башлай.

Дивизия частарына сираттағы бойороҡ Дон йылғаһы ярында урынлашҡан Түбәнге Чир станцияһы янына сигенеү һәм 64-се армия частарының көнсығыш ярға имен-аман сығыуын тәьмин итеү тураһында бирелә. Әммә 776-сы полкка станцияны баҫып алырға өлгөргән һәм флангыларҙан һөжүм иткән фашистар менән ҡаты алышҡа инергә тура килә. Дон аша күпер дошман ҡулына эләкмәһен өсөн бар көсөн һалған яугирҙар тап ошо мәлдә күперҙең шартлатылыуы хаҡында хәбәр ала. Полк Донға үтеп инә һәм, дошмандың бер туҡтауһыҙ тупҡа тотоуына ҡарамаҫтан, йылға аша сығыу өсөн күпер һала һәм төп частар техника ҡоралы менән көнсығыш ярға сыҡһын өсөн шарттар булдырыуға өлгәшә. Түбәнге Чир станцияһы янындағы бер көнлөк һуғышта Ватан өсөн ҡорбан булғандар исемлеге Ҡандракүл, Түбәнге Бишенде, Николаевка, Арыҫланбәк, Үрге Сәрҙек, Райман, Татар-Олҡан, Ҡарат ауылдарында тыуып үҫкән ир-егеттәр иҫәбенә тағы ла арта төшә.



Тимер Арыҫлан Афанасий Карманов Мирғазиян Гәрәев Мөхәмәтша Исмәғилев

Шакирйән Ғәтиәтуллин Фазулла Ғәбдрәшитов Хәтмулла Солтанов Ян Ғабдуллин

Рәхим Гәрәев Әкрәм Дауытов

Тыл эшсәндәре – музейҙа

Һуңыраҡ туймазылар Паньшино разъезы янында ла ҡыйыу һуғыша. Улар дошмандың ҡаты һөжүменә ҡаршы тороп ҡына ҡалмай, ә совет ғәскәрҙәрен Волгаға алып ташлау өсөн һуғышҡа яңынан-яңы полктар, танкылар һәм башҡа хәрби көс индерергә мәжбүр булған фашистарға ҡаршы һөжүмгә лә күтәрелә. Яҡташтарыбыҙҙың үле кәүҙәләре Паньшино разъезы, Вертячий утарының 56,8-се ҡалҡыулығы эргәһендә лә күпләп ерләнгән. Был ҡалҡыулыҡ шуныһы менән билдәле: унда барған ҡан ҡойошло алышта батырлығы тураһында китаптар яҙылған Гуля Королева ла һәләк була. 1942 йылдың 24 ноябрендә генә ошо ҡалҡыулыҡ өсөн барған һуғыштарҙа беҙҙең 500-ләп һуғышсы һәләк була йәки яраланып сафтан сыға. Артабан туймазылар Сталинградтағы немец ғәскәрҙәре ҡалдыҡтарын юҡ итеүҙә ҡатнаша. Ҡала янындағы һәм ҡала эсендәге һуғыштарҙа йөҙҙән ашыу яҡташыбыҙ мәңгелеккә күҙҙәрен йома. Ошо тиңдәше булмаған һуғышта сынығыу алып тәжрибә туплаған иллегә яҡын яҡташыбыҙ 214-се дивизия составында еңеүле һуғыштар менән Украина, Польша, Германия, Чехословакия аша Берлинға табан атлай. Дивизия байрағын Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов, Богдан Хмельницкий ордендары биҙәй, уға «Кременчуг-Александрийск» почетлы исеме бирелә. Туймазылар Ленинград ҡалаһын һаҡлауҙа ла үҙҙәрен юйылмаҫ данға күмде. «Тормош юлы» тип аталған боҙ юлын гидрографик хеҙмәт лейтенанты Евгений Чуров етәкселегендәге диңгеҙселәр һала. Үрге Троицк ҡасабаһында тыуған был егет бик иртә етем ҡала һәм уҡытыусы Ғәлиевтар ғаиләһендә тәрбиә алып, тәүҙә Аҙнағол ете йыллыҡ, һуңынан Туймазылағы 1-се урта мәктәптәрҙе тамамлай. Аксен ауыл хужалығы техникумында белем алып сыҡҡас, армияға алынғанға тиклем Чуров Туймазы район Советы башҡарма комитетының ер бүлегендә лә эшләп өлгөрә. Ватанды һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул Ҡыҙыл Байраҡ һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендарына лайыҡ була. Һуғыштан һуң Евгений Петрович фән менән шөғөлләнә, техник фәндәр докторы, профессор булып китә.

Партизандар хәрәкәтендә ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙҙың да яҙмышы төрлөсә була. Ҡайһы берҙәре һуғыш башланғандың тәүге көндәрендә үк ҡамауға эләгеп, ирекһеҙҙән әсир алына. Кемдәргәлер унан ҡасыу бәхете тәтей. Артабан ваҡытлыса баҫып алынған дошман тылында партизандар хәрәкәте ойоштороу өсөн ебәрелгән командирҙар ҙа күренә башлай. Константин Зюков һуғышҡа тиклем Түбәнге Троицк ҡасабаһындағы буҫтау фабрикаһында эшләй, бер аҙҙан урындағы мәктәптә уҡыта. Өфөлә уҡып ҡайтҡандан һуң, Зюковты Күгәрсен районына эшкә ебәрәләр. Тора-бара ул Башҡорт АССР-ы Эске эштәр халыҡ комиссариатына енәйәт эҙәрлекләү бүлегенә өлкән оперуполномоченный итеп күсерелә. Ошо эштән Зюков Литваға эшкә ебәрелә һәм 1942 йылдың майында дошман тылында партизан отряды ойоштороу эшенә тотона. Бер ай ҙа үтмәй, уның төркөмө үҙ аллы отрядҡа тиклем ҙурая һәм 250 кешенән торған бригадаға әүерелә. Партизандарҙы юҡ итеү өсөн дошман бер дивизия йүнәлтергә мәжбүр була. Ватанды һаҡлаусылар, ауыр юғалтыуҙар кисереүгә ҡарамаҫтан, ҡамауҙан сыға һәм артабан да баҫҡынсылар менән көрәшеүен дауам итә.

Рәжетдин Инсафетдинов – тыумышы менән Собханҡол ауылынан. Һуғышҡа тиклем Япрыҡ ауылында уҡыта. Фашистар баҫып ингәндең тәүге көндәрендә ҡамауҙа ҡалып, һуңыраҡ партизандар сафына баҫа. 1943 йылдың мартында ул Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүгә тәҡдим ителеп, һуңғараҡ орденды алыу бәхетенә өлгәшә. Наградаға тәҡдим ителгән ҡағыҙҙа Инсафетдиновтың бер нисә районда партизандар хәрәкәте ойоштороуҙа, төрлө хәрби операцияларҙа, һуғыштарҙа ҡатнашыуы тураһында ентекле телгә алынған.

Тәүҙә ул Котовский исемендәге партизандар отряды комиссары, артабан командиры булып китә.

Фашистар менән көрәште совет патриоттары концлагерҙарҙың йән өшөткөс ҡаты шарттарында ла туҡтатмай. Антифашистик төркөмдәр ойоштороп, улар дошман эшмәкәрлегенә төрлөсә ҡамасаулыҡ итә, хәрби әсирҙәрҙең ирекҡә ҡасыуын хәстәрләй. Ошондай патриоттар араһында беҙҙең яҡташтар ҙа бар. Төркмән ауылында тыуып үҫкән Ҡыҙыл Армияның кадровый офицеры Мөжәһит Хәйретдинов алыҫ Бавария ла «хәрби әсирҙәрҙең туғандаш хеҙмәттәшлеге» исемле фашизмға ҡаршы хәрәкәт ойошмаһы етәкселәренең береһе була. Улар хатта баш күтәреү төркөмө лә ойоштора. Ҡыҙғаныс ҡа ҡаршы, 1944 йылдың башында был турала гестапосылар белеп ҡала һәм йәшерен ойошма етәкселәрен ҡулға ала. Мөжәһит Хәйретдинов үҙенең иптәштәрен һатмай, байтаҡ һорау алыу һәм язалар күргәндән һуң, уны фашистар 4 сентябрҙә атырға хөкөм итә.

1929 йылда уҡ большевиктар фирҡәһенә ағза булып ингән Ян Ғабдуллин Ҡандра районында башҡарма комитет рәйесе була. 1941 йылдың августында үҙ теләге менән фронтҡа китә. 1942 йылда яралана һәм әсиргә алына. Концлагерҙа Ғабдуллин йәшерен ойошмаға инә һәм гитлерсыларҙың милли легиондарына алынғандар араһында эш алып бара башлай. Ошондай легиондың бер ротаһы составында фронтҡа ебәрелә һәм 1943 йылдың сентябрендә фронт линияһын аша сығып, үҙебеҙҙең ғәскәрҙәргә юлыға һәм концлагерҙа ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәте барлығы тураһында хәбәрҙе еткерә. 1944 йылдың мартында яҡташыбыҙ дошман менән алышта батырҙарса һәләк була.

Һуғыштың тәүге көндәрендә үк Ҡандра (хәҙер ул Туймазыға ҡарай – **Р. Г.**) районынан фронтҡа 195 кеше, 35 йөк автомобиле, ике трактор оҙатыла. 23 июндән район ойошмалары хәрби режимда эшләүгә күсә, 2 июлдә иһә һуғыш барған урындарҙан күсерелеүсе граждандарҙы ҡабул итеү комиссияһы эш башлай. Ике аҙнанан Туймазыға эвакуацияланған тәүге 1,5 мең кеше килеп төшә. Һуғыш йылдарында Туймазы һәм Ҡандраға дошман баҫып алған биләмәләрҙән бөтәһе 8 меңгә яҡын күсенгән кеше ҡабул ителә. Урындағы халыҡ уларға йәшәр урын бирә, аҙыҡ-түлеге менән дә бүлешә. Колхоздар үҙҙәрендә булған аттарҙың яртыһын, барлыҡ йөк автомобилдәрен һәм тракторҙарын Ҡыҙыл Армияға бирә. Ҡандра һәм Туймазы МТС-тарында ике йөк машинаһы һәм тәгәрмәсле тракторҙар ғына тороп ҡала.

Ауыл халҡы – башлыса ҡатын-ҡыҙ. Был – 80 меңлек Туймазы һәм Ҡандра райондарының яртыһы тигән һүҙ. 40 меңләп ир-егеттең яртыһынан күбеһе һуғышҡа алынған. Ҡалғандары ла бала-саға, үҫмерҙәр. Оло йәштәгеләр һәм улар сафын йылдан-йыл тулыландырған фронттан имгәнеп ҡайтыусы ғәриптәр. Фронтты икмәк, ит һәм башҡа аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәр елкәһенә ауыр йөк булып ята. Ҡатындар ирҙәрҙе алмаштыра: йөк күтәрә, ер һөрә. Хаҡлы ял йәшендәгеләр иңенә лә төшә һуғыш ауырлығы: «Алмаш» колхозынан Д. Халиҡов, «Көрәш»тән Х. Әйүпов, «Берлек»тән Г. Ғүмәров һәм Н. Хөсәйенов, «Ҡыҙыл Ҡаран»дан С. Ғаязов һәм И. Зәйруллин, «Ҡыҙыл балыҡсы»нан Ф. Мөхәмәҙиев, 70 һәм унан да олораҡ йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, колхоз эшенә башкөлләй сумырға мәжбүр була.

Ватанды һаҡлау ауырлығы йәш үҫмерҙәр иңенә лә төшә. Улар иртә олоғая. 1941 йылдың уңышын йыйырға Туймазы МТС-ында ҡатын-ҡыҙҙарҙан 36 тракторсы һәм 30 комбайнсы әҙерләп сығаралар. Район баҫыуҙарында ураҡ эштәре менән 900-ҙән ашыу комсомолец һәм 7 меңгә яҡын пионер һәм уҡыусы шөғөлләнә. Туймазы һәм Октябрьский ҡасабаларынан да кистәрен һәм ял көндәрендә

комсомолецтар колхозға ярҙамға сыға. 1942 йылдың яҙғы сәсеүе шулай дөйөм тырышлыҡ менән атҡарыла. 24 июндә «Красная Башкирия» гәзите былай тип яҙа: «Ҡандра МТС-ының өс ҡатын-ҡыҙ трактор бригадалары Бөтә Союз ярышында үҙ йөкләмәләрен намыҫ менән үтәй... РСФСР Юғары Советы депутаты тракторсы Зәкиә Фазлыйәхмәтова У-2 тракторында план буйынса 52 гектар урынына 102 гектар ер һөрҙө. Тракторсыларҙан Ғәлимова, Латипова, Ғәниева, Хәбибуллина ла шундай уҡ юғары күрһәткестәргә эйә». Әммә һуғыштың икенсе йәйе, ямғырҙар яумау сәбәпле, ҡоро килә, һәм колхоздар пландарҙы орлоҡ, колхозсыларға биреп еткермәгән иген иҫәбенә үтәргә мәжбүр була.

1943 йылда сәсеүҙе хужалыҡтар бер-береһенән алған орлоҡ иҫәбенә үткәрә. Етмәгән орлоҡто дәүләт тә бирә, уны колхоздар Туймазы һәм Ҡандра элеваторҙарынан ташып ала. Ҡышын районның юл һәм һуҡмаҡтарында арҡаһына тоҡ күтәргән ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәрҙе йыш осратырға мөмкин булған. Фәҡир генә кейенгән ярым ас кешеләр сәсеүгә орлоҡто тиҫтәләрсә километрҙан ана шулай итеп ташырға мәжбүр булған. Күпме кәрәк булһа, шул тиклем сәселгән. Бәхеткә күрә, 1943 йыл ямғырға элеккеһе кеүек һаран булмаған, яландарҙа ашлыҡ ярайһы мул булып өлгөргән. Уны йыйырға йәше лә, ҡарты ла сыға. Өлкәндәр менән бергә 78 уҡыусылар төркөмө эшләй.

Һуғышты 11 йәшлек булып ҡаршылаған Хәмзә Ғатауллин («Ҡайын ҡул» колхозы), Ғафур Рәхимғолов («Нескә бүләк»), Риф Сөләймәнов (Фрунзе исемендәге), Фәнир Ғәлләмов һәм Роза Шафиҡова («Сарлаҡ») һ.б. баҫыуҙарҙа өлкәндәр менән ярышып эшләй. Ә иген тапшырыу пландары артҡандан-арта, сөнки икмәк фронтҡа ғына түгел, ҡалаларға ла кәрәк. Иген мул үҫкән райондар дошман ҡулында булғас, ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү башҡалар өҫтөнә төшә. Мәҫәлән, «Баллы тау» колхозы 1941 йылда дәүләткә 1041 центнер иген тапшырһа, 1943 йылда иһә 1963 центнер һәм 1944 йыл иҫәбенә 1200 бот бирергә тейеш була. Ә колхозсыларға ашлыҡ һәр эш көнөнә 1,5 килограмдан бирелә, шуға ике килограмм самаһы картуф һәм йәшелсә лә өҫтәлә. Хеҙмәт көнөн тултырған колхозсыларға бер аҙ умарта балы, ит һәм шәхси малдар өсөн ашлыҡ фуражы ла эләгә.

1944 йылғы яҙғы сәсеүгә күп колхоздарҙа орлоҡ етмәй сыға, сөнки дошмандан азат ителгән ерҙәрҙә лә сәсергә кәрәк була. Колхозсылар тағы ла һуңғы ашлығын уртаҡлаша. Шунһыҙ мөмкин дә түгел, ғаиләнән кемдер: йә атаһы, йә улдары фронтта дошман менән алыша бит. 1945 йылдың сәсеүен дә шәхси бураларҙа ҡалған ашлыҡ иҫәбенә үткәрергә тура килә.

Һуғыш йылдарында нефть сығарыу өсөн яуаплылыҡ үтә лә ҡаты ҡуйыла. Төньяҡ Кавказдың нефть ятҡылыҡтарының дошман ҡулында булыуы һәм ошондай уҡ хәүефтең Баҡы нефтенә лә янауы Туймазы районында шыйыҡ яғыулыҡ сығарыу күләмдәрен арттырырға мәжбүр итә. 1940 йылда бында 55 мең тонна нефть сығарылһа, 1941 йылда иһә яңы скважиналар асыу, уларҙы файҙаланыуға тапшырыу ваҡытын ҡыҫҡартыу иҫәбенә нефть сығарыу 70 мең тоннаға етә. 1942, 1943 йылдарҙа Туймазы нефтселәре илгә 75 һәм 77 мең тонна «ҡара алтын» бирә. Әммә фронтҡа был ғына бик аҙ. Белгестәр һәм геологтар яңы, ҡеүәтлерәк ятҡылыҡтар асыу өҫтөндә баш вата, эҙләнә. Ниһайәт, 1944 йылда тәүлегенә 250 тонна нефть биреүсе ятҡылыҡ асыла. 1944 йылда нефть һурҙырыу 114 меңгә, ә еңеүле 1945 йылда 558 мең тоннаға етә. Әлбиттә, бындай иҫ киткес һөҙөмтәгә тотош коллективтың фиҙакәр хеҙмәте иҫәбенә өлгәшелә. Ә Туймазы нефтселәре – әлеге лә баяғы фронтҡа киткән ирҙәрен, атайҙарын алмаштырған ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәр. Ҡулынан килгән тиклем уларға колхоздар ҙа

ярҙамлаша. Быраулау ҡоролмалары өсөн ағас әҙерләүгә аттарҙы район даими биреп килә. Туймазы-Нарыш-Уруссу юлын төҙөү ҙә ат-арба ҡулланып алып барыла, һәм унда район колхозсылары эшләй. Нефтселәрҙең тәүлеклек туҡланыу паегы ауыл халҡының өҫтәмәһе иҫәбенә тулылана. 1943 йылда ғына колхоздар уларға 5 тонна ит, 160 килограмм һыйыр майы, 280 килограмм умарта балы һ.б. аҙыҡ-түлек бирә.

Буҫтау фабрикаһы һуғыш йылдарында райондағы иң эре предприятиеларҙан иҫәпләнә. Тәүге көндәрҙән үк коллектив шинель тегеү өсөн буҫтау һуғыуға тотона. Һуғышҡа тиклем эшселәрҙең күпселек өлөшө ирҙәрҙән торһа, улар яуға алынып бөткәс, алмашҡа ҡатын-ҡыҙ, үҫмерҙәр һәм оло йәштәгеләр килә. Уҡыуын ҡалдырып, буҫтау фабрикаһына эшкә килгәндә Тоня Никифороваға 16 йәш кенә була. 14 йәшлек Таисия Полещукова ла отҡор ҡыҙ булып сыға, һөнәрен тиҙ арала үҙләштереп, коллективта алдынғылар рәтенә сыға. Икенсе группа инвалиды Степанида Никифорова иһә, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, сиратыу цехында йөн ураусы булып эшкә сыға. Күптәр тығыҙ эш тәртибенә күсә. Туҡыусыларҙан Зәйнәп Закирова һәм Сафия Миңлеғәлиева бер юлы өсәр станокты хеҙмәтләндереп өлгөрә. Екатерина Каптелина ике аппаратта эшләй, буяусы Агния Мешкова бер үҙе ике кеше эшен башҡара.

Октябрь революцияһына тиклем үк эш тәжрибәһе булғандар ҙа фабрикаға эшкә сығырға мәжбүр була. Стахановсы Анастасия Андриянова ошонда 1911 йылда уҡ хеҙмәт юлын башлай. Ә заправкалаусы Назар Александровтың эш стажы иһә – 1901 йылдан. Икенсе группа инвалиды Михаил Варенцов та хеҙмәт юлын быуат башынан иҫәпләй. Фабрикала 1895 йылдан уҡ эшләгән Григорий Меринов, икенсе группа инвалиды булыуына ҡарамаҫтан, тетеү цехына мастер булып эшкә сыға.

Һуғыш йылдарында фабрика бер көнгә лә туҡталмай. Байрам көндәрендә иһә ул «стахановсылар вахтаһы» иғлан итеп эшләй. 1943 йылдың 29, 30, 31 декабрҙәрендә лә коллектив йән аямай хеҙмәт итә. Мастер ярҙамсыһы коммунист Сенченко сменаһы 29 декабрҙә 44 метр буҫтау һуға. 30 декабрҙә мастер ярҙамсыһы коммунист Антоненко сменаһы пландан тыш 73 метр туҡыма сығара. Йылдың һуңғы көнөндә иһә Бабаев сменаһы планға өҫтәп 128, Стерин сменаһы 141, ә Щепотьевтыҡылар 211 метр буҫтау туҡый. Бөйөк Ватан һуғышында миллионға яҡын совет һалдаты Түбәнге Троицк буҫтау фабрикаһында һуғылған шинелде кейгән була.

Урындағы сәнәғәт предприятиелары һәм кооператив-кәсеп артелдәре лә үҙ эшмәкәрлеген хәрби ваҡыт талаптарына яраҡлаштыра. Фронтҡа, мәҫәлән, биймалар ҙа күпләп кәрәк. «Серп и молот», «Броневик» артелдәрендә бийма баҫыу оҫтаханалары эш башлай. Һуңыраҡ Төркмән ауылында ла Сталин исемендәге кәсеп артелендә бийма баҫыу яйға һалына.

Туймазыларға оборона заказы күпләп килә: фуфайкалар, шароварҙар, тундар йыуыу һәм ямау, автоматтар приклады, авиация фанераһы өсөн ҡайындан йәйланмалар әҙерләү, дарыу үләндәре йыйыу, утын әҙерләү һ.б. 1943 йылдың майында ғына район үҙәге предприятиелары тарафынан 9 мең фуфайка, 1,3 мең шаровар һәм 4 мең жилет ямалған. 1944 йылдың июнендә 2,3 мең фуфайка, 30,5 мең шаровар йыуырға бирелгән, 2 мең фуфайка, 26,5 мең шаровар һәм 5,6 мең тун ямалырға тейеш булған. Был заказды туймазылар сентябргә үтәп тә сыҡҡан.

Һуғыш ныҡлы экономиялау мәсьәләһен ҡабырғаһы менән ҡуя. 1941 йылдың 15 июленән икмәк бешереү өсөн норма булдырыла: Октябрьский ҡасабаһы өсөн

– 5 тонна он, Туймазы өсөн – 4,5 тонна. Ә августа инде икмәк ашамлыҡтарын карточка менән бирә башлайҙар. Архивта һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса, 1944 йылдың июнендә Туймазыла 12,034 кешегә карточка һәм 1134 кешегә биш көнлөк талон бирелгән. 1942 йылдың авгусында карточка буйынса бер эшсегә 10,8 килограмм он бирелһә, был норма эвакуацияланып ауыл еренә килгәндәр өсөн 7,2 балалар, оло йәштәгеләр өсөн 5,4 килограмм тәшкил иткән. Ныҡ мохтажлыҡ кисергән ғаиләләргә башҡа төрлө ярҙам күрһәтелгән. 1944 йылдың мартында 1197 кеше өсәр килограмм ашлыҡ алған.

Шулай яфалар сигә торғас, һуғыштың һуңғы көнө лә етә. Был күптән зарығып көткән көндөң хәл иткес мәлендә Туймазы районы вәкиле лә ҡатнашмаһа, ғәҙел булмаҫ ине кеүек. Һәм ул кеше табыла. Арыҫланбәк ауылынан Рәхим Гәрәев маршал Г. К. Жуковтың һаҡлау төркөмөндә булып, фашистик Германияның еңелеү тураһындағы актҡа ҡул ҡуйыуында ҡатнаша. Мәскәүҙәге Еңеү парадында туймазыларҙан Т. Әбдрәев, Л. Ғибаҙуллин, К. Фәйзуллиндар була. Йөҙҙәрсә кеше Японияны тар-мар итеүҙә ҡатнаша.

Һәүәҫкәр композитор, Йәрмөхәмәт ауылы егете Әкрәм Дауытовты оло быуын кешеләре яҡшы белә. Ул ижад иткән йырҙарҙы тыныс ҡына ҡабул итеү мөмкин түгел. «Шинель», «Автоматсылар» тигән йырҙар, мәҫәлән, фронтта саҡта уҡ яҙылған. Әлбиттә, 700-ләп йырҙың күпселеге тыныс тормошто һөйөүгә бағышланған. Йырсы яҡташыбыҙ оло һуғышта ҡамауҙа ла ҡала, яралана, контузиялана, ләкин еңеү шатлығын Берлинда кисереү бәхетенә өлгәшә.

Кәкребаш ауылында тыуып үҫкән шағир Тимер Арыҫланға ла һуғыш афәттәрен үҙ елкәһендә татырға тура килә. Тәүҙә аҡ финдарға ҡаршы кампанияла, артабан Көнбайыш Украинала, Бессарабияла барған һуғыштарҙа ҡатнаша. Һалдаттан офицер дәрәжәһенә күтәрелә яҡташыбыҙ. Тимер Арыҫландың тәүге китабы – «Беҙҙең йәшлек» 1938 йылда, ул хәрби хеҙмәттә саҡта уҡ, донъя күрә. Ә 1944 йылда икенсеһе нәшер ителә. Шағир айырыуса сатира өлкәһендә уңышлы эшләй.

Һәүәҫкәр рәссам Рәшит Кәлимуллин – Япрыҡ ауылынан. Йәше етмәү сәбәпле, уны фронтҡа алмайҙар. Уның ҡарауы, үҫмер һуғыштың барлыҡ нужаһын тылда татып белә. Уның ижади полотноларында Бөйөк Ватан һуғышына арналғандары ла байтаҡ.

Ватанды һаҡлап һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың кәүҙәләре Төньяҡ боҙло океанындағы Рыбачий утрауынан башлап Корелия, Синявск һәм Ржев ҡалҡыулыҡтары аша Балтик буйында, Белоруссия, Украинанан Текапсеға, Төньяҡ Кавказға ҡәҙәр ерҙәргә һибелеп ята. Польша, Германия, Чехословакия, Венгрия, Румыния, Югославия, Австрияла ла бихисап улар. Киң билдәле Пескаревск, Преображенск зыяраттарында, Мамай кургany, Брест ҡәлғәһе, Дон далаларындағы исемһеҙ ҡәберлектәр… Йылына бер тапҡыр булһа ла, уларҙың ҡаһарманлығын иҫкә алып сәскәләр һалына.

Ҡайғы һәм хөрмәт сәскәләре.

**Рим ГӘРӘЕВ.**

# ҠӘЛӘМЕ ТАЙГАЛА ЮНЫЛҒАН

*(Камил Зиганшинға 60 йәш)*



«Һунар — барыбер ҙә мауыҡтырғыс шөғөл. Тыныс, аулаҡ төбәктәргә үтеп, ундағы йәнлектәрҙең йәшәү рәүешен күҙәтеү һәр саҡ мауығыу һәм ҡәнәғәтлек тойғоһо уята. Һунарҙың нәҡ ошо яғы мине үҙенә йәлеп иткәндер, моғайын.

Үҙемә ун дүрт йәш тулған ҡышҡы иртәне яҡшы хәтерләйем. Күҙемде асыуға иң тәүҙә күргән әйбер — йылмайып торған атамәсәйем ҡулындағы өр-яңы, ялтырап торған, завод майы еҫе килгән бер көбәкле мылтыҡ ине. Шунан башлап һунар оҙаҡ ваҡытҡа күңелемде ифрат ныҡ арбаған шөғөлгә әйләнде лә инде. Атҡанда гелән генә мәргән булмау һәм ҡай саҡтарҙа буш ҡул ҡайтыу артыҡ бәлә түгел. Тәбиғәттең имгәтелмәгән урынын, ҡырағай йәнлекте тәбиғи йәшәү шарттарында, тыныс ҡултыҡтан һауаға күтәрелгән ирекле ҡоштар тубын күреүҙән алған онотолмаҫ ләззәт хаҡына үҙәккә үтерлек һалҡынды ла, аслыҡты ла, арыу-талыуҙы ла кисерергә мөмкин!»

Был юлдар Камил Зиганшиндың «Йомарт Буге» повесынан алынды. Тормош дөрөҫлөгө художестволы дөрөҫлөк менән үрелеп яҙылған, ниндәйҙер дәрәжәлә автобиографик-этнографик әҫәрҙе хәтерләткән ошо тәүге әҫәре менән үк Камил Зиганшин әҙәбиәткә китмәҫ өсөн килде, һәм был уны талантлы яҙыусылар рәтенә ҡуйҙы. Мәшһүр Чехов әйтмешләй, яҙыусының биографияһы — уның әҫәрҙәрендә...

Буге — Хабаровск крайында Сихотэ Алинь армыттары араһындағы ҡош-ҡортҡа бай, үҙенсә йәмле һәм ҡырыҫ төбәк. Бында һунарсыларҙан, геологтарҙан, тәүәккәл туристарҙан башҡа берәү ҙә йөрөмәй. Ә, юҡ, бында — боландар, мышылар, кабаргалар, изюбрҙар, хатта «шатун» айыуҙар, юлбарыҫтар төйәге. Һеләүһендәр ҙә, төлкөләр ҙә, бүреләр ҙә етерлек. Нәҡ ошонда Камил удегей промысловигы Лукса менән 120 көнгә һуҙылған кеш аулау сезонында ҡатнаша һәм... ҡыҫҡаса көндәлек теркәп бара. Ярым ҡыуыш, ярым палатканы хәтерләткән аусы торлағында майшәм яҡтыһында әлеге көндәлеккә ысын мәғәнәһендә Тайга әлифбаһы яҙыла. Аҙашыу, һалҡын алдырыу.Ҡыр йәнлектәренең холоҡфиғелен күҙәтеү... Ҡырҡ бишенсе көнгә генә ҡапҡанға эләгә тәүге табыш. Табыштың да ниндәйе бит әле — кеш! Донъя баҙарында был мех хатта алтындан да ҡиммәтерәк баһалана. (Әйткәндәй, элек ул беҙҙең урмандарҙа ла булған — ҡырылыуға дусар ителгән. Фольклор материалдарына күҙ һалһаҡ, ҡасандыр юлбарыҫтарҙың, боландарҙың (мышы менән бутарға ярамай) һәм башҡа йәнлектәрҙең, мәҫәлән, ҡусҡар мөгөҙлө кәзәләрҙең булғанына ышанырға мөмкин.) Тимәк, тәүге уңыш, тәүге табыш! Тик ниндәй ҙур ҡыйынлыҡтар, оло һынау мәктәбе аша яуланды ул. Йылдар уҙғас, Камил тайга блокнотын әнеһенә уҡытасаҡ һәм тегеһе: «Шәп! Китап яҙһаң ни була?» — тиәсәк. Повесть яҙыла, һәм әҫәр шағир Александр Филиппов тарафынан тел-стиль, сюжет, композиция йәһәтенән ыңғай баһаланып, нәҡ уның фатихаһы буйынса «Уральский следопыт» журналының ике һанында (1990 йыл) баҫылып сыға. Кем әйтмешләй, «Әҙәбиәт тауына тайга һуҡмаҡтарынан мылтыҡ аҫып күтәрелгән» йәш әҙипкә ошо факт ҙур сәм һәм дәрт өҫтәй, артабан инде ул бер-бер артлы аусылар, йәнлектәр, сәйәхәтселәр тормошона бағышланған повестар һәм хикәйәләр ижад итә. Ә шулай ҙа иң тәүге хикәйәһе үҙе инженер-

радиоэлемтәсе булып эшләгән «Башнефть» идаралығының күп тиражлы «Нефтяник Башкирии» гәзитендә баҫыла.

1988 йылда уҙған Башҡортостан йәш яҙыусылар семинары иһә уға тәүге танылыу килтерә, илһам ҡанаттарын нығыта, бер үк ваҡытта тәнҡит «тәмен» дә татыта.

Республикабыҙҙа иһә Камил Зиганшиндың урыҫ телендә бер-бер артлы дүрт китабы донъя күрҙе: «Маха йәки бер һыуһар тормошо» (1992), «Боцман» (1994) һәм «Йомарт Буге» (1996). 1997 йылда «Боцман» өсөн авторға «Аманат» журналы лауреат исемен бирҙе. Башҡорт телендәгеһен — «Тайга хикәйәләре»н — Башҡортостан «Китап» нәшриәте 1998 йылда баҫтырып сығарҙы. (Тәржемәселәре — Әмир Әминев менән Ғәтиәт Үзбәков). Уҡыусылар танһыҡ күреп, яратып ҡабул итте баҫманы. Был инде башҡорттарҙың ҡанында һунар ҡомары һаман ҡайнауына дәлил. Иң мөһиме, дүрт китап та тәрбиәүи хеҙмәттә: балалар — тәбиғәт күренештәрен, ҡырағай йәнлектәр тормошон ентекләберәк өйрәнер өсөн, ә өлкәндәр — тәбиғәт һәм кеше берҙәмлеге, йәнлектәр донъяһының ҡурсалауға мохтажлығы хаҡында фәһемләнер, уйланыр өсөн. Был тәңгәлдә утты-һыуҙарҙы кискән отставкалағы полковник Фәрүкша ағай Зиганшиндың иҫән сағында биргән һаран, әммә тапҡыр баһаһын да хәтергә төшөргө килә: «Камил, минең улым, экология темаһын нескә тасуирлай...» Атайының ошолай ғорурланыуын Камилға әйткәнем булманы, ә бөгөн — ихластан махсус яҙып ҡуйҙым.

Эйе, Европа илдәрендә лә, Алыҫ Көнсығышта ла хеҙмәт иткән боевой офицер хаҡлы, мең мәртәбә хаҡлы ине. (Әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, фронтовик бынан ете йыл элек донъя ҡуйҙы.) Бөгөнгө көндә кешелекте атом янауынан, рухи маңҡортлоҡтан бигерәк экологик Аждаһа — эсәр һыуыбыҙҙың сафлығы, һулар һауабыҙҙың таҙалығы, һандуғас баҫып һайрар талдарҙың бөтөр-бөтмәҫе, урмандарҙа ҡош-ҡорттоң, йылға-күлдәрҙә балыҡтың йәшәү-йәшәмәүе торған һайын нығыраҡ хәүефләндерә.

Ҡандрала тыуып-үҫһә лә, Камил үҙенең икенсе төйәге итеп Шишмә районының Сәлих ауылын иҫәпләй. Сәлихтар изге күңелле, йор телле Рауил бабайҙы — Камилдың ҡартатайын һаман онотмай, әҙиптең әсәһе Ҡәҙриә апайҙы ла ифрат хөрмәт итәләр. Утыҙ йыл самаһы балалар баҡсаһында ихлас эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан ветеран бит ул. Өҫтәүенә, ғаиләһендә бер ул, өс ҡыҙ үҫтергән Камил дуҫыбыҙҙың фажиғәле һәләк булған икенсе улы Олегтың ҡәбере лә ошо ауылда. Һөйкөмлө ҡатыны менән әҙип бында йыш була, йәйҙәрен ошонда үткәрергә тырышалар, матур баҡса ҡарайҙар.

***

Заманында ҡайҙарға ғына ташламаны офицер яҙмышы Фәрүкша ағайҙың татыу, ишле ғаиләһен. Юҡҡа ғынамы ни бөгөнгө юбиляр үҙенең автобиографик белешмәләренең береһендә: «Бала сағымдың хәтһеҙ өлөшө Алыҫ Көнсығыштағы (Хабаровск һәм Приморье крайҙары) йыраҡ тайга ҡуйынына һыйынған хәрби гарнизондарҙа уҙҙы. Әсәйем миндә бәләкәйҙән тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләргә теләне, шуғалыр малай сағымдан уҡ, аҙ ғына форсат тейҙеме, урман гиҙергә йәки йылға буйҙарында йөрөргә атлығып торҙом» — тип яҙа.

1967 йылда Камил Владивосток ҡалаһындағы политехник институтҡа уҡырға инә. Йәйге каникул мәлендә ул шағирәнә рухлы дуҫы Юрий Сотников менән Сихотэ Алиндың бөтмәҫ-төкәнмәҫ сопкалары араһына сәйәхәт ҡыла. Үкенескә ҡаршы, ауыр ҙа, ымһындырғыс та сәйәхәттәрҙең береһендә Юра һәләк була — ярһыу Алдан ташҡыны уны үҙ ҡосағына ала. Оҙаҡ эҙләй аҙаҡ дуҫын Камил. Һуңғараҡ Юраның мәйетенә Силәбе туристары юлыға, улар уның кәүҙәһен ҡалҡыулыҡҡа ҡәҙерләп күмә. Был хаҡта «Йомарт Буге»ла һөйләнелә, әҙиптең «Илгиҙәр» исемле повесында ла телгә алына.

«Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ» тигән боронғолар. Камил да шулай: Башҡортостанға ҡайтҡансы әле уға геологик партияларҙа тир түгергә, хатта «Вольный» кит аулау судноһында матрос булырға ла тура килә. Ә инде Сергей Лазо исемендәге госпромхоздың «штатный» аусыһы булғанын әҙип үҙе зауыҡлы уҡыусыға киләһе әҫәрҙәрендә үтемле тел, профессиональ стиль менән хикәйәләйәсәк. Сөнки уның әҙәбиәттә үҙ темаһы, үҙ тауышы, үҙ донъяһы бар. Уйлай китһәң, әҙәбиәтебеҙҙә ер-һыу, урман-тауҙар ерлеген яҡшы белеп, шул ерлектә замандаштарыбыҙ характерын үтемле, хисле итеп асып биргән әҙиптәребеҙ әллә ни күп тә түгел. Шуға ла Камилдың ижады — үҙе

бер күренеш, үҙе бер табыш. Ғүмер тауының алтмыш тигән иҫтәлекле, үҙенә күрә елле генә киртләсенә аяҡ баҫҡан көндө беҙ ҡәләмдәшебеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, яңынан-яңы ижад артылыштары теләйек.

...Әҙип 1973 йыдан алып Өфөлә йәшәй. Ун биш йыллап ул «Башнефть» берекмәһендә радиоэлемтә буйынса өлкән инженер вазифаһын башҡарҙы, һөҙөмтәлә уға Башҡортостанды һәм Түмән өлкәһен арҡылыға-буйға гиҙеү насип итте. 1991 йылда «Эхо» компанияһына генераль директор итеп тәғәйенләнде һәм был яуаплы йөктө бөгөн дә намыҫ менән тарта. Был фекерҙе халыҡтың рәхмәте лә ҡеүәтләй. Әйтәйек, телефон бағаналарынан йә ер аҫты кабелдәренән телефон үткәреү ҡиммәткә төшкән ауылдар бар республикабыҙҙа... Бигерәк тә таулы райондарҙа. Ана шундай нөктәләргә «Эхо» йәмғиәте мобиль радиостанциялар ултыртыу, хеҙмәтләндереү менән дә шөғөлләнә.

1993 йылда Камил Фәрүкша улы Зиганшиндың тәҡдиме буйынса «Ҡырағай йәнлектәрҙе ҡурсалау менән шөғөлләнгән ойошмаларҙы һәм граждандарҙы бүләкләүҙең республика фонды» булдырылғайны, шунан бирле һунар мылтығын әҙәби ҡәләмгә алыштырған юбилярыбыҙ — шул фондтың рәйесе һәм бағымсыһы. Был үҙенсәлекле фондтың бүләктәренә иң яҡшы урман һаҡсылары, егерҙар, экологик теманы тасуирлаған рәссамдар, журналистар һәм яҙыусылар лайыҡ була, бер уңайҙан уларға «Урман рыцары» исеме бирелә. Ошоғаса тиҫтәгә яҡын башҡорт яҙыусыһына, шул иҫәптән миңә, ошо исемдең шөһрәтнамәһе тапшырылды.

Әҙиптең үҙен дә хөрмәт, маҡтаулы исемдәр урап үтмәй. Урал, Себер тәбиғәтен яҡлап, уның мөхитен нәфис һүрәтләгәне өсөн үҙебеҙҙә һәм Мәскәүҙә С. Злобин, А. Толстой, Э. Володин исемендәге премиялар бирелде. Оҙаҡ ҡына яҙған «Скитник» (скиталец, старовер мәғәнәһендә) романы «Рәсәй тәбиғәте хаҡындағы китаптар өсөн» махсус ойошторолған «Империя мәҙәниәте» премияһына лайыҡ булды. Ун меңгә яҡын китап араһынан бәхет үҙебеҙҙең «Китап» нәшриәте авторына йылмайһын әле! Быны инде ҡәләмдәшебеҙҙең генә түгел, тотош республика әҙәбиәтенең һәм нәширҙәренең мәртәбәһе итеп ҡарарға хаҡлыбыҙ. Ошо китабын Валентин Распутинға ебәргәс, былтыр мәшһүр яҙыусынан Камилға йылы бөркөлөп торған хат килде. «Ҡәҙерле Камил! Китабың мине ғәжәпләндерҙе... Уны рус түгел, ә һеҙ, башҡорт кешеһе, яҙыуы нисектер сәйер, бер үк ваҡытта һәләк яҡшы. Ни өсөн? Һеҙ — оло океандарҙы кискән, тундраларҙы уҙған, тайгаларҙы гиҙгән шәхес — быны рухи ҡыҙыҡһыныуһыҙ, әхлаҡи әҙерлекһеҙ эшләй алмаҫ инегеҙ. Донъя ниндәй ҡиммәттәрҙе юғалтҡан — асылығыҙҙа шуның өсөн һыҙланыу һиҙемләнә. Һеҙгә баш эйәм, ышаныс һәм дуҫлыҡ хистәре өсөн рәхмәт!»

Ошо арала юбилярҙың яңы дилогияһы — «Скитниктар. Алдан алтыны» тигән күркәм, һәлмәк китабы донъя күрә. Һис шикһеҙ, яңы баҫма һөкланғыс яҙыусының, эшҡыуарҙың, арҙаҡлы замандашыбыҙҙың ижади биографияһына шөһрәт кенә өҫтәр.

Яҙыусының һуңғы йылдарҙа алыҫ-алыҫ ҡитғаларға сәйәхәт ҡылыуын уның Африкаға, Непалға, Ғәрәбстан менән Аргентинаға яҙмаларын («Ағиҙел» журналының 9-сы, 10-сы, 11-се номерҙарында, 2009 йыл) йотлоға-йотлоға уҡып белдек. Йәнә шул: әгәр Ҡандракүлдә йә Асылыкүлдә аквалангист костюмы кейгән, сәстәренә көлһыу төҫ ҡунған буйһыу, ҡаҡса, мөләйем йөҙлө, ихлас һүҙле ирҙе күрҙенһәгеҙ — Камилдың үҙе булыр. Эргәһендә мотлаҡ көләс балаларын, йәнә институт буйынса элекке һабаҡташы, хәҙер хеҙмәттәше, фекерҙәше Татьяна Зиновьевнаны тап итерһегеҙ. Ә кеменеңдер ҡулында йә фотоаппарат, йә телекамера булыр.

Шулай, Камил — юлда, ижадта. Сөнки ул, әйтергә яраһа, экологик йәнле турист. Тәрән соңғолдәргә сумып, һыу тереклеген күҙәтергә яратҡан тәбиғәт йырсыһы. Сөнки әҙиптең ҡәләме тайгала юнылған. Ул тәбиғәттең кеше күңелен сафландыра, илһамландыра, байыта торған ҡөҙрәтенә инана. Был — иң мөһиме.

**Сабир ШӘРИПОВ.**

***

24 – 26 февралдә Сибай ҡалаһында йәш прозаиктарҙың республика семинары уҙҙы. Мәртәбәле сара алдынан ҡала хакимиәте башлығы Фәим Айҙарбәков Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев менән Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Хәйҙәр Тапаҡовты ҡабул итте.

Пленар ултырышты ҡала мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Гөлназ Аҡназарова асты, Рауил Бикбаев сығыш яһаны. Башҡорт дәүләт университеты доценты Зәки Әлибаев «Хәҙерге башҡорт прозаһы һәм үҫеш перспективалары» тигән темаға күҙәтеү яһаһа, БДУ-ның Сибай институтынан филология фәндәре кандидаты Ғәҙилә Бүләкова әҙәбиәттең йәш быуында шәхес тәрбиәләү роле хаҡында һөйләне. Кисен әҙәбиәт һөйөүселәр Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге башҡорт дәүләт драма театрында Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһын (художество етәксеһе – Дамир Ғәлимов, режиссеры – Сәлихйән Әфләтунов) ҡараны.

Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡәҙим Аралбаев (семинар етәксеһе), рецензенттар: Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, бүлек мөхәррире Сабир Шәрипов, «Китап» нәшриәтенән художество редакцияһы мөдире Ринат Камалов, Сибай институтынан филология фәндәре кандидаты Әмир Ҡотлоәхмәтов йәш ҡәләмдәштәре – Рәсүл Сәғитов, Нияз Алсынбаев, Гөлнара Мостафина (Өфө ҡалаһы), Рәмилә Торомтаева, Рүзидә Үтәшева (Сибай ҡалаһы), Гөлдәр Әхмәҙишина (Баймаҡ районы), Мәҙинә Йәғәфәрова (Әбйәлил районы), Әнисә Янбаеваның (Учалы ҡалаһы) повестары һәм хикәйәләренә, шулай уҡ үҫмерҙәр өсөн сәсмә әҫәрҙәренә ентекле анализ яһаны. Ҡулъяҙмаларҙың хәтһеҙе – матбуғатҡа, бер нисәһе «Китап» нәшриәтенә тәҡдим ителде, ике китап авторы Рәсүл Сәғитовҡа Яҙыусылар союзына ағзалыҡҡа алырға юллама тултырылды.

Йомғаҡлау кисәһендә семинарсыларҙың Сибай институтының «Инеш» әҙәби түңәрәге ағзалары, уҡытыусылар, интеллигенция вәкилдәре менән ихлас осрашыуы үткәрелде. Унда ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Хәйруллин, театрҙың художество етәксеһе Дамир Ғәлимов һ.б. тәбрик әйтте, Ҡәҙим Аралбаев уларға рәхмәт хаттары һәм иҫтәлекле китаптар тапшырҙы. Артабан Хәйҙәр Тапаҡовтың «Әсәйемдең аҡ күлдәге» исемле китабының исем туйы үткәрелде. Сараны ҡала театрҙары һәм филармонияһы артистары, институттың «Ете ырыу» фольклор ансамбле сағыу концерт номерҙары менән йәмләне.

***

Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Факиһа Туғыҙбаеваның ижад кисәһе үтте. Байрамда Өфөнән Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттары Ҡәҙим Аралбай, Хәсән Назар, яҙыусы, радиожурналист Фәрзәнә Аҡбулатова, тележурналист Рәйсә Абдуллина ҡатнашты. Улар башта ауыл музейы, артабан Хәким Ғиләжев исемендәге мәктәптә яҙыусының тормошона һәм ижадына бағышланған музей менән танышты.

Ауыл мәҙәниәт йортонда үткән кисәлә әҙиптәр шиғырҙарын уҡыны, автографтар таратты, Факиһа Туғыҙбаева һүҙҙәренә яҙылған йырҙар яңғыраны. Ҡунаҡтарҙы һәм юбилярҙы ауыл хакимиәте башлығы Фирҙәүес Хәбиров һәм

“Сәрмәсән” ауыл хужалығы етәксеһе Шамил Йосопов тәбрикләне, ауыл үҙешмәкәрҙәре матур концерт ҡуйҙы.

Юбилей тантанаһы Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ла үтте. Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовтың ҡотлауын БР Президенты Хакимиәте референты Ғәли Фәйезов уҡып ишеттерҙе. Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе Эдуард Юлдашев Факиһа Һаҙый ҡыҙының мөхәррирлек хеҙмәтен юғары баһаланы. “Журналға нигеҙ һалыу һәм уны сығарыу – театр төҙөүгә тиң эш. Факиһа Туғыҙбаева иһә үҙе булдырған “Аҡбуҙат” журналына егерме йыл етәкселек итә”, – тине Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзында журналист һәм прозаик Фәнис Янышевтың юбилейы айҡанлы ижад кисәһе булып үтте.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаçары, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбаев, кисәне асып, Фәнис Янышев ижадына байҡау яһаны. Уның проза өлкәһендә лә, балалар әҙәбиәтендә лә, журналистикала ла егәрле эшләүенә баçым яһап, һуңғы йылдарҙа матбуғатта баçылып сыҡҡан әҙәбиәт музейҙары тураһындағы мауыҡтырғыс материалдары, “Аҡмулла аманаты” повесы һәм хикәйәләре уҡыусылар тарафынан юғары баһа алыуын билдәләне.

Уның һүҙен ҡеүәтләп, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев, шағир Рәмил Йәнбәк, әҙиптәр Ринат Камал, Марс Әхмәтшин, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина һәм башҡалар юбилярға ижади уңыштар теләне.

***

Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты уҡыусылары Конгресс-холда «Киләсәк – йәштәр ҡулында» девизы аçтында шиғриәт кисәһе ойошторҙо. Сарала Р. Ғарипов, Ғ. Әлмөхәмәтов, Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге республика гимназия-интернаттары, башҡорт лицейы һәм иҡтисад лицейы уҡыусылары Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев һәм уның урынбаçары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡәҙим Аралбаев менән осрашты. Сараға шулай уҡ БР мәғариф министры урынбаçары Зөлфиә Әхмәтова, БР Хөкүмәте Аппаратының фән һәм мәғариф бүлеге мөдире Альберт Ҡорманов, БР Хөкүмәте Аппаратының дәүләт хеҙмәте һәм кадрҙар бүлеге мөдире Ришат Зәйнәғәбдинов та килгәйне.

Шиғриәт кисәһендә уҡыусылар Рауил Бикбаевтың «Хазина», Ҡәҙим Аралбаевтың «Рух яҙыуы» поэмалары буйынса фекер алышты, һорауҙар бирҙе.

***

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының конференц-залында күренекле фронтовик-шағир, драматург Ҡадир Даяндың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе уҙҙы. Юбилейҙың Бөйөк Еңеүгә 65 йыл тулыу алдынан үтеүе кисәгә айырыуса тулҡынландырғыс төç бирҙе. Ҡ. Даяндың ижады һәм тормошо хаҡында үҙе лә дәһшәтле 1941 йылда тыуған шағир Ҡәҙим Аралбай тулҡынланып сығыш яһаны.

Кисәлә ошо университеттың проректоры, профессор Рәйсә Хәйруллина (яугир-шағир Хәниф Кәримдең ҡыҙы), С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, яҙыусылар Фәниә Чанышева, Мөкәрәмә Садиҡова, Ринат Камал һәм башҡалар йылы хәтирәләре менән уртаҡлашты.

Кисәлә Башҡорт дәүләт филармонияһының академия хоры, РФ-ның һәм БР-ҙың халыҡ артисы Флүрә Килдейәрова һәм башҡа аристар Ҡ. Даян шиғырҙарына төрлө композиторҙар яҙған йырҙарҙы башҡарҙы. Оҙаҡ йылдар телевидениела режиссер булып эшләгән ҡыҙы Луиза Даянова иһә атаһы хаҡында һағышлы иçтәлектәр һөйләне. Сараны Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Әнисә Яхина йәнле итеп алып барҙы һәм шағирҙың байтаҡ шиғырҙарын уҡыны.

*2010 – Бөтә Рәсәй*
*халыҡ иҫәбен алыу йылы*

# ҺӘР КЕМДЕҢ ГРАЖДАНЛЫҠ БУРЫСЫ

Халыҡ иҫәбен алыу – хәҙерге дәүләт ҡоролошо өсөн әһәмиәтле һәм тормошсан эшмәкәрлектең береһе. Дәүләт органдарының донъяла финанс-иҡтисади кризис дауам иткән шарттарҙа иҫәп-хисап кеүек мәшәҡәтле һәм байтаҡ сығымдар талап иткән был эшкә тотоноуы ла ошо хаҡта һөйләй. 2002 йылда үткәрелгән һуңғы иҫәп-хисап кампанияһынан һуң байтаҡ ваҡыт уҙып, ул арала Рәсәйҙә күп кенә үҙгәрештәр булып үтеүе һәр кемгә мәғлүм. Ошо осорҙа илебеҙҙә халыҡ арттымы, әллә кәменеме, ил, федерация субъекттары ҡаҙнаһы нисек тулыландырыла, эшһеҙлек проблемаһы менән хәл нисек, уны артабан ни рәүешле хәл итергә, халыҡтың белем кимәле ни хәлдә һ.б. кеүек һорауҙар дәүләт органдары өсөн дә, йәмғәтселек өсөн дә берҙәй үк дәрәжәлә әһәмиәтле. Уларҙы төплө белмәй тороп, бер ниндәй ҙә отошло, йоғонтоло эшмәкәрлек алып барыу мөмкин түгел.

Халыҡ иҫәбен алыуҙың мөһимлегенә икеләнеп ҡараусыларға яуап рәүешендә шуны әйтергә кәрәк: үҙ халҡының иҫәбен, нисек көн итеүен статистика мәғлүмәттәренә таянып төплө белмәй тороп, бер генә дәүләт тә үҫешә алмай. «Росстат» етәксеһененең урынбаҫары А. Суриновтың образлы билдәләүенсә, иҫәп-хисап дәүләт торошон аңлатып, халыҡтың демографик хәле социаль-иҡтисади өлкәгә хәл иткес йоғонто яһай. Тимәк, халыҡ иҫәбен алыу – ысынбарлыҡты сағылдырыусы берҙән-бер алым. Мәҫәлән, бөгөнгө Рәсәйҙә күпме фән кандидаты һәм фән докторы барлығын, халыҡтың нимә иҫәбенә йәшәүен аныҡ ҡына бер кем дә әйтә алмай.

Статистик мәғлүмәт йыйыусыларҙы кемдең күпме килем алыуы түгел, ә ҡайҙан алынған килем иҫәбенә йәшәүе ҡыҙыҡһындыра. Иҫәпселәрҙең береһе лә, һеҙ күпме эш хаҡы алаһығыҙ, тип һорамаясаҡ, сөнки иҫәпләмә ҡағыҙына ундай һорау сығарылмаған. Ғөмүмән, был – йәшерен мәғлүмәт һәм илдә эш итеүсе закондар уны һаҡлай. Шул уҡ ваҡытта статистар, иҫәп-хисап алыу – халыҡтың дәүләт менән бәйләнеш тотоуының иң йоғонтоло алымдарының береһе, тип иҫәпләй. Төплө иҫәп-хисапҡа таянмай тороп, дәүләт үҙ граждандарының нимәгә мохтажлыҡ кисереүен, ижтимағи тормоштоң ҡайһы өлкәләре күберәк иғтибар талап итеүен, сығымдарҙы ҡайҙа йүнәлтергә кәрәклеген дөрөҫ билдәләргә һәләтһеҙ. Был мәғлүмәттәр шулай уҡ илдең социаль-иҡтисади үҫешен фаразлау өсөн дә хәл иткес әһәмиәткә эйә. Рәсәй Федерацияһы Президентының Федераль Йыйылыш депутаттарына йыллыҡ Мөрәжәғәте, ил ҡаҙнаһы һ.б. дәүләт әһәмиәтендәге документтар ошондай мәғлүмәттәр булмаһа, эшләнә лә алмаҫ ине.